**Мәғариф федераль агентлығы**
**Юғары профессиональ белем биреүсе дәүләт учреждениеһы**
**Башҡорт дәүләт университеты**

**Р. Ғ. АҘНАҒОЛОВ**

# Хәҙерге дәрес

**Өфө — 2011**

УДК 371.3
ББК 74.268.1
А 30

Бала шәхесен үҫтереү — илде үҫтереү. Йыйынтыҡҡа тупланған фәнни-методик эҙләнеүҙәрҙең төп асылы ана шул.

А30 Р.Ғ.Аҙнағолов. Хәҙерге дәрес: уҡыу ҡулланмаһы. Үҙгәрешле, икенсе баҫма. — Өфө: БашДУ, 2011. — 155 бит.

© Р.Ғ.Аҙнағолов, 2011
© Өфө: БашДУ, 2011

## Дәрес — балаларға һабаҡ биреү
(Инеш һүҙ урынына)

Бөгөнгө көндө дәрестә бала күңеленә ни һалыу һәм нисек һалыу айырыуса мөһим. Икенсенән, бөгөнгө дәресте уҡытыусының һәм уҡыусының эшмәкәрлегенән тыш күҙ алдына ла килтереп булмай. Уҡытыусы мәктәп дәреслеген, программаһын анализлаймы? Программа менән дәреслектең методик аппараты, күнегеүҙәре, йөкмәткеһе һәм талаптары менән ҡәнәғәтме? Дәрес материалының йөкмәткеһен, сифатын байытыу, тулыландырыу тураһында хәстәрлек күрәме? Шул материал балаға ни дәрәжәлә мөһим, уны уйландырамы? Эшмәкәрлеккә йәлеп итәме, уҡыусының ижади һәләтен үҫтерәме? Бына шундай методик һәм технологик проблемалар буйынса ла кәрәкле сараларҙы бойомға ашырырға тейеш ул. «Уҡытыусы һөйләй, бала тыңлай, аңлағанын һөйләп бирә» тигән ҡараш хәҙер иҫкерҙе инде. Дәрестә эшмәкәр мөнәсәбәт, мөхит юҡ икән, ул инде ваҡытты, шуға тәғәйен материалды әрәм итеү тигән һүҙ.

Дәрес — ул һабаҡ. Һабаҡ үҙ сиратында тәрән асылға һәм күп мәғәнәгә эйә. Мәҫәлән, һабаҡ алыу, һабаҡ булыу, һабаҡ биреү, арт һабағын уҡытыу кеүек төшөнсәләргә тарҡала. Дәрестә балаға һабаҡ булырлыҡ мәғәнә, асыл биреү кәрәк. Баланы һүҙҙең мәғәнәһенә һәм асылына төшөндөрөү зарур. Тел психологияһында нимәне өйрәнеү мөһим түгел, ә нисек өйрәнеү мөһим. Иғтибар итегеҙ: был фекерҙе бынан бер быуат элек 1895 йылда ук Д.Н.Овсянико-Куликовский[1] әйтеп ҡалдырған. Сер түгел: туған тел күренештәре мәктәптә лингвистика бирәмеге йәһәтенән өйрәнелә. Был дөрөҫмө? Әйҙәгеҙ, шул хаҡта уйлашайыҡ. Телдең моңо, мәғәнәһе, асылы ни тигән һүҙ? Туған тел моңо — тасуирилыҡ сараһы. Башҡорт теленең, телмәренең моңон мин уйлап тапманым. Уны алдынғы ҡарашлы урыҫ мәғрифәтселәре, миссионерҙары (Мәҫәлән, А.Г.Бессонов, В.Ҡатаринский: «Башкирский язык — такой благозвучный язык») әйткән. Шул моңға баланы өйрәтеү мөһим. Ул моң уҡытыусы телмәре аша яңғырарға тейеш. Уның телмәре балаға үрнәк, өлгө булһа ине. Берәй тексты (ҙурмы, бәләкәйме ул) уҡығанда тасуирилыҡ талап ителә. Тасуирилыҡ — ул телмәр поэтикаһының асылы.

---

*[1]Овсянико-Куликовский Д.Н. Язык и искусство. СПб., 1895, 26, 28-се биттәр.*

Методик әҙәбиәттә, психологик әҙәбиәттәрҙә, бигерәк тә педагогик психологияла, дәрес материалы баланың шәхси һәм йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыуға баҫым яһала. Был үҙенсәлектәргә нимәләр инә һуң? Әлбиттә, балаларҙың рухи хәле, күңел донъяһы, һәр бала — үҙенсәлекле бер донъя. Ул донъя шар асыҡ түгел, уҡытыусы күҙенә күренеп бармай. Бала күңеле бикле. Шуға күрә балалар психологияһын белгән кеше генә уҡытыусы булырға хаҡлы. Бала күңеленә нисек юл һалырға? Әлбиттә, һүҙ менән, һүҙҙең эске мәғәнәһе (образы) менән уй бирергә, уйландырырға кәрәктер. Бәлки шул юл менән уның күңеленә үтеп инергә, һәләтен асырға мөмкиндер. Халыҡта уйлағандың уйында ҡала тигән әйтем бар. Тел күренештәрен, һүҙ, төшөнсәләрҙе уйға төрөп биреү кәрәктер — баланың рухи хәлен ҡуҙғытыу мөһим. Уның рухи булмышына нимәләр инә һуң? Бына улар:

— баланың хәтере ниндәй йүнәлештә үҫеш алған?

— уның генетик (йәғни ҡандан килгән) хәтере ни кимәлдә?

— предметҡа, донъяуи хәлдәргә, башҡа хәл-ваҡиғаларға баланың үҙ ҡарашы, үҙ баһаһы бармы? Хис-тойғо үҫеше нисек?

Бындай рухи хәлдәр, рухи булмыш баланың шәхес булып формалашыуында төп урынды биләй. Ана шул психик хәлен үҫтерергә йүнәлеш алырға тейеш һәр дәрес. Дәрестең төп маҡсаты баланың рухи хәленә тәьҫир итергә, психик һыҙаттарын, рухиәтен, күңел донъяһын ҡуҙғытырға тейеш. Әгәр үрҙә әйтеп кителгән рухи булмышын аса алмай икән, тимәк, дәрес үҙенең төп маҡсатына ирешмәне тигән һүҙ. Бала күңеленә юл һалыу, ана шул юлдан уның рухиәтенә үтеп инеү дәрес материалының сифатына туранан-тура бәйләнгән. Баланы уйландырыу аша уның рухи һәләтен ҡуҙғытып була. Уйға уй үрелә. Уй уйҙы тыуҙыра. Дәрестең сифаты уҡыу эшмәкәрлегенә, баланың үҙ аллы уйлау һәләтенә ҡайтып ҡала.

Студенттарға, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына тәҡдим ителгән был йыйынтыҡҡа ҡушымта рәүешендә алдынғы уҡытыусыларҙың — минең коллегаларымдың дәрес өлгөләре тупланды. Шулай уҡ был китапҡа ингән мәҡәләләр ҙә дәрес проблемаһына арналды. Был баҫма студенттарҙың, мәктәп уҡытыусыларының көтөп алған китабы булырына шигебеҙ юҡ.

## Тел сараларын синтаксик нигеҙҙә өйрәнеү

«Мәктәп, баланы туранан-тура үҫтереү, «һөйрәкләү» менән генә сикләнеп ҡалмайынса, уның артабан үҙаллы үҫеүен тәьмин итергә, «этәреп ебәрергә» лә тейеш» (А.А.Леонтьев). Тимәк, мәктәптә өйрәнеләсәк һәр предмет баланың үҙ аллы үҫеүенә этәргес көскә, сараға әйләнергә тейеш. Дәреслектәргә ингән тел саралары фән, статистика, ғилемдәр тупланмаһы рәүешендә өйрәнелмәһен ине. Туған тел — донъя картинаһын танып белеү сараһы. Әйтергә кәрәк, танып белеү — кеше менән предмет, кеше менән кеше, тормош күренештәре, донъяуи хәл-ваҡиғалар, тәбиғәт миҙгелдәре, биҙәктәре һәм башҡалары араһындағы мөнәсәбәттәр бәйләнеше. Мөнәсәбәткә инмәйенсә тирә-йүнде, үҙең йәшәгән мөхитте, донъяны танып белеп булмай. Шулай итеп, танып белеүҙең күләме, йөкмәткеһе һәм мәғәнәһе ана шул мөнәсәбәттәргә үҫтереүле анализда һәм синтезда ята.

Ҡайһы бер психологтарҙың әйтеүенсә, «дәрес материалы бер яҡтан баланың актуаль (тәбиғи) үҫеш кимәленә ярашлы, икенсе яҡтан бер ни тиклем ҡатмарлы ла булһын, юғиһә үҫтереүҙең ерлеге юғала» (Ш.А.Амонашвили)[2] .

Дәрес материалын күпмелер кимәлдә ҡатмарлаштырыу мәсьәләһе Л.С.Выготский, Л.В.Занков, В.В.Давыдов, Д.Б.Эльконин, М.И.Мәхмүтов, И.Я.Лернер һ.б. психологтарҙың хеҙмәттәрендә лә күтәрелә. Был урында шуны ла әйтеп китеү кәрәктер: дәрес материалын ҡатмарлаштырыу үҙен аҡламай. Әгәр дәрестә уҡыу эшмәкәрлеге булмаһа, өйрәнелгән материалдың ҡатмарлылығы, ауырлығы баланың зиһен эшмәкәрлеген тотҡарлаясаҡ. Зиһенгә алыу юҡ икән, ижади фекерләүгә лә юл ябыла. Ана шул рәүешле дәрес материалы үҙләштерелмәйенсә ҡала килә. Фекерләү эшмәкәрлегенең башланғысы — ул мәғәнә, тойғо, хис, төрлөлөк, сәбәп. Дәрес материалы ана шул башланғыстарҙан алыҫ икән, баланың аҡыл эшмәкәрлеге ҡуҙғытҡыстарына тәьҫир итмәй икән, уның шәхескә хас булмышын тәрбиәләү, камиллаштырыу, үҫтереү тураһында һүҙ алып барыуҙан, ҡоро һөйләнеүҙән фәтеүә булмаясаҡ*. Класҡа, дәрескә тәғәйен стандарт белемде ҡатмарлаштырыу түгел, ә проблемалаштырыу кәрәк. Бала зиһененә уй, хәтеренә мәғәнә һалыу

---

*[2]Амонашвили Ш.А. В школу с шести лет. В сб.: Педагогический поиск / сост. И.Н.Баженова. — М.: Педагогика, 1988. — 81-се бит.*

**Фонетик күренештәрҙе һүҙ эсендә, морфологик берәмектәрҙе һүҙьяһалыш сиктәрендә, лексиканы айырым һүҙҙәр рәүешендә өйрәнеү иҫкергән алым.*

мөһим. Шуға күрә туған тел саралары һөйләм йә булмаһа текст эсендә, шул һөйләмдең, текстың башҡа киҫәктәре, берәмектәре тығыҙ бәйләнештә өйрәнелергә тейеш. Башҡорт теленә өйрәтеүҙе синтаксик йүнәлештә алып барыу мөһим. Дәрестә баланың фекерләү һәләтен үҫтереү төп маҡсат итеп ҡуйыла. Туған телдең башҡа кимәлдәрен (фонетика, морфология, лексика) синтаксик кострукцияларҙан тыш өйрәнеү быға кәртә ҡуя. Синтаксик нигеҙгә ҡоролмаған (тардицион, ғәҙәти) дәрестәрҙә лә баланың үҫеше бар. Әммә уның үҫешендә, фекерләү аң (рассудок) кимәлендә тороп ҡала. Ә инде аҡыл (разум) ярҙамында үҙ аллы танып белеү булмағас, уҡыусының ижади үҫеше юҡ кимәлдә. Шул нигеҙҙә асылмай, асылып китә алмай ҡалған күпме һәләт ҡыйрала

Мәктәп программаларында һәр класҡа тәғәйен фонетик морфологик, синтаксик һ.б. белектәр (умения)* тәҡдим ителә. Ана шул белектәр балаға төрлөсә фекер йөрөтөүгә (кинәйәле, логик, ижади, образлы, күркәм) этәргес көс бирмәй. Киреһенсә улар фекерләүҙең аң кимәленән аҡыл кимәленә күсешен тотҡарлай. Дәреслектәрҙәге синтаксик күнегеүҙәр уҡыусыларҙың фекерләү эшмәкәрлеген стандартлаштыра, тигеҙләй. Донъя картинаһын танып белеүҙә, һүҙләп зиһенгә алыуға ҡарағанда, һүҙбәйләнешләп, һөйләмләп зиһенгә алыу күпкә отошло. Хәл-ваҡиғаны, күренештәрҙе логик-синтаксик бәйләншеһеҙ зиһенгә алыу продуктив булмаған (йәғни, мәғәнәһеҙ, һөҙөмтәһеҙ, ижади түгел) фекерләүгә этәрә. Тимәк, һөйләм, текст синтаксисын өйрәнгәндә фекерләүгә этәргес шарттар кәрәк. Бына улар: күҙәтеү, сағыштырыу, предметтарҙың һәм образдарҙың дөйөм һәм айырым яҡтарын билдәләү, дөйөмләштереү, проблема, ситуация, эҙләнеү, танып белеүҙең анығ маҡсатын күрһәтеү һ.б.** Синтаксик берәмектәрҙе (өнмө, һүҙме, һүҙбәйләнешме) һөйләм эсендәге үҙ-ара бәйләнештән тыш өйрәнеү — иҫкергән алым. «Уҡыусы һөйләм эсендәге һүҙҙе еңелерәк зиһенгә ала»[3].

Мәктәп дәреслектәрендә ябай йәки ҡушма һөйләмдәрҙе анализлау өсөн күпме һорауҙар һәм практик эштәр бирелә. Быларҙың барыһы ла синтаксик ҡағиҙәләрҙең йөкмәткеһен асып биреүгә

---

*Сағыштырығыҙ: белекле бала, белекһеҙ бала.

**Дәреслектәрҙәге күнегеүҙәрҙең биремдәрендә бындай шарттар юҡ тип әйтерлек.

[3]Асадуллин А.Ш., Хасанов Н.М. Основы методики русского языка в начальных классах татарской школы. — Казань, Татарское книжное издательство, 1978. — 15-се бит.

ҡоролған. Әлбиттә, ваҡыт-ваҡыты менән бындай төр эштәр ҙә кәрәк. Әммә мәғәнәһе аҙ булған бер төрлө эштәр менән баланың иғтибарын ялҡытыуҙы хәҙерге методика фәне хупламай.

Юл ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: ошондай уҡ эштәр рус теле дәрестәрендә лә үткәреләә. Рус теле менән башҡорт теленең синтаксик конструкциялары араһында байтаҡ оҡшашлыҡтар бар ҙа баһа! Бер үк ҡағиҙәне бер үк күренеште иҫбатлай-иҫбатлай баланы ялҡытабыҙ түгелме? Ике дәрестә лә һөйләм нигеҙендә үҫтереүсе һорауҙар, эштәр бирелмәй, һөйләмдә һүҙҙәрҙең мәғәнәүи йөкмәткеһе, асылы хаҡында проблемалы ситуация тыуҙырылмай. Баланың фекерләү һәләтен үҫтереү маҡсатынан сығып, һөйләмгә анализ биреү кәрәктер. Булмаһа берәй текстҡа анализ өлгөһөн ҡарап үтәйек. Бына ул текст:

*Бәҙи яулыҡ осо менән битен ҡаплап, башын түбән баҫып, урам аша сыҡты ла боролоп тыҡырыҡҡа инде. Өмәселәр, уны әллә нindәй ҙур йомош тапшырып оҙатҡан һымаҡ, артынан ҡарап ҡалдылар». (Һ.Дәүләтшина, «Ырғыҙ»)*

*Уҡытыусы:* Тексты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Бөтә һүҙҙәр ҙә урынлы ҡулланылғанмы? «Башын түбән баҫып», «йомош тапшырып» тигән һүҙбәйләнештәр телмәрҙә, бәлки, икенсе төрлө ҡулланылалыр? Был хаҡта һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Кемдә нindәй тәҡдимдәр бар?

*Уҡыусы:* «Башын түбән баҫып» тип әйтеү әллә нисек яңғырай.

*Уҡытыусы:* Ни өсөн, һин нисек әйтер инең?

*Уҡыусы:* Мин уны «башын түбән эйеп» тип үҙгәртер инем.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ, иҫбат ит.

*Уҡыусы:* Башҡорт телендә «баш баҫыу» тигән нығынған һүҙбәйләнеш бар. Яҙыусы шул һүҙбәйләнеште үҙенсә үҙгәрткән. Ике һүҙ араһына «түбән» һүҙен ҡыҫтырған.

*Уҡытыусы:* «Башын түбән баҫып» тигән һүҙбәйләнеш телмәрҙә нығынғанмы?

*Уҡыусы:* Ундай һүҙ бәйләнеш телмәрҙә нығынмаған. Был осраҡта түбән һүҙе үҙенән һуң эйәреп тигән ҡылым формаһын талап итә.

*Уҡытыусы:* Был һүҙбәйләнеште «башын эйеп» тип кенә алып булмаймы?

*Уҡыусы:* Була, әммә бында «башын эйеп» һүҙбәйләнеше бер нисә мәғәнәне аңлатасаҡ.

*Уҡыусы:* Был осраҡта һөйләмдең яңғырашы юғала.

*Уҡытыусы:* Яңғыраш тигән һүҙҙе икенсе төрлө нисек әйтеп була?

*Уҡыусы:* Телмәр мелодикаһы, телмәр моңо тип әйтеү дөрөҫ була.

*Уҡытыусы:* Бик дөрөҫ әйттегеҙ, рәхмәт, телегеҙҙән ҡыуаныгыҙ! Ә «йомош тапшырып» тигән һүҙбәйләнеш урынлы ҡулланылғанмы? Уйлағыҙ әле.

*Уҡыусы:* Урынһыҙ ҡулланылған.

*Уҡытыусы:* Ни өсөн? Иҫбат ит.

*Уҡыусы:* Телмәрҙә «йомош ҡушыу» һүҙбәйләнеше нығынған.

*Уҡыусы:* «Йомош тапшырыу» нисектер русса яңғыраған һымаҡ.

*Уҡыусы:* «Йомош тапшырыу» нисектер тантаналы яңғыраған һымаҡ. Мәҫәлән: иген тапшырыу, имтихан тапшырыу, дәүләткә һөт тапшырыу, хат тапшырыу һәм башҡалар.

*Уҡытыусы:* Рәхмәт! Дөрөҫ анализ бирҙегеҙ.

*Уҡыусы:* Был текста тағы ла бер хата бар.

*Уҡытыусы:* Әйтеп ебәр әле, ул ниндәй хата икән?

*Уҡыусы:* Һөйләмдең грамматик нигеҙе, йәғни «өмәселәр ҡарап ҡалдылар» тип әйтеү ҡолаҡҡа ятмай.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ! Иҫбат ит.

*Уҡыусы:* Күплек мәғәнәһе ике тапҡыр ҡабатланған. Эйә лә, хәбәр ҙә күплекте белдерһә телмәр дөрөҫ булмай.

*Уҡыусы:* Телмәр мелодикаһы боҙола.

*Уҡыусы:* Урыҫ телендәге «Согласование»ға эйәреү килеп сыға.

*Уҡытыусы:* Бик дөрөҫ анализ яһанығыҙ. Рәхмәт!

Ғәҙәти (традицион) методикаға ярашлы үткәрелгән дәрестәрҙә өйрәнеү материалдары әҙер килеш тәҡдим ителә. Бала шулай итеп әҙер белемгә күнегә. Уның үҙ аллы фекерләү мөмкинселегенә юл ябыла. Дәрестә ижади күтәренкелек, солғаныш (атмосфера) булдырылмай. Өйрәнеү материалы тотош бер проблема рәүешендә ҡуйылмай. Шуға ла класта уҡыусыларҙың битарафлығы хөкөм һөрә. Балалар уй донъяһына, хыял итеү, фекер йөрөтөү хәленә йәлеп ителмәй. Сәбәбе ябай: үҙ аллы «фекер төҙөү» өсөн тейешле маҡсат ҡуйылмай. Шуға күрә лә балаларҙа дәрес материалына ҡарата һис бер ҡыҙыҡһыныу юҡ. Бала күңелендә эҙләнеү ниәте, эҙләнеү теләге (мотив) асылмай ҡала килә. Тел кимәлдәре буйынса (фонетик, морфологик, лексик) анализ төрҙәре лә балаға әҙер килеш бирелә. Дәреслектәрҙә ундай төр анализдарҙың өлгөһө яҙып уҡ күрһәтелгән. Дәрестә, дәрес материалы нигеҙендә балаға уйланыр өсөн сәбәп юҡ. Туған тел саралары халыҡтың йәшәү рәүеше (этнокультура, тарих, мифология һ.б.) материалы менән үҙ ара бәйләнештә өйрәнелмәй.

Әйтәйек, йыйыу, йыйнау, дөйөмләштереү мәғәнәһен аңлатҡан *тана-торпо, егет-елән, ҡыҙ-ҡырҡын, йылан-саян, тай-тулаҡ, бала-саға, бисә-сәсә, ата-баба, ҡарт-ҡоро, ҡарт-ҡамҡы, етем-еһер, ир-ат, бала-сурә* кеүек һүҙҙәр тыуған телебеҙҙә юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән. Яңы ерҙәр үҙләштерер өсөн ырыу-ырыу булып таралған ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ, сит ҡәүемдәр менән аралашып, улар менән үҙ-ара бәйләнешкә инеп, үҙ телебеҙҙәге төшөнсәләргә мәғәнәләш һүҙҙәрҙе үҙләштергән. Тимәк, һанап сығылған ишле һүҙҙәрҙең икенсе һыңарын сал тарих төпкөлдәрендә төрки һәм монгол телдәренән үҙләштерелгән ҡомартҡы тип ҡабул итергә кәрәк. Бындай һүҙҙәрҙең тәүгеһе ниндәй мәғәнәгә эйә булһа, һуңғыһы ла шундай уҡ мәғәнәне аңлата.

Тел күренештәре һөйләмдән, текстан тыш, шулай уҡ этномәҙәни мөхиттән айырым өйрәнелһә, уларға ҡыҙыҡһыныу юғала. Үҫтереүле уҡытыу принцибы иҫәпкә алынмай, баланың фекерләү хәлен уятыусы шарт, сәбәп, ниәт (мотивтар) файҙаланылмай ҡала.

Билдәле булыуынса, тел — этнокультураның бер төрө. Шулай булғас, халыҡ мәҙәниәте үтә ябай, примитив кимәлдә өйрәнелмәһен ине. Тел донъяһына, тел күренештәренә бөтөнлөк хас. Шул бөтөнлөктө уҡыусылар бөтөн килеш ҡабул итһен ине. Быының нигеҙендә нимә ята? Уҡытыуҙы, теге йәки был теманы, тел күренештәрен өйрәнеүҙе танып белеү һәм фекер йөрөтөү рәүешенә*** көйләү кәрәк. Тимәк, бала тел кимәлдәрен (фонетиканы, морфологияны, лексиканы, синтаксисты, стилистиканы барыһын да бергә) бөтөн килеш танып белергә тейеш. Ғәҙәттә һөйләмде синтаксик яҡтан тикшергәндә аҡылға мөнәсәбәтле (логико-рациональная форма) танып белеүгә генә иҫәп тотола, бөтөнлөк системаһы юғала. Икенсе төрлө әйткәндә, танып белеү предметы булып һөйләм төҙөлөшө һанала. Был осраҡта танып белеү грамматик төшөнсәләргә генә йүнәлтелә. Әйтәйек, һүҙҙең, һүҙ формаларының грамматик

---

****Танып-белеү рәүеше төрлө кимәлдәрҙә үҙ эсенә ала. Мәҫәлән: һиҙемләп танып белеү, фекерләү ярҙамында танып белеү, эмпирик (аң ярҙамында) һәм теоретик (аҡыл ярҙамында) танып белеү. Танып белеүҙең төп ике формаһын да күрһәтеп китергә кәрәктер. Беренсеһе — затҡа (субъектҡа) туранан-тура мөнәсәбәте булған белем алыуға йүнәлтелгән танып белеү (һиҙемләү, зиһенгә алыу, күҙ алдына килтереү). Икенсеһе — заттың аңынан тыш булған белемдәрҙе үҙләштереүгә йүнәлтелгән танып белеү. Бындай белемдәргә кешелек тарафынан тыуҙырылған матди һәм рухи байлыҡтар инә. Шулай уҡ көндәлек (ғәҙәти) танып белеү, күркәмлекте (художестволы) танып белеү, фәнни танып белеү кеүек төрҙәре лә мәғлүм.*

билдәләре, һөйләм киҫәктәре, өлөштәре, төрҙәре һанап сығыла. Шул ваҡытта танып белеүҙең хис-тойғоло, образлы (эмоционально-образная форма) төрө иҫәпкә алынмай. Танып белеүҙең төп предметы булған мөнәсәбәт, баһа биреү мөнәсәбәте уҡытыусының күҙ уңынан ситтә ҡала килә. Бында уҡытыусының ғәйебе юҡ, сөнки мәктәп дәреслектәре, методик күрһәтмәләр уны шул йүнәлештә эшләргә мәжбүр итә. Тимәк, дәрестә тел материалын өйрәнгәндә, һөйләм йәки текст, күнегеү өҫтөндә эшләгәндә күркәм образдар ярҙамында танып белеүгә лә етди иғтибар бирергә кәрәк. Юғиһә танып белеүҙең кеше аңына бәйләнмәгән (объектив) төрө (төшөнсә), кеше аңына мөнәсәбәтле (субъектив) төрөнә (күркәм образ) ҡаршы ҡуйыла. Фекерләүҙең логик-рациональ формаһына ғына өҫтөнлөк биреү уҡыусының шәхес сифаттарын үҫтермәй. Юл ыңғайы шуны ла әйтергә кәрәк: күренекле совет психологтары Л.В.Занков, В.В.Давыдов, Д.Б.Эльконин концепцияларының төп етешһеҙлеге лә үрҙә әйтелгәндәр менән аңлатыла. Был ғалимдар баланың ижади фекерләүен үҫтереү тигәндән фәҡәт теоретик фекерләүҙе генә күҙ уңында тоттолар.

Шулай итеп, һөйләм, текст нигеҙендә тел күренештәрен өйрәнгәндә мәғәнәһеҙ ҡағиҙә ятлатыуға, грамматик фарс ойоштороуға юл ҡуйылырға тейеш түгел. Уҡыусы психологияһында ойоҡһоп ятҡан һәләтте асыу, артабан уны үҫтереү, тел күренештәрен синтаксик нигеҙҙә һәм этномәҙәни аспектта өйрәнгән саҡта ғына бойомға ашасаҡ.

Һөйләмдең, текстың өлөштәрен, киҫәктәрен, композицияһын үҫтереүле анализлау кәрәк. Быға түбәндәгеләр инә: художестволы төҫ биреү, редакторлау, стилистик яҡтан камиллығына иғтибар итеү, һүҙ формаларының, һөйләм киҫәктәренең үҙ-ара мөнәсәбәтен өйрәнеү, теге йәки был һүҙгә таянып үҫтереүле синтез яһау, һөйләм төҙөлөшөнә анализ үткәреү һ.б. Бары тик ошолай эшләгәндә генә тел берәмектәренә, һөйләмдең синтаксик өлөштәренә бала күңелендә баһалы мөнәсәбәт, ҡараш тыуасаҡ.

Һөйләм төҙөлөшөн методик күрһәтмәләргә, дәреслектәге күнегеүҙәрҙең биремдәренә ярашлы тикшергән саҡта уҡыусыларҙың яуаптары бер төрлө буласаҡ. Ана шул бер төрлөлөк, ҡалыпҡа һалынған анализ баланың әүҙемлеген, фекерләү эшмәкәрлеген юҡҡа сығара. Дәрестең үҫтереүле фоны, ерлеге, нигеҙе ҡаҡшай. Шуны ла әйтергә кәрәк: белем биреүҙе схемалаштырыу, компьютерлаштырыу, электронлаштырыу һәм башҡа реформаларға көйләү — фекерләүҙе бер ҡалыпҡа һалыу, кеше аҡылын техник ҡалдыҡ

(шлак) менән ҡыйлау. Был осраҡта уҡыусы психологияһында иң изге эмоциональ-эстетик, кешелеклелек тойғолары юҡҡа сыға. Хатта әҙәп-әхлаҡ һыҙаттыры ла бөгөнгө кеше характерында, холҡонда, тәбиғәтендә һирәк күренешкә әйләнә бара. Был йәһәттән Рәсәйҙең күренекле рәссамы Б.М. Неменскийҙың фекере менән килешмәү мөмкин түгел. Бына ул нимә ти: «Мотлаҡ, бөгөн, бөгөн! фекерләүҙең асылы, донъяны танып белеүҙең ике формаһын үҫтереүҙең мөһимлеге хаҡында һүҙ алып барыу кәрәк. Береһен икенсеһе менән алмаштырмаҫҡа — бер-береһенә ярашлы үҫтерергә, тулыландырырға. Бының өсөн уларҙың үҙ-ара ярашыусанлығын аңларға кәрәк»[4].

Үрҙә әйтелгәндәр шундай һығымтаны талап итә: башҡорт теленең морфологияһын, синтаксисын өйрәнеү барышында танып белеүҙең ике формаһын да ҡулланыу мөһим. Бының өсөн мәктәп дәреслектәренең методик аппаратын үҙгәртеү кәрәк. Үҫтереүле уҡытыу принцибына ярашлы күнегеүҙәрҙең биремдәре, мәҫәлән, түбәндәгесә булырға мөмкин:

«Тексттың (өҙөктөң) бер һөйләмен һайлап ал. Ентекләп уҡып сыҡ. Һөйләмдең мәғәнәһен төшөн һәм уйла: сит телмәрҙең төп мәғәнәһе, төп фекере ниндәй һүҙҙәргә һалынған? Үҙеңдең яуабыңды иҫбат ит».

«Тексты иғтибар менән уҡып сыҡ. Унда төп фекер ниндәй һөйләм аша бирелә? Автор күп сағыштырыуҙар ҡулланған. Урынлымы улар? Һин нисек уйлайһың? Уларҙы икенсе төрлө биреп булмаймы? Яуабыңды иҫбат ит».

«Текста һөйләмдәрҙең тик грамматик нигеҙҙәре генә бирелгән. Шуларҙы тарҡау һөйләмдәргә әйләндер, һөйләмдәрең күркәм булһын».

«Тексттың башы бирелгән. Аҙағын үҙеңсә яҙып бөтөр, һүрәтләү сараларын ҡулланырға онотма».

«Тексттың аҙағы бирелгән. Башы нисегерәк булды икән? Уйла һәм үҙеңсә яҙып ҡара».

«Өҙөктө иғтибар менән уҡып сыҡ. Үҙең теләгән һөйләмдәге һүҙбәйләнештәрҙе яҙып сыҡ. Улар ошо тәртиптә булырға тейеш: рәүеш менән ҡылым, сифат менән исем, исем менән исем. Өҙөктә төп фекер ҡайһы һөйләм аша белдерелә? Уйла әле».

---

[4]*Неменский Б.М. Искусство — Культура — Образование: Цикл бесед. — М. Центр ХКО, 1993 -16-сы бит. Күренекле рәссам танып белеүҙең ике формаһы тип теоретик һәм образлы-күркәм төрҙәрен күҙ уңында тота. — Р.А.*

«Терәк һүҙҙәр бирелгән. Шуларҙы ҡулланып бәләкәй генә хикәйә яҙып ҡара. Тәүҙә хәтереңә төшөр: башҡорттарҙың йәшәү рәүешендә торна ниндәй мәғәнәгә эйә булған» һ.б.

Бала уйланһын, хәтерендә эҙләнһен. Уның уйланыу һәләте күп осраҡта дәреслектәрҙәге методик аппараттың йөкмәткеһенә, күнегеүҙәрҙең биремдәренә, класта һәм өйҙә башҡарыласаҡ эш төрҙәренә лә бәйләнгән. Баланың ижади фантазияһы, хыял итеү әүҙемлеге туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә асыла. Әйтәйек, ғәҙәти булмаған мәғәнә һалынған һөйләм уйлай, текст төҙөй икән, бындай бала бары тик хуплауға лайыҡлы. Тел күренештәрен өйрәнгәндә, теге йәки был әҫәргә анализ биргәндә мәғәнәһеҙ ғәҙәтилектән, акдемизмдан арынырға кәрәк. Мәҫәлән, һөйләмгә синтаксик анализ яһағанда рәүеш, хәл, тултырыусы, аныҡлаусы функцияларын үтәгән эйәрсән киҫәктәрҙең телмәр үҫтереүҙәге әһәмиәте, телдең һүрәтләү саралары икәнлеге хаҡында әйтеп үтергә нимә ҡамасаулай?

Һөйләмдең композицияһын анализлауға күсер алдынан уҡыусылар уның асылына, мәғәнәһенә, айышына үтеп инергә лә тейеш. Дәрескә бирелгән ваҡыт аҙ, әлбиттә. Иғтибарлап һөйләмде уҡып сығыу, уның төҙөлөшөн асыҡлау, мәғәнәһенә үтеп инеү мөмкинселеге биреү — баланы уйландырыу өсөн төп шарт.

Түбәндә тел кимәлдәрен (күренештәрен) яҡынса анализлау өлгөһө лә бирелә. Миҫал:

*«Ынйыҡ көн. Эс бошорғос ямғыр яуа ла, яуа. Лыҫтыр кейем һымаҡ ялбыр болоттар, күк көмбәҙен ҡаплап, көнө буйы төньяҡҡа ағыла. Аҡташ йәйләүенең өҫтө лә, аҫты ла лысма һыуға әйләнгән» (Кирәй Мәргән. Бөркөт ҡанаты).*

I.Текст менән танышыу.

Тексты тәүҙә уҡытыусы үҙе уҡып күрһәтә. Шунан һуң бер-ике уҡыусынан уҡытыла. Артабан уҡыусылар үҙ аллы уҡып сыға. Шул рәүешле тексттың йөкмәткеһенә, мәғәнәһенә иғтибар туплана.

II. Һүҙлек эше. Тексты мәғәнәләре аңлашылып етмәгән һүҙҙәр бар: ынйыҡ, лыҫтыр, лысма (сағыштырыу өсөн: лыс һыу). Һүҙҙәрҙең мәғәнәләре тәүҙә уҡыусыларҙың үҙҙәренән һорала. Араларында белүселәр булырға мөмкин. Уҡыусылар аныҡ әйтә алмаһа, уҡытыусы үҙе аңлата: ынйыҡ-йонсоу; лыстыр-ныҡ һыуланған, һығып алмалы; лысма-лыстыр һүҙенең синонимы.

Өҫ кейеме лыс һыу булған кешегә нимә тип әйтәләр? — Күшеккән тауыҡ.

III. Фонетик характеристика:

1. Һуҙынҡылар:

— ҡалын (ы, о, а, у);

— нәҙек ***(ө, э, ү, ә);***

— ике өндән торғандар **(я=й+а; е=й+э)**.

2. Тартынҡылар.

— яңғырау **(ў, й, б, н, р, ғ, м, л, ҙ, г, ў̌);**

— һаңғырау **(ҡ, к, с, ш, т, һ, п, ҫ);**

— ҡалын һуҙынҡылар менән йәнәш килеүсе тартынҡылар; **( ў, ҡ, ғ);**

— нәҙек һуҙынҡылар менән йәнәш килеүсе тартынҡылар **( ү̌, к, г) ж;**

3. билдә — **ь**.

IV. Морфологик характеристика:

— исем (көн, ямғыр, кейем, болоттар, Аҡташ йәйләүе, өҫ, аҫ);

— сифат (ынйыҡ, эс бошорғос, лыҫтыр, ялбыр, лысма);

— рәүеш (күк көмбәҙен ҡаплап, көнө буйы, төньяҡҡа);

— ҡылым (яуа, ағыла, әйләнгән);

— ярҙамлыҡ һүҙҙәр (ла, лә, һымаҡ).

V. Синтаксик характеристика. Текстағы һөйләмдәрҙе асыҡлау кәрәк. Мәҫәлән:

— Текст нисә һөйләмдән тора?

— Текста дүрт һөйләм алынған.

— Төҙөлөшө яғынан ниндәй һөйләмдәр?

— Тәүгеһе атама һөйләм. Ҡалғандары ике составлы ябай таркау һөйләм.

Артабан теләгән бер һөйләмгә синтаксик анализ яһарға мөмкин. Мәҫәлән: *Эс бошорғос ямғыр яуа ла яуа.*

VI. Мәғәнәүи (семантик) характиристика. Тексттың төп мәғәнәһе ҡайһы һөйләм аша белдерелеүен асыҡлау мөһим. Бында уҡыусыларҙың яуаптары төрлөсә булырға мөмкин. Мәҫәлән: «Эс бошорғос ямғыр яуа ла яуа». «Аҡташ йәйләүенең аҫты ла, өҫтө лә лысма һыуға әйләнгән». Был яуаптарҙың икеһе лә дөрөҫ. Әммә дөйөмләштерелгән мәғәнәне биреү йәһәтенән һуңғы һөйләмде һайлау отошлораҡ була. Ул үҫтереүле синтез үткәреү өсөн дә ҙур мәғәнәгә эйә. Мәҫәлән, Аҡташ йәйләүе ҡайһы башҡорт ырыуының йәйләүе? Шаҡман ҡайһы ырыуҙың (Тамъян) етәксеһе? Тамъян ырыуы ниндәй билдәләр аша үтеп үҙенең төйәген тапҡан? Тамъян ырыуының символдарын (ағасы, ҡошо, тамғаһы, ораны) беләһеңме? Ана шун-

дай һорауҙарға әңгәмә ойоштороу баланы үҙенең тарихына, этномәҙәниәтенә ылыҡтыра.

«Өлөштәренән алда бөтөндө күреү» (Ильенков Э.В.) концепцияһы тел күренештәрен мотлаҡ һүҙбәйләнеш синтаксисы, һөйләм синтаксисы, текст синтаксисы нигеҙендә өйрәнеүгә ишара яһай. Бөтөндән уның состав өлөштәренә табан фекерләү — диалектика законының асылы. Традицион методика уҡытыусы эшмәкәрлеген тел тураһындағы фәндең бәйләнешһеҙ өлөштәре буйынса абстракт белем биреүгә йүнәлтте. Мәҫәлән, фонетика, һүҙ төркөмдәре, лексика һ.б. һис бер бәйләнешһеҙ, синтаксистан тыш өйрәнелде, әле лә шулай дауам итела. Телмәр бөтөнлөгө иҫәпкә алынманы. Бөтөндөң состав өлөштәре телмәр, тел синтаксисында үҙ аллы айырым күренештәр булараҡ өйрәнелде. Балаға танып белеү теорияһынан тыш абстракт белем бирелде. Икенсе төрлө әйткәндә, тел менән фекерләүҙең үҙ-ара бәйләнеше, фекерләүҙең тәбиғәте, йөкмәткеһе (тәжрибә, практика, теория) иҫәпкә алынманы. Билдәле булыуынса, абстракт белем кеше аҡылын үҫтермәй, әүҙем эшмәкәрлеккә этәргес көс, сәбәп, ниәт, теләк (мотивтар) тыуҙырмай. Шулай итеп, һөйләм, текст — фекерләү эшмәкәрлегенең бер һөҙөмтәһе. Ул һөҙөмтә өҙөк-йыртыҡ өйрәнелергә тейеш түгел. Тел күренештәрен синтаксик нигеҙҙә өйрәнеү — баланы үҫтереүсе шарт.

## Дәрес һәм уның этаптары

Мәктәптә баланы тыуған теленә өйрәтеүҙе яҡшыртыу дәрескә, уның төрҙәренә, һәр этабының аныҡ эшкә йүнәлтелгән булыуына бәйләнгән. Икенсе төрлө әйткәндә, дәрес уҡытыусының һәм уҡыусының бер-береһенә мөнәсәбәттәш эшмәкәрлегенән тора. Дәрестең нигеҙендә ике яҡлы эшмәкәрлек ята. Шуларҙың береһе, дәрестең төп асылын билдәләүсеһе — уҡытыусының эшмәкәрлеге. Ғәмәлдә ул нисек, ниндәй дәрәжәлә, күләме һәм кимәле, йөкмәткеһе һәм йүнәлеше ҡайһылай? Һорау бик етди. Уға аныҡ һәм теүәл яуап та кәрәк.

Күп дәресте ҡарағаным бар. Бигерәк тә «Асыҡ дәрес» тигәндәрен. Бындай яуаплы сараларҙа уҡытыусы күберәк үҙен «күрһәтеп» ҡалырға тырыша. Әйтәйек, утыҙҙан ашыу эш төрөн күрһәтә, һорау биреп өлгөрмәҫ элек уҡыусылары кем уҙарҙан ҡулдарын күтәрә, уйлап та ҡарамайынса яуап бирә. Бындай «асыҡ дәрестәрҙә» *балаға* уйлап торорға ваҡыт юҡ һәм кәрәкмәй ҙә. Сөнки яуап-

тар алдан ятланған. Был дәрескә алдан ҡырылмаһа ҡырҡ тапҡыр репетиция үткәрелгән. Бындай етди булмаған дәрес сараларын мәғәнәһеҙлек, мәғәнәһеҙ шау-шыу йәки дәрес фарс тип атарға мөмкиндер. Аҙаҡтан анализ яһағанда, был дәрес йоратын ҡараған белгестәр, хатта мәғариф етәкселәре лә уҡытыусыны маҡтарға тотоналар. Йәшермәйем, уҡытыусы ла — кеше. Уға ла йылы һүҙ кәрәк. Әммә дәрес тигән төшөнсә, дидактик берәмек тейешенсә баһаланмай ҡала. Шуға ла дәрескә бирелгән ваҡытты бушҡа уҙғарыу, әрәм итеү күренештәре дөйөм бер системаға әйләнеп бармаймы икән тигән хәүеф борсой мине. Күҙ буяусы бындай дәрестәрҙә ике яҡлы ижади эшмәкәрлек күҙәтелмәй.

Бөгөнгө дәрестәрҙә самаһыҙ күп эш төрҙәре менән мауығыу өҫтөнлөк ала. Улар баланың рухи булмышын ҡуҙғытмай, бала күңелен уйландырмай, уны ижади эшмәкәрлеккә этәрмәй. Ҡуйылған һорауға яуап ҡайтарыр өсөн балаға уйланырға мөмкинселек, ваҡыт бирелмәй. Ҡалыплашҡан бер үк эш төрҙәре, проблемаһыҙ һорауҙар, һөҙөмтә бирмәүсе мәғәнәһеҙ ҡағиҙә ятлау уҡыусыны ялҡыта, арыта. Ҡоро нотоҡ уҡып ҡына баланы милли рухта тәрбиәләп булмай. «Туған тел — кешене үҫтереү сараһы» (К.Д.Ушинский) тигән дидактик принцип дәрестә бойомға ашмай. Баланың хәтере яңынан-яңы төшөнсәләр, һүҙҙең образы, йәғни эске мәғәнәһе менән байытылмай. Хәтере ярлы уҡыусы ижади фекер йөрөтә алмай. Тимәк, дәресте ижади эшмәкәрлеккә көйләү кәрәк. Уҡыусы эҙләнеүсе, тикшереүсе, өйрәнеүсе сифатында ҡатнашырға, ә уҡытыусы уны шул эшмәкәрлеккә этәреүсе (әйҙәүсе түгел!) вазифаһын үтәргә тейеш. Бөгөнгө дәрестәрҙә ана шул һынылыш юҡ.

Дәрес — балаға белем биреүҙең төп формаһы. Белем һәм тәрбиә төшөнсәләре үҙ-ара айырылғыһыҙ бәйләнешкә ингән. Ғәмәлдә иһә белем менән бергә тәрбиә лә бирелә. Тәрбиә биргән саҡта балаға тейешле белем дә бирәбеҙ. Уҡыусыны нимәгәлер өйрәтәбеҙ. Ана шул диалектик бәйләнеш саралары ярҙамында бала шәхесен үҫтерәбеҙ. Шуға күрә дәрес — ул бала шәхесен үҫтереүсе сара ла.

Дәрес — уҡытыусының ижад эше. Ҡамиллашҡан дәрестәр булһа ла, ҡалыплашҡан дәрестәр була алмай. Ижад эше ҡалып ҡыҫандарына һыймай. Тәжрибәле уҡытыусы ла бер төрлө генә дәрес бирә алмай. Әйтәйек, бер үк тема буйынса (параллель) кластарҙа үткәрелгән дәрестәр ҙә бер төрлө килеп сыҡмай. Сәбәбе ниҙә? Үҙегеҙ асыҡлағыҙ.

Уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһендә дәрес түбәндәге берәмектәрҙән сығып ойошторола:

I. Ойоштороу мәле.
II. Өйгә эште тикшереү.
III. Яңы теманы аңлатыу.
IV. Яңы теманы нығытыу.
V. Өйгә эш биреү.
VI. Уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау.

Дәрестең ошо этаптарҙан тороуы уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһендә ныҡлы һыналған. Шуға күрә бөгөнгө дидактикала ла, методик әҙәбиәттәрҙә лә ошо өлгө үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Башҡорт теле уҡытыусыларының эш тәжрибәһенән сығып, шуны ла әйтергә кәрәк: уҡыусыларҙың белемдәрен тигеҙләү, үҙләштерелгән белемдең моделен (яҙып аңлатыу, һыҙып аңлатыу, схемаһын төҙөп аңлатыу һ.б.) төҙөү кеүек эш төрҙәрен дәрес планына индерергә лә мөмкин булыр ине. Әммә улар дәрестең үҙаллы этабына дәғүә итә алмай, һәр дәрестә ундай эш төрҙәренә туҡталып тороу мөмкин дә түгел.

Һәр дәрес — уҡытыусының үҙ аллы ижади эше. Ижад үҙ сиратында үҙенсәлектәрҙән тора. Уҡытыусының үҙенсәлекле эш алымдары үҙенең эшмәкәрлегендә, уҡыу эшмәкәрлегендә, уҡыусының эшмәкәрлегендә сағыла.

Ғәҙәттә дәрескә бирелгән ваҡыт (40-45 минут) дәрестең һәр этабына түбәндәгесә бүленә: ойоштороу мәле (2-3 минут), өйгә эште тикшереү (7-9 минут), яңы теманы аңлатыу (13-14 минут), яңы теманы нығытыу (12-13 минут), өйгә эш биреү (2-3 минут), уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау (2-3 минут). Әлбиттә, шулай уҡ өйгә бирелгән эштең төрө лә, үтеләсәк теманың күләм-кимәле лә (ауырлығы-еңеллеге лә) бирелгән ваҡыт нисбәтен үҙгәртергә мөмкин. Шуға күрә дәрестең һәр этабына яҡынса ваҡытты уҡытыусы үҙе планлаштыра.

*Ойоштороу мәле* баланың иғтибарын дәрескә туплау өсөн бирелә, һәр уҡыусыла әүҙем эш кәйефе булырға тейеш. Эш кәйефе кластағы тәртиптән башлана. Дәрестең һөҙөмтәлелеге күп осороҡта ойоштороу мәленән дә сығып билдәләнә, һәр уҡыусыны күҙ аша үткәреп, уларҙы ҙур һәм яуаплы эшкә туплау — ул ойоштороу мәле.

*Өйгә эште тикшереү* — баланың үҙ аллы эшмәкәрлегенә тейешле баһа биреү ул. Уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһендә, ғәҙәттә, өйгә эш итеп дәреслектәге теге йәки был күнегеүҙе күсереп яҙырға, үтелгән тема буйынса ҡағиҙәне ятлап килергә ҡушыла. Әммә бындай өйгә эштәр хәҙер үҙен аҡламай. Өйгә эш — баланың үҙ аллылығын, фекер йөрөтөү мөмкинлеген һынау ул. Кластағы балалар-

ҙың төрлөсә үҫеш кимәленән сығып, өйгә эш бер нисә вариантта бирелергә мөмкин. Мәҫәлән: ижади, ижади булмаған өйгә эштәр. Шуға күрә ижади эштәр йыйып алына. Уның һөҙөмтәләре икенсе дәрестә әйтелә һәм класс журналына ҡуйыла. Ижади булмаған эштәр (мәҫәлән төрлө биремле күнегеүҙәр) ҙә класта тикшерелмәй. Уларҙың эшләнешен, үтәлешен уҡытыусы, парта араһынан йөрөп, ҡарап ҡына сыға. Класта шуға оҡшаш икенсе эштәр башҡарыла. Бер нисә уҡыусы таҡта янында, ҡалғандары үҙ урындарында эшләй. Өйгә эштең был икенсе вариантында бөтә класс ҡатнаша. Бындай алымдың һөҙөмтәһе бик ҙур, уҡыусыларҙың да яуаплылығы, әүҙемлеге арта.

*Яңы теманы аңлатыу* — дәрестең төп этабы. Билдәле булыуынса, яңы тема менән үтелгән тема араһында үҙ-ара бәйләнеш булдырыла. Үтелгән тема ныҡлы үҙләштрелгәнме, юҡмы? Ана шул мәсьәләне асыҡлар өсөн үтелгән тема буйынса дөйөмләштереүсе һорауҙар бирелә. Бының менән уҡытыусы, беренсенән, яңы темаға, күсәгилешлек принцибына таянып, күпер һала. Икенсенән, үтелгән темаға ярашлы уҡыусыларҙың белемдәрен һәм күнекмәләрен тигеҙләй. Шулай итеп яңы темаға ныҡлы нигеҙ һалына.

Ғәҙәттә уҡытыусылар яңы теманы аңлатыуҙы бер яҡлыраҡ үткәрә. Үҙҙәре һөйләй, аңлата, ҡайһы бер осраҡта моделен (һөйләм яҙыу, схемаһын һ.б. төҙөү) дә таҡтала күрһәтә баралар. Шул нигеҙҙә балаға белем бирергә тырышалар. Әммә бала белемде үҙе алырға тейеш. Яңы теманы аңлатыу барышында уҡыусы эшмәкәрлеге күп осраҡта үҫтерелмәй. Уҡытыусы һөйләй, балалар тыңлай, таҡталағы һөйләмде күсереп яҙалар, һуңынан хатта теоретик мәғлүмәтте лә үҙе, йәғни уҡытыусы һүҙмә-һүҙ (дәреслектә нисек яҙылған шул килеш) әйтеп бирә, йә китаптан уҡып сыға. Бындай юл менән яңы теманы аңлатыу методик, психологик яҡтан дөрөҫ түгел. Уҡыу эшмәкәрлеге юҡ был осраҡта.

Баланың үҙ аллы фекерләү һәләтен үҫтереү мөһим. Проблемалы һорауҙар менән класты уйландырырға кәрәк.

— Күпме аңлаттым, шуны ла белмәйһегеҙме ни? — тигән һығымтаны ла ишетергә тура килә. Тимәк, уҡытыусы һөйләгәнде балалар аңламаған. Тимәк, уҡытыусы үҙе дәрескә әҙерләнмәй килгән. Дәрес материалы өҫтөндә үҙе уйланмаған. Яңы тема тәғәйен проблемаларға тарҡатылмаған. Шул проблемалар буйынса бала күңелен ҡуҙғытырлыҡ һорауҙар әҙерләнмәгән. Дәрес материалын аңламауҙа бала ғәйепле түгел. Үҙеңдең уңышһыҙлығыңды балаға япһарыу — ғәҙелһеҙлек, педагогик күрәшлек.

Башҡорт теленән үтеләсәк темаларҙың телмәрҙәге мәғәнәләре аңлатылмай. Тимәк, дәрестә абстаркт белем биреүгә йүнәлеш алынған. Мәҫәлән, нимә ул һөйләм? Иң беренсе сиратта ул — телмәр берәмеге. Аралашыу барышында кеше ниməһе менән матур? Әлбиттә, телмәре менән, һөйләмдең грамматик нигеҙе лә — телмәр берәмеге. Ул телмәрҙе матурлаймы? Сағыштырығыҙ, мәҫәлән: «Тимер, Ғариф ҡолаҡ һалдылар. Тауыштар яҡынлашты. Шәүләләр салынды. Арба килә. Кеше ултырған. Тауышы айырыла. Арбалар туҡтанылар. Фатима килде» (Б.Бикбайҙан) Был текстан берәй мәғәнә, айыш аңлап буламы? Тексттың формаһы бар, һөйләмдәре бар. Әммә бындай телмәр ниндәйҙер мәғәнә бирә алмай. Ни өсөн? Эйәне, хәбәрҙе асыҡлап килеүсе эйәрсән киҫәктәр юҡ. Тимәк, телмәр берәмеге сифатындағы һөйләм күркәм булырға тейеш. Бынан сығып, шундай һығымта яһарға мөмкин: һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре — телмәрҙе күркәмләүсе саралар.

Тимәк, дәрестә яңы теманы аңлатҡанда тел материалы фәҡәт лингвистик планда үтелә. Уның функциональ аспектын иҫәпкә алыусы юҡ. Туған тел саралары телмәргә мөнәсәбәтле өйрәнелһә, балаға белем алыу ҙа еңелләшә, уның телмәрен үҫтереү проблемаһы ла киҫкен тормаҫ ине, моғайын.

*Яңы теманы нығытыу.* Дәрестең был этабы, ғәҙәттә, күнегеүҙәр эшләтеүгә ҡайтып ҡала. Күнегеү өсөн тәҡдим ителгән текст балаға нимә бирә? Күнегеүҙең биремдәре баланы уйландырамы? Мәҫәлән: «Өҙөктө уҡып, уға исем бирегеҙ, һуңынан тултырыусылар менән хәбәрҙәрҙе, хәлдәр менән хәбәрҙе ишләп күсереп яҙығыҙ. Тултырыусылар менән хәлдәрҙең хәбәргә бәйләнеүен уҡтар менән күрһәтегеҙ. Эйәртеүсе һүҙҙәргә х билдәһен ҡуйығыҙ». Мәктәп дәреслектәрендә һәр күнегеү өсөн ошоноң һымаҡ биремдәр тәҡдим ителә. Билдәле булыуынса, бындай биремдәр баланың үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләтен үҫтермәй. Баланы үҫтереү (кеше буларак, шәхес буларак, йә булмаһа берәй йүнәлеш буйынса) күҙ уңында тотолмай.

Яңы теманы нығытыу төрлө кимәлдәге күнегеүҙәр эшләтеү (йә таҡтала, йә телдән, йә яҙма) ярҙамында ойоштороla. Йыш ҡына шулай ҙа килеп сыға: уҡытыусы күнегеүҙең биременә лә, йөкмәткеһенә лә ҡарап тормай, сөнки дәреслеккә ингәс, маҡсатҡа ярашлылыр, йәнәһе, тип уйлай. Дәрескә әҙерләнгән саҡта ла уҡытыусы дәрес материалын ныҡлап өйрәнмәй, күнегеү өсөн тәҡдим ителәсәк тексты ла йүнләп ҡарап сыҡмай. Нисек тә дәрес үтһә, көн уҙһа, булды, уныңса. Нисек етте шулай дәрес биреү ғәҙәтенән ҡотола алмай,

күрәһең. Яңы теманы нығытыу өлөшөндә уҡыусыларҙың дәрестә алған белемдәрен ипкә, тәртипкә килтереү кәрәк. Әлбиттә, күнегеүҙәр булырға тейеш, әммә уҡыусыны уйландырырлыҡ, эҙләнерлек биремле булыуы мөһим. Дәрестә үткән теманың моделен йә яҙып, йә һыҙып аңлата белеү ҙә уҡыусылар өсөн шарт.

Дәрес — балаға һабаҡ биреү, тип юҡҡа әйтелмәй. Дәрестә үтелгән материалды нығытыу өсөн тәҡдим ителгән күнегеүҙәрҙә баланың дөйөм үҫешен тәьмин итеүсе биремдәр ҙә булырға тейеш. Мәҫәлән, түбәндәге күнегеүҙәргә иғтибар ит.

*<u>1-се күнегеү.</u> Өҙөктө иғтибар менән уҡып сыҡ. Уйла: уға автор ниндәй мәғәнә һалған? Үҙеңдең ете быуыныңды белергә кәрәк, ти халыҡ аңы. Уны белеү ни өсөн кәрәк? Өҙөктә ниндәй нәҫеллек тураһында һүҙ бара?*

...Өҙҙө баланың өмөтөн Фәүзиә, селпәрәмә килтерҙе. Әммә үҙенең ҡыҫылыуы менән уларҙы хаҡ тәғәлә ҡушмағанды ҡылыуҙан араланы... Эй, Ихсанбай, балаҡайым... Ошо мәл һин ҡыҙҙарҙың иң һылыуын сиртеп йөрөп әйттерер буҙ егет булыр инең дә һуң... Гөлбаныуым... Гөлбаныу ҙа түгел ине бит исемең: Күкһылыу һин! Күҙҙәрендә күкһел юшан төҫө булғанға ҡушҡайным һиңә шул исемде. Аҡ тирмәмдең ҡото булып, сырылдап-һайрап уйнап йөрөгән ике ҡошсоғом, йөрәк майҡайҙарымды һыҙҙырып, бер-берегеҙгә ғашиҡ булдығыҙ... Әгәр бөгөн мин һеҙҙе айырмаһам, үҙ балам үҙ тупһама килен булып ҡына төшә ине бит... (Таңсулпан Ғарипова «Бөйрәкәй»).

*<u>2-се күнегеү.</u> Иғтибар менән уҡып сыҡ. Уйла: ниндәй йола тураһында һүҙ бара? Үҙең ниндәй йолалар беләһең? Шуларҙың берәйһен тасуирлап яҙ.*

Ҡунаҡҡа саҡырыусы башта яйлап түргә уҙа, урындыҡҡа ултыра. Ашыҡмай ғына доғалар ҡылалар. Йорт-ерҙең, мал-тыуарҙың именлеген һорашалар. Хатта ул күрше булһын, барыбер һорашалар. Шулай тейеш. Мин бының буш йола ғына түгеллеген бары үҫкәс аңланым. Эйе, ҡунаҡҡа саҡырыусы һинең донъяң имен, кәйефең урынында икәнен үҙ ҡолағы менән ишетергә, үҙ күҙе менән күрергә тейеш. Сөнки күңеле китек әҙәмдә ҡунаҡҡа йөрөү ҡайғыһы булмауы ихтимал. Шуны ла әйтергә кәрәк: беҙҙең ауыл кешеләре, туған-тумасанан тыш, дәрәжәгә, абруйға, мөлкәткә ҡарабыраҡ аралаша.(М. Кәрим. «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ».)

*Өҫтәлмә эш:* ҡарабыраҡ һәм ҡараңҡырап формаларының ҡайһыныһы башҡорт теленә хас? Шуларҙың береһен зат менән үҙгәрт.

Ошо типтағы күнегеүҙәрҙе лә <u>өҫтәлмә эш</u> рәүешендә эшләтеп була түгелме ни?

Яңы теманы нығытыу этабында үрҙә әйтелгәндәрҙән тыш, мәғәнәле биремле, мәғәнәле күнегеүҙәр эшләтеүгә лә етди иғтибар итеү мөһим.

*Өйгә эш биреү.* Баланың дәрескә әҙерлеге йәки әҙер түгеллеге өйгә эште дөрөҫ биреүгә лә бәйләнгән. Күп осраҡта өйгә эш дәрестән сығырға звонок булғас ашыҡ-бошоҡ бирелә. Тәнәфескә сығырға звонок яңғырағас, баланың иғтибары тарҡалды. Шау-шыу ваҡытында уҡытыусының һүҙе баланың зиһененә барып етмәй. Шуға күрә өйгә эш биреүҙе дәрестең аҙағына ҡалдырырға ярамай. Яңы теманы нығытыуға күскәс үк, класс таҡтаһының бер мөйөшөнә яҙып, Уҡыусыларға төшөндөрөп, эшләү тәртибе күрһәтелеп бирелә өйгә эш.

Өйгә эштең төрө тураһында ла уҡытыусы етди уйланһын ине. Бөтә класҡа бер тигеҙ (стандарт) өйгә эш биреү үҙен аҡламай. Шуға күрә кластағы уҡыусыларҙың һәләт кимәленә ярашлы өйгә эштең варианттары тураһында ла хәстәрлек күреү мөһим. Бала шәхесен үҫтереүҙә өйгә эште вариантлап биреү үҙен аҡлай.

*Уҡыусыларҙың белемен баһалау.* Дәрестең был этабы ла ныҡлап уйланылмай. Уҡыусының белем кимәле тейешенсә баһаланмай. Баланың өйгә бирелгән эште үтәүе-үтәмәүе лә, яңы теманы үҙләштереү кимәле лә күп осраҡта иҫәпкә алынмай. Дәрестәге ябай әүҙемлек уҡытыусының иғтибарын быуа, күрәһең. Баланың бер тапҡыр яуап биреүе һәм берәгәйле яуап биреүе уҡытыусы иғтибарынан ситтә ҡала. Ябай әүҙемлеккә ҡарап, юғары баһаланған уҡыусылар ҡайһы саҡта күпселекте тәшкил итә. Был инде үҙ сиратында кластағы дөйөм атмосфераны боҙа. Уҡыусыға баһа биреү — киләсәккә баһа биреү ул. Дәрестә баһа ҡуйыу — уҡыусыға ҡарата ил, халыҡ, ватан күҙлегенән сығып үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү ул. Баһа — уҡыусының дәрестә, ғәҙел хеҙмәт көсөн түгеп, эшләп алған эш хаҡы.

* * *

Дәрестең һәр этабы уҡытыусының ижади эшләүен талап итә. Бөгөнгө Башҡортостандың яңы ватансыһы (гражданы) ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Үҙ илебеҙҙә олтан, ҡол булып күп йәшәнек. Башҡорт балаһы ҡырлайсы, баҙарсы батҡағына батырға тейеш түгел. Ул етәксе, ижадсы, иҡтисадсы, хоҡуҡ белгесе, ғалим һәм башҡа шундай һөнәрҙәрҙең береһенә эйә булырға тейеш. Үҙебеҙҙең милләтебеҙҙе үҫтерерҙәй шәхестәр кәрәк. Ул шәхестәр бөгөнгө дәрестә тәрбиәләнә.

## Ҡабатлау дәресенең яҡынса өлгөһө

Ҡабатлау — баланың хәтрендәгеләрҙе нығытыу. Хәтер, психологик берәмек булараҡ, кешене үҫтереүсе шарт булып тора. Үҙ аллы фекер йөрөтөүҙә хәтерҙең эйәреүсе төп сығанаҡ икәнен онотторға ярамай. Хәтерендә ни бар, телмәрендә шул сағыла, артабан үҫтерелә. Хәтер — кешенең кешелеген белдереүсе төп сифат. Хәтер аңға, аҡылға туранан-тура мөнәсәбәтле.

Ҡабатлау һәм нығытыу дәрестәре һәр предмет (фән) буйынса алдан ныҡлап уйланылған, һәр этабы ентекләп эшләнгән булырға тейеш.

Ғәҙәттә уҡытыусылар ҡабатлау дәресен күпселек күнегеүҙәрҙе уҡыусыларға йә күсереп яҙҙырыуға ҡайтарып ҡалдырылар. Быны сәбәбе ябай: ҡабатлау йәки нығытыу дәрестәренең үҙенсәлекле, бигерәк тә, үҫтереүсе методикаһы эшләнмәгән. Дәреслек авторҙары ла үтелгәндәрҙе ҡабатлау материалдарын уҡыу әсбаптарында баланы үҫтереүгә, хәтерен яңыртыуға, телмәрен байытыуға, уҡыусының ижади һәләтенә ынтылыш, көс, сығанаҡ бирерҙәй итеп эшкәртмәйҙәр. Күнегеүҙәр өсөн бирелгән һорауҙар һәм эштәр баланың шәхес һыҙаттарын үҫтереүгә йүнәлтелмәгән. Улар күпселек осраҡта баланың ошо фәнгә ярашлы аңын тулыландырыуға тәғәйенләнгән. Аң кимәлендәге фекер йөрөтөү (эмпирик фекерләү) һәләтенән аҡыл ярҙамында фекер йөрөтөү (ижади фекерләү) баҫҡысына күсеү, күтәрелеү — үстереүле уҡытыуҙың төп бурысы. Ана шул бурыс дәреслектәрҙә лә, дәрестәрҙә лә бойомға ашырылмай. Уҡытыусы — ижадсы. Ошо сифат ныҡлы һынылыш алһын өсөн уҡытыусының үҙенең эшмәкәрлеген үҙгәртеп ҡороу мөһим. Мөһим генә түгел, зарур.

Һәр дәреслек ғәҙәттә туған телдең тәғәйенләнеше тураһында әңгәмә үткәреүҙе күҙ уңында тота. Һәйбәт ниәт, әлбиттә. Әммә ундағы һорауҙар һәм эштәр үтә лә ябай яуап алыуға нигеҙләнгән. Туған телдең мәғәнәһе һәм асылы бала күңеленә барып етмәй, хәтеренә йоғонто яһамай. *Мәҫәлән: 1. Тел нимәгә хеҙмәт итә? 2. Телдең көсөн өҙөктәге ҡайһы юлдарҙан асыҡ күреп була? Тел хаҡында ниндәй мәҡәлдәр, әйтемдәр беләһегеҙ? («Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре» китабын файҙаланығыҙ.) (Әсә теле. 5. 1999,* 5-се *бит); 1. Тел ниндәй хеҙмәт ҡтәй? 2. Башҡорт теле ниндәй телдәр төркөмөнә инә? 3. Башҡорт теленә ҡәрҙәш ниндәй телдәр бар? 4. Һеҙ мәктәптә ниндәй телдәр өйрәнәһегеҙ? (Әсә*

*теле. 6. 2000, 3-сө бит); 1. Башҡорт телендәниндәй халыҡ һөйләшә?.. 9. Беҙгә ни өсөн туған телде өйрәнергә кәрәк? (Әсә теле. 7. 2000, 3-сө бит).*

Тимәк, һорауҙар баланы уйландырмай, бушаҡ мәғәнәһеҙ яуаптарға иҫәп тота. Ана шундай ярым-йорто белем һәм тәрбиә биреү арҡаһында күпме бала туған телдең мәғәнәһен һәм асылын төшөнмәйенсә мәктәп аша үтте икән? Милләттең фажиғәһе шунан түгелме?

Дидактикала ни өсөн? тигән һорау төп урынды алып тора. Был ябай һорау түгел, ә өйрәнеләсәк, үтеләсәк йәки ҡабатлап үтеләсәк темаларҙың, тел күренештәренең йөкмәткеһен һәм мәғәнәһен үҙләштереүҙә төп проблема булып тора. Ана шул күҙлектән сығып ҡарағанда, туған тел тураһындағы күнегеүҙәр өсөн һорауҙар һәм биремдәрҙә бары тик 7-се синыф дәреслегендә генә дидактика талаптарына ярашлы *«Беҙгә ни өсөн туған телебеҙҙе өйрәнергә кәрәк?* тигән һорауға юлығабыҙ. Тимәк, мәктәп дәреслектәрендә «Үткәндәрҙе ҡабатлау» материалы методик яҡтан яңынан эшкәртеүҙе, дидактикаға ярашлы йөкмәткегә килтереүҙе талап итә. Дәреслек авторҙары эшләп еткермәгән дидактик материалды күнегеү кимәленә күтәреү уҡытыусы иңенә төшә.

Һәр күнегеү баланың шәхес булмыштарын, ижади һәләтен, үҙ аллы фекер йөрөтә алыу, үҙанализ һәм үҙбаһа кеүәһен аң һәм аҡыл үҫешен үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуя. Быларҙан тыш, дәреслектәрҙәге күнегеү башҡорт мәҙәниәтенә, рухи донъяһына инеш, сығанаҡ икәнен дә иҫтә тотоу мөһим. Туған телгә үҙ телендә аралаша, ижад итә алыуҙы бурыс, намыҫ, милли үҙаң, рух кеүек кешелек сифаттарынан сығып өйрәтеү зарур. Милләттең бөгөнгө хәле һәм киләсәге талап итә быны.

Дәрестә бала һүҙҙең, һүҙбәйләнештең мәғәнәһен һәм яһалышын, һүрәтләү саралары булараҡ, уларҙың телмәрҙәге вазифаһын һәм асылын үҙ аллы аңлау, төшөнөү кимәленә күтәрелергә тейеш. Был йәһәттән баланың рухи булмышын асып ебәрә алырлыҡ һорауҙар кәрәк. Баланы асырға, хәтерен яңы, мәғәнәле, рухи көс бирерҙәй мәғлүмәттәр менән байытыу мөһим. Түбәндә ҡабатлау дәресенең яҡынса өлгөһөн тәҡдим итәбеҙ. Быны менән автор уҡытыусыға «беҙҙең кеүек эшлә, беҙҙән яҡшыраҡ, мәғәнәлерәк эшлә» тигән теләген дә еткермәксе. Мәҫәлән, 6-сы синыфта тәүге дәрес өлгөһөнә туҡталайык (3-сө бит, 1-се күнегеү).

Темаһы: «Үтелгәндәрҙе ҡабатлау». Инеш.

Маҡсаттары:

— дидактик маҡсаты: бирелгән күнегеүҙә телмәр берәмектәрен, һүрәтләү сараларын табырға өйрәтеү.

— психологик маҡсаты: телмәр берәмектәренең төрҙәрен, һүрәтләү сараларының мәғәнәһен аңларға өйрәтеү, үҙ аллы фекерләү һәләтен үҫтереү.

— тәрбиәүи маҡсаты: туған телгә ихтирам һәм хөрмәт тәрбиәләү.

Дәрестең планы:

1. Күнегеүҙе таҡтаға яҙыу йәки экранға төшөрөү.

2. Тасуири уҡып сығыу.

3. Һүҙлек эше.

4. Күнегеүҙе һүҙ төркөмдәренә тарҡатыу.

5. Һүҙҙәрҙәге хәреф тамғаларына ҡарап, өндәрҙең төркөмдәргә бүленешен билдәләү.

а) Нимә ул хәреф?

б) Нимә ул өн?

в) Өн менән хәрефтең тап килмәгән осраҡтары бармы?

г) Ни өсөн бер һүҙҙә ҡ, ғ, ў, ә икенсе бер һүҙҙә к, г, ү тартынҡылары ҡулланыла?

д) Ни өсөн бер һүҙҙә а, ы, у, о, ә икенсе бер һүҙҙә ә, и, ү, ө һуҙынҡылары ҡулланыла? Үҫтереүле синтез:

6. а) Аҡташ йәйләүе ҡайһы ырыуҙыҡы икән?

б) Ул ырыуҙың башлығы кем булды икән?

в) Ул ырыуҙың символдарын кем белә?

г) Ни өсөн башҡорт ырыуҙарының үҙ символдары булған?

7. Ни өсөн автор тәбиғәтте эс бошорғос итеп һүрәтләй? Был осраҡта артабан әҫәрҙә ниндәй хәл-ваҡиғаларҙы күтәргә мөмкин?

8. Тел ни өсөн кәрәк халыҡҡа?

9. Ни өсөн *туған тел* һәм *урыҫ теле* тип телдәрҙе бүлеп йөрөтөү бар?

10. Әсә теле менән туған тел араһында ниндәй айырма күҙәтелә? Ул төшөнсәләр бер-береһенә ниндәй мөнәсәбәттә тора?

1. Ынйыҡ көн. Эс бошорғос ямғыр яуа ла яуа. Лыстыр кейем һымаҡ ялбыр болоттар, күк көмбәҙен ҡаплап, көнө буйы төнъяҡҡа ағыла. Аҡташ йәйләүенең өҫтө лә, аҫты ла лысма һыуға әйләнгән (Ҡирәй Мәргән. Бөркөт канаты).

2. Тасуири уҡыу: тәүҙә уҡытыусы үҙе уҡый. Унан һуң бер ике уҡыусынан уҡытыла.

3. Һүҙлек эше: *ынйыҡ* — йонсоу, *лыстыр* — һыуланған, һығып алмалы, *лысма* — ҡара лыстыр, сағыштырығыҙ: *лыс һыу*.

4.

| исем | сифат | алмаш | һан | рәүеш | ҡылым | ярҙамлыҡ һүҙҙәр |
|---|---|---|---|---|---|---|
| көн | ынйыҡ | | | күк | яуа | ла |
| ямғыр | эс | | | көмбәҙен | ағыла | лә |
| кейем | бошорғос | | | ҡаплап, | әйләнгән | һымаҡ |
| болоттар | лыстыр | | | көнө буйы | | |
| Аҡташ | ялбыр | | | төнъяҡҡа | | |
| йәйләү | лысма | | | | | |
| өҫ | | | | | | |
| аҫ | | | | | | |

5.

| һуҙынҡылар | | ике өндө белдереүсе хәреф | тартынҡылар | | өнһөҙ хәреф |
|---|---|---|---|---|---|
| ҡалын | нәҙек | | яңғырау | һаңғырау | |
| ы, о, а, у | ө, э, е, ү, ә | й+а=я | у/v, й, б, н, р, ғ, м, л, ҙ, г, ү/v | ҡ, к, с, ш, т, һ, п, ҫ | ь |

а) Өндөң яҙыуҙағы тамғаһы.

б) Хәрефтең телмәрҙәге яңғырашы.

в) Өн менән хәрефтең тап килмәгән осраҡтары ла бар. Мәҫәлән: ике хәрефтән торған өндәр бар (я, е, ё, ю) ў, ү өндәре һуҙынҡы урынында ла килә, тартынҡы урынында ла килә. Шулай уҡ *ватан* тип яҙабыҙ, *ўатан* тип уҡыйбыҙ, *бабай, әбей* тип яҙабыҙ, *бавай, әвей* тип һөйләйбеҙ.

г) ў, ҡ, ғ — ҡальш һуҙынҡылар менән килеүсе тартынҡылар, ү/үе/, к, г — нәҙек һуҙынҡылар менән йәнәш ҡулланыла телмәрҙә.

д) Ҡалын әйтелешле һүҙҙәрҙә а, ы, у, о, нәҙек әйтелешле һүҙҙәрҙә ә, и, ү, ө, э, е һуҙынҡылары ҡулланыла.

6. а) Аҡташ йәйләүе тамъян ырыуының йәйләүе.

б) Тамъян ырыуының башлығы — Шаҡман.

в) Тамъян ырыуының символдары: төп тамғалары: С, |, < — ярым ай, тура һыҙыҡ, кәкерсәк; ораны — Тутыя, ҡошо — бөркөт, ағасы — өйәнке.

г) Һәр ырыуҙың үҙ ере, үҙ биләмәһе булған. Башҡа ырыуҙар менән бутамаҫ өсөн һәр ырыуҙың үҙ символдары булған.

7. Әҫәргә инеш өлөшөн автор эс бошорғос итеп һүрәтләй, сөнки тамъян ырыуын бер урындан икенсе урынға күсенгән саҡта бәләҡазалар эҙәрлекләй. Тәбиғәт күренеше ана шуға ишара.

8. Тел үҙ-ара аралашыу, халыҡтың тарих хәтерен, мәҙәниәтен киләсәк быуынға тапшырыу өсөн кәрәк.

9. Һәр халыҡтың үҙенсә аралашыу теле була. Беҙҙең туған телебеҙ — башҡорт теле. Урыҫ теле — урыҫ халҡының теле.

10. Әсә теле — әсәйем һөйләшкән ерле һөйләш теле. Туған тел — һәр һөйләшкә ҡараған башҡорттарға аңлайышлы итеп эшкәртелгән башҡорт әҙәби теле.

Ҡабатлау дәрестәрен һәр уҡытыусы үҙенсә ойоштора ала. Әммә уны ябайлаштырырға ярамай. Ҡабатлау дәрестәре баланың белем кимәлен байытһын, хәтерен яңыртһын.

## Әҙәбиәт дәрестәре —
## бала шәхесен үҫтереүсе сара

Әҙәбиәт дәрестәре балала әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡыуға теләк, ынтылыш тәрбиәләргә тейеш. Был иң мөһиме. Был сара балала ижади һәләттең асылып китеүенә тәүге баҫҡыс булып тора. Әҙәби нәфис һүҙгә, туған телдең һүрәтләү сараларына ҡыҙыҡһыныу уятыу әҫәрҙе уҡыуға теләктән башланалыр, минеңсә. Бөгөнгө көндә бала белемде үҙаллы эҙләп табырға, өйрәнергә, төпсөнөргә, тикшеренергә тейеш. Белем биреүҙең дөйөм Рәсәй уҡыу планында милли телдәрҙе, милли мәҙәниәтте, сәнғәтте өйрәнеү өсөн сәғәттәр һаны кәмегәндән кәмей бара. Шуға күрә баланы үҙаллы белем алырға өйрәтеү зарур. Үҫтереүле уҡытыу һәм уҡыу эшмәкәрлеге теориялары ла үҙенә тәғәйен белемде бала үҙенең тырышлығы, эшмәкәрлеге аша алырға тейешлекте алғы планға ҡуя.

Әҙәбиәт — рухи хазиналар даръяһы. Ана шул даръяның, исмаһам, бәләкәй генә бер тамсыһын бала үҙ күсө, үҙ ынтылышы, үҙ теләге менән тәмләп ҡарарға хаҡлылыр, моғайын.

Баланы әҙәби әҫәргә ылыҡтырыу юлдары бик күп төрлө. Шуларҙың бер нисәһен әйтеп үтергә мөмкин:

— әҫәрҙең иң ҡыҙыҡ урынын бер аҙ уҡып, кинәт кенә туҡтау. Әҫәрҙәге артабанғы хәл-ваҡиғаларҙың дауамын, сиселешен уҡыусы үҙе эҙләп табып уҡыясаҡ;

— әҫәрҙең (мәҫәлән, «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» һ.б.) ниндәй мәғәнә аңлатыуын яҙып килергә;

— теге йәки был әҫәрҙән бер нисә фразеологик берәмекте күсереп яҙырға, мәғәнәләрен аңлатырға;

— Зәйнәп Биишева үҙенең «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәрендә ни өсөн «Ялғандың бото ҡыҫҡа» тигән әйтемде ҡулланған? Шуның мәғәнәһен аңлатып яҙып килергә;

— Үҙ исемеңде мәңгеләштереү төшөнсәһен нисек аңлайһығыҙ? Был хаҡта яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә ни тиҙәр (мәҫәлән, Ф.Исәнғолов «Хәмит күпере», З.Биишева «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» һ.б.)?

— Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романында Гөлйөҙөмдөң Айбулатҡа яҙған хатын (аңлатмаһын түгел) һүҙмә-һүҙ күсереп яҙып килергә;

— Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев «Башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ» тигән. Нимәләр улар, һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Шул турала сығыш яһарға әҙерләнеп килегеҙ;

— Нимә ул рух, башҡортлоҡ? Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми үҙенең «Урал» поэмаһында был төшөнсәләрҙе нисек тасуирлай? Шул турала сығыш яһарға әҙерләнеп килергә;

— «Уҡырға, уҡырға, уҡырға» тип әйткән В.И.Ленин. «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк» тип яҙған Мифтахитдин Аҡмулла. Был өндәмәләрҙең ҡайһыһы алдан әйтелгән? Шул хаҡта әңгәмә үткәрергә әҙерләнеп килегеҙ һ.б.

Әлбиттә, һәр уҡытыусы үҙ класындағы балаларҙың белем кимәленә, мәктәп китапханаһында әҙәби әҫәрҙәрҙең булыу-булмауына ҡарап, уҡыусының ғаиләләге йәшәү шартынан сығып, уларҙы әҙәби әҫәргә ылыҡтырыу юлдарын үҙенсә һайлай, эҙләй. Үрҙәге өлгө был тәңгәлдә йүнәлеш биреү ниәтендә генә килтерелде. «Шул әҫәрҙе уҡы», «Быны уҡы» тип өгөтләүгә ҡарағанда, аныҡ маҡсатҡа ярашлы, баланың үҙаллы эҙләнеүен талап иткән ябай ғына эштәр аша уҡыусы үҙ теләге, эске рухи булмышы, сәме менән яйлап-яйлап әҙәби әҫәргә ылыға барасаҡ.

Әҙәби әҫәргә ҡыҙыҡһыныу уятыу үҫтереүле уҡытыу принциптарына нигеҙләнеп үткәрелгән дәрестәр ҙә мөһим роль уйнай.

Мәсәлән, был йәһәттән Республика башҡорт лицей-интернаты уҡытыусыһы Мәүлихә Фәрит ҡыҙы Дәүләтшина үткәргән бер дәрескә ҡыҫҡаса туҡталып үтәйем. Ғәжәп ябай, ғәжәп бай йөкмәткеле дәрес ине был. Зәйнәп Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәтен алдан уҡып килергә ҡушылған булған. Әҫәрҙе өйрәнеүгә арналған дәрестең ҡайһы бер фрагменттарына, йәғни дәрестең этаптарына үҙемдең ҡараштарымды, тәьҫораттарымды, методик яҡтан һығымталарымды әйтеп китмәксемен.

З.Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәте 8-се синыфта өйрәнелә. Әҫәр бай йөкмәткеле, образдар системаһы ла, уларҙың әҫәрҙәге урыны ла уҡыусыларҙы шаҡтай уйландырырлыҡ. Программа был әҫәрҙе өйрәнеүгә ике сәғәт ваҡыт бүлә. Саф, таҙа, фәҡәт башҡорт балалары булған, үҙ туған телдәрендә яҡшы аралашҡан уҡыусыларҙан ғына торған башҡорт мәктәбендә ике сәғәт эсендә әҫәрҙе өйрәнеү, үҙләштереү, уның мәғәнәһенә төшөнөү буйынса байтаҡ эштәрҙе атҡарып булалыр. Быға һис кенә лә шигем юҡ. Ә бына башҡорт теле менән әҙәбиәте аҙнаһына өс сәғәт өйрәнелгән ҡала мәктәптәрендә һуҙмаңлап эшләргә беҙҙең ваҡыт юҡ. Һәр уҡытыусы үҙенең уҡытыусылыҡ яуаплығынан, ижади булмышынан, педагогик оҫталығынан сығып, әҙәби әҫәрҙәрҙе өйрәнеүҙе үҙенсә ойоштора.

Дәрес инеш һүҙҙән башланып китте. Уҡытыусының инеш һүҙе әҫәргә анализ биреү буйынса төп йүнәлеште асыҡлау, дәрестең проблемаһын ҡуйыу тураһында барҙы. Проблеманы дөйөм класс менән билдәләү отошло. Дәрестә инеш һүҙ — дәрестең ойошторолошона, балаларҙың эшмәкерлегенә йүнәлеш биреү. Уҡытыусының инеш һүҙе һәр дәрестә булырға, өҫтөнлөк итергә мөмкин. Инеш һүҙ уҡыусыларҙы эшмәкәрлеккә ылыҡтыра.

Дәрестең маҡсаты ла бик үҙенсәлекле:

— әҫәргә анализ яһарға өйрәтеү;

— әҫәрҙәге образдар ярҙамында баланың ижади фекерләү һәләтен үҫтереү;

— әҫәрҙең мәғәнәһе аша баланың рухи булмышын тәрбиәләү.

Әйтергә кәрәк, үҫтереүле уҡытыу принциптарына, белем биреүҙе яңыртыуға ярашлы, бөгөнгө уҡытыу технологияһы һәм психодидактика талаптарынан сығып, дәрестең маҡсаты бала шәхесен үҫтереүсе төп өс үлсәмде үҙ эсенә ала: белем биреү, үҫтереү һәм тәрбиәләү. Был үлсәмдәр үҙ-ара бик тығыҙ бәйләнгән. Улар бер-береһен тултырып, байытып килә. Айырылғыһыҙ был психодидактик үлсәмдәр дәрестең һәр этабында ла тығыҙ бәйләнештә үҙ урынын алып тора.

Артабан уҡытыусы Ғ.Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһы буйынса уҡыусылар менән әңгәмә үткәрҙе. Әңгәмәнең үҙәгендә шундай проблемалы һорауҙар өҫтөнлөк алды:

— Ҡем ул Әхмәт? Ул образдың әһәмиәте нимәлә?

— Иғтибар менән уҡығыҙ. Түбәндәге юлдарҙан беҙ кешенең яңырыуын, яңынан тыуыуын күрә алабыҙмы?

«Мин уйланым, таяу табырмын, тип,
Һөйәтергә емерек өйөмдө».
«Беҙ шоңҡарҙар инек,
лагерь үтте
Һәм үҙгәрттек Балтик ағышын.
Беҙ шоңҡарҙар инек,
хәҙер инде
*Ҡул сыныҡты оя төҙөр*гә,
*Ул йорт ҡора...»*

— «Шоңҡар» поэмаһының мәғәнәһе нимәлә?

Бындай әңгәмәнең төп маҡсаты — кластағы уҡыусыларҙың белемдәрен тигеҙләү (выравнивание знаний) бөгөнгө дәрестең мөһим бер этабы булып тора.

Зәйнәб Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәтен өйрәнеүҙең проблемаларын билдәләү алдынан уҡытыусы һүҙлек эше үткәрҙе. Әйтергә кәрәк, һәр яңы теманы үтер алдынан һүҙлек эшенә етди иғтибар биреү мөһим. Һүҙлек эше дәрестең айырылғыһыҙ бер өлөшө. Бында ла уҡытыусы өсөн уйланырлыҡ урын бар. Ҡала мәктәптәрендә күп осраҡта теле русса асылған, әсә телендә бик үк иркен аралаша алмаусы, йә булмаһа, халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешендәге һүҙҙәрҙе, төшөнсәләрҙе аңлап етмәгән уҡыусылар белем ала. Әгәр һөйләмдә, абзацта, текста бала өсөн аңлашылмаған бер генә һүҙ булһа ла, әҫәрҙе үҙләштереү камиллығына ул өлгәшә алмаясаҡ. Ауыл уҡыусыһына таныш булған лексик берәмек ҡала балаһына бөтөнләй ят һүҙ иҫәбенә инергә мөмкин. Мәҫәлән, М.Ф.Дәүләтшина үҙенең дәресендә түбәндәге һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыу буйынса эш алып барҙы: *ирәбе, ҡаҡса, баҙыҡ, һандыҡ, ҡомартҡы, ағас ижау, мөгөҙ борғо, аҡыҡ, йүгән, ҡойошҡан, ҡомолдороҡ, ҡын, һөлөк, яйла, татыр(лы), йыраҡа, кәзинәк, дәрүиш* һ.б. Һүҙлек эше күп осраҡта лексик берәмектең мәғәнәһен уҡыусыларҙың үҙҙәренән әйттереү һәм һәр һүҙҙе уларҙың телмәрендә әүҙемләштереү юлы менән үткәрелә. Һәр эштә балаларҙың үҙҙәрен ҡатнаштырып, һүҙҙең мәғәнәһен һәм асылын класс менән күмәкләп асыҡлау

отошло. Береһе әйтмәһә, икенсеһе әйтәсәк, береһе белмәһә, икенсеһе беләсәк. Класс абруйына, класс көсөнә таяныу мөһим.

Башта әйткәнемсә, дәрестә өйрәнеләсәк хикәйәтте балалар алдан уҡып килгән. Шуға күрә уҡытыусы балаларҙың иғтибарын дәрестең проблемаһын билдәләүгә йүнәлтә.

— Үткән дәрестә беҙ Ғәлимов Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһын өйрәндек. Ҡатмарлы һәм тәрән мәғәнәле яҙмыш менән осраштыҡ. Әҫәр беҙҙе нимәгә өйрәтә?

— Тормошта дөрөҫ йәшәргә өйрәтә.

— Ә нимә ул дөрөҫ йәшәү?

— Әгәр һин халҡыңдың улы икән, һинең эшең, йәшәүең халҡыңдың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтерергә тейеш түгел.

— Тәртипле йәшәргә тейешбеҙ.

— Һәр кем кеше булып ҡалырға тейеш.

— Һәр кем үҙ тормошон үҙе биҙәргә тейеш.

— Ҡылған эшең аҙаҡ үкенерлек булмаһын.

— Зәйнәб Биишеваның «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәтен өйрәнеүҙең дөйөм проблемаһын нисек билдәләр инегеҙ?

— Тормошта үҙ урыныңды тап.

— Үҙеңдән һуң яҡшы һүҙ ҡалһын.

— Ғүмереңдә яҡшы эҙ ҡалдыр.

— Кеше хөрмәтенә лайыҡ бул.

*Уҡытыусы:* Бына күпме проблемалар тәҡдим итәһегеҙ. Хәҙер шуларҙың ҡайһыныһын төп проблема итеп алабыҙ?

— Барыһын да шул көйө ҡалдырайыҡ.

— Ни өсөн?

— Мәғәнәләре яғынан улар бер-береһенән айырылмай.

— Улайһа, шул проблемаларҙан сығып әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, образдарға үҙегеҙҙең баһаларығыҙҙы бирергә әҙерләнегеҙ. Шул хаҡта уйларға һеҙгә бер аҙ ваҡыт бирелә.

Дәрестә балаға уйланырға мөмкинселек биреү кәрәк. Ҡуйылған проблемаларҙың хәл ителеше хаҡында бала үҙ уйында үҙ баһаһын, үҙ анализын тәртипкә килтереү өсөн ваҡыт биреү дәрестең үҙаллы бер өлөшө тип ҡарала.

— Хәҙер иғтибарығыҙҙы шундай һорауға йүнәлтегеҙ. Башҡорттарҙа өйҙөң иң түрендә ни өсөн ҙур һандыҡ булған? Нимә ул һандыҡ?

— Өйҙөң ҡото булырҙай әйберҙәрҙе шунда һаҡлағандар.

— Һәр төрлө ҡомартҡы, шәжәрә, кейәүгә китер ҡыҙҙың, бала табыр килендең бүләктәре шунда һаҡланған.

— Изге урын. өлкән быуын кешеләр үҙҙәренең үлемтектәрен дә шул һандыҡҡа йыя барған.

— Изге урын. Эсендәге ҡомартҡыларҙың серен өйҙөң өлкән быуын кешеһе йәш быуынға васыят итеп тапшыра килгән.

— Мираҫ итеп ҡалдырған.

— Ә васыят менән мираҫ араһында ниндәй айырма бар? Ҡем нисек уйлай?

— Йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, тарихты, йәшәү рәүешендәге изге, күркәм ғәҙәткә әйләнгән үрнәктәрҙе артабан да дауам итергә кәрәклекте әйтеп ҡалдырыуҙы васыят тип йөрөтәләр.

— Халҡыбыҙҙың бөтә булған рухи байлығы килер быуындар өсөн мираҫ итеп ҡалдырылған.

— Тимәк, васыят менән мираҫ төшөнсәләре бер-береһенән нимәһе менән айырыла?

— Васыят — әйтеп ҡалдырыу, мираҫ — ата-бабаларҙан ҡалған рухи байлыҡ.

Уҡытыу, белем биреү эшендә ваҡ нәмә юҡ. Һәр осраҡҡа, балаларҙың телмәренә, телмәр йөкмәткеһенә етди иғтибар биреү мөһим. Васят менән мираҫ һүҙҙәренең мәғәнәләрен билдәләүҙә лә балаларҙың үҙҙәрен ылыҡтыра. М.Ф.Дәүләтшина бер нәмәгә инанған: бала күңелендә, хәтерендә үҙе тапҡан белем тотороҡло һаҡлана.

— Ҡомартҡының әһәмиәте нимәлә?

— Ҡомартҡы — тарих хәтере.

— Ҡомартҡы хәтерҙе яңырта, байыта.

— Хәтергә ҡанат ҡуя, үҫтерә.

— Хәтерҙе уята.

Балаларҙың ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына яуаптары һәр кемдең үҙаллы уйлауын, фекер йөрөтөү үҙенсәлеген күрһәтә. Синыфта ауыҙ йомоп, онотолоп ултырған бала булырға тейеш түгел. Проблеманы хәл итеүҙә һәр береһе үҙ өлөшөн индерһен. Синыфтың әүҙемлеге — балаларҙың, үҫеш кимәле. Дәрестә һәр бала асылып китә алһын.

— Ҡем ул Хасбулат олатай?

— Оло быуын кешеһе.

— Тормош тәжрибәһен туплаған кеше.

— Халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларҙы һаҡлаусы кеше.

— Уның һөйләгән һүҙе — беҙҙең быуынға әйтер васыяты.

— Ғөрөф-ғәҙәт, йолалар дөрөҫ йәшәргә өйрәтә. Хасбулат олатай шул дөрөҫлөк һағында торған кеше.

— Тарих хәтерен һаҡлаусы.

— Тарихи ҡомартҡыларҙы йәш быуынға аманат итеп тапшырыусы.
— Нимә ул аманат?

Бына тағы уҡыусының телмәрендә аманат тигән һүҙ килеп сыҡты. Синыфтағыларҙың барыһы ла беләме һуң был төшөнсәне? Уҡытыусыны шул уй борсой. Уҡыусы йә уҡытыусы әйткән һәр һүҙ һәр кемгә аңлайышлы булырға тейеш. Дәрес — белем биреү барышы. Шул көйгә һалынған ағымды мәғәнәһе таныш булмаған һүҙ, төшөнсә, термин боҙа. Аңлашылмаған һүҙ менән дәрестең мәғәнәһен кәметергә, үҙгәртергә мөмкин. Шуға күрә уҡытыусы, синыфтың дөйөм хәленән сығып, һәр һүҙгә асыҡлыҡ индерергә тырыша.

— Аманат — ул ҡомартҡы.
— Үтәлергә тейеш һүҙ, васыят.
— Һандыҡтағы әйбер — ул да аманат. Һаҡлау әйбере.
— Хасбулат олатай халыҡ тарихының үлемһеҙлеген һаҡлаусы кеше.
— Ни өсөн Хасбулат олатай «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәтен һөйләй?
— Тормошта дөрөҫ йәшәргә өйрәтер өсөн.
— Үҙеңә яуаплы ҡарау өсөн.
— Тормошоң, эшләгән эшең кеше көлдөрөрлөк булмаһын өсөн.
— Ҡем ул Өйрәнсек?
— Үҙ эшенең оҫтаһы булған кеше.
— Ябай көршәктәр яһаусы.
— Ул яһаған көршәктәр тиҙ ватыла.
— Уның көршәктәре һыу ташырға уңайһыҙ булған, ауыр булған.
— Халыҡ уның эшенән ҡәнәғәт булмаған.
— Үҙ эшен күңел һалып башҡармай. Шуға, унан көлөп, халыҡ уға Өйрәнсек тип исем ҡушҡан.
— Үҙ нәфсеһенән сығып ҡарағанда, Өйрәнсек үҙенең маҡсатына ирешәме?
— Үҙ маҡсатына ирешә.
— Ҡөршәктәрҙе камиллаштырмай.
— Ҡөршәктәр йышыраҡ ватылған һайын ул һөйөнә, сөнки һәр ватылған көршәк уның өсөн табыш килтергән.
— Ватылған көршәк Өйрәнсекте байытҡан. Ҡыҙҙарға һыу ташыр өсөн яңынан-яңы көршәктәр кәрәк булған.
— Өйрәнсек йөҙөндә беҙ кемде күрәбеҙ, ҡайһы синыф вәкилен күрәбеҙ?
— Өйрәнсек бары тик үҙ байлығын арттырыу яғын ҡараған.
— Уның төп маҡсаты — байлыҡ туплау.

— Ватылған көршәк — халыҡты бөлгөнлөккә төшөрөү.

— Уға күңел тарлығы хас.

— Алама көршәктәре менән кешеләрҙең күңелен йәмһеҙлеккә, тупаҫлыҡҡа күнектерергә тырыша.

— Ул кеше ижадын, хеҙмәтен үҙләштереүсе, иҙеүсе синыф вәкиле.

— Намыҫ, бурыс, ижад кеүек теләктәр Өйрәнсеккә хас түгел.

— Тормош мәғәнәһен, йәшәү мәғәнәһен өйрәнсек нисек аңлай?

— Көршәктәр ватылһа, кеше уға килә. Һуңғы тинен түләп яңы көршәк ала. Кешенең бөлгөнлөккә төшөүенә ул кинәнгән. Ул ябай халыҡ вәкиле түгел, Һөнәрсе уға: "Мин иҫән саҡта көршәк яһауҙың серҙәрен белеп ҡал", — тип әйткән. Өйрәнсек бөгөнгө көнө менән йәшәй. Уның киләсәге юҡ.

— Ул киләсәк тураһында уйлаймы ни?

— Үҙ киләсәген ҡайғырта.

— Үҙ исемен мәңгеләштерергә тырыша.

— Һөнәрсенең намыҫын бысратырға тырыша.

— Данын халыҡ күңеленән алып ташларға тырыша.

— «Һөнәрсе» тигән яҙыу урынына «Өйрәнсек» тигән тамға ҡуйып, үҙенең данын кеше араһында тарата.

— Кешеләр уға хатта ышанып та ҡуйған. Өйрәнсектең ямանлыҡтарын тиҙерәк оноторға тырышҡандар.

— Өйрәнсекте хатта ғәфү иткән.

Иғтибар иткәнһегеҙҙер, моғайын. Дәрестә һәр уҡыусы нимә булһа ла әйтеп ҡалырға, шуның менән бергә үҙенең «мин»ен күрһәтергә, асылып китергә тырыша. Синыфта йомолоп ултырған уҡыусылар юҡ. Дәрестә уҡытыусы бары тик уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген көйләүсе, яйға һалыусы сифатында ғына ҡатнаша. Балаларҙың әүҙемлеге дәрестең сифатын күтәрә.

— «Ялғандың бото ҡыҫҡа» тигән әйтемде нисек аңлайһығыҙ?

— Шул әйтемдең мәғәнәһен аңлатығыҙ.

— Өйрәнсек үлгәс, уның ҡәбере өҫтөнә, аҡ мәрмәргә «Иң бөйөк баҫалҡы кеше — Өйрәнсек» тип алтын хәрефтәр менән яҙып ҡуйғандар. Ҡәбере өҫтөнә ҡупмаҫлыҡ итеп көршәктең береһен беркетеп ҡуйғандар. Йылдар үткәс, Өйрәнсекте иҫкә алырға ҡәбере янына халыҡ йыйыла. Улар көршәктә ниндәйҙер үҙгәреш күрә. Йылдар үтеү менән, ҡырыҫ елдәр көршәктәге «Өйрәнсек» тигән яҙыуҙы юя. Уның урынына хәҙер «Һөнәрсе» һүҙе ҡан ҡыҙыл төҫ менән балҡып тора. Кешеләр «аһ» итә. Өйрәнсектең хәйләһе фашлана. Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да

беленер, ти халыҡ. «Ялғандың бото ҡыҫҡа» тигән әйтем шул замандарҙан тороп ҡалған.

— Кеше бәхетен урларға ярамай.

— Кеше эшен үҙендеке тип күрһәтергә ярамай.

— Алдаҡсы ҡасан да булһа фашлана.

— Кешеләрҙе алдап йәшәү — мәғәнәһеҙлек, ерәнес.

— Кешене алдау — илде алдау.

— Алдап йәшәү — енәйәт, әҙәпһеҙлек.

— Ярлы йәшәһәң дә күңелең ярлы булмаһын.

— Ә хәҙер, уҡыусылар, шундай һорауға яуап биреп ҡарайыҡ: «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәренең мәғәнәһен кем нисек аңланы?

— Һәр кем үҙ эшен намыҫ менән эшләргә тейеш.

— Эшеңде һәр саҡ яратып башҡарырға кәрәк.

— Оҫталыҡҡа ынтылыу кәрәк.

— Өйрәнеүҙең сиге юҡ.

— Кеше үҙ һөнәренә үлеп киткәнсә өйрәнергә тейеш.

— Мәүлихә Фаритовна, әйҙә Һөнәрсе тураһында ла һөйләшәйек.

— Һөнәрсенең күңел донъяһын, рухи байлығын тасуирлап бирергә барығыҙ ҙа әҙерме һуң?

— Әҙербеҙ, әҙербеҙ!

— Бик һәйбәт. Мин һеҙгә ышанам.

— Уҡыусылар! Һөнәрсе ябай ғына образ түгел. Ул юғары аңға, аҡылға эйә булыусы ябай халыҡ вәкиле, Һөнәрсе менән Өйрәнсек образдарында автор донъяны, тормошто, йәшәүҙе аңлауҙа, танып белеүҙә ике ҡапма-ҡаршы ҡостөң, ҡараштың бәрелешен тасуирлай. Ғәҙеллектең еңеүен, тантана итеүен данлай. Һөнәрсе образына халыҡтың ижади ҡарашы, ҡомары һалынған. Һөнәрсенең оҫталыҡҡа ниндәй юлдар менән үҫеүен, ижадта балҡыуын һүрәтләп икенсе дәрескә инша яҙып килерһегеҙ.

Уҡытыусы ни өсөн Һөнәрсе образын асып биреүгә махсус рәүештә туҡталманы? Быны ул белә-гүрә шулай эшләне. Был да үҙенә күрә балаларҙы әҙәби әҫәргә ылыҡтырыуҙың, йәлеп итеүҙең бер алымы. Улай ғына ла түгел, ә үҫтереүле уҡытыуҙың иң мөһим ысулы. Был осраҡта уҡыусы мотлаҡ уйланасаҡ. Ни өсөн Һөнәрсе образы тураһында дәрестә айырым һөйләшеү булманы? Ә бит уҡыусы иң алдан ошо образға нығлап әҙерләнгәйне. Бала уйлана. Ул Һөнәрсе образына битараф түгел. Уйланған бала үҙенең иншаһында Һөнәрсе образының эске донъяһына, рухи мөхитенә, күңеленә үтеп инәсәк. Уҡытыусы ана шуға иҫәп тота.

— Уҡыусылар! Телевизорҙан мин бер кино ҡарағайным. Унда итальян халҡының мәшһүр скрипка яһау оҫтаһы Страдивари тураһында, уның оҫталыҡҡа нисек ирешеүе тураһында һүҙ бара. Фильмдың исемен онотҡанмын (юрамал әйтә).

— Ә мин ҡараным.

— «Визит к менотавру».

— «Путь к менотавру».

— Мин дә ҡараным. Мин дә.

— Бик һәйбәт. Страдивари яһаған скрипкаларҙы ла уның өйрәнсектәре йә үҙ исемдәрен, йә власть башлығының (королме, батшамы) фамилияларын яҙып ҡиммәт хаҡҡа һатырға тырышалар. Шул юл менән халыҡ хәтеренә, тарихҡа инеп ҡалырға иҫәп тоталар. Әммә ысын ижадсының, һөнәрсенең изге эше, камиллыҡҡа ынтылыу өлгөһө халыҡ хәтеренән, тарих битенән юйылмай. Киреһенсә, сал тарих төпкөлөнән бер моң килә. Страдивариҙың үҙ ҡулы, үҙ йөрәгенең ҡушыуы буйынса бар күңеленең хисе, ялҡыны һәм дәртен һалып эшләгән скрипканан ағылған моң ул. Бөйөк оҫта яһаған скрипка, бөгөнгө көндә мираҫ булып, ҡомартҡы булып, бары тик музейҙарҙа һаҡланып ҡалған. Шул уйын ҡоралынан ағылған ярһыу ҙа, һағышлы ла көй, камиллыҡтың өлгөһө булған моң кешелек донъяһына ғәҙеллектең, үлемһеҙлектең гимны булып яңғырай. Ысынлап та, ул моң үлемһеҙ. Ул үҙ һөнәрсеһенең исемен яҡты йондоҙ итеп күккә сөйҙө...

Уҡытыусы дәресендә үтелгән теманы дөйөмләштерҙе. Үҫтереүле синтез яһаны. «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» хикәйәтенең проблемаһын, донъя мәҙәниәте проблемалары менән бәйләп, дөйөмләштерҙе.

— Хәҙер, уҡыусылар, бөгөнгө дәрескә ҡыҫҡаса ғына йомғаҡлау яһайыҡ. Түбәндәге һорауҙарға яуап биреп ҡарайыҡ.

— Ниндәй проблемаларҙы хәл иттек? Ни өсөн?

— Бөгөнгө дәрестә нимәләр белдегеҙ? Ул белгәндәрегеҙ тормошта һеҙгә кәрек буласаҡмы? Ни өсөн?

— Әҫәр буйынса ниндәй һығымта яһап була?

— Әҫәрҙең мәғәнәһен кем нисек аңланы?

— Был әҫәрҙе өйренеү кәрәкме? Ни өсөн?

— Һеҙҙең рухи хәлегеҙҙә ниндәй үҙгәрештәр булды? Ни өсөн?

Уҡыусыларҙың яуаптарына туҡталып тормайым. Был үҙе айырым мәҡәлә талап итә. Дәрес тамамланды. Тәнәфескә саҡырып ҡыңғырау ҙа яңғыраны. Әммә уҡыусылар класты ташлап коридорға сығырға ашыҡмайҙар. Улар һаман да әҫәр мөхитендә йәшәйҙәр.

Уҡытыусыларына төрлө-төрлө һорауҙар бирәләр. Мәүлихә Фәрит ҡыҙы «Ә һин үҙең нисек уйлайһың?» тип балаларҙың үҙ баһаһын, үҙ анализын үҫтерергә тырыша.

«Һөнәрсе менән Өйрәнсек» ябай ғына хикәйәт түгел. Башҡорт хәтерен яңыртып тороусы, рухи көс биреүсе, йәштәргә боронғо йәшәү рәүешен һүрәтләүсе, боронғолотоң тарихын аманат итеп ҡалдырыусы әҫәр.

М.Ф.Дәүләтшина һәр дәресте, үҙенең шәхси темаһынан («Уҡыусыларҙың, әҙәби ижад һәләтен үҫтереү») сығып, шуға ярашлы ойоштора. Баланы әҙәби әҫәргә ылыҡтырыу — уны әҙәби ижадҡа әйҙәүҙең бер төрө. Һүрәтләү саралары аша, хис-тойғо аша, әҫәрҙәге образдарға ентекле анализ биреү аша бала күңелендә, рухи булмышында ниндәйҙер кимәлдә булһа ла һынылыш, үҙгәреш барлыҡҡа килә. Ана шуны күҙ уңында тотоп дәресте ойоштороу мөһим. Әҙәбиәт дәрестәре — бала шәхесен үҫтереүсе сара.

## Дәрес төрҙәре

Ғәҙәттә, план төҙөгәндә дәресте бер нисә этапҡа бүлеү ныҡлы урын алған. Уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһендә лә, методик әҙәбиәттә лә дәрестең һәр этабы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Дәрес планын ҡарағанда, дәрестә ултырғанда мәктәп етәкселәре лә, мәғариф өлкәһендә эшләүселер ҙә быға күнегеп, ғәҙәтләнеп киткән. Иғтибар игегеҙ: ана шул этаптар I һәм XI кластар өсөн дә бер тамсы һыу кеүек оҡшаштар. Дәресте шулай этаптарға бүлеү кемгә һәм нимәгә кәрәк? Дәрес өсөн ул бик мөһимме ни? Ниңә шуны ҡанунлаштырғандар? Бындай һорауҙар бар һәм артабан да ундай уй-ниәт тыуырға мөмкин. Шуның өсөн ҡыҫҡаса дәрес төрҙәренә туҡталып китәйек.

60-сы йылдарға тиклем[5] (сер түгел, әле лә өҫтөнлек итә) мәктәптә, ғәмәлдә иң ныҡ таралған дәрестең ғәҙәти, йәғни ҡатнаш төрө (русса: комбинированный тип урока) ине. Уға түбәндәге эш төрҙәре хас: өйгә эште тикшереү, яңы материалды аңлатыу, үтелгәнде нығытыу һәм өйгә эш биреү. Күренеүенсә, ғәҙәти дәрестең бер этабында ла баланы үҙ аллылыҡҡа өйрәтеү һәм уны артабан үҫтереү мәсьәләһе хәл ителмәй. Тимәк, дәрес балаға һабаҡ бирмәй.

---

*[5]Бындай циклауҙе М.И. Мәхмутов ҡуя. Ҡарағыҙ: М.И.Махмутов. Современный урок. М., Просвещение. 1981, 91-се бит.*

Ҡыҙғаныска ҡаршы, бындай йөкмәткеле дәрес бөгөнгө уҡыу-уҡытыу системаһында һаман да ныҡлы урын биләй. Ҡайһы бер асыҡ дәрестәрҙә уҡытыусының артистарса ҡыланыштарын һәм балаларҙан ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө эштәр үтәтеүен күҙәтергә мөмкин. Аҙаҡ анализ ваҡытында дәресте, унан да бигерәк уҡытыусыны маҡтайҙар, ана шулай күҙ буяйҙар. Бындай ғәҙәти дәрестә фәҡәт уҡытыусының ғына эшмәкәрлеген, ҡырҡ сүрәттә сағылышын, уйынын (бала-саға уҡытыусы булып уйнай ҙа инде) күреп була. Тимәк, дәрес балаға йоғонто яһамай, тәьҫир итмәй, баланың эшмәкәрлеге күҙәтелмәй.

Дәрестең тәғәйен рәүешен, уның психологик йөкмәткеһен аныҡ билдәләү, тәбиғәтен асыу мөһим. Быға тиклем баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәрҙә лә дәрестең төп билдәләре хаҡында бер ни ҙә әйтелмәй. Мәғлүм булыуынса, дәрестә ике эшмәкәрлек ҡатнаша. Ҡатнаш дәрестәрҙә шул икәүҙең береһе, күҙгә ныҡ бәрелеп торғаны — уҡытыусының эшмәкәрлеге өҫтөнлек итте. Был эшмәкәрлекте дәрестең тышҡы билдәһе тип ҡарарға мөмкин. Ә инде күрер күҙгә әллә ни салынып бармағаны — уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге, һуңғыһы дәрестең эске билдәһе тип алына. Дәрестең уңышын ана шул эске билдә хәл итә. Әгәр уҡыусының эшмәкәрлеге хәл ителмәй, йәғни үҫтерелмәй, икән, дәрескә ҡуйылған маҡсат үтәлмәне тигән һүҙ.

Ҡатнаш дәрестәрҙә бала эшмәкәрлеге, уның әүҙемлеге ниндәйҙер сыбарлыҡ, ялҡытҡыс бер төрлөлөк менән билдәләнде. Мәҫәлән, күнегеүҙе күсереп яҙыу, биремдәрҙең мәғәнәһеҙлеге, ҡағиҙәләрҙе ятлау, уҡытыусы сәйнәп ҡаптырған белемде ҡабатлап һөйләп биреү һ.б. Телгә өйрәтеү методикаларында, психологик әҙәбиәттә яҙылғанса, баланың күнекмәләрен «автоматлаштырыу» тигән төшөнсә, эш алымы ҡулланыла башланы. Әммә бала техник зат, әйбер йә уның йәнһеҙ бер детале түгел. Ул — тере йән, биологик зат, кеше тигән төшөнсә менән атайҙар уны. Кеше һәр яҡлап үҫеүгә тәғәйенләнгән. Шуға күрә бөгөнгө көндә дәрестең йөкмәткеһен үҙгәртеп ҡороу кәрәк.

Әйтәйек, һәр дәрестә өйгә эште тикшереү мотлаҡ кәрәкме ни? өйҙә дәфтәренә яҙып, йәки уҡып килгәнен бала дәрестә ниңә ҡабат уҡырға, йә һөйләргә тейеш? Бындай мәғәнәһеҙ «кире бәйләнеш» (обратная связь) уҡытыусыға нимә бирә? Ундай бәйләнештең уҡыусы өсөн, кластағы башҡа балалар өсөн әһәмиәте бармы? Ниңә һәр дәрес һайын 15-20 минут ваҡытты әрәм итергә? Ниңә әле уҡытыусының бөтә иғтибары һәм эшмәкәрлеге баланың өй эшен

тикшереүгә йүнәлтелә? Был нимә бирә? Балаға ышанмаусылыҡ бәләһе түгелме икән? Ниңә шулай өйрәтеүсе менән өйрәнеүсе араһына яһалма кәртә ҡуйырға? Йәнәһе бел: һин — уҡыусы, мин — уҡытыусы! Миңә нисек оҡшай — шулай эшләйем! Әммә был — педагогикала иҫкергән ҡараш. Әгәр уҡытыусы өйгә бирелгән эшкә оҡшаш материал нигеҙендә баланың фекерен яңыртһа, белгәненә таянып, уҡыусы үҙ алдына яңы белемгә ынтылыр ине. Бик тә булмаһа, уҡытыусы биргән белемде аңлы рәүештә хәтерендә нығытыр, яңы белемгә нигеҙ һалыр ине. Баланың үҫеше (үҙ аллылығы, һәләттәре, ынтылышы) шул тәңгәлдә туҡталмаймы икән?

Әгәр баланың өйгә эште эшләү-эшләмәүен бик белергә кәрәк икән, шуға оҡшаш икенсе эштәр бирергә мөмкин. Телдән яуап алыу урынына өйгә бирелгән эш төрөндәге башҡа миҫалды бөтә класс менән (фронталь) үҙ аллы эшләү хәйерле.

Ғәҙәти дәрестең яңы материалды аңлатыу өлөшө (этабы) ла баланы үҫтереүгә йүнәлеш бирмәй. Фәндең (үҙең уҡытҡан предметтың) һығымтаһын, нигеҙҙәрен балаға «сәйнәп ҡаптырыу» — методикала иҫкергән алым. «Әҙергә бәҙер булыу» психологияһынан баланы арындырырға ваҡыттыр инде? Әҙер белемгә ҡарағанда, үҙең бөртөкләп йыйған белем ҡәҙерлерәк түгелме ни? Дәрестең был этабында ла бала үҫтерелмәй. Уҡытыусының һөйләгәне бер ҡолағынан инһә, икенсеһенән сығып китә. Ана шулай балала аңышлыҡ тәрбиәләнә. Ә «аңыш» нимә була һуң? Аңыш тип үҙ аллы фекерләй, уй төйнәй алмаған, зиһенен туплау һәләтенән мәхрүм кешегә әйтәләр. Тимәк, ғәҙәти дәрестең был этабында ла белем алыуҙа баланың үҙ аллылығына кәртә ҡуйыла. Аңлатыу менән аңлатыу араһында ла айырма бар. Тормошта ла бит бер үк хәл-ваҡиға тураһында берәүҙең һүҙе иҫтән сыға, тиҙ онотола, икенсенеке — уйға һала, хәтерҙә ҡала. Аңлатыу кәрәк, әлбиттә. Әммә баланы эшмәкәрлеккә өйрәтеүҙә, эшмәкәрлегенә йүнәлеш биреүҙә, фекерләү, телмәр ҡуҙғытҡысын әүҙемләштереүҙә яңы сигналдар — төшөнсәләр менән байытыуҙа аңлатыу берҙән бер сара түгел. Яңы материалды аңлатыу баланы уйландырыу, уйлатыу аша бармаһа, уның һис бер фәтеүәһе булмаясаҡ. Аңлатыуҙың нигеҙендә үҫтереүле анализ принцибы ятырға тейеш.

Ғәҙәти дәрестең үтелгән материалды нығытыу этабы ла үҙ тәғәйенләнешен аҡламай. Шулай ҙа ул, йәғни үтелгән материалды нығытыу, дәрес өсөн бик тә мөһимме ни? Әлбиттә, дәрестең был өлөшөндә бала төрлө күнегеүҙәр эшләй, уҡытыусы һөйләгәнде ҡайтанан өҙөп-йыртып һөйләп бирә, дәреслектән ниндәйҙер күнегеүҙе

күсереп яҙа, яҙғанын уҡып ишеттерә, еңел-елпе биремдәрен үтәй һ.б. Әммә бындай йүнәлештә үтелгән материалды нығытыу баланы ялҡыта, һүлпәнлеккә илтә. Һүлпәнлек үҙ сиратында ғәмһеҙлекте тыуҙыра. Бер ҡарағанда, һөҙөмтә лә бар һымаҡ, тик ул уҡыусының эҙләнеү һөҙөмтәһе түгел. Дәрестә баланың әүҙемлеге һиҙелмәй, сөнки уны эшмәкәрлеккә илтеүсе сәбәп, ниәт (мотив) юҡ.

Белем кимәле (төрлө мәғлүмәттәр, һүҙ байлығы, һүҙ юҫығындағы теге йәки был хәл-ваҡиғаға үҙ баһаһы, ҡарашы, мөнәсәбәте булыу һ.б.) түбән икән, бала фекер йөрөтә алмай. Фекер йөрөтөү өсөн хәтерҙә нимәлер булыуы мотлаҡ. Һәр мәғлүмәткә, тормоштоң айыш-байышына, хәл-ваҡиғаларға балала мөнәсәбәт, ҡараш булырға тейеш. Ә мөнәсәбәт, ҡараш баһаһыҙ булмай.

Ғәҙәти дәрестең өйгә эш биреү этабы хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтеп китеү кәрәктер. Сөнки был этап та дәрестән дәрескә тайпылышһыҙ үтәлә килә. Билдәле булыуынса, ул дәрестең иң аҙағында, хатта ҡайһы бер осраҡта ҡыңғырауҙан һуң биреү ҙә ғәҙәткә инеп киткән. Өйгә эш баланың өйҙәге уҡыу хеҙмәтен дөрөҫ ойошторoуҙа ярҙам итеү өсөн бирелә. Уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһендә был мәсьәләгә ҡарата берҙәм һәм етди мөнәсәбәт юҡ. Өйгә эшкә нимә бирелеүен берәүҙәре алдан таҡтаға яҙып ҡуя, икенселәре көндәлектәренә әйтеп яҙҙырта, өсөнсөләре ашыҡ-бошоҡ телдән әйтеп биреү менән сикләнә. Әммә өйгә эш биреүҙең дә үҙенә күрә тәртиптәре, методикаһы бар. Һәр бер эштең асылы, үтәлеү юлдары аңлатыла, балаға ят төшөнсәләрҙең мәғәнәһе әйтелә, йә булмаһа ниндәй һүҙлектән эҙләргә ҡушыла. Әгәр инде өйгә берәй ижади эш тәҡдим ителһә, ниндәй йүнәлештә эшләргә тейешле күрһәтмәләр, кәңәштәр бирелә.

Өйгә эш биреү-бирмәү тураһында ла юл айҡан туҡталып үтәйек. Был хаҡта элек тә, әле лә бәхәстәр булған, бара һәм артабан да буласаҡ. Өйгә эш биреү менән беҙ бала күңелендә нимәлер нығытабыҙ, үҫтерәбеҙ, шул уҡ ваҡытта нимәлер юғалтабыҙ, моғайын. Өйгә эштәр менән уны көндә күмеү, бер үк әйбер менән ялҡытыу баланың рухи, шәхес үҫешенә ҡамасау түгелме? Мәктәптән арып ҡайтҡан баланы (бигерәк тә бөгөнгө мәктәптә көн һайын һигеҙ сәғәт һәм унан да күп дәрестәр, факультативтар, төрлө түңәрәктәр, секциялар һ.б.) тағы ла шул өйгә эштәр менән күмәбеҙ түгелме? Артыҡ күп йөк баланы ҡаҡшата, һаулығына зыян килә, рухи һәм сәләмәт үҫешен тотҡарлай. Быларҙан тыш, һәр уҡытыусы предметомания менән йонсой, фәҡәт уҙ фәнен генә мөһим, хатта үтә мөһим тип

иҫәпләп, өйгә эш күләмен, йөкмәткеһен һәм самаһын онота, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә баланы төрлө эштәр менән күмә. Арып, йонсоп, аҡыл эшенән ялҡып, хәлдән тайып ҡайтҡан уҡыусы өйгә бирелгән эштәрҙең береһен дә йүнләп эшләй алмай. Сөнки мәктәптә лә, өйҙә лә кинәнеп ултырып эшләү өсөн тәғәйен шарт та, мөхит тә, сәбәп тә юҡ. Шуға күрә бала әллә ни атлығып, ашҡынып, ынтылып тормай, йәғни өйгә эшен үтәү өсөн уның теләге юҡ. Өйгә бирелгән эштәрҙең барыһын да эшләп бөтөрөп булмай һәм уның кәрәге лә юҡ, тигән хуш күңелллелек, моңһоҙлоҡ нығынған бала күңелендә. Ана шул ғәмһеҙлекте, битарафлыҡты юҡҡа сығара алырлыҡ әхлаҡи көс, өмөт, хыял юҡ илдә. Әгәр уҡытыусы бала күңелендә уны үҫтереүсе, рухын күтәреүсе ниндәйҙер этәргес көс таба алмаһа, өйгә эш биреп тороуҙан фәтеүә булмаясаҡ.

Әлбиттә, өйгә эш биреү кәрәк, әммә саманы онотторға ярамай. Мәҫәлән башҡорт теленән бөтә теоретик материалдар (әйтәйек, һүҙҙең күп мәғәнәлелеге, һүҙ төркөмдәре, фонетик, морфологик анализдар, синтаксик күренештәр һ.б.) дәрес шарттарында үтелә, төрлө күнегеүҙәр эшләтеү аша нығытыла. Баланың эҙләнеүен, үҙ аллы эшмәкәрлеген, ҡыҙыҡһыныуын туплау, артабан үҫтереү, һәләтен асыу маҡсатында ҡайһы бер ижади эштәрҙе өйгә бирергә мөмкин. «Йәншишмә», «Йәшлек», «Шоңҡар», «Аҡбуҙат», «Аманат» һ.б. гәзит-журналдарҙан берәй ҡыҙыҡлы материалды уҡырға; мәҡәл йә әйтем ҡулланылған бер-ике һөйләмде күсереп яҙырға; ваҡыт эйәрсән һөйләме булған бер ҡушма һөйләмде табырға; сағыштырыуға ҡоролған бер-ике һөйләмде билдәләргә; үҙеңә оҡшаған мәҡәләгә таянып, үҙеңсә мәҡәлә яҙып ҡарарға һ.б. кеүек өйгә эштәр биреп булмаймы ни? Әсә телендә сыҡҡан, ташҡа баҫылған һүҙгә, ваҡытлы матбуғатҡа, әҙәбиәткә, халыҡ ижады әҫәрҙәренә, йәғни рухи сығанабыҙға, хазинабыҙға баланы ана шулай ылыҡтырырға була. Икенсенән, баланың эҙләнеү теләге (мотив) уяна, һүҙгә ҡарата иғтибары тәрбиәләнә, һүҙгә, һөйләмгә, мәҡәлгә, әҙәби әҫәрҙәргә, ғәзит-журналға ыңғай мөнәсәбәте барлыҡҡа килә, ҡыҙыҡһыныуы арта. Ана шул нигеҙҙә бала күңелендә рухи ҡиммәттәребеҙгә булған битарафлығы юҡҡа сығыр, быуаттар төпкөлөнә илткән тарихына, ауыҙ-тел ижадына, халыҡ аҡылына, яҙыусыларҙың әҫәрҙәренә зауығы үҫер ине.

Әлбиттә, өйгә эш биреү кәрәк, әммә ул бала файҙаһына булһын, рухи үҫешенә юл һалһын, күңел донъяһының офоғон киңәйтһен. Ошо маҡсат ҡуйылмаған, күҙ уңында тотолмаған «өйгә эш»тәрҙән

баланы аяу кәрәк. Уҡыусыны үҫтереүгә мөнәсәбәте булмаған «өйгә эш» (мәҫәлән, күнегеүҙең биремenә иғтибар итегеҙ: «Күсереп яҙығыҙ. Ҡушма һөйләмдәрҙе барлыҡҡа килтергән ябай һөйләмдәрҙең үҙ-ара бәйләнешен һәм бәйләнеш сараларын байҡағыҙ»; «Тейешле тыныш билдәләрен ҡуйып күсерегеҙ»; «Өҙөктө уҡығыҙ, һәр бер өтөрҙөң ҡуйылышын аңлатып бирегеҙ»[6] һ.б.) менән уның ваҡытын әрәм итергә ярамай.

Тимәк, ҡатнаш йәки ғәҙәти дәрестең ниндәй генә өлөшөн (этабын, элементын) алып ҡараһаҡ та уҡыусыларҙың үҫешенә йоғонто яһай алмай. Баланың үҙ аллы танып белеү эшмәкәрлегенә йүнәлеш бирелмәй. Шулай ҙа дәрестә эшмәкәрлек бар ҙа һымаҡ, тик уныһы ла уҡытыусыныҡы. Балаға белем нигеҙҙәре буйынса ниндәйҙер кимәлдә, күләмдә, йөкмәткелә мәғлүмәт бирелә, әммә ул белем кимәленә күтәрелмәй, үҫтерелмәй. Дәрестә уҡытыусы — бойороусы, уҡыусы — баш баҫып бойороҡ үтәүсе вазифаһында сығыш яһай. Теоретик төшөнсәләр, ҡағиҙәләр уҡыусынан ятлатыла, әммә уның белеге (умение) тәрбиәләнмәй, күнекмәләре эшмәкәрлек кимәленә күтәрелә алмай. Дәрестең маҡсаттары ла, төҙөлөш элементтарының тәғәйенләнеше лә, йөкмәткеһе лә фәҡәт уҡытыусының эшмәкәрлеген ҡабартып күрһәтеүгә буйһондоролдо. Дәрес барышында ла ижади эш мөхитен тыуҙыра алманы, сөнки уҡыусы менән уҡытыусы араһында бер-береһенә ҡарата теләктәшлек, хеҙмәттәшлек мөнәсәбәте булманы. Шулай итеп, ғәҙәти дәрес үҫтереүле уҡыу-уҡытыу идеяларын бойомға ашыра алмай.

Шулай итеп, мәктәптәрҙә бөгөнгө көндә киң таралған ғәҙәти йәғни ҡатнаш дәрес (комбинированный тип урока) төрө башҡа төр дәрестәрҙең структур элементтарын үҙенә алған. Мәҫәлән, уҡыусыларҙың эш тәжрибәһендә яңы белем биреү, алынған белемде нығытыу, үтелгәндәрҙе ҡабатлау, алынған белемдең үҙләштерелеүен тикшереү, йомғаҡлау һ.б. төрҙәре айырым дәрес сифатында ла ҡулланыла. Уларҙың һәр береһенә туҡталып тормайынса, түбәндә инеш дәрестәрҙең бер төрөн тасуирлап үтеүҙе кәрәк тип таптыҡ.

Ни өсөн инеш дәрестәр? Эйе, фәҡәт инеш дәрестәр. Башҡаса уны атап булмай. Инеш дәрестәр туған телдең берәй кимәлен (фонетика, лексика, морфология, синтаксис, стилистика һ.б.) башлап өйрәнер, әҙәбиәттә берәй яҙыусы ижадын, йәки уның берәй әҫәрен өйрәнеүгә күсер, йә булмаһа, башҡа берәй ҙур проблемаға тотонор

---

[6] *Күнегеү тексында 29 өтөр ҡуйылған.*

алдынан үткәрелә. Мәҫәлән, баланың этник үҙ аңын йәки рухи үҫешен тәрбиәләү, формалаштырыу өсөн тел һәм әҙәбиәт программаларында махсус сәғәт ҡаралмаған һәм уның кәрәге лә юҡ. Был проблемалар юл айҡан һәр дәрестең материалынан сығып ҡына хәл ителә. Әйтәйек, дидактик материалдың йөкмәткеһенә, уҡыусыларҙың, әҙерлек кимәленә, дәрес барышындағы ситуацияға һәм, аҙаҡ килеп, уҡытыусының үҙ мөмкинселегенә ҡарап, рухи тарбиә биреү мәсьәләһен дәрестең төрлө этабында ҡулланырға мөмкин. Инеш дәрестәр тип атауҙың сәбәбе шунда: рухи тәрбиә биреү мәсьәләһенә инеш күҙ уңында тотола.

## Рухи тәрбиә биреүҙә инеш дәрестәр

Бала үҙ милли асылын, булмышын белеп үҫергә тейеш. «Советса йәшәү өлгөһө» уның күңеленә, ҡанына үтеп ингән, әсә һөтө менән тәрбиәләнгән, ата рухы менән, үҙен солғап алған белем һәм тәрбиә мөхите, баҫымы менән зиһененә һеңешкән. Хәҙер ана шул саңды, милли ғәмһеҙлекте бала психикаһынан, йәғни рухиәтенән «ҡаҡҡылап-һуҡҡылап», ҡыҫырыҡлап сығарыу бурысы көн үҙәк урында тора. «Ат күргән ат таныр, остаз күргән хат таныр» тигән әйтем бар. Баланы үҙ милләтен, рухын, ырыу-нәҫел тамырын, тарихын, рухи ҡаҙаныштарын, йәшәү рәүешен, ғөрөфөн, йолаларын танырға өйрәтеү уҡытыусының булмышына, сәсәнлегенә, остазлығына бәйләнгән. Бала тәбиғәтендә рухи аңды тәрбиәләү, артабан үҫтереү кәрәк. Был тәңгәлдә ҡайһы йүнәләштә (бөтөндән сығып, уның өлөштәренә йәки өлөштәренән дөйөм бөтөнгә табан) эш алып барыу кәрәк, тип аптырарға ярамай. Ниндәй генә йүнәлештә эшләһәң дә төп маҡсатҡа ирешеү мөһим, һәр эштә, уның һәр төрөндә рухи камиллыҡҡа ынтылыш, үҫеш, әүҙемлек күҙәтелһен, ана шуларға йүнәлеш бирелһен.

Милли асылға тәүге һуҡмаҡ, бәлки, милләт төшөнсәһен асыҡлауҙан башланалыр. Ошо тәңгәлдә Башҡортостандың халыҡ шағиры, һүҙ сәнғәтенең маһиры, шиғриәтебеҙҙең йондоҙо Назар Нәжмиҙең «Урал» поэмаһында шундай юлдар бар:

*Башҡортлоҡ — ул милләт кенә түгел,*
*Ҡурай кеүек ябай, ҡатмарлы.*
*Ерҙә әле рух бар — халыҡ рухы,*

*Ҡабул итмәй ул рух юҡ-барҙы.*
*Халыҡ рухы — халыҡ ҡанынан ул,*
*Ул бөйөк һәм изге төшөнсә.*
*Ул мөҡәддәс! Боръоларъа уны*
*Тейеш тҫгел һәр кем ҫҙенсә.*
*Халыҡ рухы һәр кем йөрәгендә*
*Ул дөйөм дә һәм ул ҫҙ аллы.*
*Әгәр ҙә һин ысын башҡорт икән,*
*Йырлап кҫрһәт миңә «Урал»ды...*

Башҡорт теле дәресендә ошо поэманың мәғәнәһен асып биреү кәрәктер ул. Әҙәбиәт программаһында был әҫәрҙе өйрәнеү 11-се класта ҡаралған. Шағирҙың был поэмаһында башҡортлоҡ, милли рух проблемаһының үҫеш юлдары күрһәтелә. Шуға күрә уның айырым өҙөктәрен, бәләкәй генә өлөштәрен түбән кластарҙа тел дәрестәрендә өйрәнеү мөһим. Ана шул саҡта өс проблема (рухи тәрбиә биреү; әҙәбиәт менән тел дәрестәренең берҙәмлеген, йәғни предмет-ара бәйләнеште бойомға ашырыу; «Урал» поэмаһын өйрәнеүгә инеш, йәғни әҙерлек) бер юлы хәл ителәсәк.

Был өҙөктө «Лексика» темаһында һүҙҙең лексик мәғәнәһен аңлатыу барышында ҡулланырға мөмкин. Бында *башҡорт, башҡортлоҡ, рух* һүҙҙәренең лексик мәғәнәләрен аңлатыу кәрәктер. Башҡорт һүҙенең тәбиғәтенә автор тағы ла ниндәй мәғәнә һалды икән? Ни өсөн автор шундай мәсьәлә ҡуя:

*«Әгәр ҙә һин ысын башҡорт икән,*
*Йырлап кҫрһәт миңә «Урал»ды..»*

Бына ошо проблема буйынса бәхәс-әңгәмә үткәреү бала күңелен, уның рухын үҫтереүҙә бер аҙым булыр ине. Тимәк, башҡорт өсөн күңеленең һәр күҙәнәген, нескә ҡылдарын үҙ халҡындың моң шишмәһе менән һуғарып тороу, шул моң менән йәшәү, тын алыу кеүек рухи сифаттарға эйә булыу мәжбүри икән.

Башҡорт һүҙенең антонимын эҙләтеү ҙә уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуын үҫтерәсәк. Ә бармы һуң уның антонимы? Ниңә булмаһын, бар. Уйла әле.

Милли тәрбиә биреү, баланың рухи асылын, рухи аңын үҫтереү буйынса яҙыусылар ҙа ижад итә, матур-матур әҫәрҙәр яҙа. Ана шул төшөнсәләрҙең йөкмәткеһен, мәғәнәһен асып бирәләр. Был

тәңгәлдә Назар Нәжми, Рауил Бикбаев, Рәшит Солтангәрәев, Таңсулпан Ғарипова, Ғалим Хисамов, Тимер Йосопов, Ринат Ҡамалов, Тамара Ғәниева, Факиһа Туғыҙбаева һәм башҡа нәфис һүҙ оҫталарын әйтеп китергә мөмкин. Шулай уҡ ваҡытлы матбуғаттың да эшмәкәрлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып китеү кәрәктер. Сөнки һәр баҫма халҡыбыҙҙың рухи булмышын тергеҙеү һәм үҫтереү сығанағына әйләнде. Дәреслектәрҙең дә йөкмәткеһе рухи хазиналарыбыҙ — халыҡ дидактикаһы менән байытылды. Әммә уларҙың һәр береһен иғтибарлап, күңел биреп, йотлоғоп, онотолоп уҡып сығырға баланың ваҡыты юҡ. Ваҡыты булған сүрәттә лә йүгерек уҡыуға ғәҙәтләнгән. Бәлки, бында йүгерек тип әйтеү уның төп тәғәйенләнешенә тура ла килмәйҙер. Тик шуныһы мәғлүм: уҡыусы ашыҡ-бошоҡ, өҫтән-мөҫтән, йәғни ҡабаланып, күҙ йүгертеп сыҡһа-сыға, әммә уҡығанының мәғәнәһенә үтеп инә алмай, үҙенсә аңларға тырышып ҡарау ниәте тыумай. Сөнки ул быға өйрәтелмәгән, уның үҙанализ, үҙбаһа һәләте тәрбиәләнмәгән. Шуға ла уҡытыусы дәрестә әҙәби әҫәрҙән өҙөктәрҙе, ваҡытлы матбуғат битендәге мәҡәләләрҙе, нәфис һүҙ ынйыларын өҫтәлмә дидактик материал сифатында ҡулланырға мөмкин. Һүҙ ыңғайында шуны ла иҫкәртеп үтеү кәрәктер: рухи аң тәрбиәләү менән бер рәттән баланың рухи һәләт төрҙәренә йүнәлеш биреү, үҫтереү ҙә мөһим. Уҡыусының үҙенсә уй ниәттәрен, үҙ аллы эшмәкәрлек төрҙәрен (үҙ аллы танып белеү, үҙ аллы фекер йөрөтөү (дөрөҫө: фекерләүҙер, минеңсә), проблемаға үҙанализ, үҙбаһа белеген, мөнәсәбәтен) үҫтереү һәр дәрестә эҙмә-эҙлекле алып барылырға тейеш. Дәрестә балаға хаталаныуға хоҡуҡ бирелә. Баланың стандарт булмаған үҙенсәлектәрен хуплау уға ҡанатланырға, талпынырға мөмкинселек бирәсәк.

Яҙма эштәр өсөн дә тәрән йөкмәткеле, тәрән мәғәнәле дидактик материал ҡулланыу кәрәктер. Мәҫәлән, баланың рухи аң үҫешенә ижади йүнәлеш биреү өсөн түбәндәге һүрәтләмәне файҙаланырға мөмкин.

## Иҫән йөрө, торнаҡай!

Атайым уны ҡултығына ҡыҫтырып алып ҡайтты. Морондары һарғайған, ҡанаттарын ергә һөйрәп, аяҡтарында саҡ баҫып торған меҫкен ҡошто өйгә алып ингәс, ул беҙгә өмөтһөҙ генә ҡарап ҡуйҙы, әйтерһең дә үҙ яҙмышына буйһонған. Сырайында: «Ни эшләтһәгеҙ ҙә эшләтегеҙ инде» тигән ғәмһеҙлек тә бар ине. Атайым ҡоштар хол-

ҡон белә шул. Торнаны тыныслыҡта ҡалдырырға ҡушты, алдына ашарға икмәк, эсергә һыу ҡуйҙы. «Үҙенең хәүефһеҙ урында икәнен тойһон», — тине. Торнаны бар ғаиләбеҙ менән шунда уҡ үҙ иттек. Айырыуса ҡыуанғаны бәләкәй ҡустым Айрат булғандыр. Уның әле яңы теле сыға, «р»һы ла юҡ. «Торна» һүҙе уға нисек ят булһа, йортҡа килгән ҡош ти шулай сәйер ине. Шулай ҙа «Тойна, тойна!» — тип ҡысҡырып, уның тирәһендә урала. Ике-өс көндән тегеһе лә бәләкәй эскерһеҙ ҡулдарҙан икмәк киҫәген алып өйрәнде. Бик тиҙ дуҫлаштылар ҙа киттеләр. Хатта бесәй ҙә, ишек алдына сыҡҡанда эт тә уны үҙ итте. Был дүртәүҙең дуҫлығына ситтән ҡарау һоҡланғыс ине.

Бына шулай ҡыш та үтте. Бар тереклекте уятып, шаулап-гөрләп ергә яҙ килде. Торнабыҙ ҙа инде ҡанаттарын күптән йыйып, ғорур ҡиәфәт менән ихатала йөрөй. Йылы көндәрҙә тышҡа алып сыҡһаң, үҙенә генә билдәле бер ҡыуаныс менән урынында һикергеләп ала, ләкин осоп китергә баҙнат итмәй. Ҡескәй ҡустым оҙон ботло дуҫы менән көнө буйы урамда. Икеһенә генә аңлайышлы телдә һөйләшәләр, һис айырылмай бергә йөрөйҙәр. Тик хәҙер тирәк башында оя ҡороп өлгөргән ҡарғалар тауышы, сыйырсыҡ ояһындағы шаян һыҙғырыуҙар беҙҙең ҡанатлы дуҫыбыҙҙы битараф ҡалдырманы. Ниндәйҙер көс уны һауаға әйҙәйҙер, ләкин кешеләргә рәхмәтеме, әллә башҡа сәбәпме уны һаман беҙҙең урамда тота. Бер көндө иртән, Май байрамын ҡаршылар алдынан, урам һепереп, йәш сирәмде таҙартып, эш менән мауыҡҡанда барыбыҙға ла таныш моңло тауыш яңғыраны:

— Тор-ройҡ, тор-ройҡ!

Эргәбеҙҙә йөрөгән ҡанатлы дуҫыбыҙ, әйтерһең дә шуны ғына көткән, урынында һикереп ҡуйҙы, һәм шундай етеҙлек менән таныш ауаздар сығарып осҡан ҡоштар төркөмөнә ынтылды. Был күренештең шаһиты булған кескәй ҡустым бер мәлгә тынып ҡалды һәм көтмәгәндә барыбыҙҙы ғәжәпкә ҡалдырып: «Торна, Торна осто!» — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Үҙенекеләр янына барып еткән ҡош та ерҙәге дуҫына сыңрап яуап бирҙе: «Торойроҡ. Торойроҡ». Һуңғы сәләме шундай баҙыҡ, таҙа ине. Атайым ирекһеҙҙән: «Ярай инде Айратҡа «р»һын биреп китте, иҫән йөрөһөн», — тине. Ә минең күҙ тирәләрем әсетте, тамағыма төйөр тығылды. Ниндәй хис булғандыр?.. Әллә ерем ҡото булған торнаға сикһеҙ рәхмәтемме, әллә алыҫ туғанлыҡтың саҡырыуымы? Ни ғәжәптер, йөрәгем менән мин шул ҡанатлы дуҫым янында инем. Урғып сыҡҡан тойғомдо тыя алмай, баҡсаны үткәнсе, һауаға ҡарай-ҡарай йүгереп барҙым. Телемә үҙенән-үҙе таныш һүҙҙәр килде, күкрәгемдән моң бәреп сыҡты:

Сыңрай-сыңрай осоп килде
Сыңрау торнаҡай.
*Уралыңдан сәләм тине...*

...Ҡөҙгө кистә йөрәк һыҙлатып яңғыраған тауышҡа күтәрелеп ҡараһам, көнъяҡҡа юл алған торналар сатынан яңғыҙ торна айырылыуын күрҙем. Ҡура өҫтөнән кемделер эҙләгәндәй өйөрөлөп оса, баҙыҡ тауышы менән саҡырып ҡысҡыра ине. Балалар баҡсаһынан ҡайтып, йоҡларға әҙерләнгән ҡустым туптай атылып ишектән сығыуға торна бер мәлгә туҡтап ҡалғандай булды. Әйтерһең дә, барлыҡ яҡындарын барланы, йортобоҙға именлек теләне. Унан һуң ҡул-ҡанаттарын болғай-болғай күҙҙән юғалды... («Йәшлек» гәзите, 16.01.99. Алһыу Ҡотлогужина мәҡәләһе).

Был материал буйынса изложение яҙҙырыу отошло булыр. Башта уҡытыусы, уҫтереүле анализға нигеҙләнеп, класс менән бергә тексҭың йөкмәткеһен аса, байыта, үҫтерә.

Үҫтереүле анализ өсөн яҡынса шундай һорауҙарҙы ҡулланырға мөмкин: Башҡорттар өсөн торна ниндәй ҡош? Торна тураһында ниндәй ғөрөф-ғәҙәт, йола бар? Ни өсөн автор торнаны ерем ҡото тип атай? Торнаға ҡарата авторҙа ниңә алыҫ туғанлыҡ хисе уяна? Башҡорт халыҡ мәҙәниәтендә торна ниндәй роль уйнай? Һ.б. Ана шундай проблемалы, проблемалы-үҫтереүле һорауҙар менән баланың күңелендәге рухи сатҡыларына өҫтәмә көс бирергә, уны уйландырырға мөмкин. Шул рәүешле баланы үҙ халҡының йәшәү рәүешенә, рухи донъяһына ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләп була.

## Тағы ла дәрес тураһында

Дәрес тураһында күп яҙғандар, әле лә яҙалар, бынан һуң да яҙырҙар. Донъяға бала тыуа икән, ул йәшәргә тейеш. Тормош һабаҡтары уға мәктәптә бирелә. Йәшәү серҙәренә бала дәрестә өйрәнә. Нимә һуң ул дәрес? Был бик етди һорау. Уны бер һүҙ менән генә, <u>һабаҡ</u> тип аңлатып та була. Халыҡта һабаҡ бирҙе, һабаҡ булды, һабаҡ алды, арт һабағыңды уҡытайым тигән һүҙбәйләнештәр бар. Уларҙың да дөйөм мәғәнәһе һабаҡҡа йәғни дәрес төшөнсәһенә ҡайтып ҡала. Шулай ҙа нимә һуң ул дәрес?

Методик әҙәбиәттә дәрескә шундай билдәләмә бирелә: «дәрес өйрәтеүҙе ойоштороусы төп форма»[7]. Бындай аңлатма дәрес төшөнсәһен тулыһынса асмай. Тимәк, дәрестең йөкмәткеһенә тап килерлек билдәләмә кәрәк. Бына ул: баланың һәләтен асыусы, кешелек сифаттарын формалаштырыусы, рухи үҫешенә йүнәлеш биреүсе, аң-белем кимәлен үҫтереүсе тәрбиә бирәмегә дәрес тип атала. Ошо аңлатманан сығып, дәрестәрҙең төрҙәре билдәләнә, һәр төрөнә ярашлы маҡсаттар ҡуйыла.

Ижади эшләүсе уҡытыусыға һәр дәрес аҡыл һәм физик көс талап итеүсе ауыр хеҙмәт емеше. Балалар алдына баҫыусының уҡытыусылыҡ булмышы дәрестә асыла. Балаларҙың әҙерлегенә, үҫеш кимәленә, класта тотошона, әүҙемлегенә, уҡытыусының шәхси һәм эш тәжрибәһенә ҡарап, һәр дәрес ниндәйҙер һыҙаттары менән бер-береһенән айырыла. Алдан төҙөп килгән план буйынса ғына дәресте алып барып булмай. Һәр дәрес, көтөлмәгән осраҡ планға үҙ өҫтәмәләрен бирә тора. Шуға күрә бер-береһен ҡабатлаусы йәки игеҙәк дәрестәр булмай, һәр дәрестең аныҡ тәғәйенләнеше һәм ярашлы маҡсаттары була.

Дәрес планы төҙөү, дәресте баҫҡыстарға, быуындарға этаптарға бүлеү, һәр этабына шартлыса ваҡыт биреү ул уҡытыусының шәхси эше. Уның эске эштәренә тығылырға берәүҙең дә хаҡы юҡ. Дәрес уҡытыусының эш урыны. Уҡытыусы хеҙмәте дәрестә баһалана. Дәрес — ижади хеҙмәт. Дәресте ҡалыплаштырып булмай. Бер үк уҡытыусының бер үк синыфта үткәргән дәрестәре бер-береһен ҡабатламай, әгәр ул эшләһә, әлбиттә. Игеҙәк дәрестәр булмай.

Дәрестә балаларҙың эшмәкәрлеге өсөн уңайлы шарттар булдырыу мөһим, бала ул робот йә автомат механизмы түгел. Һорау биргәс тә шунда уҡ яуап көтөү, талап итеү дөрөҫ түгел. Уҡыусы ла кеше затынан. Ә кешегә аҙ булһа ла уйлап алыу хас. Уның өсөн ваҡыт кәрәк. Уҡыусыға һорауҙан һуң уйларға форсат биреләме? Урыҫ теленә өйрәтеү методикаһында «метод погружения» тигән алым бар. Уны башҡортсаға, бирелгән һорауға, үтеләсәк темаға, уҡытҡан фәнеңә баланы алып инеү, тип тәржемә итергә мөмкин. Икенсе төрлө әйткәндә, ҡуйылған мәсьәләнең әрәсәһенә төшөн-

---

[7] *Львов М.Р. Словарь справочник по методике русского языка: Учеб. пособие для студентов пед. ин-тов по спец. И 2101 «Рус. яз. и лит.». М.: Просвещение, 1988. — 220-се бит.; Древс У., Фурманн Э. Организация урока (в вопросах и ответах). Век Х. Оценки и отметки: Пер. с нем. Пособие для учителя. — М.: Просвещение, 1984, 5-се бит.*

дөрөү, ылыҡтырыу, баланың иғтибарын солғап алыу, күңелен биләү мөһим. Дәрес проблемаһына бала баштан аяҡ йәлеп ителмәй икән, ул дәрестән фәтеүә булмаясаҡ. Ваҡыт әрәмгә үтте тигән һүҙ.

Һорауға яуап бирер алдынан бала үҙ алдына уйлана, бер нисә йүнәлештә фекер йөрөтә, уларҙы сағыштыра, аҡыл төйнәй, һығымта яһай. Тимәк, бының өсөн әҙме-күпме булһа ла ваҡыт биреү кәрәк һорауға шунда уҡ яуап биреү өсөн материалды ныҡлап белеү мөһим Бала ятлап килгәнен, хәтерендә һаҡлағанын ғына ҡапыл-ғара әйтеп бирә ала. Ә инде проблемалы, үҫтереүле һорауҙарға шунда уҡ яуап алырға ниәтләнеү мөмкин булмаған хәл. Был осраҡта, киреһенсә, баланың үҙ аллы фекерләүенә мөмкинлектәр, тейешле шарттар тыуҙырылырға тейеш. Ә инде баланың үҙ аллы эшмәкәрлеге йүнәлеш биреүгә, үҫтереүгә мохтаж.

Үҙ аллылыҡ — үҙ аллы эшмәкәрлек. Уны үҫтереү ниңдәй саралар менән бойомға ашырыла? Халыҡ педагогикаһында шундай мөһим бер ысул бар: кемделер берәй нәмә эшләргә өйрәткәс, «кем өйрәтте тиһәләр, үҙем белдем тигән» әйтем нығынып ҡалған. Ана шул ысулды нигеҙ итеп алырға мөмкин. Баланы үҙ аллы эшмәкәрлеккә өйрәт, ләкин өйрәтеүенде һиҙҙермә, белендермә. Бала үҙе белеп эшләгән икәненә уны инандырыу мөһим. Бала башҡаларҙан күреп, өйрәнеп тә үҙ аллылыҡҡа ынтыла. Дәрестә бала ябай күҙәтеп ултырыусы түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ундайҙары ла бар, әлбиттә. Әммә уҡыусыларҙың күпселеге дәрескә битараф булмай. Әгәр уҡыусы дәрескә битараф түгел икән, уның үҙ мөнәсәбәте, үҙ аллы ҡарашы, үҙ аллы эшмәкәрлеккә ынтылышы бар тигән һүҙ.

Һәр дәрес уҡыусы шәхесен үҫтереүгә йүнәлтелә. Ә шәхескә нимәләр хас? Бигерәк тә мәктәп йәшендәге балаға? Беренсенән, баланың булмышына, көсөнә яраҡлы материал ярҙамында әүҙемлеген үҫтереү мөһим. Икенсенән, дәрес материалына уҡыусының үҙ баһаһы, үҙ мөнәсәбәте булһын. Быға ирешеү, әлбиттә, еңелдән түгел. Әммә һәр мәсьәләгә, хәл-ваҡиғаға, дәрес материалына, уҡыған әҙәби әҫәргә, әҙәби геройҙарға баланың баһалы ҡарашын тәрбиәләү кәрәк. Тәү мәлдәрҙә хәл ителәһе проблемаға, килеп тыуған осраҡлы йәки көтөлмәгән хәл-ваҡиғаға ҡарата уның мөнәсәбәте баһа кимәленә тура килмәҫкә лә мөмкин. Әйтәйек, баһа биреү урынына хәл ваҡиғаны тасуирлау, һөйләп сығыу менән сикләнә. Әйҙә һөйләһен. Тора-бара асыла ул. Тәүҙә ана шулай тасуирлай. Һөйләү, тасуирлау, анализлау аша үҫә баланың үҙ ҡарашы.

Халыҡта шундай әйтем бар: кисәге аҡыл бөгөнгә ярамай. Дөрөҫ әйтелгән. Кисәге эш алымдары, кисәге дәрес бөгөнгө уҡытыусыны

ҡәнәғәтләндермәй. Бөгөнгө дәрес уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге менән билдәләнә. Тыңлап, укытыусы ҡушҡанды ғына эшләп (күсереп яҙыу, ҡысҡырып уҡыу, һөйләмдең эйәһен һәм хәбәрен табыу, һүҙҙең синонимын табыу һ.б.) ултырыусы бала дәрес яҙмышына битараф була. Киреһенсә, ул дәрескә мөнәсәбәттәш булырға тейеш. Дәрестең яҙмышын уҡытыусы ғына түгел, бала ла хәл итергә бурыслы. Балаларҙың әүҙемлеген үҫтереү мөһим. Тимәк, дәрестән дәрескә уҡыусының әүҙемлеге үҫә барырға тейеш. Баланың әүҙемлеге нисек үҫтерелә һуң?

Баланың әүҙем эшмәкәрлеге, беренсенән, хәл-ваҡиғаға ҡыҙыҡһыныуы аша барлыҡҡа килә. Дәрес материалы баланы ҡыҙыҡтырырға тейеш. Ҡыҙыҡтырыу юҡ икән, бала күңелен ҡуҙғытып булмаясаҡ. Баланың фекерләү һәләтен үҫтереүгә иғтибар итеү мөһим.

Балала фекерләү һәләтен үҫтереү — башҡорт теле дәресендә беренсе урында тора. Дәрес барышында бала үтелгәндәрҙе ҡабатлау аша билдәле булған проблемаларҙы хәл итә. Теге йәки был ҡағиҙәнең телмәрҙә ҡулланыу тәртибен миҫалдар аша аңлата, һығымта сығара. Ана шулай ул үтеләсәк яңы темаға, үҙләштереләсәк яңы белемгә нигеҙ һала, уңайлы шарттар тыуҙыра. Был тәңгәлдә бала быға тиклем үҙләштергән, алған белемен ғәмәлдә ҡуллана белеүен күрһәтә, йәғни ул ғәҙәти ябай (репродуктив) фекер йөрөтә ала. Шул нигеҙҙә уның ижади фекерләү һәләтен үҫтерергә кәрәк. Бала уйланһын, үҙенсә әйтһен, үҙенсә аҡыл төйнәһен. Уның үҙ аллылығын хупларға, үҫтерергә кәрәк. Тәү мәлдәрҙә баланың үҙенсә уй йөрөтөүе хәл ителәһе мәсьәләгә, һүҙ айышына, темаға тап килмәҫкә лә мөмкин. Ул хаҡта һүҙ ҡуйыртыу ярамай. Киреһенсә, баланың «үҙенсә»ләренә ихтирам күрһәтеү мөһим: Мәҫәлән: — һин уйлағаныңды әйттең. Үҙеңсә әйттең, һәр кем үҙенсә фекер йөрөтә. Кеше һәр саҡ үҙе булып ҡалырға тейеш. Был һәйбәт сифат. Тема буйынса ла һин дөрөҫ яуап бирә алаһың. Мин һиңә ышанам. Һ.б.

Мәғлүм булыуынса, ижади фекерләү уй-хыял йөрөтөүҙең иң юғары, иң камил төрө. Әммә уның нигеҙендә лә тел күренештәре, законсалыҡтары, ҡағиҙәләре буйынса алған белем һәм күнекмәләре ята. Ижади фекер йөрөтөү, ижади фекерләү һәләте үҙенән-үҙе (үҙ-үҙенән) генә барлыҡҡа килмәй. Ундай һәләтте һәр уҡыусыла күрә белергә һәм артабан үҫтерергә кәрәк. Ижади фекерләү баланың үҙ аллы эшмәкәрлек сифатына әйләнергә тейеш.

* * *

Дәрескә әҙерләнгәндә, дәрес үткәргәндә уҡытыусы түбәндәгеләрҙән сығып үҙ эшен ойошторорға тейеш:

— дәрестә үтеләсәк материал балаға кәрәкме?

— ул материал тормошта ниндәй урын биләй?

— ғөмүмән кешелек донъяһында роле бармы ул материалдың?

— ул материалды өйрәнеү ниндәй маҡсатты күҙ уңында тота?

— дәрес материалына уҡытыусының үҙенең мөнәсәбәте нисек?

— уҡыусы шәхесен үҫтерәме ул материал?

Дәрес шарттарында балалар хөкөмөнә сығарыласаҡ материал тәүҙә уҡытыусының күңелендә эшкәртелә, энәһенән ебенә тиклем тикшерелә. Күрер күҙгә әһәмиәте яғынан самалы өлөшө төшөрөп ҡалдырыла, уның урынына өҫтәмә мәғлүмәттәр, биремдәр индерелә. Яңы тема хоҡуғындағы дәрес материалы балаға яңы була, яңы мәғлүмәт бирә, уй-хыял йөрөтөү, фекерләү эшмәкәрлеге яңы ынтылыш, көс ала.

Һәр дәрескә тәғәйенләнгән материал балаға ниндәйҙер яңы мәғлүмәт бирергә тейеш. Билдәле булыуынса, дәрес материалы анализ-синтез сылбыры менән бирелә. Икенсе төрлө әйткәндә, бер бөтөн материал (мәҫәлән, фонетикала «Һуҙынҡы өндәр», морфологияла «Исем» һүҙ төркөмө, синтаксиста «Һөйләм», лексикала «Телмәрҙе һүрәтләү саралары» һ.б.) өлөштәргә тарҡатылып аңлатыла, халыҡта әйтмешләй, сәйнәп ҡаптырыла. Артабан ул материалға бәйләнешле белем-күнекмәләрҙән (дәрестең яңы материалды нығытыу өлөшөнән) һуң тема өлөштәренең үҙ-ара бәйләнеше, бер-береһенә мөнәсәбәте кимәленән сығып материал дөйөмләштерелә һәм уға һығымта яһала.

Яңы материалды өйрәнеү дәресендә үҫтереүле синтезға нығ иғтибар бирелергә тейеш. Нимә һуң ул үҫтереүле синтез? Һәр дәрес, уның ниндәй төрө булыуына ҡарамаҫтан, үтелгән темаға йомғаҡ яһауҙан, дөйөмләштереүҙән тора. Алған белемде тормошта ҡулланa алыу юлдары, мөмкинлектәре, шарттары күрһәтелә. Материалдың йөкмәткеһенә ҡарап, тәрбиә биреү юлдары байҡала. Шуны ла онотторға ярамай: материал балаларға яңы мәғлүмәт менән бергә тәрбиә бирерлек йөкмәткелә булһын, укыусыларҙың дөйөм үҫеше менән бергә рухи үҫешен тәьмин итһен. Тимәк, йомғаҡлау мәлендә материалдың айырым өлөштәре бергә ҡушыла, бер бөтөн итеп бирелә, бөтөндән сығып һүҙ йөрөтөлә, балаларҙың белемдәре үҫтерелә, әхлаҡ сифаттарына мөрәжәғәт ителә. Дәрестең маҡсатын күҙ

уңында тотоп, уны бер ни тиклем үҫтерә биреп, йомғаҡлау үҫтереүле синтез тип атала.

Дәрестең материалына ҡарап, даими рәүештә балалар менән эшлекле әңгәмә-бәхәс (проблемалы уҡытыу) ойоштороу кәрәк. Баланың белем алыу, аҡыл һәм үҙ аллы эшмәкәрлеген әүҙемләштереү ана шул эҙмә-эҙлекле үткәрелгән эшлекле бәхәстән башлана.

## Дәрес тыуҙырған уйҙар

Күпме дәрес ҡарғаным бар! Башҡорт теленән һәм әҙәбиәтенән, үҙем дө байтаҡ йылдар буйы дәрестәр үткәргәнем булды. Шулай ҙа ана шуларҙың берәүһе онотолмай, һәр саҡ хәтергә төшә: ул дәрес буйынса үҙ-үҙем менән бәхәсләшәм, уҡытыусыһына ла күңелемдән байтак һорауҙар бирәм, әҫәрҙәге образдар менән дә үҙ алдыма кәңәшләшәм, ҡайһы берәүҙәренең яҙмыштарына ҡыҙғаныу ҙа, һоҡланыу ҙа тойғо-хистәремә тынғы бирмәй. Ниндәй дәрес булды һуң ул?

Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатында тәжрибәле, үҙ дәресенә һәр саҡ ижади һәм яуаплы ҡараған уҡытыусы эшләй. Эшләй тип әйтеү ҙә был осраҡта урынһыҙҙыр. Янып эшләй тип атаһаҡ бер аҙ уның эшмәкәрлеген күҙ алдына баҫтырырға мөмкин булыр. Ул уҡытыусы — Рәсәй мәғарифы алдынғыһы Зәкиә Миһран ҡыҙы Килдеғошова. Был юғары категориялы уҡытыусының дәрестәрендә миңә эшем буйынса ла, вазифам буйынса ла йыш булырға тура килде. Дәрестәренә төрлөсә анализ да биргән мәлдәрем булғандыр тормош бит. Әммә мин уның бер дәресен һаман да онота алмайым. Уның төрө лә, үткәреү рәүеше лә ғәҙәти (традицион) түгел ине.

Ысынлап та, ул ғәҙәти булмаған дәрес кластың аҫтын-өҫкә килтергәйне. Аҫтын-өҫкә тип әйтеүем шунан: дәрес материалына ҡарата һорау бирмәгән, үҙ мөнәсәбәтен белдермәгән уҡыусы ҡалмағайны. Быныһына ла мин артыҡ аптырамаҫ та инем. Мине тулҡынландырғаны икенсе нәмә ине. Совет осоронда ҡараған берәй спектаклдән, йә кинофильмдан һуң күңел тулып, күҙҙәр йәшләнеп килеп сыға торғайным. Зәкиә Килдеғошованың был дәресенән дә ана шулай кисерештәр менән сыҡтым. Ул дәрескә инеп ултырған башҡа уҡытыусылар ҙа ап-аҡ ҡулъяулыҡтарын күҙ, танау тирәләрендә йөрөтәләр ине

Ниндәй дәрес булды һуң ул?

X синыфта Баязит Бикбайҙың «Аксәскә» исемле повесын өйрәнеү ҡаралған. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: ул повесты мәктәптә нисә йыл уҡытһам, шунса тапҡыр ҡабат-ҡабат уҡығаным бар. Ҡабат-ҡабат тип әйттем, сөнки яҙыусының әҫәре күңелдә ҡайнарға тейеш. Шунһыҙ дәрестең әүҙемлеге, уҡыусыларға тәьҫир итеү көсө булмаясаҡ. Яҙыусы һүрәтләгән рәүештә генә әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләп сығыу алымы дәрестә бер нәмә лә бирмәйәсәк. Уҡыусыларҙың хистойғоһон да уята алмаясаҡ. Һәр баланың да бөгөнгө мәктәп шарттарында әҫәр менән танышып сығыу мөмкинлеге самалы. Күрәһең, Зәкиә Ҡилдеғошова ана шуны ла иҫәпкә алғандыр. Ул үҙенең был дәресен «Дәрес — хөкөм» тип атаған ине.

...Класс алдында оҙон эскәмйәлә «Аксәскә» повесының персонаждары теҙелешеп ултырған, һәр береһе шул замандың модаһына ярашлы кейенгән. Трибунала хөкөмсө (судья) урын алған. Әҫәр илдә барған репрессия хәл-ваҡиғаларына арналған. Эскәмйәлә ултырыусыларға судья ла, залдағылар ҙа (класс уҡыусыларын шулай тип атарға булалыр) төрлө һорауҙар бирә. Шул һорауҙар аша әҫәрҙәге художестволы образдарҙың холоҡ-фиғелдәре, кешелек сифаттары, кешелеклек һәм бәғерһеҙлек һыҙаттары ла асыла бара. Хөкөм ителеүселәргә, хатта судьяға бирелгән һорауҙарҙың да төрлөһө бар. Шул замандың золом осорон тәнҡитләгән, кешеләрҙең шул дәүерҙә бер-берһенә булған мөнәсәбәттәрен хуплап еткермәгән, бөгөнгө көндөң етешһеҙлектәрен дә асып һалған һорауҙар булды. Бында иң мөһиме: ике замандың йөҙгә-йөҙ осрашыуы, бөгөнгө көндөң хәл-ваҡиғалары менән халҡыбыҙ тарихындағы ауыр яҙмыштың сағыштырылыуы. Былар икеһе лә — дәресте генә түгел, бала күңелен үҫтереүсе саралар. Тағы ла шуны өҫтәргә кәрәктер: бында «судья» ла, «хөкөм эскәмйәһендә» ултырыусылар ҙа, «залдағылар» ҙа — уҡыусылар. Тимәк, дәрестә бөтә уҡыусылар ҙа ҡатнаша. Ҡатнаша тип әйтеү ҙә урынһыҙ һымаҡ. Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғалар буйынса улар ысынтылап бәхәсләшә.

Дәреслеккә күҙ һалайыҡ әле: «Әҫәрҙең төп образы булған Әхмүш Ямаев ҡатынын (Нәғимәне) һәм тыуасаҡ балаһын ташлап сығып китә. Сөнки Нәғимәнең атаһын ғәйепһеҙгә төрмәгә ултырталар. «Халыҡ дошманы кейәүе» булыуҙан ҡурҡып, Әхмүш һыуға төшкән һымаҡ ғәйеп була. Нәғимә был хәлде Аксәскәгә белдермәй, һуңынан инженер-технолог булып өлгөргән Аксәскә атаһын эҙләп таба». Әҫәр, бер ҡараһаң, ябай ғына сюжетҡа ҡоролған кеүек. Әммә

ул ябайлыҡ, образдарҙың бер-береһенә булған мөнәсәбәттәре аша ҡатмарлана бара. Уҡыусыларҙың үҙ-ара бәхәстәре лә ана шул ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙе асыуға ҡоролған ине.

Зәкиә Ҡилдеғошова тәүҙә был дәресте «Сәхнәгә ҡуйыусы режиссер» сифатында булһа, дәрес «сәхнәгә сыҡҡас» инде ябай тамашасы вазифаһында «залда ултырыусылар» араһында ҡатнашты. Был дәрескә башҡа синыф уҡыусылары ла инеп ултырғайны. Улар араһынан да күп кенә һорауҙар бирелде әҫәр персонаждарына.

Аҙаҡтан был дәресте Башҡорт дәүләт университеты студенттарына ла күрһәтте Зәкиә. Улар ҙа дәрестең был төрөнә битараф ҡалманы. Был мәҡәләмде, Зәкиәгә рәхмәт әйтеп, тамамларға ла булыр ине. Әммә мине бер мәсьәлә борсой. Ошондай тәрән йөкмәткеле, мәғәнәле, фәһем алырлык дәрестәрҙе Зәкиә Ҡилдеғошова ғына үткәрмәйҙер. Төрлө методик принциптарға, төрлө технологияларға таянып ойошторолған яңыса дәрестәр республикабыҙҙың башҡа мәктәптәрендә лә барҙыр. Шул методик ҡаҙаныштарҙы ниңә әле «Видео»ға төшөрөп алмайбыҙ? Ә бит педколледждарҙа, институттарҙа, университеттарҙа белем алыусы студенттар «Башҡорт теле методикаһы», «Башҡорт әҙәбиәте методикаһы» тигән фәндәрҙе теоретик планда ғына өйрәнәләр. Педпрактика алдынан аҙ булһа ла «тере дәрес» менән таныша торһалар, белемдәренең сифаты күтәрелер, методика фәненең мәғәнәһен аңларҙар ине.

## Дәрескә анализ

Дәрескә анализ яһай белеү — уҡытыусы эшмәкәрлегенең, ижади эшенең төп үҙенсәлеге. Уҡытыусы үҙ дәресенә, үҙе инеп, ҡарап ултырған башҡа уҡытыусыларҙың дәресенә анализ яһай белергә, дөрөҫ баһа бирә алырға тейеш. Дәрескә методик һәм педагогик яҡтан камил булған анализ — уҡытыусының педагогик оҫталығын да күрһәтә. Үҙ дәресеңдең конспектын ентекләп яңынан ҡарап сығыу, ҡайһы бер өҫтәмәләр индереү — дәрескә булған анализдың башы. Дәрес ныҡлы ҡалыпҡа һалынған күренеш, сағылыш түгел. Ул — уҡытыусының һәм уҡыусыларҙың ижад эше. Ҡластың әҙерлек кимәле, дәрес барышындағы психологик атмосфера, психологик ситуация, уҡытыусының үҙ булмышындағы хис-тойғо кисерештәре дәрескә лә, эшмәкәрлеккә лә үҙенең төҙәтмәләрен, өҫтәмәләрен индерә. Уҡыу эшмәкәрлеге, йәғни класс менән уҡытыусы ара-

һындағы ижади эшмәкәрлек әүҙем булған осраҡта теге йәки был дәрескә тип алдан әҙерләп килгән конспект, план-конспект буйынса эшләп тә булмаясаҡ. Шуға күрә дәрестән сыҡҡас та уҡытыусы, әгәр ул үҙ дәресенә, уҡыусыларына битараф булмаһа, әгәр ул ижади эшләһә, шул дәресте тағы ла күҙ алдынан үткәрә, дәрес конспектына күҙ һала. Нимәләр эшләнде, нимәләр эшләнмәне? Бына ошоларҙы асыҡларға тейеш. Дәрестең маҡсаты ни дәрәжәлә, ниндәй кимәлдә үтәлде? Әллә үтәлмәнеме? Ошо күҙлектән дә ул дәресен һәм шул дәрескә тип алдан яҙылған конспектын тикшерә, улар араһындағы оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын билдәләй.

Уҡытыусы үҙенең коллегаларының дәрестәренә лә анығ анализ бирә белергә тейеш. Дәрескә дөрөҫ анализ яһау — дәресте күрә белеү тигән һүҙ. Дәрескә баһа бирә белеү үҙеңдең ижади асылышыңды башҡа коллегаларың алдында яҡлай алыу өсөн дә кәрәк.

Дәрескә анализ яһай белеүҙең мөһимлеге ҡайһы бер шарттар, сәбәптәр, хатта осраҡлыҡтар менән дә аңлатыла. Уҡытыусыға киләсәкте тәрбиәләү, киләсәк быуын шәхесен үҫтереү бурысы йөкмәтелгән. Был инде уҡытыусы эшмәкәрлегенә ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Ҡласына ҡарап, уҡыусыларынан сығып, уҡытыусының эшен баһалап була. Дәрескә фәнни анализ яһай белеү уҡытыусының үҙе өсөн дә бик мөһим.

Уҡытыусының дәресенә, ғәҙәттә, мәктәп директоры, уның урынбаҫары, башҡорт теле уҡытыусыларының методик берекмәһе етәксеһе инеп ултырырға мөмкин. Район, ҡала, республика мәғарифы етәкселәре лә башҡорт теле уҡытыусыһының дәресен күҙ уңынан ситтә ҡалдырмай. Шулар араһында мәктәп фәндәре системаһында башҡорт теленең үҙенсәлеген, спецификаһын аңламаусы тикшереүселәр ҙә булырға мөмкин, һәр инеп ултырыусы уҡытыусының эшенә, ғәҙел, объектив баһа бирергә тейеш. Методик, дидактик, психологик яҡтан дәрескә анализ яһай белеү һәр инеп ултырыусының, тикшереүсенең ҡулынан килмәҫкә лә мөмкин. Үҙеңде яҡлау, дәресеңде аҡлау, белем һәм тәрбиә биреү системаһында үҙ фәнеңдең мөһимлеген күрһәтеү өсөн дә дәрескә анализ яһай белеү кәрәк.

Сер түгел, белем биреү системаһында уҡытыусының эшен юҡҡа сығарыу өсөн дә уның дәрестәрен тикшереүселәр бар. Үҙ дәресеңде дөрөҫ баһалай белеү был осраҡта ла уҡытыусыға ярҙам итәсәк.

Хәҙерге дидактик ҡаҙаныштарҙан күренеүенсә, дәрескә анализ өлгөһө түбәндәгесә булырға мөмкин.

1. *Дәрестең дөйөм төҙөлөшө.* Дәрестең төрөн билдәләү. Дәрес нисә этаптан торҙо? Һәр этабына күпмешәр ваҡыт бүленде? Дәрескә тәғәйенләнгән программа материалы дәрес этаптарына дөрөҫ бүленгәнме?

*2. Дәрестә дидактик маҡсаттарҙың үтәлеше.* Был тема (проблема) программала ҡаралғанса дәрестә сағылыш таптымы? Яңы материалды үҙләштереүҙә уҡыусыларҙың әүҙемлеге (аңлау, үҙләштереү, танып белеүгә ҡыҙыҡһыныу) нисек булды? Яңы теманы өйрәнеү планы дөрөҫ төҙөлгәнме? Был теманы өйрәнеү методикаһы алдан уйланғанмы? Тема буйынса уҡытыусының белеме ни кимәлдә? Яңы материалды өйрәнеүҙе тағы ла нисегерәк планлаштырып була ине? Яңы тема буйынса алған белемде күнекмәгә әйләндереү (яңы теманы нығытыу) этабы дөрөҫ үткәрелдеме? Уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләрен тикшереү нисек ойошторолдо (нисә уҡыусының белеме баһаланды)? Уҡытыусының балаларҙы дәрескә йәлеп итеү һәләте нисек?

*3. Яңы материалды өйрәнеү барышында уҡыусыларҙы үҫтереү.* Фекерләү төрҙәренә (анализ, синтез, дөйөмләштереү, классификация, системаға һалыу) уҡыусылар йәлеп ителдеме? Уҡыусыларҙың уйлау һәләтен ҡуҙғытыусы сәбәптәр (мотивтар) булдымы? Булһа, улар дәрестең ҡайһы этабында күҙәтелде? Уҡыусыларҙың үҙ аллы танып белеү һәләтен үҫтереү нисек ҡуйылған? Предмет эсендә һәм предмет-ара бәйләнеш нисек хәл ителде? Уҡыусыларҙың ижади фекерләүен үҫтереүсе саралар (проблемалы, ижади эштәр) дәрестә ҡулланылдымы? Дәрестә уҡыусының дөйөм үҫешен тәьмин итеүсе һүҙ(информация) булдымы? Булһа, ул нисек (уҡыусыларҙың сығышында, яуаптарында, уҡытыусының яңы материалды өйрәнеүгә ҡарата ҡайһы бер өҫтәмәләрендә) бойомға ашты? Бының өсөн ниндәй саралар ҡулланылды дәрестә?

*4. Дәрестә уҡыусыларға тәрбиә биреү.* Уҡыу материалының тәрбиәүи мөмкинлектәре тулыһынса файҙаланылдымы? Уҡыусыларҙың тирә-йүнгә, донъяға ҡарашын, мөнәсәбәтен формалаштырыу буйынса ниҙәр эшләнде? Донъяуи хәл-ваҡиғаларға баһалы ҡарашын, тормошҡа инаныуын тәрбиәләү буйынса дәрестә ниҙәр эшләнде? Белем биреүҙе тормош менән бәйләү нисек хәл ителде? Кешеләргә әҙәпле, кешелекле булыу, хеҙмәткә һәм уның һөҙөмтәләренә ихтирам, һөйөү менән ҡарау сифаттарын тәрбиәләү буйынса нимәләр эшләнде? Уҡыусыларҙың белемен баһалағанда ошо тәрбиәүи мөмкинлектәр файҙаланылдымы? Уҡытыусы шәхесенең тәрбиәүи тәьҫире булдымы?

*5. Төп дидактик принциптарҙы күҙ уңында тотоу.*

Уҡытыусының һәм уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге дөрөҫ ойошторолдомо? Үҙ аллы эш нисек үтәлде? Бының өсөн алдан әҙерләнгән материал ауыр түгелме? Күләме нисек? Ул уҡыусыларҙың белем кимәленә торошломо?

*6. Белем бирең методтарын һайлау.* Яңы материалды өйрәнеү өсөн һайлап алынған метод (методтар) ҡулаймы? Уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү мөмкинлектәре тулыһынса файҙаланылдымы? Дәрестә ниндәй техник саралар ҡулланылды? Яны материалды аңлатыуҙа, нығытыуҙа ул сараларҙың үҙ аллы эшмәкәрлегенең арта барыуы (ябай күнегеү эшләүҙән ижади эшкә) ни кимәлдә булды? Баһалау, тикшереү методтары урынлы файҙаланылдымы? Уҡыусыларҙан бирелгән һорауҙарға яуаптар алыу дөрөҫ ойошторолғанмы? Һорау нисек бирелә: айырым уҡыусығамы, класҡамы, ҡайһы бер уҡыусыларғамы? Уҡыусыларҙың яҙғандарын тикшереү нисек хәл ителә? Хаталар өҫтөндә эш нисек ойошторола һәм ул ғөмүмән бармы был дәрестә? Уҡытыу методтарын һайлау буйынса дөйөм талаптар (дөйөм маҡсатҡа йүнәлтелгән, дидактик маҡсатты, предметтың, уҡыу материалының үҙенсәлеген, уҡыусыларҙың йәш һәм үҙ аллы үҙенсәлеген күҙ уңында тотҡан) күҙәтелдеме?

*7. Уҡытыусының дәрестәге эше.* Дәрес башланыуға барлыҡ кәрәкле әйберҙәр әҙерләнеп бөткән инеме? Уҡытыусы был дәрескә тәғәйен конспектын дөрөҫ файҙаландымы? Уҡытыусының ойоштороу эшмәкәрлеге менән уҡыусыларҙың танып белеү эшмәкәрлегенең нисбәте нисек, ни кимәлдә булды? Уҡытыусы эшмәкәрлегенең ниндәй төрҙәре (телмәр эшмәкәрлеге, тыңлау, яҙыу, әһәмиәте булдымы? Күнегеүҙәр эшләгән саҡта уҡыусыларҙың үҙ аллы эштәрендә уҡыусыларға ярҙам итеү һ.б.) һәм ниндәй кимәлдә был дәрестә сағылыш тапты? Уҡыусыларҙы эшкә ылыҡтырыу һәләте нимәлә күренде? Класс менән эшләй алыуға өлгәштеме? Айырым уҡыусылар менән ниндәй эштәр башҡарылды? Уҡытыусының тышҡы ҡиәфәте нисек?

*8. Уҡыусыларҙың дәрестәге эше.* Уҡыусыларҙың дәрескә әҙерлеге тикшерелдеме? Дәрестең төрлө этаптарында уҡыусыларҙың әүҙемлеге нисек булды? Дәрестә уҡыусылар эшмәкәрлегенең ниндәй төрҙәре (телмәр эшмәкәрлеге, тыңлау, таҡтаға яҙылғанды күсереү, үҙ аллы яҙма эш һ.б.) өҫтөнлөк алды? Уҡыусыларҙың хеҙмәт культураһына (дәфтәрҙәренең тотошо, унда яҙғандарының дөрөҫлөгө, дәреслек менән һаҡсыл файҙаланыу һ.б.) иғтибар бирелдеме?

Дәрестә уҡыусыларҙың тәртибе нисек булды? Өйрәнелеүсе предметҡа һәм уҡытыусыға уҡыусыларҙың мөнәсәбәте нисек?

*9. Дәрестәге гигиена шарттары.* Класс кабинеты етерлек кимәлдә яҡтыртылғанмы? Парталарҙың, панелдәрҙең, стеналарҙың буяуҙары дәрескә ниндәй йоғонто яһай? Кластағы мебель уҡыусыға уңайлымы, уның йәшенә ҡулайлымы? Уҡыусылар һаулығына, буй-һынына, өлгәшенә ҡарап ултыртылғандармы? Был предметтың мәктәп расписаниеһындағы урыны ҡәнәғәтләнерлекме? Ул ҡайһы көнгә һәм нисәнсе дәрес итеп ҡуйылған? Дәрес алдынан булған тәнәфестең ваҡыты дөрөҫ бүленгәнме? Ҡыңғырауҙан һуң дәрескә һуңлап инеүселәр булдымы?

*10. Ҡайһы бер махсус бурыстар,* һәр мәктәп ниндәй ҙә булһа бер проблеманы бойомға ашыра. Был педсовет йә методик берекмәнең ҡарары буйынса хәл ителә. Мәҫәлән, мәктәп коллективы алдында шундай бурыстар торорға мөмкин: дәфтәр тотошона йә уҡыусыларҙың телмәр культураһына булған берҙәм талаптарҙы һаҡлау, предмет-ара бәйләнеште бойомға ашырыу, уҡыусыларға айырым мөнәсәбәт булдырыу һ. б.[8]

Дәрескә бындай киң, тулы, ентекле анализ уҡытыусының ижади үҫешен, алдынғы педагогик эш тәжрибәһен ныҡлап өйрәнгән саҡта ғына үткәрелергә мөмкин. Дәрес — уҡытыусының ижад эше, күркәм әҫәр һымаҡ. Сәнғәт донъяһында бер иш, бер төҫлө әйберҙәр булмаған кеүек, игеҙәк, бер-береһенә тап килгән дәрестәрҙең дә булыуы мөмкин түгел. Бер үк темаға, хатта параллель кластарҙа үткәрелгән дәрестәр ҙә оҡшаш була алмай. Кластағы балаларҙың үҫеш кимәле, уҡытыусының күңел торошо, дәрестең мәктәп расписаниеһындағы урыны һәм башҡа шарттар дәрестең йөкмәткеһенә йоғонто яһай ала. Шуға күрә уның композицион үҫешен анализ ҡыҫандарына һыйҙырып булмай.

Үрҙә килтерелгән анализ өлгөһө буйынса, уның һәр пунктына, һәр һорауына ярашлы берәү ҙә дәрескә характеристика бирә алмай, әлбиттә. Шуға күрә хәҙерге дидактикала дәрескә анализдың бер нисә формаһы һәм төрө бар.

---

[8]*Дәрескә анализдың был өлгөһө П.И.Пидкасистыйҙың хеҙмәтендәге өлгө буйынса бирелә. Был хаҡта ҡара: Педагогика. Учебное пособие для студентов педагогических вузов и педагогических колледжей/Под ред.П.И.Пидкасистого. — М.: Педагогическое общество России, 1998. — 640 с.*

М.И.Мәхмүтов хәҙерге дәрескә арналған үҙенең хеҙмәтендә уларҙың һәр ҡайһыһын аныҡ итеп айырып күрһәтә[9] . Уның әйтеүенсә, дәрескә анализдың тулы, ҡыҫҡаса, комплекслы, аспектлы (йәғни дәрескә йә дидактик, йә психологик яҡтан, йә тәрбиәүи йәки ойоштороу өлөшөн генә алып анализлау) формалары бар.

*Тулы анализ,* башта әйтелеүенсә, уҡытыусының эш тәжрибәһен өйрәнеү өсөн, мәктәптә уҡытыу тәрбиә эштәренең барышын тикшергән саҡта үткәрелергә мөмкин.

*Ҡыҫҡаса анализ* дәрестең сифатын, фәнни-теоретик кимәлен тикшергән саҡта яһала. Был осраҡта дәрескә ҡуйылған маҡсаттың бойомға ашыуы, танып белеүгә йүнәлтелгән күнегеүҙәрҙең сифаты, йөкмәткеһе һәм улар өҫтөндә эш төрҙәре, дәрес планының үтәлеше тикшерелә.

*Комплекслы анализ* дәрес маҡсаттарының үҙ-ара бәйләнешен, дәресте төҙөк бер система итеп ойоштороусы метод һәм алымдарҙы өйрәнеүҙе, тикшереүҙе күҙ уңында тота. Анализдың был төрө студенттарҙы, йәш уҡытыусыларҙы, мәктәп директорҙарын, мәғариф етәкселәрен дәрескә анализ бирергә өйрәтеү маҡсатында ҡулланыла. Шулай уҡ уҡытыусының бер үк тема, блок буйынса ойошторолған бер нисә дәресен ҡарағандан һуң да (уҡытыусының һорауы буйынса) комплекслы анализ үткәрелергә мөмкин. Комплекслы анализды шул уҡ тулы анализ тип ҡарарға була. Улар ҡуйылған маҡсаттары яғынан ғына бер-береһенән айырыла.

*Аспектлы анализ,* әйтеп үтелеүенсә, дәрестең айырым бер өлөшөн генә, уға йә дидактик, йә психологик яҡтан, йә тәрбиәүи әһәмиәте, йәки ойоштороу кимәле яғынан баһа биреү өсөн ҡулланыла. Дәрескә анализдың был төрө уҡыу-уҡытыу эштәрен тикшергәндә, аттестация ваҡытында мәктәптең уңыштарын йәки етешһеҙлектәрен асып биреү өсөн үткәрелә.

Былар барыһы ла — дәрескә анализ биреү формалары (типтары), тармаҡтары.

Дәрескә анализ биреү төрҙәренә лә туҡталып китәйек. Хәҙерге дидактикала тамам нығынған, ныҡлы урын алған анализ төрҙәренә түбәндәгеләр инә.

1. Дидактик анализ үткәргән саҡта дәрестең маҡсатына, ойоштороу һәм үткәреү принциптарына, дәрескә тәғәйен материалдың

---

[9] *Махмутов М.И. Современный урок: Вопросы теории. — М.: Педагогика, 1981. — 175-177-се биттәр.*

әһәмиәтенә, мәғәнәһенә, ҡулланылған сараларҙың сифатына, уҡыусыларҙың танып белеү эшмәкәрлеген **ни рәүешле ойоштороуға,** уҡыу эшмәкәрлегенә ныҡлы иғтибар бирелә.

2. Психологик анализ барышында төп иғтибар уҡытыусы менән уҡыусының, кластағы барлыҡ уҡыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенә, уҡытыусының дәрестә үҙен тотошона, дәрес проблемаһына балаларҙы йәлеп итә алыу һәләтенә йүнәлтелә. Үҫтереүле уҡытыу проблемалары ла психологик анализ ваҡытында тикшерелә, өйрәнелә.

3. Тәрбиәүи яҡтан анализ хәҙерге дәрескә бирелгән төп баһаларҙың береһелер. Уҡытыусы ижадының, дәрес материалының төп өлөшө балаларға тәрбиә биреүҙе күҙ уңында тоторға тейеш.

4. Дәресте методик яҡтан анализлаған саҡта уҡытыусының дәресте үткәреү методикаһына иғтибар ителә, ниндәй принципҡа, методҡа, технологияға таяныуы байҡала.

5. Ойоштороу яғынан сығып анализ үткәргәндә дәрестең йөкмәткеһенә (күнегеүҙәр, күргәҙмә һәм техник саралар), һәр этабына сарыф ителгән ваҡыттың күләменә иғтибар бирелә.

6. Күргәҙмә һәм техник саралар. Уларҙың дәрес темаһына һәм маҡсатына тәьҫире, уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереүҙә тотҡан урыны.

7. Дәрестә уҡыу, яҙыу, һөйләү ни кимәлдә бойомға ашырылды. Уҡытыусының дәрес үткәреү методикаһы (дәрес материалы әҙер көйө биреләме, әллә дәрес проблемаһын уҡыусылар үҙҙәре хәл итәме?)

8. Өйгә эштең күләме һәм төрҙәре.

9. Уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләрен баһалау.

## Дәрескә ҡарата дөйөм һығымта

1. Дәрескә ҡуйылған маҡсаттар үтәлдеме? Үтәлһә, нисек? Үтәлмәгән осраҡ күҙәтелдеме? Миҫалдар менән күрһәтергә.

2. Дәрестең әһәмиәте нимәлә? Уҡытыусының ижади үҫеше нимәлә күренә?

3. Уҡыусыларҙың үҫешендә дәрестең тотҡан урынын миҫалдар менән иҫбатларға.

Башҡорт теле дәресенә яҡынса анализ өлгөһө:

1. Дәрестең фәнни-теоретик һәм практик әһәмиәте.

2. Дәрескә ҡуйылған төп маҡсаттарҙың (белем һәм тәрбиә биреү, уҡыусыларҙы үҫтереү) берҙәм бойомға ашыуы.

3. Уҡыусыларҙың үҙ аллы танып белеү һәләтен үҫтереүсе саралар.

4. Уҡыу эшмәкәрлеге. Уҡытыусы менән уҡыусы араһындағы хеҙмәттәшлек. Уҡыусы эшмәкәрлеге. Уҡытыусы эшмәкәрлеге.

5. Дәрестә ҡулланылған күнегеү төрҙәре. Уларҙың уҡыусыларҙың белем һәм рухи кимәлен үҫтереүҙә әһәмиәте.

* * *

## Башҡорт теле дәрестәрендә баланың милли аңын тәрбиәләү һәм үҫтереү алымдары

Бөгөнгө буталсыҡ заманда, мәхшәр баҙары иҡтисады шарттарында ябай халыҡтың тормошо, йәшәү рәүеше һәм кимәле бик тә аяныслы. Нисек етте шулай үҙ көнөн үҙе күргән балалар бар ғаиләлә. Ғаилә ҡәлғә булыуҙан туҡтаны, күрәһең. Туған телде өйрәнеүгә мәғариф һәм мәктәп етәкселәренең битарафлығы үҫә бара. Эскелек менән наркомания тигән золом мәктәп тупһаһына шылыша, ихтыяр көсө булмаған ҡайһы бер үҫмерҙәр уның мәкерле ауына эләгә баралар. Арҙаҡлы яҙыусыбыҙ Ноғоман Мусиндың «Һуңғы солоҡ» романында һүрәтләнгән фажиғә тормош нигеҙенә, халыҡтың йәшәү рәүешенә үтеп инеп ғөрөф-ғәҙәт, йола ҡанундарын емерә бара. Туған моң, милли музыканы үҫмерҙәрҙең, йәштәрҙең зауығынан сит мөхиттең мәғәнәһеҙ шау-шыуы, ҡаңғырығы ҡыҫырыҡлап сығара. Зәңгәр экрандарҙа Көнбайыш Европа илдәренең вәхшилеккә ҡоролған фильмдары үҙ ағыуын сәсә. Быларҙың барыһы ла милләтте хәлһеҙләндерә, көсһөҙләндерә.

Совет заманы, үҫешкән социализм дәүере лә милләттең кәрен алды. Уҡытыу һәм тәрбиә эштәре дөрөҫ юлдан барманы. Заманында «ҠИД»тар, йәғни интернациональ дуҫлыҡ клубтары эшләй торғайны. Ә ниндәй һөҙөмтә бирҙе һуң ул? Милләт-ара мөнәсәбәттәр киҫкенләште. Сәбәбе — ябай. Интернациональ тәрбиәнең башы, йәғни милли тәрбиә, милли тел, милли мөхит, милли мәҙәниәт кеүек йәшәйештең төп ҡанундары, төп сығанағы иҫәпкә алынманы. Ә баланы үҙенең тыуған һәм туған тамырынан айырып, уйҙырма киләсәк өсөн яһалма мөхиттә сит ҡанундар менән тәрбиәләргә тырыштырҙылар. Үҫентене үҙ тамырынан айырһаң, ул ҡорой. Шуға күрә һәр милләт үҙ әҙәп-әхлаҡ, йола, ғөрөф-ғәҙәт, йәшәү рәүеше ҡанундарына ярашлы үҫергә хаҡлы.

Хәҙер килеп, үҙаң төшөнсәһенә асыҡлыҡ индереп үтәйек. Һүҙлектәрҙә ул шулай аңлатыла: тормошта, йәмғиәттә үҙ-үҙеңде, үҙеңдең әһәмиәтеңде, үҙеңдең вазифаңды тулыһынса аңлау хәле. Һүҙлек авторҙары менән бәхәскә инмәйенсә генә шуны әйтергә кәрәк: үҙаң төшөнсәһе милләткә мөнәсәбәтле. Шуға күрә милли үҙаң һүҙбәйләнешендә ҡарау кәрәктер.

Милли үҙаң ул — милләттең үҙаңғаһы, милләттең тормошо, йәмғиәттәге урынын тойоу, уның мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү, уның бөгөнгө хәлен һәм киләсәк яҙмышын яҡшыртыу өсөн даими хәстәрлек күреү, тарихи үткәнен йөрәгең, күңелең аша үткәреп фәһем алыу, кәрәк икән үҙ милләтең өсөн ғүмереңде менән бурыслылыҡты аңлау һәм инаныу хәле. Күренеүенсә, был билдәләмә бик оҙон да, шулай уҡ милли үҙаң кеүек илаһи төшөнсәне бигүк асып та етмәйҙер. Икенсе төрлө әйткәндә, милли үҙаң милләттең мәнфәғәтенә аңлы тормошоңдо сарыф итеү бурысын аңлау ул.

Милли үҙаңды тәрбиәләү һәм артабан үҫтереү милли мөхиткә мөнәсәбәтле. Милли мөхиттең башланғысы, тәү сығанағы — ғаилә. Нәҫел тамырын һаҡлаусы ата, нәҫел биҙәге, нәҫел ҡото, нәҫел тамырын донъяға яралтыусы, нәҫел ырыҫы — әсә. Ғаиләлә әсә менән ата мөнәсәбәте нисек, ниндәй кимәлдә ҡуйылған, ана шунан сығып баланың рухи үҫеше билдәләнә. Ата менән әсә мөнәсәбәтенә ҡарап, бишектәге бала бишкә төрләнә.

*«Атанан күргән уҡ юнған,*

*Ананан күргән тун ҡыйған»,* —

тигән әйтем ғаиләнең төп ҡануны булырға тейеш. Ғаилә усағы баланың рухи яҡтан сәләмәт булып үҫешендә хәл иткес ролде уйнай. Сөнки «ана һөтө менән кермәһә, тана һөтө менән кермәй» тигән әйтем дә бар. Тыуған ер йылыһы, тыуған төйәк тойғоһо, милли тел, милли моң, милли ғөрөф-ғәҙәт, милли рух, нәҫел шәжәрәһе, нәҫел тамырын юллау — былар барыһы ла ғаиләлә бала күңеленә май кеүек яғыла торған әҙәп-әхлаҡ ҡанундары. Әгәр ғаилә үҙ балаһында бындай сифаттарҙы тәрбиәләмәй икән, милләте алдындағы бурысын да үтәмәй тигән һүҙ.

Ғәҙәттә, милли үҙаң тураһында һүҙ сыҡһа, милли сикләнгәнлеккә япһаралар. Бындай ҡараш дөрөҫлеккә тап килмәй. Был тәңгәлдә халыҡтың йәшәү рәүешен күҙҙаллау ҙа етә. Мәҫәлән, унда «күрше хаҡы — тәңре хаҡы» тип әйтемләп йөрөткән ғөрөф бар. Уға башҡорттар үҙ йәшәйешендә һәр саҡ тоғро булдылар, сөнки ул — ҡанун. Уны боҙорға ҡанбабаларыбыҙ, аҡһаҡалдарыбыҙ,

сәсәндәребеҙ, ир арҙаҡлылары бер ҡасан да юл ҡуймаған. Әллә ни быуаттар төпкөлөнә инмәйенсә, миҫал өсөн шуны әйтергә, күрһәтеп, билдәләп үтергә мөмкин: 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң башҡорттоң Салауат Юлаевын, уның атаһы Юлай Аҙналинды һәм башҡа бик күп яугирҙәрҙе кемеһен мәңгелек төрмәгә оҙатҡас, кемеһен аҫҡас, кемеһен атҡас, кемеһенең телдәрен, танауҙарын, ҡолаҡтарын киҫеп алғас, бихисап ауылдарҙы тереләй үртәгәс, урыҫ хөкүмәте, урыҫ сәйәсәте фәҡәт башҡорт милләте өсөн ҡара золом үткәрҙе. Уны бөтөрөү өсөн бөтә көсөн, бөтә ҡеүәтен һалды. Күпме кәмһетелеүҙән, иҙелеүҙән, мыҫҡыл ителеүҙән һуң да башҡорт халҡы урыҫтарға ярҙам ҡулын һуҙҙы. Рәсәйгә французлар ябырылғас, башҡорт халҡы 30-ға яҡын яугир полкы менән Наполеон ғәскәренә ҡаршы сыҡты. Тарихты нисек булған, нисек бар шулай яҡтыртырға кәрәк. Үҙ тарихында башҡорттар бер милләтте лә ҡыйырһытмаған, киреһенсә, һәр милләткә мәрхәмәт, шәфҡәт күрһәткән, ере, һуңғы ризығы менән уртаҡлашҡан, ҡуйынына һыйындырған. Әммә беҙҙең халыҡҡа береһе лә рәхмәт әйткәндәре юҡ. Уларҙың рәхмәтенә халҡыбыҙ мохтаж да түгел. Беҙҙең еребеҙ ҙә, матди һәм рухи байлығыбыҙ ҙа таланған, әле лә талана. Аш менән атҡанға таш менән аталар.

Милли рухы көслө булғандарҙың аң, зиһен, аҡыл үҫеше милли ҡулса, милли ҡыҫандар менән генә сикләнмәйәсәк. Үҙ милләтеңдең улы (ҡыҙы), йәғни тулы ҡанлы вәкиле булһаң, милләттең мәнфәғәтенә хеҙмәт итһәң, абруйың, бәҫең, мәртәбәң башҡа милләттәргә лә билдәле булыр, исемең бар донъяға таралыр, офоҡтар сиге киңәйер.

Балаларға рухи тәрбиә биреү бөгөнгө көндә көнүҙәк мәсьәләгә әйләнергә тейеш. Халҡыбыҙ кисергән ауыр яҙмыш, халҡыбыҙҙы халыҡ, милләт булыу йәһәтенән бөтөрөү, юҡҡа сығарыу өсөн алып барылған сәйәсәт (ассимиляция, ҡанлы золомдар, ерен, байлығын баҫып алыу, колонизация һ.б.) бөгөнгө көндә лә дауам итә.

Бала рухи яҡтан ныҡ, сәләмәт булырға тейеш. Рухһыҙ бала халҡын көсһөҙләндерә. Ундай бала иҫәпкә бар, һанға юҡ хәлеңдә ҡала. Үҙ халҡын ҡотайтмаған бала башҡа милләттәрҙе лә ишәйтә, нығыта алмай. Балаға рухи көс, рухи сығанаҡтарҙы ҡайҙан алырға һуң? Бының өсөн халҡыбыҙҙың рухи билдәләрен, рухи булмышын, рухи офоҡтарын, донъяуи ҡараштарын барлап, күҙаллап сығыу кәрәк. Шул ҡиммәттәр нигеҙендә балаға белем һәм тәрбиә биреү зарур.

1. <u>Рухи билдәләре.</u> Халҡыбыҙҙың тарихын, боронғо йәшәү рәүешен, сәнғәтен өйрәнеү нигеҙендә уның рухи билдәләренә түбәндәгеләрҙе индерергә мөмкин:

— тәбиғәт балаһы. Тәбиғәттән көс, зауыҡ, моң ала. Тәбиғәткә ғашиҡ. Тәбиғәткә хас билдәләр, күренештәр башҡорт халҡына ла ят түгел. Иғтибар итегеҙ: уйнаған музыка ҡоралы ла тәбиғәттең бер өлөшсәһе. Тәбиғәт билдәләренә ҡарап, күпме юрау-юрамыштар, һынамыштар ижад иткән. Бүлгән ноҡотондағы таштар ҙа тәбиғәттең өлөшсәләре, таш быуаттан тороп ҡалған бер мираҫ түгел микән? Башҡорт ырыуҙарының символикаһы ла тәбиғәттең бер киҫәге, өлөшсәләре булып тора түгелме ни? Һәр ырыуҙың үҙ ағасы, тамғаһы, ҡошо ла ана шуға ишара;

— моңло халыҡ. Ҡурай, ҡубыҙ, думбра, һорнай һ.б. уйын ҡоралдарын ижад итеүсе. Шулар аша кеше күңеленә моң илтеүсе, моң тәрбиәләүсе һәм донъя сәнғәтендә йондоҙҙар ҡабыҙыусы милләт булып үҫешә;

— сал тарих төпкөлөндәге боронғо халыҡ;

— үҙенсәлекле йәшәү рәүешенә эйә булған милләт: мәмерйәлә йәшәп, таш-ҡаяны соҡоп, ижад итеүсе, ижадын мәңгеләштереүсе, ырып (руник) яҙыуын быуындан-быуынға илтеүсе, тирмәләрҙә йәйләүсе, тәүге ыҙма һалыусы, мәшһүр ҡалалар (Арҡайым, Таналыҡ һ.б.), кәшәнәләр төҙөүсе, быларҙан тыш һунарсылыҡ, йылҡысылыҡ, солоҡсолоҡ һ.б. менән көн күреүсе халыҡ;

— атлы халыҡ. Башҡортто атһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Беренселәрҙән булып, тарпанды эйәләштергән ул;

— үҙенсәлекле ғөрөф-ғәҙәте, йолалары, ырымдары, әҙәп-әхлаҡ ҡанундарына эйә булыусы халыҡ;

— үҙ милли символдарын булдырыусы халыҡ;

— үҙ милли орнаменттарын ижад итеүсе халыҡ. Башҡорттоң милли орнаменттарын йорт-йыһаз әйберҙәрендә, яу ҡоралдарында, кейем-һалымдарында, атты йыһазлауҙа күрергә мөмкин;

— ватансыл милләт: «Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын»;

— тотҡан дине яғынан мәжүси халыҡ. Ислам идеологияһы башҡорттарҙа яңы күренеш. Ул идеологияны ҡабул иткәндәре-итмәгәндәре бар. Революцияға тиклем ислам культы халыҡтың милли үҙаңын томалап килде. Артабан уны коммунизм идеологияһы алмаштыра. Был ике идеология ла башҡорттар файҙаһына булманы. Тәүгеһендә динде пропагандалаусы тел вазифаһын иҫке төрки, аҙаҡ татар теле үтәне. Әле лә мәсеттәрҙә үҙ-ара аралашыу, уҡыу, дини белем алыу теле булып татар теле тора. Коммунистик идеология, совет хөкүмәте алып барған сәйәсәт милләтте көсһөҙләндерҙе.

Быны́ң да үҙ ерлеге, сәбәптәре бар. Ҡатнаш никах йышайҙы, тел мөхите тарайҙы, эскелек, наркомания сәскә атты. Милләттең арҙаҡлы шәхестәрен аттырыу, зиндандарҙа серетеү, әҙәп-әхлаҡ ҡанундарын һанға һуҡмау күренештәре милләтте рухһыҙландырҙы, хәлһеҙләндерҙе;

— милли мәҙәниәте ныҡ үҫешкән халыҡ;

— эпослы халыҡ;

— шәжәрәле халыҡ һ.б.

2. <u>Рухи булмышы</u> ла иғтибарға лайыҡ. Ул — йырсы, уйынсы, ижадсы, сәсән, матурлыҡты яратыусы, азатлыҡҡа ынтылыусы. Уға эскерһеҙлек хас, кешегә тиҙ ышанып барыусан, хәйләһеҙ, бер ҡатлы, ғәҙеллекте яҡлаусы, ҡунаҡсыл, көрәшсе, йомарт, намыҫлы булыу кеүек сифаттар ҙа уға ят түгел.

3. <u>Рухи офоҡтары, донъяуи ҡарашы</u> ла бик тә үҙенсәлекле: әҙип; моңсо, композитор, архитектор, һынсы, тәбиғәт белгесе, зәркәр, табип, күрәҙәсе, психолог, философ һ.б.

Баланы үҙ милләтенең илаһи булмышына, рухи ныҡлығына, рухи даирәһенең ғәжәп киңлегенә, рухи офоҡтарының сикһеҙлегенә, аҡыл, уй, зиһен эшмәкәрлегенең иҫ киткес күп яҡлылығына, тәрәнлегенә, рухи ҡиммәттәренең байлығына ғорурландырыу, һоҡландырыу мөһим. Милли ғорурлыҡ тәрбиәләү аша милли үҙаңды ҡуҙғытырға була. Милли үҙаңды үҫтереү башҡорт теле дәресенең генә түгел, ә, ғөмүмән, башҡорт мәктәптәренең көнүҙәк бурысы һанала.

Халыҡ ижады өлгөләрен, яҙыусыларыбыҙ әҫәрҙәрен өйрәнеү, тарих дәрестәрендә халҡыбыҙ тарихын, үҙ азатлығы өсөн көрәшен, башҡорт восстаниеларының ғәҙеллеген асып биреү, бихисап сәбәптәрен аңлатыу балала милли ғорурлыҡ тәрбиәләүҙә иң мөһим алымдарҙан һанала.

Дәрес материалын класҡа нисек бар шулай, шул килеш тәҡдим итергә ярамай. Уҡытыусының күңел донъяһында, рухи кисерештәрендә эшкәртелергә тейеш дәрес материалы. Артыҡ мөһим булмағандары төшөрөп ҡалдырыла, әһәмиәтле, мәғәнәле өлөштәре өҫтәлмә мәғлүмәттәр менән байытыла, үҫтерелә. Артабан ул бер нисә проблема рәүешендә класс хөкөмөнә сығарыла. Ана шул проблемаларҙы уҡыусылар үҙҙәре хәл итергә тейеш. Балалар өсөн үҙҙәре тапҡан белем ҡәҙерлерәк.

Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре, уларҙың тормошон, милли мәҙәниәтте үҫтереүҙәге эшмәкәрлеген өйрәнеү аша ла милли ғорурлыҡ тойғоһон үҫтереп була.

Башҡорт халҡы бал ҡорто, ҡырмыҫҡа һымаҡ үҙ көсө, үҙ ҡеүәте менән үҙ сәнғәтен, үҙ мәҙәниәтен булдырған. Бөгөнгө көндә тоҡлап түгел, вагонлап алтынын һәм башҡа байлығын талаған кеүек, башҡорттарҙың меңәр йыллап ижад иткән рухи хазиналарын да башҡа милләттәр үҙләштергән. Хәҙерге көндә халыҡ ижадының күркәм өлгөләре башҡа халыҡтарҙа ла бар. Уны әҙәбиәтселәр уртаҡ хазина тип йөрөтәләр, ләкин һәр уртаҡ әйберҙең дә тәү хужаһы, тәү сығанағы бар икәнен оноталар. Бына шуларҙы ла балаларға төшөндөрөү милли рухи хазиналарға ғорурланыу, һоҡланыу тойғоһо уятасаҡ.

Дәрестә нәҫел шәжәрәһен төҙөтөү баланы үҙаллы эҙләнеүгә, нәҫел тамырҙарын юллауға ылыҡтыра. Халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын, нәҫел-нәсәп тарихын белеүсе аҡһаҡалдар, олатайҙар, инәйҙәр менән, ҡаһармандар, ғалимдар, яҙыусылар, милли сәнғәт оҫталары менән дәрестә, йә булмаһа кластан тыш сараларҙа осрашыуҙар үткәреү балаларҙың милли тойғоларын сәләмәтләндерер һәм артабан үҫтерер ине.

## Тел дәрестәрендә уҡыусыларҙы рухи яҡтан үҫтереү

Халыҡ тигән төшөнсәгә ҙур мәғәнә һалынған. Бер халыҡ икенсеһенә оҡшамаған, һәр халыҡтың үҙ теле, үҙ ижады, үҙ ғөрөф-ғәҙәте, үҙ йәшәү рәүеше. Белем һәм тәрбиә биреү юлдары ла халыҡтың милли үҙенсәлегенә бәйләнгән. Халыҡта бик тапҡыр әйтем бар: ана һөтө менән инмәгән тана һөтө менән инмәҫ. Тимәк, К.Д.Ушинский әйткәнсә, һәр халыҡтың үҙ тәрбиәүи системаһы бар. Ана шунан сығып, тәрбиә биреү, белем биреү системаһына ла милли айырымлыҡ, милли үҙенсәлек, милли ҡанундар һалынған тип әйтергә була.

Тәрбиә һәм белем биреү халыҡ кеүек боронғо. Бер халыҡтың ҡануни тәртиптәрен икенсе халыҡтың мөхитенә күсереп, урынлаштырып булмай. Әгәр күсерһәк, урынлаштырһаҡ, халыҡтың йәшәү рәүешендәге борон-борондан килгән ҡан-ҡанун, заң-закон боҙола, тарихи аң зәғифләнә, милли рух көсһөҙләнә. Бындай ғәрәсәтте халҡым үҙ аңында, үҙ ҡанында, үҙ рухиәтендә кисерҙе инде.

Ә нимә һуң ул рух? Был төшөнсәгә ниндәй йөкмәтке һалынған? Уның әрәсәһенә (асылына) төшөнөп ҡарайыҡ. Ф.Энгельс һүҙҙәре менән әйткәндә, рух ул материяның «иң юғары төҫө», «аҡыл, дәрт». Фәлсәфә фәнендә лә рух төшөнсәһен төрлөсә аңлаталар: берен-

сенән, ул фекерләү, аң; икенсенән, ул ихтыяр, тойғо, хис, хыял, уй, фараз, һиҙгерлек, зирәклек; өсөнсөнән, рух — аңдың синонимы. Мифологияла, диндә рух төшөнсәһен ен, әруах тип йөрөтәләр. Аңлатмалы һүҙлектәрҙә лә рухҡа төрлөсә юҫыҡта күҙаллау бирелә. Мәҫәлән, башҡортса: кешенең эске уй-тойғоһо; күңел, йән; кешенең эске хәле, әхлаҡи көсө; урыҫса: эшмәкәрлеккә этәреүсе аң, фекерләү, психик һәләтлек; эске әхлаҡи көс. Бына шулай. Әммә рух төшөнсәһенә тәғәйен аңлатма юҡ. Халыҡта шундай һүҙ ишетергә тура килә: башҡорт рухында тәрбиәләнгән, урыҫ рухында тәрбиәләнгән һ.б. Әйтәйек, «ғөмүмән кеше (человек вообще)» булмаған кеүек, дөйөмләштерелгән рух та булмай. Кеше ниндәйҙер бер халыҡҡа, милләткә ҡарай. Шул рәүешле рухтың да милли үҙенсәлеге бар. Минеңсә, рух ул кешенең милли әхлаҡи көсө, милли үҙаң кимәле.

Рухи яҡтан сәләмәт, көслө шәхес тәрбиәләүҙә башҡорт теле уҡытыусыһының роле ҙур. Сөнки бөгөнгө мәктәптәрҙә (хатта башҡорт мәктәбе тип аталғандарында ла) туған телдәге һүҙҙе башҡорт теле дәресендә генә ишетергә мөмкин.

Балаларға рухи тәрбиә биреү, уларҙың милли үҙаңын үҫтереү юлдары бик күп. Бының өсөн тапалған ҡалыптарҙан, ялҡытҡыс эш төрҙәренән (мәҫәлән: күнегеүҙе уҡып сыҡ, төшөп ҡалған хәрефтәрен, һүҙҙәрен өҫтәп, күсереп яҙ; күнегеүҙе күсереп яҙ, эйәлек ялғаулы исемдәрҙең аҫтына һыҙ һ.б.) арынырға кәрәк. Дәрестең структураһын да йөкмәткеһен дә бер ни тиклем үҙгәртергә тура килә. Әҙәбиәт дәресенең дауамы тел дәресендә, тел дәресенең дауамы әҙәбиәт дәресендә барырға мөмкин. Халыҡ ижады, урындағы тарих, ырыуҙың арҙаҡлы шәхестәре, ер-һыу атамаларының тарихы һәм легендалары, беҙҙең нәҫелдең шәжәрәһе, ырыуыбыҙҙың төп символдары (ораны, тамғаһы, ҡошо, ағасы), халҡыбыҙҙың йәшәү рәүеше, йолалар, ғөрөф-ғәҙәт менән бәйле материалдар башҡорт теле дәресендә киң ҡулланылырға тейеш. Бала үҙ нәҫеленең һөйләү теле менән дә ҡыҙыҡһыныусан. Был да уҡытыусының иғтибарынан ситтә ҡалмаһын. Тимәк, дәрестә предмет-ара бәйләнеш ғәҙәти күренешкә әйләнәсәк.

Әйткәндәй, предмет-ара бәйләнеш төшөнсәһе методикала яңы бер күренеш түгел. Ул борон-борондан уҡыу-уҡытыу системаһының нигеҙ ташын тәшкил иткән. Мәҫәлән, телдәге бер законлыҡты үҙ аллы ғына күҙ алдына килтереп булмай. Ул башҡа законлыҡтар менән тығыҙ бәйләнештә килә. Методик принцип булараҡ, предмет-ара бәйләнешкә методистар ҙа, уҡытыусылар ҙа әллә ни иғти-

бар итеп барманылар. Заманында бәлки уның кәрәге лә шул тик-лем генә булғандыр. Әммә шуны ла әйтергә кәрәк: хәҙерге көндә ҡушма дәрес (интегрированный урок) тигәндәренең дә нигеҙендә предмет-ара бәйләнеш ята.

Әлбиттә, дәрестә теге йәки был методик принципты, алымды ҡулланыу үҙмаҡсат түгел. Әммә баланың күңел шаршауҙарын асып, уға халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәренән сығып, белем һәм тәрбиә биреүҙә предмет-ара бәйләнеш принцибы мөһим роль уйнаясаҡ. Балаларҙа милли үҙаң, милли ғорурлыҡ кеүек сифаттарҙы булды-рыуҙа, артабан үҫтереүҙә тел дәрестәрендә уҡытыусы әҙәбиәткә, халыҡтың этнографияһына, ауыҙ-тел ижад өлгөләренә, тарихына таянасаҡ. Дәрестә ҡулланылған дидактик материал (һөйләм, күнегеү, бәйләнешле текст, диктант һәм изложение өсөн һайланған өҙөктәр һ.б.) тәрбиәүи йөкмәткеле булырға тейеш. Әгәр урынлы ҡулланһаң, һүҙ бик ҙур көскә эйә. «Йылы һүҙ таш иретер», «яҡшы һүҙ — ярты ырыҫ», «уҡ йөрәктән үтә, һүҙ һөйәктән үтә» тип, халыҡ юҡҡа әйтмәгән.

Бөгөнгө кинотеатрҙарҙа, зәңгәр экрандарҙа ныҡлы урын алған сит ил фильмдары ла баланың күңелендәге әҙәп, әхлаҡ сифаттарын ҡыҫырыҡлап сығарырға тырыша, уны бәғерһеҙлеккә өйрәтә. Баланың рухи сәләмәтлеге тураһында хәстәрлек биләүҙән башлана. Мәктәптә иһә уның рухи һаулығы нығытыла, сыныҡтырыла. Башҡорт теле дәрестәрендә күнегеү текстарының йөкмәткеһен, аңлашылмаған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен, мәҡәлдәрҙең, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең, юрау-һынамыштарҙың эстәлеген аңлатыу аша баланың рухи донъяһына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Әйтәйек, уҡыусыларға шундай күнегеү тәҡдим ителде ти: *«Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү» (М.Өмөтбаев. Башҡорттар.)*. Был күнегеү буйынса төрлө эштәр тәҡдим итергә мөмкин. Бына уларҙың яҡынса бер нисәүе:

1. Ҡилтерелгән өҙөктөң йөкмәткеһен аңлат.

2. Аңлатмалы һүҙлектән *аҫаба, ырыу, риүәйәт* һүҙҙәренең мәғәнәләрен асыҡла.

3. Үҙ ырыуың төшөнсәһен нисек аңлайһың?

4. Йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу тигән һүҙҙәргә ниндәй мәғәнә һалынды икән?

Яуаптар ҙа төрлөсә булырға мөмкин, ҡайһыларына бөтөнләй булмауы ла ихтимал. Быйдай өҫтәлмә эштәргә, ҡапыл-ғара уй-фекер йөрөтөүгә күнектерелмәгән бала яуап бирә алмаһа ла ғәжәп түгел. Бының өсөн уны ғәйепләп булмай. Яуаптар түбәндәгесә булырға мөмкин:

1. Өҙөккә тәрән йөкмәтке һалынған. Башҡортлоҡ төшөнсәһенә автор тағы ла өс шартты өҫтәгән. Башҡорт кешеһе үҙ ырыуының символдарынан (ҡошо, ағасы, ораны, тамғаһы) тыш нәҫел тамырҙарын, ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуыуын, үҙ халҡының боронғо хикәйәттәрен, эпостарын белергә тейеш.

2. *Аҫаба* — нәҫелдән күсә килгән ерҙең хужаһы; *ырыу* — бер нәҫелдән ишәйеп, бер халык берәмеге булып киткән төркөм; бер ата-бабанан таралған нәҫел, зат; *риүәйәт* — хикәйәт.

3. Үҙ ата-бабаңдан таралған нәҫел, зат.

4. Бында ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуыу мәғәнәһе һалынған.

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев өләң һүҙенә эпос мәғәнәһен һалған. Был хаҡта балаларға әйтеп кителә. Уҡыусыларҙың яуаптарын йомғаҡлап, уҡытыусы үҙе өҙөккә аңлатма бирә.

Беренсенән, үҙеңдең ете быуыныңды белеүҙе шарт итеп ҡуя. Был инде борон-борондан башҡорттарҙың йәшәү рәүешендә ныҡлы ҡуйылған тәртиптәрҙең береһе һанала. Ҡанбабалар, ырыу башлыҡтары үҙ кешеләренең ныҡлы һаулығы, сәләмәтлеге хаҡында хәстәрлек күргәндәр. Үҙеңдең яҡын ҡан-ҡәрҙәшең менән ғаилә ҡорһаң, ҡан боҙола, һөҙөмтәлә зәғиф балалар тыуа. Ауырыу кеше ырыуҙың терәге, таянысы була алмай. Сөнки уның ырыуҙы сит-ят баҫҡынсыларҙан ҡурсалау мөмкинселеге юҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар иһә физик яҡтан һәм аҡыл йәһәтенән нәҫелгә көслө үрсем килтереүҙән мәхрүм. Нәҫел ҡанының таҙалығы, сафлығы өсөн яуаплылыҡ ҙур булған. Тимәк, ете быуындың аръяғындағы быуын вәкилдәренә генә өйләнеү, тормошҡа сығыу рөхсәт ителгән. Ырыу аҡһаҡалдары сит ҡәүем кешеһе (икенсе милләт) менән ғаилә ҡороуға ла ҡаршы булғандар. Ана шулай итеп нәҫел тамырының ныҡлығын, нәҫел ҡанының сафлығын һаҡлағандар.

Икенсенән, йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу шарт итеп ҡуйылған. Ә беҙ уларҙы беләбеҙме һуң? Белгәндәребеҙ ҙә бик самалы. Мәҫәлән, Бәләкәй Етегән, Ҙур Етегән, Өлкәр, Арҡысаҡ, Сулпан, Тимер ҡаҙыҡ, Ҡош юлы һ.б. Әммә һүҙ был йондоҙҙар тураһында түгел, һәр кеше билдәле бер йондоҙлоҡ аҫтында тыуа. Кешенең яҙмышы, киләсәге шул йондоҙлоҡ менән бәйләнгән. Мәҫәлән,

Һыуғояр йондоҙлоғо аҫтында тыуған кеше Игеҙәктәр йондоҙлоғо аҫтында тыуған кеше менән ғаилә ҡора аламы? Әгәр ғаилә ҡорһалар, бәхетле булырҙармы? Ул ғаилә ырыу ҡотон ишәйтерме? Ана шул турала хәстәрлек күргәндәр беҙҙең ҡанбабаларыбыҙ, сөнки ырыуҙың ныҡлығы ғаилә ныҡлығынан килә.

Өсөнсөнән, үҙ халҡындың боронғо хикәйәттәрен, эпостарын белеү мотлаҡ булған. Халҡыбыҙҙың йәшәү рәүеше, боронғо тарихы, фәлсәфәһе, рухиәте, педагогикаһы эпостарыбыҙҙа, ҡобайырҙарыбыҙҙа, хикәйәттәребеҙҙә, мәҡәл-йомаҡтарыбыҙҙа ята. Ана шуларҙы ныҡлап өйрәнеү аша беҙ тарихи аңыбыҙҙы, хәтеребеҙҙе әленән-әле яңыртабыҙ, рухыбыҙҙы байытабыҙ. Үткәнебеҙ, рухи ҡиммәттәребеҙ менән көслөбеҙ. Уларҙан рухи тамырҙарыбыҙға яңынан-яңы көс алабыҙ.

Бына шундай аңлатма биреүе ихтимал уҡытыусы. Аңлатма, әлбиттә, яҡынса өлгө рәүешендә килтерелде. Уҡыусыларҙың милли үҙаңын үҫтереү, милли ғорурлыҡ тойғоһон байытыу туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәренең төп маҡсатына әйләнә бара. Дәреслектәрҙәге материалдарға йәбешеп ятырға ярамай. Улар ижади үҫтерелергә тейеш. Йә булмаһа улар баланың рухын үҫтереүгә йүнәлтелгән күнегеүҙәр менән алмаштырыла. Ул ваҡытта дәресте предмет-ара бәйләнеш принцибына ҡороу, шул нигеҙҙә уҡыусыларҙың зиһенен һәр яҡлап үҫтереү ғәҙәти күренешкә әйләнәсәк. Дәрес биреү балаларға ниндәй ҙә булһа һабаҡ биреүгә йүнәлтелә. Мәҫәлән, ябай һөйләм, хәл һ.б. темаларҙы үткән саҡта түбәндәге миҫалды ҡулланырға була.

*Ҡара ла ъына урман, ҡая бите*
*Шаулайҙыр ҙа кисен ел саҡта.*
*Ташҡайҙаръа соҡоп ҡаръыш яҙҙым,*
*Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.*

Өҙөк «Тәфтиләү» йырынан алынды. Күнегеү өсөн алдан тәғәйенләнгән биремдәрҙе башҡарғандан һуң, өҙөк буйынса әңгәмә ойошторола. Әңгәмәлә 1736-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы, татар мырҙаһы Тәфтиләүҙең башҡорттарға ҡарата ҡанһыҙлығы, һөйәнтүз фажиғәһе төп урынды алырға тейеш. Үҙ азатлығы өсөн көрәшеп баштарын һалған ир-уҙамандарыбыҙҙың һөйәктәре өҫтөндә төҙөлгән ҡалалар, ҡәлғәләр тураһында ла балаларҙың аңына һеңдереү кәрәк. Сөнки үҙ халҡының ысын тарихын уҡыусылар белергә тейеш. Былар хаҡында «Башҡортостан тарихы» фәнен

уҡытҡан уҡытыусы үҙ дәресендә тейешенсә аңлата алмауы, йә булмаһа, кәрәк тип һанамауы ла мөмкин. Быны ң сәбәбе ябай: күпселек мәктәптәрҙә был фән башҡорт халҡыны ң үткәненә битараф булған йәки тарихты боҙоп аңлатыусы уҡытыусылар хөкөмөнә тапшырылған.

Артабан уҡытыусы балаларҙың иғтибарын өҙөктөң «Ташҡайҙарҙы соҡоп ҡарғыш яҙҙым...» тигән юлына йүнәлтә. Бында башҡорт яҙмаһы, уның тарихының бер ярсығы ята. Юғиһә Октябрь революцияһына тиклем башҡорттоң яҙмаһы булмаған тигән сәйәсәт үткәрелә килә. Урыҫ тарихсыларының яҙыуынса, урта быуаттарҙа юғары цивилизацияға эйә булған халыҡ бит әле башҡорттар (был хаҡта ҡарағыҙ: Степи Евразии в эпоху средневековья. М.: «Наука», 1981, 238-се бит.). Ижтимағи үҫеш кимәле юғары һәм мәҙәниәте алға киткән халыҡтың үҙ яҙмаһы ла булған, әлбиттә. Башҡорттар борон-борондан ташҡа, тирегә, туҙға яҙғандар. Ана шулай үҙ тарихының фәһемле саҡтыларын килер быуындарға еткерергә тырышҡан. Быуындар сылбыры, быуындар бәйләнеше бер ҡасан да өҙөлөргә тейеш түгел. Боронғо ата-бабаларыбыҙ беҙгә шул тиклем бай рухи мираҫ ҡалдырған. Шуларҙы телдән-телгә тапшырыу сараһы булараҡ, халҡыбыҙҙа сәсәнлек сифаты үҫеш алмаһа, яҙмаһы булмаһа, шундай бай рухи хазинабыҙҙан (халыҡ ижады гәүһәрҙәренән), тарихыбыҙҙан мәхрүм ҡалыр инек. Ташҡа ырып яҙыу тураһында «Илсе Ғайса» йырында ла әйтелә. Мәҫәлән:

*Һау-сәләмәт ҡайтһам ил генәмә,*
*Тарих яҙыр инем ташына.*

Шулай итеп, башҡорт халҡының борон-борондан үҙ яҙмаһы булған.

Башҡорт яҙмаһы тураһында күп һөйләргә мөмкин. Шуға күрә ул турала бер күнегеү материалы нигеҙендә йәки бер дәрестә генә һөйләп бөтөрөп булмаясаҡ. Ул хаҡта уҡытыусының әңгәмәһе тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә лә үткәрелергә мөмкин. Әйтәйек, ныҒынған һүҙбәйләнештәрҙе, мәҡәлдәрҙе, йырҙарҙы, экиәттәрҙе, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен (мәҫәлән, Һ.Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын) үткән саҡта башҡорттоң яҙмаһы тураһында һүҙ алып бармау мөмкин дә түгел, мәҫәлән, ҡолағыңа киртеп ҡуй, мыйығыңа урап ҡуй, яулығыңа төйнәп ҡуй, туҙға яҙмағанды һөйләмә, боҙҙа яҙыу тормаҫ, ташҡа яҙылған, ташҡа баҫылған; йәш саҡта уҡыу — ташҡа яҙыу, ҡартайғас уҡыу — боҙға яҙыу; һүҙ онотола — яҙған ҡала; яҙмаған-

ды таҙ уҡыр; яҙыу белгән хур булмаҫ; яҡшы үлһә — ат ҡалыр, ғалим үлһә — хат (йәғни яҙыу) ҡалыр; ат күргән ат таныр, остаз күргән хат таныр; байлыҡ боҙға яҙған, ғилем ташҡа яҙған һ.б. әйтем-мәҡәлдәрҙә, нығынған Һүҙбәйләнештәрҙә яҙыу тарихы ята.

Профессор Ҡ.З.Әхмәров яҙыуҙың башланғысын шартлы предметтарҙа күрә. Гөлйөҙөмдөң Айбулатҡа («Ырғыҙ») ебәргән ҡайнар сәләме (һүнгән шырпы, күгәрсен ҡауырһыны, кешмир яулыҡтың ике бөртөк сәскәһе) — быға асыҡ миҫал. Артабан ғалим башҡорттарҙың бирка (ағасҡа киртеп яҙыу), төйөн яҙыуын, орхон-енисей яҙыуын ҡулланыуҙары тураһында ла әйтеп үтә (был хаҡта ҡарағыҙ: Ҡ.З.Әхмәров. Башҡорт яҙыуы тарихынан. Өфө, 1972, 6-7, 29-31-се биттәр).

Күнегеүҙең йөкмәткеһенә, үтеләсәк темаға ҡарата уҡытыусының мөнәсәбәте, хәл ителеүҙе талап иткән ниндәйҙер проблемалары була. Улар үҙ сиратында тел һәм телмәр, әҙәбиәт һәм әҙәп, халыҡ ижады һәм йәшәү рәүеше, тарих һәм хикәйәттәр, мәҙәниәт һәм милләт, заман һәм тел, әҙәбиәт һәм башҡа шундай көн үҙәгендәге проблемаларға ҡайтып ҡала. Һөҙөмтәлә әллә күпме проблемалар сылбыры барлыҡҡа килә. Уҡытыусы шул проблемаларҙы бергә ҡушып, төҙөк бер системаға килтереп баланың рухын, милли үҙаңын уятыу, милли ғорурлыҡ тойғоһон, күңелен үҫтереү өсөн бөтә көсөн йәлеп итергә тейеш, минеңсә. Тик шул саҡта ғына үҙенең милли асылына эйә булған яңы быуын үҫеп сығыр ине.

## Һөйләү телмәрен үҫтереүҙә үҫтереүле анализ һәм үҫтереүле синтез

Балаға ихлас, эскерһеҙ ҡараш кәрәк. Уға уҙ тиңең күреп өндәшеү мөһим. Дәрестәге һәр эштә уға таянырға, һәр эшкә уны ылыҡтырырға тырышыу зарур. Ҡыҙыҡтырыу принцибынан сығып, дәрестә һәр баланың әүҙем ҡатнашыуына ирешеп була. Быны өсөн төрлө алымдарҙы ҡулланырға мөмкин. Мәҫәлән, күнегеүҙәр аша ла баланың үҙ аллылығын, ижади һәм күркәм фекер йөрөтөү һәләтен үҫтереп була. Әммә дәреслектәрҙәге күнегеүҙәрҙең биремдәре кеүек гел бер төрлө ҡалыплашҡан эштәр тәҡдим итергә ярамай. Күнегеүҙәрҙең үҫтереүле биремдәренә күберәк иғтибар итеү мөһим. Бер үк күнегеүҙе лә бер нисә вариантта эшләп була, тик биремдәре генә бер-береһенән айырыла. Түбәндә бер үк текст өҫтөндәге эштең бер нисә үрнәге бирелә.

*Көн салт аяҙ.*

*Ҡаш өҫтөңә ҡулыңды ҡуй ҙа ҡара, алыҫ-алыҫтарға һуҙылып киткән киң яландар ус төбөндә кеүек кенә булыр. Ҡойоп торған ямғырҙар туҡтағанға бер аҙна үтте инде. Көндәр ҡапыл йылы, ҡояшлы булып киткәс, ҡамыл төптәре йомшаҡ ҡурпылар менән ҡапланды. Улар хәҙер әллә ни ерҙән күм-күкләнеп, йылҡылдап, күҙҙең яуын алып яталар. Көнбағыш баҫыуҙары ла тотош һары сәскәгә күмелеп ултырмай инде. Ашыҡмай, ләкин бар нәмәгә үҙенең һорғолт тамғаһын һалып, көҙ яҡынлаша, көҙ. Торналар сыңрауы әленән-әле күгелйем, һауа киңлегендә оҙаҡҡа һуҙылып иләҫләндереп тора. (Б.Бикбай. Аҡселән ташҡанда.).*

1. Эш: өҙөктө уҡығыҙ. Аңлатмалы һүҙлекте файҙаланып, салт, аяҙ, ҡурпы, ҡапыл, ус төбөндә кеүек, күҙҙең яуын алып һүҙҙәренең һәм һүҙбәйләнештәренең мәғәнәләрен дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ. Өҙөккә исем бирегеҙ.

2. *Уҡытыусы:* Хәҙер иғтибарҙы таҡталағы тексҡа йүнәлтәйек әле. Өҙөктө тәүҙә үҙем уҡып сығам (уҡый). Методик иҫкәрмә:

Әлбиттә, бында иң тәүҙә синыфҡа шундай һорауҙар ҙа бирергә мөмкин:

— Был өҙөк оҡшаймы? Оҡшаһа, ҡайһы яғы менән һеҙгә яҡын ул?

— Өҙөктә нимә тураһында һүҙ бара?

— Бында автор нимә хаҡында хәбәр итергә теләгән?

Әммә бындай һорауҙар уҡыусыларҙың әүҙемлеген үҫтермәй. Шуға күрә һәр дәрестә, һәр эштә һорауҙарҙың үҫтереүле төрҙәрен биреү мөһим, һәр эш, һәр бирем баланың иғтибарын үҙенә тартһын, ҡыҙыҡтырһын, уйландырһын уны. Дәрестең әүҙемлеге баланың һәр эшкә ҡыҙыҡһыныуы аша хәл ителә. Уҡыусыларҙың әүҙемлегенә фәҡәт үҫтереүле эш төрҙәре, һорауҙар, биремдәр менән ирешеп була. Мәҫәлән, үрҙәге өҙөк буйынса эш тәҡдим итер алдынан иң элек һүҙлек эшен үткәреү кәрәк. Текстағы, өҙөктәге, күнегеүҙәрҙәге һәр һүҙҙең лексик мәғәнәһе балаларға аңлашылырға тейеш. Әгәр өҙөктә бер генә һүҙ йәки бер генә һүҙбәйләнеш балаға аңлайышһыҙ ҡала икән, ул текстағы хәл-ваҡиғаның дөйөм мәғәнәһен тулыһынса үҙләштерә, күңеленә һеңдерә алмаясаҡ.

Һүҙлек эшен үткәргән саҡта ла балаларҙың үҙҙәрен ылыҡтырырға кәрәк. Уларҙың көсөн һынап ҡарау мөһим. Һәр аңлашылмаған һүҙҙең лексик мәғәнәһен уҡытыусы үҙе әйтеп барһа, дәрестең әүҙемлеге һүрелә. Синыфта дөйөм үҫеше йәһәтенән төрлө ки-

мәлдәге балалар тупланған, һүҙгә, уның мәғәнәһенә иғтибарлы бала һәр синыфта булырға мөмкин. Уҡыусыларҙың көсөнә ышанырға кәрәк. Уларҙың береһе белмәһә, икенсеһе йә иһә өсөнсөһө барыбер беләсәк. Балаларға ышаныс менән ҡарау уларҙы дәрестән дәрескә әүҙемләштерә. Уҡыусыларҙың әүҙемлеге дәрестең уңышын хәл итә. Икенсе яҡтан баланың һүҙгә һиҙгерлеген, ҡыҙыҡһыныуын үҫтерә.

*Уҡытыусы:* Тәүге һөйләмдә автор ни өсөн салт һүҙен ҡулланған? Салт һүҙе менән автор нимә әйтергә теләгән?

*Уҡыусы:* Көндөң болотһоҙ икәнен.

*Уҡыусы:* Көн ап-аяҙ.

*Уҡыусы:* Көн ныҡ аяҙ.

*Уҡыусы:* Күктә бер болот та юҡ.

*Уҡыусы:* Көн шул тиклем аяҙ.

*Уҡыусы:* Көн һәләк аяҙ.

*Уҡыусы:* Көн зәһәр аяҙ.

*Уҡыусы:* Көн шар аяҙ.

*Уҡытыусы:* Бик матур аңлаттығыҙ, уҡыусылар. Телегеҙҙән ҡыуанығыҙ. Хәҙер беҙ ошо өҙөккә үҙгәрештәр индерәбеҙ. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ. Улар урынына матурыраҡ һүҙҙәр һайлап ҡарайыҡ, һеҙ барығыҙ ҙа әҙәби редакторҙар икән, ти. Ә кем һуң ул редактор?

*Уҡыусы:* Гәзит-журналдар сығарыусы.

*Уҡыусы:* Китаптар сығарыусы.

*Уҡытыусы:* Нигеҙҙә дөрөҫ яуап бирҙегеҙ. Шулай ҙа ул һүҙҙең лексик мәғәнәһен асыҡлап үтәйек. Быны өсөн аңлатмалы һүҙлек һеҙгә ярҙам итәсәк. «Редактор» һүҙен ҡарап әйтеп ебәрегеҙ әле, ниндәй мәғәнә аңлата икән? Кем тиҙерәк таба?

*Уҡыусы:* «Редактор» һүҙе ике мәғәнәгә эйә. Беренсе мәғәнәһе: тексты ҡарап төҙәткән кеше. Икенсеһе — баҫманы (китапты, гәзит-журналды) донъяға сығарған ойошманың етәксеһе, йөкмәткеһен раҫлаусы.

*Уҡытыусы:* Беҙгә уның беренсе мәғәнәһе тап килә. Хәҙер ошо өҙөктө ҡарап, төҙәтеп сығайыҡ әле. Өҙөктәге һәр һүҙгә иғтибар итегеҙ. Башта үҙем бер ике һүҙен төҙәтеп сығам, һеҙ күҙәтеп барығыҙ. Тәүге һөйләмен автор «Көн салт аяҙ» тип алған. Быны шул көйө ҡалдырабыҙ. Унда төҙәтер йәки икенсе башҡа берәйе менән алмаштырыр һүҙ юҡ. Икенсе һөйләмдә «Ҡаш өҫтөңә ҡулыңды ҡуй ҙа ҡара» тип әйтә лә автор «булыр» һүҙе менән

тамамлай. Иғтибар итегеҙ: «ҡара» тигәс «булыр» урынына «күренер» тип алһаҡ, һөйләм матурланмаймы? (Таҡтаның бер яҡ ситенә уҡытыусы өҙөктөң төҙәтмәләр индерелгән вариантын яҙып бара).

*Уҡыусы:* Матурлана.

*Уҡыусы:* Ҡарағас, күренергә тейеш.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ әйттең. Ана шулай һәр һүҙгә талапсан булығыҙ.

*Уҡыусы:* Ялан һуҙыламы, әллә йәйеләме?

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ һорау бирҙең. Ҡүмәкләп уйлап ҡарағыҙ әле.

*Уҡыусы:* «Йәйелеп киткән киң яландар» тип үҙгәртәйек.

*Уҡыусы:* «Йәйрәп киткән киң яландар» тип алһаҡ, дөрөҫ була.

*Уҡыусы:* «Йәйрәп киткән» тип түгел, ә «йәйрәп ятҡан» тиһәк, тағы ла матурыраҡ була.

*Уҡытыусы:* Ҡайһылай дөрөҫ әйттегеҙ. Ана күпме редакторҙар бар икән беҙҙең синыфта! Һеҙҙең төҙәтмәләрҙе индереп, һөйләмде яңынан уҡып сығайыҡ әле.

*Уҡыусы:* «Ҡаш өҫтөңә ҡулыңды ҡуй ҙа ҡара, алыҫ-алыҫтарға йәйрәп ятҡан киң яландар ус төбөндәге кеүек кенә күренер».

*Уҡытыусы:* Йә, хәҙер әйтегеҙ инде, беҙ төҙәткән һөйләмме, әллә өҙөктәге һөйләм матурыраҡмы?

*Уҡыусы:* Беҙ төҙөгән һөйләм матур.

*Уҡытыусы:* Артабан үҙегеҙ тейешле төҙәтмәләр индерегеҙ, һәр һүҙгә, һүҙбәйләнешкә иғтибар итегеҙ.

*Уҡыусы:* «Ҡойоп торған» һүҙбәйләнешен «ҡойоп яуған» тип үҙгәртергә мөмкин.

*Уҡыусы:* Ул һүҙбәйләнеште «ҡойма» тип алһаҡ, матурыраҡ була.

*Уҡытыусы:* Иптәштәрегеҙҙең икеһе ике терлө «ҡойоп яуған» һәм «ҡойма» тип төҙәтергә тәҡдим итә. Шул төҙәтмәләрҙең ҡайһыһын алырға мөмкян? Уйлағыҙ әле.

*Уҡыусы:* «Ҡойма» тип алайыҡ.

*Уҡытыусы:* Ни өсөн? Иҫбат ит.

*Уҡыусы:* «Яуған» тип әйтһәк, шул уҡ «ямғыр» һүҙенең мәғәнәһе ҡабатлана кеүек, сөнки ямғыр һәм ҡарҙан башка предметтар яумай.

*Уҡыусы:* «Ҡойма» тип төҙәтһәк, һүҙбәйләнеш һүҙгә әйләнә, ыҡсымлана.

*Уҡыусы:* «Ҡойма» тип алһаҡ, «ҡойоп торған» һүҙбәйләнешенең мәғәнәһе көсәйә.

*Уҡытыусы:* Ҡүмәкләгән яу ҡайтарған тигәндәй, «ҡойма» мәғәнәһен һәм һөйләмдәге урынын өсөгөҙ өс яклап иҫбат иттегеҙ. Тимәк, «ҡойма» тип төҙәтеү индерәбеҙ.

*Уҡыусы:* «Туҡтағанға» һүҙенән һуң «ла» һүҙен өҫтәйек.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ, иҫбат ит.

*Уҡыусы:* «Ла» ябай бер теркәүес түгел, ә көсәйтеүсе сара.

*Уҡыусы:*Хәл-вакиғаны көсәйтә.

*Уҡыусы:* Һөйләмдең мәғәнәһен көсәйтә.

*Уҡытыусы:* Ҡайһылай килештереп, матур итеп аңлаттығыҙ. Дөрөҫ.

*Уҡыусы:* «Ни ерҙән» урынына «кайҙан» тип алырға мөмкин.

*Уҡытыусы:* Ни өсөн? Иҫбат ит.

*Уҡыусы:* Һөйләү телендә ғәҙәттә «әллә ҡайҙан» тип ҡулланыла.

*Уҡыусы:* «Әллә ни ерҙән» тип һөйләү — яһалма.

*Уҡыусы:* Улай һөйләргә тел ғәҙәтләнмәгән.

*Уҡытыусы:* Һеҙҙе тыңлап тороуы шундай рәхәт.

*Уҡыусы:* «Ҡүм-күкләнеп» урынына «күгәреп» тип алыу телгә яҡын була.

*Уҡытыусы:* Ә нимә һуң ул «телгә яҡын» тигәнең?

*Уҡыусы:*Халыҡта шулай һөйләү бар ҙа.

*Уҡыусы:* «Күңелгә яҡын», «йөрәккә яҡын», «йәнгә яҡын» тип әйтәбеҙ икән, «телгә яҡын» тигәне лә булырға тейеш.

*Уҡыусы:* Мәғәнәһе аңлайышлы, әйтеүгә еңел булған һүҙ телгә яҡын була.

*Уҡыусы:* Мин «Ҡүм-күкләнеп» урынына «күгәреп» тип алыу яғындамын.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ әйттегеҙ. «Телгә яҡын» һүҙбәйләнешен матур һәм дөрөҫ аңлаттығыҙ. Ысынлап та, «күм-күкләнеп» һүҙенә сағыштарғанда, «күгәреп» тигән мәғәнәле һүҙ телгә яҡын икән.

*Уҡыусы:* «Яталар» ҡылымында -лар ялғауы артык, минеңсә.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ, иҫбат ит.

*Уҡыусы:* Һөйләмдең хәбәрен «ята» тип алһаҡ та уның күплекте аңлатыуын эйәгә ҡарап беләбеҙ. Бында эйә булып «улар» алмашы килгән.

*Уҡыусы:* Бында «яталар» тип алһаҡ, урыҫса килеп сыға. Урыҫ теленә эйәреү бар бында.

*Уҡыусы:* «Улар ята» тиһәк, стилистик яҡтан дөрөҫ була. Һөйләм йыйнак та, матур ҙа.

*Уҡыусы:* «Улар» һәм -лар. Бында бер үк мәғәнә ҡабатлана кеүек, минеңсә.

*Уҡыусы:* Һөйләмдең эйәһе билдәһеҙ булғанда, хәбәре күплектә килергә мөмкин. Мәҫәлән, «Мәктәпте япкандар». «Ауылды бөтөрҙөләр». «Уны 1937 йылда аткандар».

*Уҡытыусы:* Бер-берегеҙҙең фекерен тулыландырып, бик матур, дөрөҫ аңлаттығыҙ. Рәхмәт. Хәҙер инде өҙөктө, һеҙ төҙәткәнсә, укып карайык әле. (Өҙөктө уҡыусыларҙың береһенән уҡыта):

*«Көн салт аяҙ.*

*Ҡаш өҫтөңә ҡулынды ҡуй ҙа ҡара: алыҫ-алыҫтарға йәйрәп ятҡан киң яландар ус төбөндә кеүек кенә күренер. Ҡойма ямғырҙар туҡтағанға ла бер аҙна үтте инде. Көндәр ҡапыл йылы, ҡояшлы булып киткәс, ҡамыл төптәре йомшаҡ ҡурпылар менән ҡапланды. Улар хәҙер әллә ҡайҙан күгәреп, йылҡылдап, күҙҙең яуын алып ята».*

*Уҡытыусы:* Һеҙҙең төҙәтмәләрегеҙҙән һуң өҙөк матурланды, мәғәнәгә байыны, һүҙ ҡәҙерен, һүҙ көсөн тойоуығыҙ өсөн рәхмәт. Телгә һәр сак һиҙгер булығыҙ. Телегеҙҙән ҡыуанығыҙ.

3. *Уҡытыусы:* Өҙөктөң һуңғы һөйләменә иғтибар итәйек әле. Ҡемегеҙ уҡып ишеттерә? Әйҙә һин уҡы.

*Уҡыусы:* «Торналар сыңрауы әленән-әле, күгелйем һауа киңлегендә оҙаҡҡа һуҙылып, иләҫләндереп тора».

*Уҡытыусы:* Был һөйләм йылдың ҡайһы миҙгелен күҙ алдыңа баҫтыра?

*Уҡыусы:* Көҙ миҙгеле күҙ алдына килә, сөнки «торналар сыңрауы» бар.

*Уҡыусы:* Ә ниңә яҙ түгел? Яҙ еткәс тә торналар сыңрап ҡайта бит.

*Уҡыусы:* Был һөйләм яҙ һәм көҙ миҙгелдәрен күҙ алдына баҫтыра.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ. Ә көҙ миҙгелен белдерһен өсөн был һөйләмгә ниндәй төҙәтеү индереп була? Уйлағыҙ әле.

*Уҡыусы:* «Торналар» һүҙе алдынан «китеп барған» тип өҫтәргә була.

*Уҡыусы:* «Йылы яҡҡа китеп барған торналар» тип алырға кәрәк.

*Уҡыусы:* «Йылы яҡҡа китергә йыйынған торналар» тип үҙгәртәйек.

*Уҡыусы:* «Йылы яҡтарға юл тотҡан торналар» тип алайыҡ.

*Уҡыусы:* «Алыҫ юлға йыйынған торналар» тип әйтһәк, һәйбәт була.

*Уҡытыусы:* Ни өсөн. Иҫбат ит.

*Уҡыусы:* «Йылы яҡҡа» тип әйтеү үҙе үк «көҙ»ҙө белдерә. Ә көҙ тип әйтмәйенсә лә көҙ миҙгелен белдереп була.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ әйттең. Телеңдән ҡыуан. Һүҙҙең көсөн тоя беләһең. Башҡа миҫалдар ҙа дөрөҫ булды, һүҙ ҡәҙерен тоя белеүгә ынтылыш бар. Хәҙер һөйләмдең төҙәтелгән вариантын уҡыйыҡ. Йә, һин уҡы.

*Уҡыусы:* «Алыҫ юлға йыйынған торналар сыңрауы әленән-әле, күгелйем һауа киңлегендә оҙаҡҡа һуҙылып, иләҫләндереп тора».

*Уҡытыусы:* Һөйләм матурайҙы. Күҙ миҙгелен дә күҙ алдына килтереп була. Ә хәҙер, уҡыусылар, торна тураһында һөйләшеп алайыҡ. Торна һәм уға бәйле нимәләр беләһегеҙ?

*Уҡыусы:* Торна изге ҡош. Уны атырға ярамай.

*Уҡыусы:* Торнаны атһаң, бәлә килә.

*Уҡыусы:* Торна ырыу ҡошо.

*Уҡыусы:* Торна исемендәге аралар бар.

*Уҡыусы:* «Сыңрау торна» көйө бар.

*Уҡыусы:* «Сыңрау торна» балеты бар.

*Уҡыусы:* Торна исемен йөрөткән ауылдыр бар.

*Уҡыусы:* Тауҙар, яландар бар.

*Уҡыусы:* «Сыңрау торна» легендаһы бар.

*Уҡытыусы:* Торна һәм уға бәйле бик күп нәмәләрҙе беләһегеҙ икән. Был бик һәйбәт. Торна тураһында ырым-ырауҙар ҙа бар. Борон-борондан торнаның изге ҡош икәненә ышанған беҙҙең халыҡ. Мәҫәлән, оҙаҡ атлай алмай ултырған бала, торналар ҡайтҡас, атлап китер булған. Ана шуға инде, торналар аяҡ алып ҡайтты тип ышанғандар. Теле асылмай ултырған бала, торналар ҡайтыу менән һөйләшә башлаған. Шуға күрә, торналар тел алып ҡайтты, тип ҡыуанғандар.

Тағы шуны ла иҫегеҙҙә тотоғоҙ, уҡыусылар: Х быуатта, йәғни 922 йылда башҡорттар илендә ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан туҡталып киткән. Уның әйтеүенә ҡарағанда, ниндәйҙер бер һуғыш ваҡытында башҡорттар еңелә башлаған, һуғыш барған ергә ҡайҙандыр торналар сыңрап, йәғни ҡысҡырышып, килеп сыҡҡандар. Шул саҡ дошмандар ҡаса башлаған. Шуға күрә башҡорттар торналарға табына. «Торналар — беҙҙең раббыбыҙ; (йәғни аллабыҙ, тәңребеҙ, хоҙайыбыҙ). Улар беҙҙең дошмандарыбыҙҙы ҡасырға мәжбүр итте», — тиҙәр. Ана шуның өсөн дә торна халҡыбыҙ тормошонда изге ҡош, ырыу ҡошо, тамға ҡошо. Мәҫәлән, үҫәргән ырыуының ҡошо — торна.

Халҡыбыҙҙың йәшәү рәүешен, ғөрөф-ғәҙәтен, ырымдарын, ырау-һынамыштарын белергә тейешбеҙ, уҡыусылар. Улар беҙҙең тере тарихыбыҙ, рухыбыҙ, рухи байлығыбыҙ.

* * *

Күреүегеҙсә, анализдың өсөнсө төрөндә уҡытыусы, үҫтереүле синтез принцибына таянып, торна һәм уның менән бәйле рухи ҡиммәттәребеҙ тураһында балаларҙың белемдәрен байҡай. Уҡыусыларҙың яуаптарына үҙенең белгәндәрен өҫтәп, йомғаҡлау яһай. Әммә ул ябай йомғаҡлау түгел. Балаларҙан алынған мәғлүмәт артабан үҫтерелә, дөйөмләштерелә. «Шулай итеп, бөгөн дәрестә шул теманы үттек» һымаҡ ҡоро һүҙ һөйләүҙән ҡотолорға кәрәк. Баланы тел биҫтәһе итеп түгел, ә һүҙ оҫтаһы итеп тәрбиәләү, үҫтереү мөһим. Класта эш, телмәр үҫтереү өсөн һайлап алған өҙөктәр, хатта айырым һөйләмдәр баланы уйландырырлыҡ йөкмәткелә булһын. Шулай уҡ уҡыусыларға тәҡдим иткән өҙөктәрҙә йәки һөйләмдәрҙә класс менән әңгәмәләшер өсөн терәк һүҙҙең булыуы шарт.

### *Күркәм (художестволы) фекерләү һәләтен үҫтереү*

Фекерләү йәғни фекер йөрөтөү, күркәмме ул, әллә ижадимы, писхологик эшмәкәрлек буларак, төшөнсәнән башлана. Ә инде төшөнсә үҙ сиратында һүҙҙә йәки һүҙбәйләнештә сағыла. Тимәк, ул һүҙ йәки һүҙбәйләнеш менән бирелә, аңлатыла. Төшөнсәне белдергән һүҙ ҙә йәки һүҙбәйләнеш тә исемгә ҡарай, һүҙҙәр донъяһында исемгә ҡарағандары бихисап. Исемде аңлау, төшөнөү йәки күҙ алдына килтереү уның үҙенә хас билдәләре тураһында фекер йөрөтөүҙән тыш мөмкин түгел. Ана шул билдәләрен күҙ уңында тотоп, ул исемдә, йәғни һүҙҙә йәки һүҙбәйләнештә сағылған төшөнсәне аңлайбыҙ.

Күркәм фекер йөрөтөүҙең дә башланғысы һүҙҙә йәки һүҙбәйләнештә һәм уларҙың үҙенә хас билдәләрендә сағыла. Бала һөйләгәндә матурлыҡты тасуирлаусы һүҙ менән бергә уның берәй билдәһен дә күҙ уңында тота йәки әйтеп тә ебәрә икән, ул күркәм телмәр менән эш итә. Күркәм телмәр — күркәм фекерләүҙең һөҙөмтәһе.

Психологтар, күркәм (художестволы) фекер йөрөтөү төшөнсәһен ғәмәлдә ҡулланһалар ҙа, күпселек осраҡта уның йөкмәткеһен ижади фекерләүгә ҡайтарып ҡалдыралар. Минеңсә, күркәм фекер йөрөтөү менән ижади фекерләү игеҙәк төшөсәләр түгел, ә фекерләүҙең үҙ аллы ике төрө һанала, һәр береһенең үҙенә хас психоло-

гик нигеҙенә туҡталып тормайынса, шуны әйтергә мөмкин: уларҙың икеһе лә, әлбиттә, ижадҡа мөнәсәбәтле, ләкин улар араһындағы айырманы ла күрмәү мөмкин түгел. Мәҫәлән, бала ниндәйҙер һөйләм уйлай икән, йә булмаһа, һөйләмдең берәй киҫәге урынына уның икенсе вариантын ҡуллана икән, был да үҙенә күрә ижади фекер йөрөтөүҙең һөҙөмтәһе булып тора.

Әгәр бала, образлы сағыштырыу, күркәм телмәр сараларын ҡулланып, тойғолар менән фекер йөрөтә икән, был инде күркәм (художестволы) фекерләү эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһе тигән һүҙ. Тимәк, күркәм фекер йөрөтөү гүзәллек, матурлыҡ төшөнсәләренә мөнәсәбәтле. Баланың эстетик зауығы, күңел күтәренкелеге, тойғолар балҡышы фәҡәт күркәм фекер йөрөтөү эшмәкәрлегенең сағылышы булып тора.

Уҡыусының күркәм фекер йөрөтөү һәләтен күрә беләбеҙме, уға иғтибар бирәбеҙме, күргән осраҡта ла, тейешенсә баһалайбыҙ микән? Уның күңел донъяһына үтеп инәбеҙме һуң? Ана шундай һорауҙар бер мине генә борсомайҙыр, тип уйлайым.

Баланың күркәм фекер йөрөтөү һәләте үҫтереүгә мохтаж. Бының өсөн тейешле шарттар тыуҙырыу мөһим. Күркәм фекер йөрөтөү теләген булдырыу кәрәк. Ундай теләк ниндәй саралар һәм алымдар ярҙамында барлыҡҡа килә? Баланы һоҡландыр, уйландыр, талпындыр, күңелен үҫтер. Уның күңел кинәнесе телмәрендәге күркәм һүҙҙә, һүҙбәйләнештәрҙә, фразеологик берәмектәрҙә, мәҡәлдәрҙә күренә. Бала һөйләп асыла. Бала күңеленә матур һүҙ, ышаныс һал. Күп тә үтмәҫ, ул һүҙ, баланан һиңә ҡайтып, йөҙөңдә йәйғор нурҙары балҡытыр.

Бала үҙ көсөнә, үҙенең һәләтенә ышанысын юғалтмаһын ине. Үҙенә ышанысты юғалтыу оло фажиғә. Уны матурлыҡты, нәфислекте тоя белергә өйрәтеү мөһим. Был инде үҙ сиратында баланың нәфис фекерләүен үҫтерә. Ә нимә һуң ул нәфис фекерләү? Ябайлаштырып әйткәндә, ул — тойғолар менән фекерләү. Кеше күңелендә яҡты хис-тойғо булған саҡта, үҙе лә абайламаҫтан, һиҙмәҫтән моңға тартыла, йырлап ебәрә. Тимәк, бала күңелендәге хис-тойғоно уятыу кәрәк. Бының өсөн берәй хәл-ваҡиғаны, предметты тасуирлағанда, баланың иғтибарын быға тиклем үҙе бигүк әһәмиәт бирмәгән билдәләргә йүнәлтеү мөһим. Әйтәйек, тексҡа анализ биргән саҡта баланы шул текстағы хәл-ваҡиғаларҙың эсенә алып инеү кәрәк. Анализдың ҡалыплашҡан алымдарынан бер ни тиклем ситкә тайпылып, уҡытыусы ҡайһы бер эш төрҙәре һәм проблемалы

һорауҙар менән балаларҙа текстағы хәл-ваҡиғаға ҡарата мөнәсәбәт уята. Мәҫәлән, уҡытыусылар өсөн күптән инде таныш булған өҙөктө алайыҡ.

*«Төн. Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле, күҙҙең яуын алып, йымылдап торған аяҙ күктә, алтын табаҡтай, тулған ай йөҙә. Таллыҡта һандуғастар сутылдаша. Тирәк башында кәкүк саҡыра. Ҡуләүектә тәлмәрйендәр баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы, үҙенең мәңге шат, шаян йырҙарын һандуғас моңдарына мансып, ҡыуана-көлә бер өҙлөкһөҙ сылтырап аға ла аға. Ағастар, сәскәләр, хайуандар, хатта ҡоштар ҙа йомшаҡ, еләҫ елдән һөйөлөп, көндөҙгө эҫе кәмегәнгә һөйөнөп байрам итә. Иҫ киткес рәхәт, гүзәл яҙғы төн тыншта». (З.Биишева. «Кәмһетелгәндәр».)*

*Уҡытыусы:* Өҙөктө иғтибарлап уҡып сығайыҡ әле (уҡытыусы үҙе уҡый). Автор беҙҙе тәбиғәт менән күҙмә-күҙ ҡалырға өндәй. Тәбиғәт менән күҙмә-күҙ ҡалғанығыҙ бармы?

*Уҡыусы:* Бар.

*Уҡыусы:* Күҙмә-күҙ ҡалыу нисек була?

*Уҡытыусы:* Икәүҙән икәү ҡалыу, икәү генә ҡалыуҙы күҙмә-күҙ ҡалыу тиҙәр. Бында тәбиғәт менән икәү генә ҡалыу. Тәбиғәт һине күҙәтә. Һин тәбиғәтте күҙәтәһең. Тәбиғәттең дә күҙе, ҡолағы бар. Һинең килгәнеңде күрә, ишетә.

*Уҡыусы:* Ә нисек күрә ул?

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ һорау бирҙең. Ысынлап та, тәбиғәт нисек күрә? Кем аңлатып бирер?

*Уҡыусы:* Һин килгәнде һиҙеп, сиңерткә һайрауынан туҡтай.

*Уҡыусы:* Урманға килеп инеү менән һайыҫҡан шыҡырыҡлай.

*Уҡыусы:* Үлән араһынан турғай осоп китә.

*Уҡыусы:* Юлыңды кеҫәртке киҫеп үтә.

*Уҡытыусы:* Бик матур итеп аңлатып бирҙегеҙ. Ана күпме күҙ-ҡолағы бар икән тәбиғәттең. Хәҙер тексҡа иғтибар итәйек. Өҙөктө яңынан үҙ аллы уҡып сығығыҙ (уҡыйҙар). Аңлатмалы һүҙлекте файҙаланып, өҙөктә ҡулланылған *аяҙ, мансыу, ҡуләүек* һүҙҙәренең мәғәнәләрен дәфтәрегеҙгә яҙығыҙ һәм хәтерегеҙҙә һаҡлағыҙ (балалар дәфтәрҙәренә яҙа). Хәҙер өҙөккә иғтибарҙы йүнәлтәбеҙ. Төн нисек һүрәтләнә?

*Уҡыусы:* Төн матур.

*Уҡыусы:* Йәнле.

*Уҡыусы:* Серле.

*Уҡытыусы:* Автор ниндәй һүрәтләү сараларын ҡулланған?

*Уҡыусы:* Тәңкәле еләң.

*Уҡыусы:* Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле.

*Уҡыусы:* Аяҙ күк.

*Уҡыусы:* Йондоҙҙар йымылдап тора.

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙең яуын алып йондоҙҙар йымылдай.

*Уҡыусы:* Ай алтын табаҡтай.

*Уҡыусы:* Айҙың тулған сағы.

*Уҡыусы:* Айҙы алтын табаҡҡа оҡшата.

*Уҡыусы:* Автор төрлө һүрәтләү сараларын ҡулланған.

*Уҡытыусы:* «Тәңкәле еләң шикелле» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

*Уҡыусы:* Ҡүктә күп йондоҙҙар яна.

*Уҡыусы:* Йондоҙҙарҙы тәңкәгә оҡшата.

*Уҡыусы:* Тәңкә кеүек йондоҙҙар балҡый.

*Уҡыусы:* Тәңкәле еләң ялтлап тора. Шуның кеүек йондоҙҙар йымылдай.

*Уҡытыусы:* «Ҡүҙҙең яуын алып» тигән һүҙбәйләнеште икенсе төрлөсә нисек әйтеп була?

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙе сағылдырып, тип әйтеп була.

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙе томалап.

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙе уйнатып.

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙең көсөн алып.

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙең нурын алып.

*Уҡыусы:* Ҡүҙҙе ҡамаштырып .

*Уҡытыусы:* Автор һүрәтләгәнгә оҡшаш төндө үҙегеҙ күргәнегәҙ бармы?

*Уҡыусы:* Бар.

*Уҡытыусы:* «Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле» тигән сағыштырыу ҡулланып, автор нимә әйтергә теләгән?

*Уҡыусы:* Тәбиғәттең урынын күрһәтергә теләгән.

*Уҡыусы:* Башҡортостан тәбиғәтен һүрәтләй.

*Уҡыусы:* Тәбиғәт күренешенә милли төҫ бирергә теләгән.

*Уҡыусы:* Тәбиғәтте йәшлеккә оҡшата.

*Уҡыусы:* Башҡорт ҡыҙының матурлығына тиңләй тәбиғәтте.

*Уҡыусы:* Артабан әҫәрҙә һүҙ башҡорт тормошо тураһында барыуын әйтергә теләгән.

*Уҡытыусы:* Был өҙөккә ниндәй исем бирер инегеҙ?

*Уҡыусы:* Төн.
*Уҡыусы:* Яҙғы төн.
*Уҡыусы:* Башҡортостан төнө.
*Уҡыусы:* Айлы төн.
*Уҡыусы:* Серле төн.
*Уҡыусы:* Башҡорт төнө.

*Уҡытыусы:* Яуаптарығыҙ миңә оҡшаны, һәр кем уйындағын, теләгәнен әйтергә тырышты. Өҙөккә бик матур исем уйлап таптығыҙ. Ә һин ни өсөн «Башҡорт төнө» тип атарға булдың?

*Уҡыусы:* Ошо өҙөктән һуң әҫәрҙә Сәғүрә менән Байгилденең ауыр тормошо тураһында һүҙ бара. Уларҙың тормошо төн һымаҡ.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ. Бик матур яуап бирҙең. Телеңдән ҡыуан. Уҡыусылар! Матурлыҡты тасуиралғанда, һүрәтләгәндә, матурлыҡ тураһында һөйләгәндә төрлө һүҙҙәр, һүрәтләү саралары менән матурлыҡтың матурлығын асабыҙ. Ысынлап та матур икәненә ышандырыр өсөй матурлыҡтың төрлө сифаттарын асып бирергә тырышабыҙ. Тексҡа иғтибар итегеҙ. Автор ҙа матурлыҡтың төрлө сифаттарын тасуирлай. Башҡаларҙы ла ышандырырлыҡ, уға ҡарап һоҡланырлыҡ итеп, һәр күренеште төрлө матур һүҙҙәр менән биҙәй, матурлай. Әйтегеҙ әле, төн ниндәй?

*Уҡыусы:* Яҙғы төн.
*Уҡыусы:* Матур төн.
*Уҡыусы:* Гүзәл төн.
*Уҡыусы:* Рәхәт төн.

*Уҡытыусы:* Ана шул билдәләргә автор тағы ла «иҫ киткес» һүҙбәйләнешен өҫтәй. Ни өсөн өҫтәй?

*Уҡыусы:* Билдәләрҙе көсәйтә.
*Уҡыусы:* Тағы ла көслөрәк, матурыраҡ икәнен әйтергә теләй.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ. «Иҫ киткес» һүҙбәйләнеше башҡа билдәләрҙе көсәйтеүсе сара. Тимәк, төн ниндәй?

*Уҡыусы:* Иҫ киткес гүзәл.
*Уҡыусы:* Иҫ киткес: рәхәт.
*Уҡытыусы:* Күк ниндәй?
*Уҡыусы:* Аяҙ.
*Уҡыусы:* Йымылдап торған.
*Уҡытыусы:* Нисек йымылдап торған?
*Уҡыусы:* Ҡуҙҙең яуын алып.
*Уҡытыусы:* Тағы ла күк ниндәй?
*Уҡыусы:* Башҡорт ҡыҙының тәңкәле еләне шикелле.

*Уҡытыусы:* Ай ниндәй?
*Уҡыусы:* Тулған ай.
*Уҡыусы:* Табаҡтай.
*Уҡыусы:* Алтын табаҡтай.
*Уҡытыусы:* Бында «табаҡтай» тигән билдәне көсәйтеп, матурлап, автор «алтын» һүҙен ҡулланған. Оло Эйек йылғаһының йыры ниндәй?
*Уҡыусы:* Шат.
*Уҡыусы:* Шаян.
*Уҡытыусы:* Шаян, шат билдәләрен тағы ла көсәйтеп, матурлап, автор ниндәй һүҙ ҡулланған?
*Уҡыусы:* Мәңге.
*Уҡытыусы:* Тимәк, йыр ниндәй?
*Уҡыусы:* Мәңге шаян.
*Уҡыусы:* Мәңге шат.
*Уҡытыусы:* Ел ниндәй?
*Уҡыусы:* Еләҫ.
*Уҡыусы:* Йомшаҡ.
*Уҡытыусы:* Тағы ла өҙөктө иғтибарлап ҡарайыҡ. Һүрәтләгән тәбиғәттә нимәләрҙе күрәбеҙ?
*Уҡыусы:* Таллыҡ, тирәклек, ай.
*Уҡыусы:* Ҡүләүек, Оло Эйек йылғаһы.
*Уҡыусы:* Ағастар, талдар, урман.
*Уҡыусы:* Хайуандар, ҡоштар.
*Уҡыусы:* Ҡәкүктәр, һандуғастар.
*Уҡыусы:* Тәлмәрйендәр.
*Уҡыусы:* Еләҫ ел.
*Уҡытыусы:* Иғтибар итегеҙ, бында бөтә нәмә йәнле. Таллыҡ ниндәй?
*Уҡыусы:* Таллык йәнле.
*Уҡытыусы:* Ни өсөн?
*Уҡыусы:* Сөнки унда һандуғастар сутылдаша.
*Уҡытыусы:* Тирәк ниндәй?
*Уҡыусы:* Тирәк йәнле.
*Уҡытыусы:* Ни өсөн?
*Уҡыусы:* Сөнки унда кәкүк саҡыра.
*Уҡытыусы:* Ҡүләүек ниндәй?
*Уҡыусы:* Ҡүләүек йәнле.
*Уҡытыусы:* Ни өсөн?

*Уҡыусы:* Сөнки унда тәлмәрйендәр баҡылдаша.
*Уҡытыусы:* Оло Эйек йылғаһы ниндәй?
*Уҡыусы:* Оло Эйек йылғаһы йәнле.
*Уҡытыусы:* Ни өсөн?
*Уҡыусы:* Ул сылтырап аға.
*Уҡыусы:* Ҡыуана-көлә аға.
*Уҡыусы:* Ул йырлап аға.
*Уҡытыусы:* Уның йыры ниндәй?
*Уҡыусы:* Ҡыуаныслы.
*Уҡыусы:* Уның йыры шат, шаян.
*Уҡыусы:* Уның йыры моңло
*Уҡытыусы:* Йыры ни өсөн моңло?
*Уҡыусы:* Сөнки ул сылтырап аға.
*Уҡыусы:* Сөнки ул һандуғас моңона ҡушылып аға.
*Уҡыусы:* Һандуғас моңдарына мансып аға.
*Уҡытыусы:* «Һандуғас моңдарына мансып» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
*Уҡыусы:* Һандуғас моңона ҡушып.
*Уҡыусы:* Һандуғас моңона манып.
*Уҡыусы:* Һандуғас моңонан моң алып.
*Уҡыусы:* Сылтырап ағыуы тағы ла моңлораҡ булһын өсөн һандуғастан моң ала.
*Уҡытыусы:* Яуаптарығыҙ бик тә дөрөҫ булды. Хәҙер уйлайыҡ әле. Кәкүк саҡыра. Һандуғастары сутылдаша. Тәлмәрйендәре баҡылдаша. Оло Эйек йылғаһы сылтырап аға. Тимәк, Тәбиғәт нишләй? (Бында ла өлөштәрҙең бөтөнөнә табан, йә, Киреһенсә, бөтөндөң өлөштәренә табан үткәрергә мөмкин анализды. Мәҫәлән, ағастар нишләй?, сәскәләр нишләй? һ.б.)
*Уҡыусы:* Байрам итә.
*Уҡытыусы:* Байрам итеүҙе нисек аңлайһығыҙ? Икенсе төрлө уны нисек әйтеп була?
*Уҡыусы:* Тантана итә.
*Уҡыусы:* Күңел аса.
*Уҡыусы:* Шатлана. Шатлыҡ кисерә.
*Уҡыусы:* Тәбиғәт йырлай.
*Уҡытыусы:* Тимәк, тәбиғәт ниндәй?
*Уҡыусы:* Тәбиғәт гүзәл.
*Уҡыусы:* Тәбиғәт матур.
*Уҡыусы:* Тәбиғәт һоҡланғыс.

*Уҡытыусы:* Ана шул гүзәл, матур, һоҡланғыс һүҙҙәрен тағы ла матурыраҡ, көслөрәк итеп нисек әйтеп була?
*Уҡыусы:* Тәбиғәт иҫ киткес гүзәл!
*Уҡыусы:* Тәбиғәт иҫ киткес матур!
*Уҡыусы:* Тәбиғәт иҫ киткес һоҡланғыс!
*Уҡыусы:* Тәбиғәт шул тиклем матур!
Утсыусы: Тәбиғәт һәләк матур!
*Уҡыусы:* Тәбиғәт ҡарап туйғыһыҙ матур!
*Уҡыусы:* Тәбиғәт зәрә матур!
*Уҡыусы:* Тәбиғәт бигерәк матур, гүзәл, һоҡланғыс!
*Уҡыусы:* Тәбиғәттең бигерәк тә матур сағы!

Ошо урында нөктә ҡуйырға ла булыр ине. Уҡытыусы үҙ маҡсаттарына иреште. Хәҙер шундай һорау тыуырға мөмкин: өҙөктө был тәртиптә анализлау кәрәкме? Минеңсә, кәрәк. Юғиһә, дәрестәрҙә лә, өйгә бирелгән эштәрҙә лә хатта дәреслектәрҙә лә текст өҫтөндә эшләү бер төрлөрәк йүнәлештә алып барыла. Мәҫәлән: «Тексты уҡығыҙ, уға исем бирегеҙ, план төҙөгөҙ. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе уҡып күрһәтегеҙ». «Хикәйәне уҡығыҙ. Ҡышҡы тәбиғәтте тасуирлаған һөйләмдә һүрәтләү сараларын күрһәтегеҙ». «Тексты уҡығыҙ, пунктуацион анализ яһағыҙ». «Өҙөктө уҡығыҙ, йөкмәткеһен һөйләгеҙ. Уның стиль үҙенсәлектәрен тикшерегеҙ» һ.б. Күнегеүҙәргә, өҙөктәргә булған былдай биремдәр һәм эштәр баланы үҫтермәй. Әлбиттә, ваҡыты-ваҡыты менән быңдай эштәр ҙә кәрәктер. Ләкин һәр күнегеүгә, өҙөккә, тексҡа, хикәйәгә тәғәйенләнгән биремдәр һәм эштәрҙең һис юғында береһе үҫтереүле булырға тейеш. Шунһыҙ баланың үҫешенә ирешеү мөмкин булмаясаҡ.

Тексҡа, өҙөккә, хикәйәгә бер яҡлы ғына анализ биреүҙе бөтә класстарҙа ла күҙәтергә мөмкин. Баланың кластан класҡа үҙ-үҙенә бикләнә, йомола барыуында иң төп сәбәптәрҙең береһе, бәлки, ана шундалыр ҙа. Һәр саҡ бер төрлөлөк баланы ялҡыта. Халыҡта күңел ҡайтты тигән хәтәр әйтем бар. Ижади үҫеүенә, һәләте үҫеүенә, телмәре асылып китеүенә ыңғай мөнәсәбәт, тейешле шарттар, хәстәрлекле йүнәлеш булмаған осраҡта баланың белем алыуға теләге һүрелә. Үҙенең «мин»ен йәғни бөтә булмышын күрһәтә алмай, күңеле ҡайта һәм шул кимәлендә ҡатып та ҡала.

Үрҙә күрһәтеп киткән анализ һис тә уйлап сығарылмаған. Ул оҙаҡ йылдар эшләү арҡаһында тәжрибә туплау һәм эҙләнеүҙең һөҙөмтәһе. Үҫтереүле анализ бер нисә маҡсатты күҙ уңында тота. Бына улар:

— баланы әҫәрҙең йөкмәткеһенә инеүгә әҙерләй;
— уҡыусыларҙың телмәрен үҫтерә;
— балаларҙың ижади һәләтен үҫтерә;
— уҡыусыларҙың үҙ баһаһын үҫтерә;
— балаларҙы һүҙҙең матурлығын, көсөн тоя белергә өйрәтә.

## Методика фәненең тарихи үҫеше

Ауыр осорҙа йәшәйбеҙ. Илдә иҡтисади һәм сәйәси тотороҡлоҡ юҡ. Халыҡ ике синыфҡа бүленде: байҙарға һәм ярлыларға. «Кеше кешегә дуҫ, иптәш» тигән совет осороноң әхлаҡи ҡануны юҡҡа сыҡты. Кеше күңелендә бер-береңә ҡарата әҙәп-әхлаҡҡа ярашлы (кешелеклелек, бер береңә ярҙам итеп барыу, бер-береңдең хәленә кереү, изгелек ҡылыу һ.б.) мөнәсәбәттәр юғала бара. Уҡыусы ла, студент та — кеше. Уҡытыусы ла шул уҡ заттан. Тәүге икеһе уҡытыусының кешеләрсә мөнәсәбәтенә мохтаж. Белем һәм тәрбиә аша уҡыусы күңеленә йәшәү рәүешенең иң изге һыҙаттары үтеп инһә ине. Замандың, тормоштоң, илдең һау-сәләмәт булып үҫеше бөгөнгө уҡыусыларҙан тора. Киләсәкте төҙөүселәрҙең аң, аҡыл донъяһына уҡытыусы яҡшы хис-тойғо өҫтәргә тейеш.

Тел грамматик ҡағиҙәләр йыйылмаһы ғына түгел. Ул — балаһына күкрәк һөтөн биргән әсә теле. Ул — балаһына өлгө бирер, фәһем бирер, тарих бирер ата теле, ватан теле. Ул — йәшәү рәүешендә ныҡлы урын алған этнокультура теле. Үҙ азатлығы өсөн быуаттар буйы яуҙар сапҡан ҡаһарман батырҙарыбыҙ теле лә — башҡорт теле. Ул — синтаксик конструкциялар йыйылмаһы ғына түгел, боронғо эпостарыбыҙ теле. Шул телдә Урал батыр халыҡҡа үҙенең васыятын әйткән. Шул телдә Орхон һәм Енисей йылғалары араһындағы таштарға ырып яҙып халҡым ҡомартҡы ҡалдырған. Боронғо тел боронғо этнокультура менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнелергә тейеш. Һөйләм синтаксисында, текст синтаксисында төрлө мөнәсәбәттәрҙе белдергән һүрәтләү саралары ята. Тел кимәлдәре күркәм телмәр саралары рәүешендә синтаксик нигеҙҙә өйрәнеүҙе талап итә. Башҡорт телен уҡытыу методикаһында был иң төп принциптарҙың береһе һанала. Ни өсөн синтаксик нигеҙҙә өйрәтеү беренсе планға ҡуйыла? Билдәле булыуынса, фекерләүҙең реаль сағылышы синтаксик берәмектәрҙә кәүҙәләнә. Фекерләү эшмәкәрлегенең башланғысы — уй, мәғәнә, тойғо, хис, мөнәсәбәт төрлөлөгө,

сәбәп, ниәт, теләк. Дәрестә бала зиһененә уй, хәтеренә мәғәнә һалыу мөһим. Шуға күрә туған тел саралары һөйләм, йә булмаһа текст эсендә, шул һөйләмдең, тексттың башҡа киҫәктәре, мәғәнәүи берәмектәре менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнелергә тейеш.

Башҡорт телен уҡытыу методикаһы, фән булараҡ, әле ныҡлап аяҡҡа баҫмаған. Шуға ла ул йәш фәндәр кимәлендә тора. Уның тарихы ла артыҡ ҙур түгел. Башҡорт теле методикаһының революцияға тиклемге осоро В.Ҡатаринский, А.Г.Бессонов, М.Бикчурин, М.Ҡулаев исемдәре менән бәйле. Уларҙың башҡорт яҙмаһын булдырыу эшмәкәрлеге иң беренсе сиратта мәктәптәрҙә башҡорт балаларын үҙ туған телендә уҡытыуҙы яйға һалыуҙы күҙ уңында тотҡан. Шуға күрә методика тарихында уларҙың исемдәре һәм хеҙмәттәре ин беренсе урында торорға тейеш. Методика фәне тәүге «Әлифба»нан башлана. В. Ҡатаринскийҙың 1898 йылда баҫылып сыҡҡан «Букварь для башкир» тигән әлифбаһы башҡорт теле методикаһы тарихының тәүге бите булып тора. Башҡорт теле методикаһына нигеҙ һалыуҙа А.Г.Бессоновтың да хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ. Ул 1880—1890 йылдарҙа Орск һәм Троицк өйәҙҙәрендә байтаҡ йылдар мәктәптәр инспекторы булып эшләй. Эше буйынса уға йыш ҡына башҡорт ауылдарына сығып йөрөргә тура килгән. Шуны ла әйтергә кәрәк: ул башҡортса бик иркен аралашҡан. Башҡорт халҡы менән аралашыу осоронда А.Г.Бессонов уның ауыҙ-тел ижадына, бай фольклор материалына иғтибар иткән. Башҡорт ауылдарына килгән һайын ул әкиәттәр, легендалар йыйған, халыҡтың йәнле һөйләү телен өйрәнгән. А.Г.Бессоновтың башҡорт халҡының тел ғилемен, методикаһын үҫтереүҙә хеҙмәте ҙур. Ул беренселәрҙән булып башҡорт телен ныҡлап өйрәнгән. Уның нигеҙендә ҙур ике диалекттың ятыуын таныған: көньяҡ-көнсығыш һәм төнъяҡ-көнсығыш.

Хәҙерге классификация буйынса был тел берәмектәре көнъяҡ һәм көнсығыш диалекттарҙы үҙ эсенә ала. Башҡорт диалекттарын, әкиәттәрен, легендаларын яҡшы белгәнлектән ул мәктәптәр өсөн рус графикаһына нигеҙләнгән уҡыу китаптары төҙөп баҫтырып сығара. Бына улар: Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары өсөн әлифбанан һуң тәүге уҡыу китабы (1906), Ҡөньяҡ-көнсығыш башҡорттары өсөн әлифбанан һуң тәүге уҡыу китабы (1908). Ул үҙенең уҡыу китабында башҡорт балалары үҙ тыуған телдәрен өйрәнһендәр ине. «Башҡорт теле шундай матур яңғырауыҡлы тел», — тип әйтә. А.Г-.Бессонов 1907 йылда «Башҡорттар өсөн әлифба» тигән китабын баҫтырып сығара. Ул үҙенең әлифбаһында бер үк дидактик матери-

алды башҡорт теленең өс: көнъяҡ, төньяҡ һәм көнсығыш (ҡатай) диалекттарында биргән. Артабан М.Ҡулаевтың революциянан һуңғы эшмәкәрлеген дә оноторға ярамай. Был хаҡта мәшһүр ғалим, профессор Ж.Ғ.Ҡейекбаевтың һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү мөһим: «Башҡорт теленең һәм ғөмүмән башҡорт культураһының тарихы өсөн М.Ҡулаевтың эшмәкәрлегендә иң әһәмиәтле һәм прогрессив бер момент итеп шуны күрһәтергә кәрәк: ул ҡаты реакция йылдарында башҡорт теленең яҙмаһын булдырырға ынтылыш яһау менән бергә, башҡорт теленең беренсе милли алфавитын төҙөгән. Уның алфавиты элекке Россия империяһындағы «инородцы» тип йөрөтөлгән халыҡтарҙың теле өсөн төҙөлгән миссионерский алфавиттан үҙенең ябайлығы менән бөтөнләй айырылып тора»[10] .

Башҡорт телен уҡытыу методикаһының тарихында А.А.Ғәлләмов, Т.Х.Аслаев, Ф.Ғ.Исламова кеүек ғалимдарҙың хеҙмәттәре айырыуса ҙур урын биләй. Методиканың ҡайһы бер проблемаларын яҡтыртыуҙа Б.Б.Ғафаров, Т.Ә.Бикҡужина, Д.С.Тикеев, Х.А.Толомбаев һәм И.Ә.Шарапов кеүек методистар ҙа үҙ өлөштәрен индерҙе.

Ә инде методика фәненең методологияһы, төп принциптары тураһында һүҙ барғанда, донъя һәм ватан педагогтарының, дидакттарының һәм психологтарының теорияларына, концепцияларына, принциптарына таяныу мөһим. Әйтәйек, чех педагогы Ян Амос Коменскийҙың (1592—1670) «Зиһенде телдән алда үҫтереү», «күргәҙмәлелек — өйрәнеү материалын үҙләштереү сараһы», «телде грамматиканан түгел, ә яҙыусыларҙың күркәм әҫәрҙәренән өйрәнергә кәрәк» тигән методик принциптары үҫтереүле уҡытыуҙың ғына түгел, ә дөйөм методика фәненең нигеҙен тәшкил итә. Шулай уҡ швейцар педагогы И.Г.Песталоцци (1746—1827), немец педагогы Ф.В.Дистервег* (1790—1866), урыҫ педагогы К.Д. Ушинский (1824—1870), совет педагогы П.П.Блонский (1884—1941), совет психологы Л.С.Выготский (1896—1934) кеүек мәшһүр ғалимдарҙың хеҙмәттәре лә методика фәнен үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе. Быларҙан тыш ватан психологтарының шәхестең аңын үҫтереүгә эшмәкәрлек аша килеү (С.Л.Рубинштейн, А.Н.Леонтьев һ.б.), аҡыл эшмәкәрлеген этаплап формалаштырыу (П.Я.Гальперин),

---

*[10] Ҡиекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Уҡыу ҡулланмаһы. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1966. — 32-се бит.*

** Был ғалимдың инициалдарын төрлөсә яҙып йөрөтәләр, сөнки ул Ф. А. В. Дистервег.*

проблемалы уҡытыу (М.И.Мәхмутов), уҡыу эшмәкәрлеге (Д.Б.Эльконин, В.В. Давыдов), үҫтереүле уҡытыу (Л.В.Занков) һәм башҡа теориялары методиканың үҫешендә ныҡлы урын алырға тейеш.

Тел — этнокультураның бер берәмеге. Был берәмек башҡа фәндәр өсөн дә уртаҡ. Танып белеүҙең диалектик методы ла телгә, тел сараларына мөнәсәбәтле. Тел һәм фекерләү, тел һәм аң, тел һәм телмәр, тел һәм хәтер кеүек төшөнсәләр үҙ-ара бәйләнештә тора. Тимәк, башҡорт телен уҡытыу методикаһы философия, психология, педагогика, этнокультура, лингвистика, мифология менән тығыҙ бәйләнештә тора.

Башҡорт телен уҡытыу методикаһы уҡытыусыларҙың алдынғы эш тәжрибәһенә лә таяна. Ҡайһы бер методик берәмектәр (концепциялар, принциптар, методик алымдар) ижади үткәрелгән дәрестәрҙә сағылыш таба.

Башҡа методикаларҙа һыналған, тамам нығынған уҡытыу принциптары башҡорт теле методикаһында ла ныҡлы урын алырға тейеш. Телгә, телмәргә өйрәтеүҙәге һәр яңылыҡ уртаҡ ҡаҙаныш тип баһалана. Әйтәйек, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, башҡорт теле методикаһының үҙенә генә хас принциптары ла бар. Бына улар: үҫтереүле анализ, үҫтереүле синтез, бала һөйләп асыла, бала күңеленә мәғәнә һал.

Метод төшөнсәһе башҡорт теленә ысул, алым тип тәржемә ителә. Урыҫ теле методикаһындағы «методический прием» тигән терминды ла методик алым тип йөрөтәләр. Бындай ҡабатлауға нигеҙләнгән буталсыҡ булмаһын өсөн методикаға метод һүҙе шул килеш ҡабул ителә. Методтан бәләкейерәк булған эш төрөн (мәҫәлән, һүҙлек эше, һүҙлек диктанты, һүҙҙең мәғәнәһен аңлатыу, ятлап килгән шиғырын яттан яҙҙырыу һ.б.) методик алым тип ҡарау кәрәк.

Башҡорт теленең мәктәп курсы башҡорт теле тураһындағы фәнгә (лингвистикаға) нигеҙләнә. Был фәнгә хәҙерге башҡорт теле, тарихи грамматика, диалектология, графика, орфоэпия, орфография, пунктуация һ.б. ҡарай. Туған тел уҡыусының үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләтен, һөйләү һәм яҙыу телмәрен (телмәр поэтикаһын) үҫтереүҙә, байытыуҙа һәм камиллаштырыуҙа, уның шәхес сифаттарын формалаштырыуҙа берҙән-бер ҡорал булып тора. Туған тел — танып белеү сараһы. Ошонан сығып, уҡыусыла телгә ҡарата лингвистик ҡараш формалаштырыу, йәғни уның лингвистик белем даирәһен киңәйтеү — туған телгә өйрәтеүҙең төп маҡсаты. Шулай уҡ балаға тел, телмәр тураһында белем биреү, уҡыусыны тел сара-

лары ярҙамында эстетик яҡтан тәрбиәләү маҡсаттарына ла уҡытыусы етди иғтибар итергә тейеш.

Лингвистик ҡарашты нисек аңларға? Был һорауға яуап бирер алдынан Баязит Бикбайҙың «Туған тел» шиғырынан өҙөктө ентекеләп өйрәнеү кәрәк:

*Ерҙә кеше һөйәгенән*
*Убалар үҫкән...*
*Тел — тере шишмә — үлмәгән,*
*Бөгөнгә еткән!*
*Шул тел менән тыуҙым, үҫтем,*
*Торам бөгөн дә.*
*Аңлай мине ғәзиз халҡым*
*Туған телендә.*
*Минең телем — тыуған ерем,*
*Әсәм тауышы,*
*Халҡымдың бай хазинаһы,*
*Таҙа намыҫы!*

Үҙ азатлығы өсөн яуҙарҙа баштарын һалған батырҙарыбыҙ һөйәгенән убалар үҫкән. Быуын-быуын донъябыҙҙың тере тарихы булып, убалар ишәйә барған. Һәр быуын үҙенән һуң килгәндәргә «Халҡымдың бай хазинаһы, таҙа намыҫы» булған телдә рухи ҡомартҡылар ҡалдыра барған. Ул рухи мираҫ, ер-һыу атамалары булып, ер-һыуыбыҙға, тау-ташыбыҙға һеңгән, мәңгелек һыҡтау булып, Орхон-Йәнәсәй таштарына ырып яҙылған. Сал тарих төпкөлөндәге ата-бабалар теле, башҡорт халҡының теле, тере шишмә, тыуып үҫкән ер булып, бөгөнгө көнгәсә килеп еткән. Быуындар менән рухи бәйләнеш, аралашыу системаһы булып, тел йәшәй бирә. Бала күңеленә ошо мәғәнәне һалыу — туған телгә лингвистик ҡараш тәрбиәләү ул.

Дәрестә белем биреүҙе абстрактлаштырыуҙан һаҡ булырға кәрәк. Абстракт белем — белемдең, реаль ысынбарлыҡтың, предметтың, хәл-ваҡиғаның ни бары тышҡы формаһы. Конкрет белем — өйрәнеү материалының эске тәбиғәте, асылы, образы ул. Этнокультура ла предметтың, һүҙҙең, хәл-ваҡиғаны эске формаһында, йәғни асылында, образында сағыла. Мәҫәлән, «Ҡәкүк сәйе» тигән ғәжәп матур, фәһемле йолабыҙ бар. Шул йоланың асылы ниҙә һуң? Туған тел буйынса фәнни-теоретик төшөнсәләрҙе, ҡағиҙәләрҙе

ятлаттырыу баланың аҡыл үҫешен тотҡарлай. Ятлатыу түгел, иҫбат иттереү мөһим. Бала дәрестә үҙләштергән материалды һөйләп, һыҙып (белемдең моделен төҙөү), яҙып бирә алырға тейеш. Бындай эштәр хәтерҙе яңырта, аҡыл эшмәкәрлеген әүҙемләштерә.

Һәр класс өсөн айырым рәүештә «Башҡорт теле» («Әсә теле») дәреслектәре баҫылып сыға. Улар уҡыусылар өсөн туған тел буйынса төп мәғлүмәт биреүсе уҡыу ҡулланмаһы һанала. Уҡытыусы өсөн ул дәреслектәр балаларҙың танып белеү һәм практик эшмәкәрлегенә йүнәлеш биреүсе әсбап сифатында әһәмиәтле. Тимәк, «Башҡорт теле» («Әсә теле») дәреслектәре балалар өсөн белем алыу сығанағы булһа, уҡытыусы өсөн улар — дәрестең күләмен һәм йөкмәткеһен билдәләүсе сара. Шуға күрә һәр уҡыу әсбабы лингводидактик яҡтан камил булырға тейеш. Бөгөнгө дәреслектәр бындай камиллыҡтан алыҫ тора.

Башҡорт тел ғилеме — шаҡтай ҡатмарлы фән. Ҡайһы бер тармаҡтары (тарихи фонетика, тарихи морфология, тарихи лексика, тарихи синтаксис) ныҡлап өйрәнелмәгән. өйрәнелгән тиклеме лә урыҫ лингвистикаһына яраҡлаштырып ҡатмарландырылған (мәҫәлән, синтаксиста парцеляция, һөйләмдең айырымланған киҫәктәре (актуальное членение предложения) һәм башҡа күренештәре). Башҡорт тел ғилеменең нигеҙен диалекттар һәм улар эсенә ингән һөйләштәр тәшкил итә. Башҡорт һөйләштәре лә бер яҡлы ғына (уның һүҙ байлығын-лексикаһын туплау, лингвистик атласын төҙөү) өйрәнелде. Монографик планда донъя күргән ҡайһы бер хеҙмәттәр ҙә ана шул бер яҡлы тупланған материалға таянып яҙылды. Башҡорт диалекттары тел ғилеме аспекттарына ярашлы өйрәнелмәне. Синтаксис теорияһында тәбиғи телмәр иҫәпкә алынманы. Киләсәк быуын телселәре, мәктәп дәреслектәрен төҙөүселәр, бәлки, ошо етешһеҙлектәр тураһында уйланырҙар һәм аныҡ фекергә килерҙәр.

Башҡорт тел ғилеменең мәктәп курсын, уның күләмен һәм йөкмәткеһен программалар билдәләй. Мәктәп программалары һәр үтеләсәк теманы ике бүлекләп бирә. Беренсе бүлегендә тел ғилеме буйынса теоретик материалдың күләме һәм йөкмәткеһе бирелә. Икенсеһендә ана шул материалды практик рәүештә таныу, телмәрҙә ҡуллана белеү бурыстары ҡуйыла. Улар уҡыусыларҙың белемен, белеген, күнекмәһен үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуя. Мәҫәлән, 6-сы класс программаһындағы бер теманың программала сағылышын ҡарап үтәйек:

*Алмаш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу (5 сәғәт)*

I. Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре. Алмаш төркөмсәләре: 1) зат алмаштары (ҡабатлау); 2) күрһәтеү алмаштары; 3) һорау алмаштары; 4) билдәләү алмаштары; 5) билдәһеҙлек алмаштары; 6) юҡлыҡ алмаштары.

Алмаштарҙың һан һәм килеш менән үҙгәреүе. Билдәһеҙлек һәм юҡлыҡ алмаштарының яһалышы.

II. Бер һүҙҙе күп ҡабатлауҙан ҡотолоу өсөн, телмәрҙә алмаштарҙы ҡулланырға өйрәтеү. Алмаштарҙы телдән һәм яҙып тикшерә белеү.

Бүлек буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм тәртипкә һалыу[11] .

Мәктәп программалары уҡытыусының эшмәкәрлегендә төп ҡорал, ҡулланма һанала. Йыллыҡ календарь һәм тематик план төҙөгәндә, дәрес планын, дәрес өлгөһөн ойошторғанда уҡытыусы мәктәп программаларына таяна. Һәйбәт төҙөлгән программа уҡытыусы хеҙмәтенең ярты уңышы.

Программаға ярашлы мәктәп дәреслектәре төҙөлә. Бынан алдағы быуын дәреслектәрендә иң элек тел ғилеме буйынса теоретик материал бирелә ине һәр тема буйынса. Аҙаҡтан шул темаға ярашлы күнегеүҙәр үткәреү өсөн номерлап һөйләмдәр бирелә торғайны. Бәйләнешле тексҡа аҙ урын бирелде. Бөгөнгө быуын дәреслектәрендә хәл бер ни тиклем үҙгәрҙе. Тәүҙә бәйләнешле текстарҙан торған дидактик материал килтерелә. Әйтәйек, һәр тема буйынса алынған дидактик материал бер нисә күнегеүҙән тора. Күнегеүҙәр араһында, йә күнегеүҙәрҙән һуң теоретик материал бирелә. Дәреслектә һәр теманы ошо рәүешле ойоштороу уҡыусыларҙың теоретик материалды аңлап үҙләштереүенә нигеҙ һала. Һуңғы быуын дәреслектәрендә дидактик материалдың йөкмәткеһе бермә-бер күтәрелде. Балаға рухи тәрбиә биреүҙә дәреслектәге күнегеүҙәрҙең әһәмиәте ҙур. Мәҫәлән, 8-се класс дәреслегенә алынған бер күнегеүгә иғтибар итәйек:

*Еркәйемдең тарих һөйләмәгән*
*Юҡ һуҡмағы, һыуы, юҡ тауы.*
*Ишетәмен әле ҡылыс сыңын,*
*Әле һылыу ҡыҙҙың һыҡтауын.*

[11] *5-11 кластар өсөн башҡорт теленән программалар. — Өфө, 1999, 28-се бит.*

*Ҡүпме моң бар еләҫ аҡландарҙа,*
*Күпме наҙ бар дала еләндә!*
*Ҡарай улар ъәзиз әсәм булып,*
*Һөйләшәләр башҡорт телендә.*
*Башҡорт балаһы мин,*
*Ер хәтерендә*
*Мең йыл уйылып барған эҙем бар.*
*Быуындарға ялғап быуындарҙы,*
*Илдә тотҡан телем, һүҙем бар.*
***(Р.Бикбаев)***[12] .

Методиканың туған телгә өйрәтеүсе саралары булып мәктәп программалары, дәреслектәре, һүҙлектәре һәм башҡа дидактик материалдар һанала. Методикала шундай ҡанун бар: нығынған, тормош һынауын үткән теоретик, тарихи, фольклор, этнокультура, лексикологик материалдар ғына методикаға, мәктәп дәреслектәренә, һүҙлектәренә, программаларға инеп китә ала. Теге йәки был проблема буйынса фәндә стабиль булмаған ҡараштар методикаға ҡабул ителмәй. Дөйөм тел ғилемендә төрлө тармаҡҡа ҡараған һүҙлектәр (ике телле, орфографик, аңлатмалы, профилле һ.б.) юҡ икән, методиканың талабынан сығып, мәктәпттәр өсөн ундай һүҙлектәр төҙөү мөмкин булмаған хәл.

Бөгөнгө көндә башҡорт теле методикаһы тамам нығынған, үҫешкән фәнни тармаҡтарҙың береһе һанала.

## Ҡушымта

Хеҙмәттең был өлөшөндә Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусылары Ишбирҙина Филүзә Шәриф ҡыҙының (Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге республика гимназия-интернаты), Дәүләтшина Мәүлихә Фәрит ҡыҙының, Исламова Таңсулпандың, юғары категориялы уҡытыусы Абдуллина Аида Миңнулла ҡыҙының (өсөһө лә Республика башҡорт лицей-интернатынан) дәрес өлгөләре килтерелә.

[12] *Абдуллина Ф.Ф., Псянчин В.Ш. Башҡорт теле: Урта мәктәптең 8-9 кластары өсөн дәреслек. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1993. — 3-сө бит.*

*Ф.Ш.Ишбирҙина*

## Беренсе дәрес

**Тема: «Лексика» бүлеген ҡабатлау** (Һүҙҙәр донъяһына сәйәхәт)

**Маҡсат:** уҡыусыларҙың һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡуллана белеү күнекмәләрен булдырыу; һүҙ байлығын, фекерләү ҡеүәһен арттырыу; йыр-моңдоң кеше тормошондағы урынын билдәләү.

**Күргәҙмәлелек:** һүҙлектәр, ҡурай тартып торған егет һүрәте, эпиграф, плакат, фонояҙма.

**Дәрес барышы**

I. Ойоштороу моменты.

Һаумыһығыҙ, ултырығыҙ! Дәресте башлайбыҙ. Балалар, беҙ бөгөн һеҙҙең менән үткән дәрестәрҙә алған белемдәрҙе ҡабатлап, башҡорт теленең һүҙ байлығына байҡау яһаясаҡбыҙ һәм йыр-моңдоң кеше тормошонда ниндәй урын алып тороуын асыҡлаясаҡбыҙ.

Ә хәҙер, балалар, Һеҙҙең менән <u>һүҙҙәр донъяһына</u> сәйәхәткә сығабыҙ. Алда беҙҙе был илдең ҡыҙыҡлы туҡталыштары көтә. Сәйәхәт итергә беҙгә ете төҫлө тажлы сәскә ярҙам итер.

*Тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтәйек:*
*Ос һин, ос һин, ос, тажым,*
*Сит илдәргә ос,тажым,*
*Ә ергә төшөү менән*
*Беҙ әйткәнсә эшлә һин!*

1. Беҙҙе *«Матур яҙыу батшалығына»* илт!

Йыр — күңеллегә ҡыуаныс, күңелһеҙгә йыуаныс. Мәғәнәһен аңлатығыҙ әле мәҡәлдең. “Йыр“ һүҙенең ниндәй мәғәнәләре бар? (Лексик, грамматик). Лексик мәғәнә — йыр ул көйгә һалып башҡарыла торған шиғыр. Грамматик мәғәнә-исем, уртаҡлыҡ, берлектә, эйә булып килгән. Ошо мәҡәлдә тағы ниндәй мәғәнәле һүҙҙәр бар? (Антонимдар) Күңелле-күңелһеҙ.

2. Бына беҙ “*Антонимдар борололошона*“ килеп еттек. — Ниндәй һүҙҙәргә антонимдар тип әйтәләр? — Телдәге бөтә һүҙҙәрҙең дә антонимдары буламы? (Юҡ. Мәҫәлән: китап, ағас). — Мәҡәлдәрҙә антонимдар күп. *Шатлыктан да ҡайғынан да йыр тыуыр.*

— Мин мәҡәлдең башын әйтәм, һеҙ дауам итегеҙ:

Ҡунаҡ аҙ ултыра, <u>күп һынай</u>.

Ҡөйҙөң оҙоно яҡшы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы.

*Өйөң тар булһа ла, күңелең киң булһын.*

3. Ә артабан сәскә беҙҙе *«Гөлнәзирәгә ҡунаҡҡа»* саҡыра. Гөлнәзирә һеҙҙе һынар өсөн бер нисә эш бирә.

1)1 уҡыусы таҡтала һөйләм тикшерә:

Гармундың көмөш тауышы киске эңерҙә ауыл өҫтөнә таралды (Ябай, хәбәр, тарҡау).

2)1 уҡыусы һүрәт буйынса хикәйә төҙөй.

3)Ҡалған уҡыусылар карточка менән эшләй.

4. Юлыбыҙ "*Синонимдар ауылы*" аша үтә. Алда ниндәйҙер белдереү.

Нимә яҙылған икән? (Белдереү уҡыла).

Миҫалдар. *Мәғәнәләре менән бер төрлө йәки бер-береһенә бик яҡын булған һүҙҙәр синонимдар тип йөрөтөлә.*

— Синонимдарҙың телмәр өсөн ниндәй әһәмиәте бар? (Һүҙҙәрҙең синонимдарын күп белгән кешенең телмәре матур, тулы була, бер үк һүҙҙе ҡабатламай).

— Һеҙгә шундай эш. Һүҙҙәрҙең тәүге һүҙгә синоним булмағанын һыҙып ташлағыҙ. Ҡул күтәреп әйтәбеҙ.

| *1-се рәт* | *2-се рәт* |
|---|---|
| Аҙыҡ | һыулау |
| Ашамлыҡ | еүешләү |
| Йылға | сылатыу |
| Аш-һыу | күреү |
| Ризыҡ | дымлау |
| Аҙыҡ-түлек | мансыу |

5. Әйҙәгеҙ "*Күңелле тугайҙа*" ял итеп алайыҡ.

*Мин ҡурайҙы яратам,*
*Ҡулдарымды уйнатам,*
*Бармаҡтарым уйнайҙар,*
*Улар һис тә талмайҙар.*
*Хәҙер беҙ ял итәбеҙ*
*Һәм тағы ла яҙабыҙ.*

6. Ялдан һуң юлыбыҙҙы дауам итәйек. *«Фразеологизмдар тигеҙлеге»нән* үтәбеҙ. а) Өйгә бирелгән эште тикшереп алайыҡ. Фразеологизмдар ҡулланып, кескәй хикәйә төҙөргә ине. (1-2 хикәйә уҡытыла). б) — Ошо фразеологизмдарға рус теленән мәғәнәһе тура килгәнен табығыҙ:

*Ауыҙы ҡолағына еткән* — рот до ушей;

*Бармаҡ аша ҡарау* — смотреть сквозь пальцы;

*Елгә осороу* — бросать на ветер;

Найти общий язык – *уртаҡ тел табыу;*

Махнуть рукой — *ҡул һелтәү;*

в) Беҙ рәссамға фразеологик һүҙбәйләнештәргә Һүрәт эшләргә ҡушҡан инек. Ул тура мәғәнәһендә аңлаған һәм ошо һүрәттәрҙе килтергән, (һүрәттәр күрһәтелә).

*Теленә һандуғас ҡунған* — матур һөйләй, йырлай.

*Балтаһы һыуға төшкән* — ҡайғыра.

*Алма беш, ауыҙыма төш* — эшләмәйенсә, көтөп ятыу.

7. Алда — «*Зирәктәр тукталышы*». Ошо шиғыр юлдарынан «Лексика» темаһы буйынса үтелгән һүҙҙәрҙе табырға кәрәк. (Плакат).

*Эй илем, илгенәм,*
*Илгенәм, бергенәм, —*
*Һин-шатлыҡ шишмәһе, (кусмә мәғәнә)*
*Һин-йырзар бишеге.*

*А. Игебаев.*

*Ниндәй фәҡир, ниндәй ярлы кеше (синоним)*
*Йыр юғалһа күңел түрендә.*

*Р. Ғарипов.*

*Йәшәү менән үлем сигендә лә (антоним)*
*Мәңгелек моң торһон саҡырып.*

*Р. Ғарипов.*

*Фонояҙма*
*Ерҙә кеше һөйәгенән*
*Убалар үҫкән...*
*Теле-тере шишмә — үлмәгән,*
*Бөгөнгә еткән.*

*Б.Бикбай («Туған тел»).*

8. Балалар, 148-се күнегеүҙе табығыҙ әле. Хәҙер ошо тексты уҡып сығабыҙ.

Нимә тураһында һүҙ барғанын әйтергә әҙерләнегеҙ.

1) *Тексты уҡытыу.* — Нимә тураһында һүҙ бара? (Йыр тураһында).

2) — Үҙ аллы уҡып сығығыҙ һәм йырҙы һүрәтләүсе һүҙҙәрҙе табығыҙ.

*3) Нәфис, гүзәл* — синонимдар, илһам шишмәһе, *ялҡын һибелә* — күсмә мәғәнәле.

— Ниндәй стилгә ҡарай? (Матур әҙәбиәт). — Төп фекерен әйтегеҙ. (Йырһыҙ тормош юҡ). — Ә йыр, музыка Һеҙҙең тормошоғоҙҙа ниндәй урын алып тора?

9. *Йомъаҡлау. — Эйе,* уҡыусылар. Халыҡ үҙенең ҡыуанысын да, көйөнөсөн дә, зарын-моңон да, хәсрәтен-нәфрәтен дә йыр аша һөйләп биргән. Халыҡ йөрәге тыуҙырған моң халыҡ күңелендә мәңгегә һаҡланып ҡала. Йыр-моң халҡыбыҙҙың тормошон, тарихын күрһәтә. Бына хәҙер класташығыҙ Мәрйәм башҡарасаҡ халыҡ йыры «Арғужа» ла тап ошо хаҡта һөйләй. (Йыр башҡарыла).

Ә хәҙер ошо юлдарҙы бергәләп уҡыйыҡ әле, Б.Бикбайҙың шиғыр юлдары беҙҙең дәресебеҙгә ауаздаш булып тора.

*Ниндәй гүзәл халыҡ йыры,*
*Күпме көс, тәрәнлек бар!..*
*Беҙҙе бөтә ъүмер буйы*
*Оҙатып килә улар!*
*Б.Бикбай.*

10. Уҡыусылар, сәйәхәттә беҙ һеҙҙең менән башҡорт теленең һүҙҙәр донъяһының ни тиклем бай, мауыҡтырғыс булыуын күрҙек. Ә был һүҙҙәр барыһы ла ҡайҙа осрашалар һуң? Юлды дауам итәйек һәм шул һорауға яуап бирәйек.

— Һүҙлектәрҙә. Һеҙ ниндәй һүҙлектәр беләһегеҙ? Улар ни өсөн кәрәк? (Мәғәнәләрен асыҡлау өсөн).

11. *Тест.* (Лексика темаһын йомғаҡлау)

12. *Йомъаҡлау.* Беҙгә хушлашырға ла ваҡыт. Сәйәхәт ваҡытында нимәләр белдек?

13. *Өй эше.* Бөгөнгө дәрестә ишеткән һүрәтләү сараларын да ҡулланып, инша яҙырға «Башҡорт йыры миңә ни өсөн оҡшай?» Баһалар. — Балалар, һүҙҙең ҡәҙерен беләйек, уны өйрәнәйек, туған телебеҙгә һәм халыҡҡа һөйөүҙе уның һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлауҙан башлайыҡ.

Дәресебеҙҙе Ҡарам Бакировтың һүҙҙәре менән тамамлайыҡ.

*Һөйләмәгеҙ туъан телдә,*
*Туйъансы һөйләшегеҙ!*
*Тел тыуҙыръан шатлыҡтарҙы*
*Ҡешегә өләшегеҙ!*

## Икенсе дәрес

**Тема: Салауат та сәсән ир ине.** (С.Юлаевтың «Ҡайтып киләм» шиғыры)

**Маҡсат:** С.Юлаевтың тормошо һәм яҙмышы менән таныштырыу. Уның шиғырҙары, йырҙары аша уҡыусыларҙа Тыуған илгә мөхәббәт, илһөйәрлек тойғолары, батырлыҡ, кешелеклелек, ғаиләңә ихтирам сифаттары тәрбиәләү;

С.Юлаев тураһында ижад ителгән әҙәбиәт һәм сәнғәт әҫәрҙәре хаҡында белем биреү.

**Йыһазландырыу:** китаптар күргәҙмәһе.

Һүрәттәр: А.Кузнецов «Салауаттан һорау алыу», Р.Ишбулатов «Буйһонмаҫ ихтыяр», С.Юлаев скульптураһы, фонояҙма, плакат, «Ай-һай, Салауат» йыры.

**Эпиграф.** *Салауат батыр үҙе китһә лә,*
*Даны ҡалды тыуған иләндә.*
*Халыҡ йыры.*

Дәрес барышы.

**1. Ҡабатлау.**

Һаумыһығыҙ, ултырығыҙ.

Беҙ һеҙҙең менән «Башҡорт халыҡ ижады» бүлеген тамамланыҡ.

— Халыҡтың ауыҙ-тел ижады тип нимәгә әйтәләр?

— Ауыҙ-тел ижадына нимәләр инә?

Ә хәҙер ошо бүлектә үтелгән темалар буйынса тест һорауҙарына яуап бирегеҙ.

Таҡтала дөрөҫ яуаптар. Хәҙер эштәрегеҙҙе алмашып, бер-берегеҙҙең эштәрен тикшерегеҙ һәм баһалағыҙ.

Мин тағы ла бер ҡат тикшереп, баһаларығыҙҙы журналға ҡуясаҡмын.

II. Яңы тема

**Инеш һүҙ**

Балалар, ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәрен үткәндә беҙ, ысынлап та, халҡыбыҙҙың хыялға бай, талантлы, һүҙгә оҫта, сәсән телле икәнен күрҙек. Ошо тапҡыр һүҙле халыҡ ижад иткән мәҡәлгә тағы бер күҙ һалайыҡ әле. Ул тест һорауының һуңғыһы ине.

*Батыр егет — яу күрке,*
*Сәсән егет — дау күрке.*

— Һеҙ ошо мәҡәлде нисек аңлайһығыҙ?..

Эйе, батыр егет илен, халҡын яҡлап, азатлыҡ өсөн көрәшкәндә дан ҡаҙана, сәсән егет илдең иң күренекле, хөрмәтле, яратҡан кешеһе була. Ә бына ошо ике сифатты ла үҙенә алған шәхестәр бик һирәк, шулай ҙа улар булған.

Ҡем тип уйлайһығыҙ һеҙ уны?

— Эйе, бик дөрөҫ әйтәһегеҙ. 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәре араһындағы иң сағыу шәхес, башҡорт халҡының легендар улы, данлы батыр, йырсы һәм шағир Салауат Юлаев шундай кеше булған. Беҙ бөгөн уның тормош юлы менән танышырбыҙ, шиғырҙарын, йырҙарын уҡырбыҙ. Халыҡ үҙе лә уға арнап легендалар, йырҙар сығарған.

— Уның тураһында нимәләр беләһегеҙ? (Уҡыусылар белгәндәрен һөйләй).

*Уҡытыусы:*

Салауат бала сағында сәйер бер малай була. Бына был турала Степан Злобин нимә тип яҙа (өҙөк уҡыла).

Салауат әсәһе йырлаған ҡайғылы йырҙарҙы, атаһы һөйләгән хикәйәттәрҙе тыңлап үҫә. Башҡорт халҡының аяуһыҙ иҙелеүен һәм тормош ауырлығынан зарланыуын күреп әсенә. Тыуған халҡының ғазаплы тормошо, ауыр яҙмышы Салауатта иҙеүселәргә ҡарата асыу, нәфрәт тойғолары уятҡан.

1773 йылда Пугачев етәкселегендә крәҫтиәндәр ихтилалы башланғас, башҡорт ерен һатыусы байҙарға, рус колонизаторҙарына ҡаты асыу йөрөткән Салауат халыҡты яуға күтәргән.

Тарихта Салауат азатлыҡ өсөн көрәшеүсе яугир ғына түгел, шағир һәм сәсән булараҡ та билдәле. Уның йырҙарын, шиғырҙарын халыҡ 200 йыл буйы күңелендә һаҡлап йөрөткән.

«Салауаттың тарихи ҡаһарманлығы — шиғырҙарын онотмаҫҡа, ә шиғырҙары иһә уның исемен һәр саҡ хәтерләргә мәжбүр иткән...» — тип яҙа был турала М.Кәрим.

С.Юлаевтың әҫәрҙәренең бик аҙ өлөшө генә беҙҙең көндәргә килеп етә алған. Шуларҙың береһе — «Тыуған илем» шиғырында тыуған Уралына дан йырлай, ҡайнар һөйөүен белдерә.

Бына һеҙҙең алдығыҙҙа уҡыусыларҙың ошо шиғырҙы уҡығас төшөргән һүрәттәре. (Һүрәттәр күрһәтелә).

Салауат Юлаевтың шиғырҙарында Тыуған иленә, ғаиләһенә оло һөйөү хисе, азатлыҡ өсөн көрәш дәрте, иҙеүселәргә ҡарата үс тойғолары сағыла.

Бына беҙ бөгөн уҡыясаҡ шиғырҙары ла шул хаҡта.

II. Дәфтәрҙәрегеҙгә бөгөнгө числоны, теманы яҙып ҡуйығыҙ.

Әле уҡыясаҡ шиғырҙа ошондай һүҙҙәр осрар, мәғәнәләрен асыҡлап китәйек әле.

1) Һүҙлек эше:
балҡыу — нур сәсеү,
баҡты — ҡараны
йәндәр аттым — ашыҡтым.

2) Уҡытыусы уҡыуы.

3) Үҙ аллы уҡытыу.

4) Һорауҙар буйынса әңгәмә.

**Һорауҙар.**

1) Был шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара?

Уҡый-яҙа белгән Салауат бик йәшләй генә ил-халыҡ эше менән күп йөрөгән ихтирамлы кеше булған. Бына шул ваҡыттарҙа ауылынан, ғаиләһенән айырылып торғандан һуң иленә ҡайтып килгәндә тыуған шиғыр был.

2) Тәүге ике юлды уҡығыҙ.

Ниндәйерәк күренеш күҙ алдына баҫа?

3) Артабанғы юлдарҙа кем тураһында яҙа? Моғайын, яратҡан ҡатыны тураһындалыр. Уны ер еләге менән сағыштыра.

4) 2-се строфала нимә тураһында һүҙ бара? Ил-йорт хәстәрҙәре менән йөрөүсе Салауат ауылындағылар, уларҙың хәлдәре өсөн борсола.

5) 3-сө строфаны уҡығыҙ.

Йәндәр аттым — нығынған һүҙбәйләнеш.

6) Салауаттың тыуған яҡтарын һағынып ҡайтыуын ҡайһы юлдарҙа күрергә була?

**Тасуири уҡыу өҫтөндә эш.**

1) Был шиғырҙы ниндәйерәк интонация менән уҡырға кәрәк?

— Ашҡыныулы, һағышлы

— Мостай Кәрим һүҙҙәре менән әйткәндә, “Беренсе башҡорт — милли ғорурлығыбыҙ Салауаттың ниндәй сифаттарын һеҙ үҙегеҙгә алыр инегеҙ?

Эйе, ул бөгөн дә беҙҙең өсөн рухи пәйғәмбәр. Батша хөкүмәте Салауатты Уралынан айырҙы, ғаиләһен туҙҙырҙы, аяҡ-ҡулына бығау һалды. Бөтә йәшәү тамырҙарын өҙөп, Урал батыр ҡалдырған Йәншишмә гүзәллегенән мәхрүм итеп, тотҡонлоҡта аянıслы үлемгә дусар ителде. Тик барыһы ла — бушҡа!

Ул халыҡ күңелендә мәңге тере йәшәй. Халҡына ул легендаларҙа, йырҙарҙа әйләнеп ҡайтты. Уның исемен ҡала, район, урамдар йөрөтә. Өфөбөҙҙөң иң ҡалҡыу урынында — Ағиҙел ярында Салауат Юлаевҡа мөһабәт һәйкәл ҡуйылған. С.Юлаев һөргәндә булған Эстониялағы Палдиски ҡалаһында бер мәктәп һәм урам Салауат Юлаев исемен йөрөтә.

1967 йылдан күренекле хеҙмәттәр өсөн С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы булдырылды.

Ә рәссамдар уның буйһонмаҫ ихтыярлы кеше икәнен үҙҙәренең һүрәттәрендә күрһәттеләр.

А.Ҡузнецов «Салауаттан һорау алыу», Р.Ишбулатов «Буйһонмаҫ ихтыяр». Р.Зәйнетдинов, Г.Ҡалитов «Ер рухы».

Ә хәҙер «Ҡаруанһарай» теркөмө башҡарыуында Р.Ғарипов һүҙҙәренә «Ай-һай, Салауат!» йырын тыңлайыҡ.

Салауат һәр ваҡыт һеҙҙең рухи таянысығыҙ, идеалығыҙ, ошондай бөйөк ул тыуҙырған халыҡтың символы булһын. Үҙегеҙҙең бөтә эштәрегеҙҙә, уй-хыялдарығыҙҙа уға лайыҡлы булығыҙ. (Һәйкәл һүрәттәре биреү).

**III. Өй эше.**

«Минең яратҡан геройым Салауат» тигән темаға инша яҙырға.

## Өсөнсө дәрес
## «Ҡурай» йыры буйынса

**Тема: Һигеҙенсе мөғжизә**

**Маҡсат:** Йырҙарҙың йөкмәткеһен, тел үҙенсәлектәрен асыҡлау;

башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы ҡурайы һәм милли көйҙәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, сәнғәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләү;

телмәр үҫтереү.

Күргәҙмәлелек:

плакат, фонояҙма, китаптар күргәҙмәһе, һүрәттәр,

Р.Нурмөхәмәтовтың «Батыр тураһында легенда» картинаһы, ҡурай һәйкәле һүрәте.

**Эпиграф.** *Ҡурай халыҡ күңелен юрай.*

*Мәҡәл*

*Уҡытыусы:*

Балалар, беҙ йәшәгән ер йөҙө мөғжизәләр менән тулы бер донъя ул. Әммә элек-электән шул мөғжизәләр араһында етәүһен айырып йөрөткәндәр. 1-се, иң боронғо мөғжизә — Египет пирамидалары, 2-һе — Зевс һәйкәле, 3-һө — Аполлон һыны, 4-һе — Артемида храмы, 5-һе — Галикарнастағы мавзолей, 6-һы — Семирамидания аҫылмалы баҡсалары, 7-һе — Александрия маяғы.

Ә бына башҡорт шағиры Рәмил Ҡол-Дәүләт донъяның һигеҙенсе мөғжизәһен билдәләгән.

Нимә икән ул? Әйҙәгеҙ, уның «Һигеҙенсе мөғжизә» исемле шиғыры менән танышайыҡ әле. (Фонояҙма).

— Тимәк, нимә ул һигеҙенсе мөғжизә?

— Эйе, ул — башҡорт халҡының айырылмаҫ юлдашы, серҙәше булған ҡурай.

— Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, ошо тылсымлы мөғжизәне тыңлайыҡ. Был моң һеҙҙең күҙ алдығыҙға нимәләрҙе баҫтырыр икән?

(Ҡурай моңо. «Урал»).

— Уҡыусылар, был ниндәй көй булды?

— «Урал» көйө.

— Үҙегеҙҙең тәьҫораттарығыҙҙы әйтеп ҡарағыҙ.

*Уҡытыусы:*

Эйе, ҡурай моңоноң кешеләрҙең хыялын әллә ҡайҙарға алып китер бер ҡөҙрәте бар шул. Беҙ бөгөнгө дәресебеҙҙә тап ошо ҡурай тураһындағы башҡорт халыҡ йырҙары менән танышырбыҙ, йырҙарҙың тел-һүрәтләү сараларына ла иғтибар итербеҙ. Ә һеҙ дәрес аҙағында «Башҡорт халҡы тормошонда ҡурай ниндәй урын алып тора?» тигән һорауға яуап бирерһегеҙ.

Һеҙ өйҙә Ғ.Хөсәйеновтың «Ҡурай» тигән мәҡәләһен уҡып, уның буйынса һорауҙар әҙерләп килергә тейеш инегеҙ.

1-се рәт һорауҙар бирә, 2-се рәт яуап бирә.

Хәлиҙә, Эдик баһалай, төҙәтә, өҫтәй.

— Ҡурай ҡайһы ерҙәрҙә үҫә? Ҡем үҫеп ултырған ҡурайҙы күргәне бар?

— Ҡурай үләйенең ниндәй төрҙәре бар?

— Тәбиғәттән ингән ниндәй өн — тауыштар ҡурай моңонда ишетелә?

— 1925 йылда атаҡлы ҡурайсыларҙан кем Парижда сығыш яһай? (Йомабай Иҫәнбаев портреты күрһәтелә).

*Уҡытыусы:*

Һеҙҙең арала ла ҡурайҙа оҫта уйнаусылар бар. Салауат, рәхим ит.

Эйе, башҡорт ҡайҙа ғына булмаһын, уны һәр саҡ ҡурай моңо оҙатып йөрөгән. Быйылғы уҡыу йылында үткән ниндәй әҫәрҙәрҙә тап ошо турала һүҙ бара?

— «Ете ырыу», Б.Рафиҡовтың «Ҡараһаҡал» романында ла ҡурайҙың әһәмиәте телгә алына.

Халыҡ үҙенең моңдашы ҡурай тураһында йырҙар ҙа сығарған. Бөгөн шул йырҙар менән танышып үтербеҙ. Бөгөнгө числоны, теманы яҙып ҡуйығыҙ.

Йырҙың һүҙҙәре менән танышыр алдынан ошо һүҙҙәргә иғтибар итегеҙ.

Һүҙлек эше.

Үҙән — ике тау араһы

берләм юл — һуҡмаҡ

хаҡ яҙмыш — күрәсәк яҙмыш

Уҡытыусы йыр тексын тасуири итеп уҡый.

— Ә хәҙер үҙ аллы уҡып сығығыҙ.

— Ошондай һорауға яуап бирегеҙ әле, халҡыбыҙ ниндәй тормошта йәшәгән?

— Ҡәйефе нисек булған? Ҡайһы юлдарҙа күренә?

— Эйе, төшөнкөлөккә бирелеп киткән ерҙәре лә бар. Ләкин ауыр тормошта йәшәһә лә, күңеле ҡайһы ваҡыт төшөнкө булһа ла, халҡыбыҙҙың рухы ныҡ булған. Тап ошо йыр-моң, ҡурай уға рухын һаҡлап ҡалырға ярҙам иткән дә инде.

(Йырҙарҙа яҡты тойғолар, тормошто һөйөү мотивтары өҫтөнлөк итә).

— Был йыр алдараҡ танышҡан йырҙар кеүек берәй сюжетҡа, ваҡиғаға ҡоролғанмы?

— Юҡ, был йыр кешеләрҙең хисен, кисерештәрен, уйланыуын сағылдыра, импровизация арҡаһында барлыҡҡа килгән. Тормош күренештәрен һүрәтләү түгел, бәлки улар нигеҙендә тыуған хистәрҙе һүрәтләй.

— Төп фекере ҡайһы юлдарҙа?

— «Ҡурай уйнап үҙен йыуата ул,

Һис баш эймәй килгән яҙмышҡа» (I бүлек).

— Был йырҙың тәғәйен генә көйө юҡ.

Халыҡ ижадында төрлө көйгә йырлана торған 4 юллыҡ йырҙар ҙа киң таралған. Традицион ижекле үлсәүгә ҡоролғанлыҡтан, уларҙы теләгән бер оҙон көйгә һалып йырлап була.

Ә йөкмәткеһе яғынан ниндәй төркөмгә инә?

— Тормош-көнкүреш йырҙарына.

— Халыҡ йырҙары тәрән йөкмәткеһе менән генә түгел, үҙенсәлекле шиғыр төҙөлөшө, һүрәтләү саралары менән дә айырылып тора, хис-тойғо биҙәгенә лә бик бай улар.

Ә хәҙер парлап һәр бер строфала халыҡ йырҙарына хас һүрәтләү сараларын, хис-тойғоно көсәйтеүсе һүҙҙәрҙе табып ҡарағыҙ, ижек үлсәмен билдәләгеҙ. Ни өсөн ҡулланылды икән улар?

— Эйе, башҡорт йырҙарынан лирик йылылыҡ, талғынлыҡ, яғымлылыҡ бөркөлөп тора. .Әйҙәгеҙ әле, ошо юлдарҙы тасуири итеп уҡып ҡарайыҡ. Ниндәйерәк интонация менән уҡырһығыҙ?

— Уйланыу, еңелсә һағыш.

Уҡытыусы 1 строфаны уҡый.

Хор менән 1 строфа уҡытыла.

Сылбырлап уҡытыла.

— Ҡурай тураһындағы ошо юлдарҙы уҡығас, ниндәй күренеш күҙ алдына баҫа?

— Урал тауҙарының ҡая ташына баҫып, күкрәген киреп ҡурай уйнаған егет. (Һүрәт күрһәтелә).

— Һүрәттә кем төшөрөлгән?

— Ҡурайсы Азат Айытҡолов.

— Тағы ниндәй мәшһүр ҡурайсыларҙы беләһегеҙ?

— Юлай Ғәйнетдинов. Ишморат Илбәков. Ишмулла Дилмөхәмәтов. Рәсүл Ҡарабулатов.

— Ҡурай башҡорт халҡының тормошона шул хәтлем үрелеп, үтеп ингән. Боронғолар ҡурай тураһында мәҡәлдәр, йомаҡтар сығарғандар. Ҡем әйтә алыр?

Ҡурай тартһаң, көй булыр,

бүрәнә тартһаң, өй булыр, — мәҡәл. (Башҡорт халҡының тормош-көнкүрешенә бәйле уйланыуҙары ята был мәҡәлдең нигеҙендә).

*Ҡырҙа үҫкән бер бала*
*ел иҫкәндә моң һала.*
*Күпте күргән — күҙе юҡ,*
*Бер кемдән дә сере юҡ.*
*Ауыҙы бар — һүҙе юҡ,*
*Тауышы бар — теле юҡ.*

— Ҡурайҙы сағылдырған тағы ниндәй ижад төрҙәрен беләһегеҙ?

Әкиәттәрҙә сағыла: «Урал батыр», «Ҡурай тураһында әкиәт». Легендаларҙа: «Ҡурай тураһында легенда».

Рәссамдар картиналарында сағылдырған: Мәҫәлән, Рәшит Нурмөхәмәтовтың «Батыр тураһында легенда» һүрәтендә. Ә композитор Рим Хәсәнов «Ҡурай тураһында легенда» балетына көй яҙған. Хатта Баймаҡ ҡалаһында ҡурайға һәйкәл ҡуйылған. Ул шулай уҡ БР-ның дәүләт гербы символикаһына ингән.

— Хәҙер шундай һорауҙарға яуап бирегеҙ:

1) Ҡурайға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек? Ҡурай хәҙерге заманда кәрәкме ул?

2) Рәмил Ҡол-Дәүләт ҡурайҙы һигеҙенсе мөғжизә тип дөрөҫ әйткәнме?

3) Хәҙерге көндә ҡайһы бер йәштәр ҡурайға нисек ҡарай?

4) Ә хәҙер дәрес башында ҡуйылған һорауға яуап бирегеҙ әле.

Ҡурай башҡорт халҡының тормошонда ниндәй урын тота?

— Ҡурай элек-электән башҡорт илен һәм милләтен берләштереп тороусы төп рухи ҡиммәттәрҙең береһе булған. Ҡурай моңо — быуындар илсеһе ул. Уның өсөн ваҡыт ҡаршылыҡтары юҡ. Ул иҫкермәй ҙә, төҫһеҙләнмәй ҙә. Ҡурай — күңел йыуанысы. Күңел йыуанысы ғына ла түгел, ул тарихыбыҙға ҡайтып урай.

Бына дәресебеҙгә эпиграф та шуны раҫлап тора.

Ҡурай халыҡ күңелен юрай.

Быуаттар аша үҙенең сафлығын һаҡлаған ҡурайҙың тәрбиәүи роле ҙур. Был үҫеп килгән йәш быуынға — һеҙгә кәрәк. Бигерәк тә хәҙер, тел бәҫен, тарихи дөрөҫлөктө аяҡҡа баҫтырырға тырышҡан заманда.

Өйҙә бөгөнгө әңгәмә ваҡытында тыуған уй-фекерҙәрегеҙҙе белдереп, «Ҡурай — һигеҙенсе мөғжизә» тигән темаға инша яҙып килерһегеҙ һәм «Ҡурай» йырын бер оҙон көйгә һалып йырлап өйрәнегеҙ.

Дәресебеҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтер инем.

Имеш, һуңғы башҡорт ҡәберендә

Ҡурай уйнар һуңғы ҡурайсы, —

тип әйтеүселәр булһа ла халҡыбыҙ рухи яҡтан көслө булып сыға.

Ҡурай моңо йәшәгән саҡта, Салауаттар рухы иҫән саҡта башҡорт халҡы үлмәйәсәк. Уның киләсәге, дауам итеүселәре бар. Улар — һеҙ ул, балалар.

Донъяның 8-се мөғжизәһе булып илаһи ҡурай моңо бөгөн дә күңелдәргә дәрт биреп, йөрәктәрҙе елкендереп, өмөт уты тоҡандыра.

## Дүртенсе дәрес

**Тема: Һан төркөмсәләре.**

**Маҡсат:** — Һан төркөмсәләре менән таныштырыу, уларҙың аңлатҡан мәғәнәһен, һорауын, ялғауын асыҡлау;

— Башҡорт халыҡ ижадын иҫкә төшөрөү аша ата-олатайҙар тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында белем биреү; халҡыбыҙҙың үткәне менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;

— Телмәр үҫтереү, үҙ аллы эшләргә өйрәтеү.

**Күргәҙмәлелек:** — Логик-мәғәнәүи модель схемаһы, телмәр үҫтереү өсөн һүрәттәр, «Арғужа» йыры, плакат.

**Эпиграф:** *«Илен белмәгән-белекһеҙ,*
*Нәҫелен белмәгән-тамырһыҙ».*
*(Мәҡәл)*

**Дәрес барышы**

I. Ойоштороу моменты.

— Һаумыһығыҙ, ултырығыҙ! Башҡорт теле дәресен башлайбыҙ. Балалар, бөгөн нисәнсе число? *(Егерменсе декабрь)*.

— Ул аҙнаның нисәнсе көнө? *(Өсөнсө)*.

— Был рәттә нисә уҡыусы ултыра? *(Ете)*.

— Ә һәр партала нисәшәр бала? *(Икешәр)*.

— Ә был партала нисәү? *(Берәү)*.

Иғтибар иттегеҙме? Беҙ Һандың төрлө формаларын ҡулландыҡ. Тик әлегә исемдәрен әйтмәнек.

Бөгөнгө дәрестә беҙ *һан төркөмсәләре менән танышасаҡбыҙ,* һан тураһында алған белемдәребеҙҙе ҡабатлаясаҡбыҙ, шуға бәйләп, халыҡ ижадының гәүһәрҙәрен иҫкә төшөрәсәкбеҙ, ырыуҙар тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

II. Өй эшен ҡабатлау.

— Үткән дәрестә беҙ һеҙҙең менән һан темаһына *логик-мәғәнәүи модель* төҙөй башлағайныҡ, хәҙер шуны таҡтала күрһәтергә кәрәк.

1 уҡыусы һөйләм тикшерә.

*Бер ағас мейестә лә янмаҫ, ике ағас далала ла һүнмәҫ. (Ҡушма, хәбәр, 2 составлы, таркау. Бер-ябай һан, аныҡлаусы булып килгән)*. (Ҡалғандар үтелгән дәрес материалы буйынса бер-береһенә һорау бирә.)

— Һан нимәне белдерә?

— Ниндәй һорауҙарға яуап бирә?

— Русса һан нисек әйтелә? *(Имя числительное)*.

— Түңәрәк һандар тип ниндәй һандарға әйтәләр? *(30,40,50)*. Баһалау.

III. Яңы тема.

1) Бөгөнгө дәрестә беҙ һеҙҙең менән һандың үҙенсәлектәрен өйрәнеүҙе дауам итербеҙ һәм уның төркөмсәләрен билдәләрбеҙ. Дәфтәрегеҙҙе асып, числоны, теманы яҙып ҡуйығыҙ. *(Числоны яҙа)*. Дәрес башында һеҙ һандың төрлө формаларына миҫалдар килтергәйнегеҙ. Хәҙер шул һандарға һорауҙар биреп, төркөмсәләрен билдәләп ҡарайыҡ. (Ҡоординатаны таҡтала уҡытыусы, урында уҡыусылар тултыра).

— Ете. Ниндәй һорауға яуап була? *(Нисә?)* Нимәне белдерә? *(Теүәл иҫәпте)*. Ялғауы бармы? *(Юҡ)*. Теүәл иҫәпте белдергән һандар төп һандар тип атала. Башҡа һандар ошо төп һанға төрлө ялғауҙар ҡушып барлыҡҡа килә.

— Етенсе. Ниндәй һорауға яуап бирә? *(Нисәнсе?)* Нимәне белдерә? *(һаналыу тәртибен, рәтте)*. Рәт нандары тип атала.

— Һорауҙарын аҙаҡ, үҙегеҙ өҫтәп, тултырырһығыҙ.

2) Ҡағиҙәне үҙ аллы уҡып сығығыҙ.

3) Төркөмләп эшләү. (Альбом биттәре, фломастерҙар таратыла).

— Һан төркөмсәләрен нисек, нимә рәүешендә күҙ алдына килтерә, һәр төркөм, шуны төшөрә. Аҙаҡ, араһыҙҙан берәү аңлата. *(Сәскә, ҡояш, ағас, ҡурай сәскәһе, йөрәк рәүешендә төшөрҙөләр)*.

4) 2 рәт ярышып, һан төркөмсәләрен ҡулланып, һөйләмдәр уйлай.

5) Уйын «Артыҡ һанды тап». (Телдән).

| | |
|---|---|
| Берәү | икенсе |
| икәү | етенсе |
| дүртәү | етмешенсе |
| бишенсе | тугыҙлап |
| алтау | меңенсе |

6) Донъяла ғәжәп нәмәләр, төшөнсәләр күп. Шулар араһында һан мөһим урын тота. Бында мин юҡҡа ғына 7 һанын миҫал итеп

килтерменем. Башҡорттарҙа 7 хикмәтле һан тип иҫәпләнә. Өҫтә 7 ҡат күк, аҫта — 7 ҡат ер, аҙнаның 7 көнө, йәйғорҙоң 7 төҫө. Музыкала нисә нота? *(Ете)*. Ете башҡорт халыҡ ижадында ла бик киң таралған. Мәҫ. әкиәттәрҙә. Әйтеп ҡарағыҙ әле? *(7 юл саты, 7 башлы аждаһа, серҙе 7 йоҙаҡ менән биклəгəндəр, 7 диңгеҙ һ.б.)*

— 7 һаны менән ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ? *Егәрленең ҡулы етәү* (төркөмсәһе-йыйыу). *7 тапҡыр үлсә, бер тапҡыр киҫ* (төп). Рус телендә лә ошоға тура килгән мәҡәл бар. *(Семь раз отмерь, один раз отрежь — Не зная броду, не суйся в воду)*. Йомаҡтар ҙа бар.

Ете һаны халыҡ ижадында шулай киң ҡулланыла һәм <u>берҙәмлек, ойошҡанлыҡ</u> билдәһен аңлата. Бына ниндәй серле һан ул ете.

Ғөмүмән, һандарҙың халыҡ ижадында осрауы башҡорт халҡының бик боронғо замандарҙа, әле яҙыу булмағанда уҡ уларҙы ҡуллана башлауын аңлата.

7) — Ә хәҙер ошо бирелгән мәҡәлдәрҙең береһен ҡулланып, хикәйә төҙөп ҡарағыҙ (1 уҡыусы һүрәт буйынса хикәйә төҙөй).

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ.

Ике уйла, бер һөйлә.

*Ете тапкыр үлсә, бер тапҡыр киҫ* (2-3 хикәйә уҡытыла).

8) Ял минуты, (таҡтала).

Ярыш. Ниндәй һүҙҙәр яҙылған?

| | |
|---|---|
| 100 Ә (Йөҙә) | Т 10 (ТУН) |
| 6 Н (АЛТЫН) | 5 ЕК (БИШЕК) |
| К 3 (Көс) | 100 ӨК (Йөҙөк) |

9) — <u>Ә хәҙер таҡтаға ҡарайыҡ әле.</u> Тикшерелгән һөйләмдә һандар ниндәй төркөмөн асыҡлап килә? *Бер ағас* — исемде. Һандар исемде асыҡлап, иҫәбен, тәртибен, самаһын белдерә. Ҡайһы осраҡта исеме төшөп ҡала ла, һандар исем урынында килә, исемләшеп китәләр: *Береһе килде.*

10) 154-се күнегеү. <u>«Етегән йондоҙ-ете ҡыҙ».</u> 91 -се бит.

1 уҡыусы ҡысҡырып уҡый. Үҙ аллы уҡытыу. (ҺҮРӘТ АСЫЛА).

(Әңгәмә) Нимә тураһында һүҙ бара? (Етегән йондоҙҙоң килеп сығышы, атамаһы тураһында).

11) — Ошо легендаға нигеҙләнгән ниндәй бейеүҙе беләһегеҙ?

— («Ете ҡыҙ»). Һүрәт. Был бейеүҙе Ф. Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейей. <u>Ҡурай. Бейеү.</u>

— «Етегән йондоҙ тип ете ҡабат әйтһәң, сауап була», тигән тиҙәйткес тә бар. (Был тиҙәйткесте элек балаларҙың телен шымар-

тыу, зирәклеген арттырыу өсөн өйрәткәндәр һәм кис һайын ҡабатлатҡандар).

12) — Ә хәҙер һандарҙы үҙҙәре асыҡлап килгән һүҙҙәр менән яҙып алайыҡ. (Үҙ аллы эш). *Ете ҡыҙ, ете йондоҙ, бер саҡ, берәм-берәм һикереп.*

— Һан ниндәй һүҙ төркөмөн асыҡлай? *(Исемде).*

— Ошо яғы менән ниндәй һүҙ төркөмөнә оҡшаған? *(Сифатҡа).*

— Был текста исемләшеп килгән һан бар. *(Етеһе лә матур).*

— Һандан яңы һүҙҙәр ҙә яһала. *(Етегән).*

13) — Ошо тексҡа ауаздаш тағы бер шиғыр уҡыйыҡ әле. Ул бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа киләсәк Рәшит Шәкүр ағайыбыҙҙың шиғыры.

— Нимә ул ырыу? *(Бер нәҫелдән ишәйеп, бер халыҡ булып киткән төркөм).*

14) — Ә бына был турала беҙҙең күренекле шәхесебеҙ М.Өмөтбаев нимә ти? Аҫаба һүҙен нисек аңлайһығыҙ? Аңлатмалы һүҙлектән табырға. — Нәҫелдән күсә килгән ерҙең хужаһы. Риүәйәт-хикәйәт.

— Һандарҙы табығыҙ, төркөмсәһен билдәләгеҙ.

— Өҙөктөң йөкмәткеһен аңлатығыҙ.

— Ә ни өсөн ошоларҙы белергә кәрәк?

Беренсеһе: Ырыу башлыҡтары үҙ кешеләренең һаулығы тураһында хәстәрлек күргәндәр. 7 быуынының аръяғындағы быуын кешеләре менән генә тормош ҡороу рөхсәт ителгән. Сөнки ҡан ҡәрҙәшең менән ғаилә ҡорһаң, ауырыу балалар тыуа.

Икенсеһе: Кешенең холҡо, яҙмышы ниндәй йондоҙлоҡ аҫтында тыуыуына ҡарай. Ғаилә ҡорғанда шуға иғтибар иткәндәр. Йондоҙлоҡтар тап килергә тейеш булған. Ғаилә ныҡ булһа, ырыу ҙа ныҡ була.

Өсөнсөһө: Үҙ халҡыңдың боронғо ижадын белеү рухыбыҙҙы байыта, көс бирә. Ә беҙҙең халҡыбыҙҙың ижады иҫ киткес бай. Халҡыбыҙ талантлы ла, аҡыллы ла, мәҙәниәтле лә булған, тыуған төйәген бар нәмәнән дә артыҡ күреп яратҡан. Бына Мәрйәм башҡарыуында «Арғужа» йыры ла шул хаҡта һөйләй. Әйткәндәй, Арғужа йырының һүҙҙәрен төрмәлә ултырғанда Аҡмулла яҙған, тиҙәр.

15) — Ә һеҙ башҡорт ырыуҙарын беләһегеҙме? Нисәү улар? (Етәү).

— Һеҙ ниндәй төркөмсәне ҡулландығыҙ?(Йыйыу).

ҮҪӘРГӘН
ЮРМАТЫ
БӨРЙӘН Плакат асыла. Шәжәрә-ырыу тарихының йылъяҙмаһы.
ӘЙЛЕ
ҠЫПСАҠ
МЕҢ
ТАМЪЯН

— Ә һеҙ үҙегеҙ ниндәй ырыуға ҡарайһығыҙ? (Яуаптар).

— Эйе, беҙ ырыуыбыҙҙы, уның шәжәрәһен-йылъяҙмаһын белергә тейешбеҙ. Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуына 450 йыл тулыу алдынан хөкүмәтебеҙ шәжәрәнде өйрәнеү, шәжәрә байрамдарын үткәреү тураһында ҡарар ҙа ҡабул итте.

IV. Йомғаҡлау.

Беҙ үҙебеҙҙең халҡыбыҙ, уның үткәне менән ғорурланып, тыуған төйәгебеҙ — Уралтауыбыҙҙа берҙәм, татыу йәшәргә бурыслыбыҙ. Бына ошо мәҡәл дә беҙ һөйләгәндәргә ауаздаш. Бергәләп уҡыйыҡ әле:

Илен белмәгән-белекһеҙ,
Нәҫелен белмәгән-тамырһыҙ.

V. Өй эше.

Өйҙә һеҙ үҙегеҙҙең ырыуығыҙҙы тәрәнерәк өйрәнеп, ғаиләгеҙҙең шәжәрәһен төҙөп ҡарағыҙ. Унда күренекле туғандарығыҙ, уларҙың яҡшы эштәре лә сағылырға тейеш. Бында һан төркөмсәләрен дә дөрөҫ файҙаланырға кәрәк.

— Бөгөнгө дәрестә башҡорт теленән нимәләр белдек? (Һан төркөмсәләрен өйрәндек).

— Тағы нимәләр тураһында һөйләштек? (Ырыуҙар, шәжәрә тураһында һөйләштек).

VI. Баһалау.

*М.Ф.Дәүләтшина*

## Беренсе дәрес

## Ҡушылған дәрестәр
## 9 синыф (төп төркөм)

**Тема: Публицистик стиль.**

«Мин киткәнгә илап ҡайғырмағыҙ, Батыр ирҙәр тыуыр тағы ла».

**Маҡсат:** 1. Публицистик стиль тураһында төшөнсә биреү, мәҡәләләр уҡыу, яҙырға өйрәтеү; 2. Сәсән шағирҙың ижады, тормошо, яҙмышы тураһында үтелгәндәрҙе ҡабатлау, тулыландырыу, С.Юлаевтың шиғырҙарын өйрәнеү, С.Юлаевтың өлгөһөндә Тыуған илде, тәбиғәтте һөйөү, батырлык, туғанлык, кешелеклек, дуҫлыҡ тойғоларын тәрбиәләү.

**Йыһазладырыу.** С.Юлаевҡа арналған гәзит-журнал материалдары, теле-видео материалдар, фото һүрәттәр, китаптар, дәреслектәр, күргәҙмәләр, таблицалар, Салауат Юлаевҡа арналған гәзит.

*(Тыуыуына 250 йыл)*
*«Тыуған илдең кото Салауат,*
*Тыуған илдең уты Салауат».*

**Эпиграф:**

*«Салауаттың ярһыу атын*
*Уҙыр батырҙар тыуһын.*
*Салауаттың утлы рухы*
*Йәш күңелдәргә тулһын!»*
*(Р.Ураҡсина)*

**Плакат:**

*Салауат алмас ҡылысын*
*Йөрөтөр булған һөр саҡ биленддә.*
*Салауат батыр һәләк булһа ла*
*Даны йәшәй Тыуған иленддә.*
*(Халыҡ йыры)*

Иң көсөргәнешле моментта Михельсон корпусының тылына Салауат командаһы менән берләшергә килгән Пугачев отряды һөжүм итә. Пугачев Салауат Юлаевты бригадир, Юлай Аҙналинды

Себер Юлының баш атаманы итеп күрһәтә». («Шоңкар» журналы, 2000/09. *Р.Шәкүр* мәҡәләһе).

2. Салауат, башын эйеп, өндәшмәй торҙо.

— Алға ҡуйған тәртипкә ҡул күтәрәһең, егет. Януарға һунарсы, ҡошҡа бөркөт, ярлы кешегә бай бар. Исемең нисек тинең әле? — Салауат.

— Изге исем биргәндәр һиңә, Салауат, был тыныслыҡ, тыныслыҡ исеме. (С.Злобин «Салауат Юлаев»).

3. «Йыр булып сығырға өлгөрмәгән тойғоларға сумып, Салауат бер үҙе китеп бара. Шуға күрә һәр ваҡыт йыр тыуҙыра торған асыҡ фекерҙәр урынына уның башында шул фекерҙәрҙең остоҡтары ғына мыжғый ине.

Уҡ-яны уның үҙ янында. Ул йәштән үк төҙ ата торғайны (С.Злобин «Салауат Юлаев»).

г) Был текстар ниндәй стилдәрҙә яҙылған? (Публицистик стилдә — беренсе текст, икенсе — йәнле һөйләү стилендә, өсөнсө — матур әҙәбиәт стилендә).

д) Шулай итеп, ҡайһы стилде публицистик стиль тип әйтәбеҙ? (Публицистик стилдә үтә киң тематик проблемалар, йәмғиәтте ҡыҙыҡһындырған сәйәси, иҡтисади, әхлаҡ кеүек мәсьәләләр яҡтыртыла). Ә хәҙер, уҡыусылар, «Оран» видеокассетаһынан өҙөк ҡарағыҙ.

Өҙөктән күренеш оҡшанымы? Ҡем тураһында һүҙ бара? (Салауат Юлаев тураһында).

Гәзит-журнал материалдарында, мәкәләләр, әҙәби тәнҡит, мөрәжәғәт, белдереүҙәр, сәйәси брошюралар, төрлө очерктар публицистик стилдә яҙыла.

Шулай итеп, өс текст ярҙамында беҙ стилдәрҙе билдәләп, өйрәнеп киттек. Ә хәҙер дәфтәрҙәргә датаны, теманы, эпиграфты, һүҙлекте яҙып ҡуйығыҙ.

Уҡыусылар, 2004 йылда данлыҡлы милли легендар геройыбыҙҙың тыуыуына 250 йыл тулды. Илебеҙҙә төрлө саралар уҙғарылды.

А) Викторина һорауҙары:

1. Ҡем ул Салауат Юлаев? (Салауат Юлаев — башҡорт халҡының милли легендар геройы, тарихи шәхес).

2. Тарихи шәхес төшөнсәһен нисек аңлайһығыҙ? (тарихта эҙ ҡалдырған).

3. Салауат Юлаев тарихи шәхесме?(Эйе, тарихи шәхес). Уҡыусылар, эйе, дөрөҫ әйтәһегеҙ, Салауат Юлаевты бөтә донъя

белә, уның батырлығын белмәгән кеше юҡ. Шулай уҡ Салауат Юлаев исемендәге хоккей командаһын бөтә ер шары белә. Хәҙер мин һеҙгә Аҫылғужа Баһумановтың «Салауат Юлаев» шиғырын уҡып ишеттерәм. Эпиграфы «Салауат нисә йәшендә» башҡорт халыҡ йырынан.

Латин Америкаһындағы Никарагуа азатлығы өсөн көрәшеүсе Августо Лопес «Салауат Юлаев» ҡушаматын йөрөтә (Шиғыр).

4. Шиғыр оҡшанымы? Нимәгә төшөндөгөҙ?

(Эйе, окшаны. С.Юлаевтың батырлығына һоҡланмаған кеше юҡ. Уның даны бөтә Ер шарына таралған).

5. Салауат Юлаевтың йырын магнитофонда тыңлау. — Кем ул Ишмулла Дилмөхәмәтов? (Ишмулла Дилмөхәмәтов — йырсы, ҡурайсы, композитор.)

6. Салауат Юлаевтың тағы ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ? Яттан һөйләргә мөмкин. («Уҡ», «Егеткә», «Һандуғас»).

7. Ә хәҙер Салауат Юлаевтың тормошо, яҙмышы тураһында һөйләп алайыҡ.

а) Ул ҡасан тыуған? (16 июндә)

б) Ата-әсәһе тураһында нимәләр беләһегеҙ? (Атаһы Юлай — старшина, 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдың етәксеһе, әсәһе — Аҙнабикә, ул уҡымышлы, бик күп телдәр белгән).

в) Салауаттың бала сағын һөйләгеҙ. (Өс йәшендә ат менгән, оҫта мәргән, бик нескә күңелле, хисле булған).

г) Төҫкә-башҡа нисек булған? (Урта буйлы, ҡара сәсле матур баһадир егет булған).

д) Уның белеме тураһында нимәләр әйтерһегеҙ? (Әсәһенән телдәр өйрәнгән, уҡый-яҙа белгән, урыҫса өйрәнгән).

е) Уҡыусылар, ошо таблицаға күҙ һалайыҡ. (Крәҫтиәндәр һуғышының өс этабы тураһында таблица). Дәресте тарих менән бәйләп, крәҫтиәндәр һуғышының этаптарын һөйләп китәйек. Картаны ҡулланайык. Мин аҙыраҡ ошо өсөнсө этапка өҫтәмә индереп китәйем. Салауат Таймасов «Башҡортостан» гәзитендә 7.07.98 сыҡҡан мәҡәләһендә уларҙың тотолоу урындарын конкретлаштырыбыраҡ бирә. «Был яуҙаштарҙың тотолоу урыны Ҡаратаулы ауылы эргәһедә Ҡаратау урманында булырға тейеш. Сөнки уларҙы тотҡас, яҡын тирәләге ауылға алып баралар. Ә Миңдеш ауылына тиклем 30 саҡрымлап ара була әле. Шулай булғас, тотолған урындарын Ҡартаулы ауылы тип йөрөтөргә кәрәктер».

8. Тотолғандан һуң яҙмышы тураһында нимә беләһегеҙ? (Ҡайһы ерҙәрҙә Салауат яуға кеше туплаған, көрәшкән, шул ерҙәрҙә уны алып барып, халыҡ алдында ҡамсы менән һуктырғандар, язалағандар.)

— Салауат Юлаев тураһында ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ? («Салауат менән Бүгәсәү», «Салауат нисә йәшендә», «Салауат батыр».)

Уның исемен мәңгеләштереү өсөн нимәләр эшләнгән? (Башҡортостан символы, һәйкәлдәре, колхоз-совхоз, район, ҡала, урам, премия исемдәре булдырылған).

9 синыф программаһындағы шиғырҙары менән танышыу: «Уҡ», «Егеткә», «Яу».

— Ә хәҙер, уҡыусылар, А.Ҡузнецовтың «Салауаттан һорау алыу» картинаһы буйынса эшләп алайыҡ. Салауат Юлаев образына яҙыусылар ғына түгел, рәссамдар ҙа мөрәжәғәт итә.

Ҡайһы рәссамдарҙың картиналарын беләһегеҙ? (Г.Мостафин «Салауат Юлаев», Лежнев «Салауатты тотоу», А.Тюлькин «Салауаттың өйө» һ.б.)

Ҡем ул Кузнецов? (1927.11.04 Өфөлә тыуа, 1990 йылда Мәскәүҙә үлә. Өфө художество училищеһында, Харьков дәүләт художество институтында уҡый. БАССР-ҙың атҡаҙанған рәссамы, СССР рәссамдар союзы ағзаһы. Уның шундай һүрәттәре бар: «Бөрйән ҡатындары», «Айыу аулаусы», «Динислам бабай».

Ҡартинала һүрәтләнгән күренеш Салауаттың тормошоноң ҡайһы осорона тура килә? (Ҡартинала Салауат Юлаев тотолғандан һуң, һорау алыу ваҡыты һүрәтләнә).

Ул ҡасан тотола? (яуаптар).

Салауаттан һорау алған урынды тасуирлағыҙ. (Подвалда. Ҡалын, таш стеналары, иҙәндәре аша бер ни ҙә күренмәй).

Батша чиновниктары ни эшләйҙәр? (Һорау алалар).

Дәрескә йомғаҡлау яһала.

*Иҫкәрмә.* Был дәрестә уҡыусыларға яҡшы сифаттар, илебеҙҙең алдынғы ҡарашлы, батыр, көслө рухлы ысын патриотын тәрбиәләү маҡсаты ҡуйылды. Тыуған илгә ҡарата һөйөү уятыу, уны һаҡлау изге бурыс итеп алынды. Публицистик стиль темаһын төрлө стилдәр менән сағыштырып, текстар ярҙамында күрһәтеп, төрлө алымдар менән эшләү отошло тип тәҡдим итәм.

## Икенсе дәрес

## 11 синыф

**Тема: “Әгәр ҙә һин ысын башҡорт икән...“** (Н.Нәжмиҙең “Урал“ поэмаһы нигеҙендә).

**Маҡсат:** дәрес-бәхәс-хөкөм нигеҙендә әҫәрҙең йөкмәткеһен анализлау, уҡыусыларҙа милли рух тойғоһо, тыуған ергә, телгә, милләткә һөйөү, ихтирам тәрбиәләү, әҙиптең ижадына, шәхесенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, ваҡытлы матбуғатҡа ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** Н.Нәжмиҙең портреты, дәреслек, хрестоматия, “Ағиҙел“ журналы (№ 5, 2002 й.), Р.Насировтың “Уҙамандарҙы эҙләйем“ китабы, Н.Нәжмиҙең “Күңел сәхифәләре“ китабы, Р.Шәкүрҙең “Сыңрау торналар“ китабы; “Арҙаҡлы башкорттар“; Н.Нәжми китаптары, гәзит-журнал материалдары, ҡурай, магнитофон, телевидео.

**Эпиграф:** *“Башҡортлоҡ — ул милләт кенә түгел...“*

*Н.Нәжми.*

**Плакаттар:**

*1) Аямаған йәнен, түккән ҡанын,*
*Һис бирмәгән башҡорт Уралын.*
*(Халыҡ йыры)*
*2) Рух һүнмәһә, ил һүнмәҫ.*
*3)Ерҙә әле рух бар — халыҡ рухы...*
*Ҡабул итмәй ул рух юҡ-барҙы.*
*Халыҡ рухы халыҡ ҡанынан ул,*
*Ул бөйөк һәм изге төшөнсә.*

*4)Башҡорт балалары үҙ туған телдәрен өйрәнһендәр ине, шул телдә аралашырға тартынмаһындар ине (А.Г.Бессонов — урыҫ мәғрифәтсеһе).*

— Һаумыһығыҙ, уҡыусылар, ултырығыҙ! Бөгөн беҙ дәресте бәхәс рәүешендә үткәрәбеҙ (Синыф икегә бүленә: бер яҡта яҡлаусылар, икенсе яҡта — ғәйепләүселәр).

Дәрестә башҡортлоҡ, милли рух, милли аң, милләт төшөнсәләре тураһында һөйләшербеҙ.

Бөгөнгө теманы Н.Нәжмиҙең “Урал“ поэмаһы аша өйрәнербеҙ. Үткән дәрестәрҙә Н.Нәжмиҙең тормошона таянып, ижады тура-

һында һөйләштек, уға туҡталып  тормайыҡ (Таҡтала уның тормошо, ижады тураһында схема бар).

Дәфтәрегеҙгә теманы, һүҙлекте, эпиграфты теркәп ҡуйығыҙ. Эпиграф, плакаттарға ҡарап уйланабыҙ (ваҡыт бирелә).

Анализды башлайыҡ.

1. Н.Нәжмиҙең “Урал“ поэмаһында кемдәр тураһында һүҙ бара? (Артист Ишмөхәмәт улы Ишбулла һәм ят кеше тураһында).

2. Ҡем ул Ишбулла? (Башҡортостандың ҡурайсыһы, артисы, үҙ иленең ирекле улы).

3. Дауытов Руслан ҡурайҙа И.Дилмөхәмәтовтың “Уралым“ йырын башҡара.

4. Руслан башҡарыуында кемдең йырын тыңланығыҙ? Ҡем шиғыры?

5. Тимәк, артистың прототибы кем инде? (Ишмулла Дилмөхәмәтов).

6. Ҡем ул Ишмулла Дилмөхәмәтов? (Схемала бирелгән).

7. Артист менән ят кешене яҙмыш ҡайҙа осраштыра? (Японияла гастролдә саҡта артист ят кеше менән отелдә осраша).

8. Ят кеше портретын һүрәтләгеҙ. (Ике яҡта ҡатнаша ғәйепләй, яҡлай).

9. Поэмала кем лирик герой? (Автор).

10. Автор әҫәрҙе ниндәй формала алып бара? (Диалог-бәхәс).

11. Ни өсөн бәхәс-диалог формаһында? (Милли рух драматизмын көсәйтеү өсөн).

12. Бәхәс нимә тураһында? (Артист ят кешене башҡорт тип иҫәпләмәй).

13. “Мин башҡорт“, “Яҡташ“ тигән ят кешенең һүҙҙәре Ишбулланы ышандырамы? (Ике яҡҡа ла һорау). (Юҡ ышандырмай).

14. Башҡортлоғон иҫбат итеү өсөн ят кешегә артист нимә тәҡдим итә? Ни өсөн? (“Урал“ йырын, сөнки “Урал“ йыры башҡорт халҡының гимны) (Абдулла Солтанов башҡарыуында телевизорҙан “Урал“ йыры яңғырай).

15. Был йырҙың исеме нисек? Ҡем уны башҡарҙы? (Башҡорт халыҡ йыры “Урал“. Башҡортостан халҡының гимнына әүерелгән йыр. Тыуған ил, ер, уның азатлыҡ өсөн ҡорбан булған батырҙары тураһындағы йыр. Урал ул башҡорттоң төйәк иткән тыуған ере. Был йырҙы Абдулла Солтанов башҡарҙы).

16. Ҡем ул Абдулла Солтанов? (Йырсы).

17. Ят кеше был йырҙы башҡарғанда, Ишбулла ниндәй хистәр кисерә? (Беренсегә ишеткәндәй ҡабул итә, атаһы йырлағандай була. Күҙ алдына тыуған яғы килә).

18. Бәхәс нимә менән тамамлана? (Артист ят кешене башҡорт тип һанамай).

19. Шағир Н.Нәжми артистан әҫәр аҙағында "Юҡ, һин барыбер башҡорт түгелһең" — тип әйттерә. Ни өсөн? (Ике яҡ та эшләй). (Автор уйнай, йырлай белеү генә башҡорт булыуҙы дәлилләмәй, иҫбатламай).

20. Ә бына һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ысын башҡорт нисек була ул? "Әгәр ҙә һин ысын башҡорт икән..." (Сит илдә йәшәп тә үҙ милләтенде үҫтереп була тип). (Ул бит үҙ телендә һөйләшә, йырлай белә, рухлы башҡорт).

21. Автор кем яҡлы? (Артист яҡлы).

22. Ни өсөн ул уны яҡлай? (Артист үҙ илендә йәшәгәнгәлер).

23. Әгәр ҙә бәхәс уртаһында булһағыҙ, кемде яҡлар инегеҙ? Ни өсөн? (Беҙҙе сит илдә йәшәгән башҡорт һоҡландыра, ҡыуандыра, ул шул тиклем рухлы, үҙ милләтенә, теленә, иленә, мәҙәниәтенә битараф түгел).

24. Артист менән ят кеше икеһе лә башҡорт, тыуған яҡтары ла бер, ә нимә менән улар бер-береһенән айырылалар? (Артист — Башҡортостандың ирекле улы, артисы, ҡурайсыһы, ят кеше-ҡасаҡилһеҙ-ерһеҙ эмигрант).

25. Башҡортостандың халыҡ шағиры, һүҙ оҫтаһы Назар Нәжми халҡыбыҙҙың рух булмышын "Башҡортлоҡ" тип атай. Хрестоматияла (50-се биттә) ошо төшөнсә тураһында өҙөк бирелгән, шуны кемегеҙ ятҡа һөйләп ҡарай (1 уҡыусы ятҡа һөйләй).

26. Һеҙ шул төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ? (Башҡортлоҡ — ул рухлы булыу, үҙ милләтең, илең, ерең кешеһе).

27. Эйе "Башҡортлоҡ — ул милләт кенә түгел" тип аңлата автор. Эпиграфта шулай бирелгән. (Ул милләттән генә тормай. Башҡортлоҡ — ул тел, ил, ер, милли рух).

28. Ә нимә һуң ул рух? (Кешене кеше итеүсе, милләтте милләт итеүсе сифаттар).

29. Рух нимәгә бәйле? (Милли тойғоға) (Әгәр ҙә әҙәм балаһының, кешенең күңел донъяһында шул булмыш юҡ икән, ул рухи яҡтан ярлы була).

30. Ысын башҡорт булып үҙ илендә генәме, әллә сит илдә лә йәшәп буламы? (Сит илдә лә башҡорт булып йәшәп, үҙ милләтен, бөтә булмышын үҫтереп була).

31. Әгәр ҙә бына һеҙ йә йәшәргә, йә эшләргә сит илгә сығып китһәгеҙ, үҙегеҙ менән беренсе нәүбәттә нимә алып китер инегеҙ? Ни өсөн? (Әгәр ҙә мин сит илгә китһәм, ғаиләм менән китер инем, унда үҙ милләтемдең йәшәү рәүешен үҫтерер инем).

32. Сит илдә йәшәһәң дә нимәләрҙе онотмау мөһим, уны үҫтереү, хатта таратыу, күрһәтеү кәрәк икән?(Иң мөһиме теленде, иленде, милләтенде, уның мәҙәниәтен, тарихын онотмау, уны үҫтереү, таратыу, күрһәтеү кәрәк).

33. Уҡыусылар, "Урал" поэмаһындағы ят кеше һеҙгә яҡынмы? Әллә, артист әйткәнсә, ятмы, башҡорт түгелме? Ни өсөн? (Ят кеше беҙгә яҡын, ул ысын башҡорт, сөнки ул телен, илен, милләтен, мәҙәниәтен яҡшы белә). (Уға тоғро).

34. Үҙ милләтенде үҫтереү, тергеҙеү, теленде, мәҙәниәтенде, тарихынды һаҡлап алып ҡалыу өсөн һеҙ ни эшләр инегеҙ? (Президент һайлауҙары, гәзиткә ҡара яғыуҙар, олигархтар тураһында уҡыусыларҙың фекерҙәре).

35. Бөгөнгө көндә кемдәргә рухи тәрбиә биреү кәрәк? Балаларға рухи тәрбиә биреү бөгөнгө көндә көнүҙәк мәсьәләгә әйләнергә тейеш. Халҡыбыҙ кисергән ауыр яҙмыш, халҡыбыҙҙы халыҡ, милләт булыу йәһәтенән бөтөрөү, юҡҡа сығарыу өсөн алып барылған сәйәсәт бөгөнгө көндә лә дауам итә.

Бала рухи яҡтан ныҡ сәләмәт булырға тейеш. Рухһыҙ бала халҡын көсһөҙләндерә. Ундай бала иҫәпкә бар, һанға юҡ. Үҙ халҡын уйламаған бала башҡа милләттәрҙе лә ишәйтә, нығыта алмай. Балаға рухи көстө халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәренән алыу кәрәк.

36. Милли мөхиттең, улай булғас, тәү сығанағы ҡайҙа? (Милли мөхиттең тәү башланғысы, әлбиттә, ғаилә ул. Нәҫелде һаҡлаусы ата, нәҫел ҡото, ырыҫы, донъяға яралтыусы — әсә. Ғаилә, ата-әсә нисек, ана шунан сығып баланың үҫеше билдәләнә). Ата менән әсә мөнәсәбәттәренә ҡарап, бишектәге бала бишкә төрләнә. Мәҡәл дә бар бит: "Ана һөтө менән кермәһә, тана һөтө менән кермәй". Тыуған ер, төйәк тойғоһо, милли тел, милли моң, милли ғөрөф-ғәҙәт, милли рух — былар барыһы ла ғаиләлә бала күңеленә май кеүек яғылырға тейеш. Ғаилә, әсә был бурысты тәрбиәләргә тейеш.

37. Ә ят кешелә шундай ҡанундар һалынғанмы? (Һаҡланған).

38. Шулай булғас, ят кеше образын үҙ башҡортобоҙ итеп ҡабул итә алабыҙмы?

39. Эйе, әлбиттә, бөгөнгө көндә башҡорт булып та башҡортса һөйләшә алмаған, белмәгән, белергә лә теләмәгән, үҙ балаһына әсә

телен — башҡорт телен өйрәтә алмаған ата-әсәләр бар. Үҙ телдәрендә матбуғат баҫмалары яҙҙырып уҡырға теләмәгән ҡайһы бер кешеләр, хатта интеллигенция вәкилдәре йәки үҙенең ниндәй, ҡайһы милләт икәнен дә белмәйенсә йәшәгән битараф — заттар беҙҙең өсөн ят кешеләр.

Тимәк, ят кеше беҙгә ят түгел!

40. Уҡыусылар, мин һеҙгә хәҙер ят кешенең кем булғаны, уның прототибы тураһында мәғлүмәт биреп китәм. “Ағиҙел“ журналы, “Беҙ үҙебеҙ башҡорттар“ рубрикаһында баҫылып сыҡҡан “Илемә хат“ мәҡәләһе менән таныштырам. (Хатты уҡыу).

41. Тарих төпкөлөнән тиҫтәләрсә йылдар аша килеп еткән әрнеүле ауаз был. Ләкин кемдең йөрәгенән сыҡҡан һуң был әрнеү? — Был бит Учалы районы Ширлы ауылында үҫеп, күрше Әүеш ауылында йәшәп киткән Талха лаһа. 1905—1907 йылдарҙағы Рус-Япон һуғышы батыры Ғайса ахун Рәсүлевтың уртансы улы.

42. Шулай итеп, уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән ят кешенең дә прототибын таптыҡ.

Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Назар Нәжмиҙең “Урал“ поэмаһы буйынса бик күп мәғлүмәттәр алдыҡ. Үҙебеҙгә уйланырға урын ҡалдырҙыҡ. Әле беҙгә уйланырға урын күп әле. Һуңғы сәғәттәренә тиклем Тыуған ил, башҡортом тип янған, Зәки Вәлидиҙең рухы илебеҙгә ҡайтты. Тик ундай ҡатмарлы яҙмыштар кире ҡабатланмаһын, һәр башҡорт тыуған ерендә үҙ рухына тоғро булып ҡалһын ине тип теләргә генә ҡала.

*Өйгә эш*: киләһе дәрескә үҙ фекерҙәрең буйынса инша яҙып килергә:

*1. “Башҡортлоҡ ул милләт кенә түгел...“*

*2. “Әгәр ҙә һин ысын башҡорт икән...“*

*Иҫкәрмә*: Был дәрестә уҡыусыларға башҡортлоҡ, милли рух, милли аң төшөнсәләрен тәрбиәләү, рухи көстө халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәттәренән алыуҙы, рухи тәрбиә биреүҙе маҡсат итеп ҡуйырға кәрәк.

## Өсөнсө дәрес

**Тема: “ Донъяның бар гүзәллеге ҡатын-ҡыҙҙа“**

**Маҡсат:** уҡыусыларҙа ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата ихтирам уятыу, ғаилә һәм йәшәйеш именлегенең ҡатын-ҡыҙға, әсә-кешегә бәйле икәнен аңлатыу, бөгөнгө башҡорт ҡыҙы ниндәй сифаттарға эйә булырға тейешлеге хаҡында әңгәмә үткәреү.

**Йыһазландырыу:** видеофильм, магнитофон, плакаттар, китаптар, гәзит-журнал материалдары, картиналар.

Плакаттар.

1) Һин ҡатын-ҡыҙ, һин матурлыҡ, гүзәллек, аҡыл, белем донъяһы.

2) Әсә — милләт тотҡаһы.

3) Ҡатын-ҡыҙ — йорттоң биҙәге.

***Дәрес барышы*:**

*Уҡытыусы:* — Уҡыусылар, ни өсөн бөгөнгө тема ошолай атала?

*Уҡыусы*:

— Сөнки ҡатын-ҡыҙ — иң гүзәл һоҡланғыс кеше.

— Ҡатын-ҡыҙҙарһыҙ донъяның йәме булмаç ине.

— Ҡатын-ҡыҙ — донъяның тотҡаһы, тормоштоң йәме.

— Уларһыҙ йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ тип уйлайым.

— Ҡатын-ҡыҙ — милләт тәрбиәсеһе.

— Шағирҙарҙың да, яҙыусыларҙың да, рәссамдарҙың да әçәрҙәрендә ҡатын-ҡыҙ образы иң күркәм образ булып тора.

*Уҡытыусы:* — Афарин, уҡыусылар! Бик дөрөç әйттегеҙ, матур фекерҙәр! Ҡайһы әçәрҙәрҙә ҡатын-ҡыҙ образы ошо сифаттарҙа һүрәтләнә?

*Уҡыусы:* Мостай Кәримдең “Айгөл иле“ драмаһында Айгөл образы, “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ“ повесында Оло инәй, Кесе инәй, Аҡйондоҙ образдары.

— Һәҙиә Дәүләтшинаның “Айбикә“ повесында Айбикә образы, “Ырғыҙ“ романында Гөлйәҙәм образы.

— Зәйнәп Биишеваның “Яҡтыға“ трилогияһында Емеш образы.

*Уҡытыусы:* Бик дөрөç әйттегеҙ. Ошо образдарҙы һеҙ нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

*Уҡыусы*: — Был образдар инсафлы, ауырлыҡтарға бирешмәйенсә, үҙҙәрендә ихтыяр көсө табып, алдынғы ҡарашлы кешеләр булып күҙ алдына баçа.

— Ауыр, михнәтле яҙмыш та уларҙы һындырмай, һәр береһе тормошта үҙ юлын таба.

— Был образдар беҙҙе һоҡландыра, күңелдәрҙә матурлыҡ тыуҙыра, үҫтерә.

*Уҡытыусы:* Эйе, бик дөрөҫ билдәләп киттегеҙ. Ауыр яҙмышлы ҡатын-ҡыҙ образдарына яҙыусыларҙан кемдәрҙе индерер инегеҙ?

*Уҡыусы*: — Һәҙиә Дәүләтшинаны, Зәйнәп Биишеваны. Һәҙиә Дәүләтшинаның тормош юлы һикәлтәле. Тормош иптәше Ғөбәй Дәүләтшин репрессия йылдарында "Халыҡ дошманы" тип нахаҡҡа ғәйепләнеп, ҡулға алына, юҡ ителә.

Аҙаҡтан уны ла ҡулға алалар. "Халыҡ дошманы"ның ҡатыны тип нахаҡҡа ғәйепләнеп төрмәләрҙә ыҙа сигә, һаулығын юғалта. Төрмәнән ҡайтҡас, бөтә кеше унан ситләшә. Һаулығы ла юҡ, күҙ терәр кешеһе лә булмай, әммә рухи көс, ныҡлыҡ уны йәшәргә, ижад итергә көс өҫтәй.

Зәйнәп Биишева ла тормоштоң бөтә ауырлығын, фажиғәһен күреп, донъяға билдәле яҙыусы булып китә.

— Икеһе лә бөтә михнәттәрҙе үҙ елкәләрендә татыйҙар, ләкин бөгөлөп төшмәйҙәр, ауырлыҡтарға, ҡаршылыҡтарға ҡаршы тороп, тормошта сағыу эҙ ҡалдыралар.

*Уҡытыусы:* Эйе, уҡыусылар, тормош михнәттәре уларҙы, киреһенсә сыныҡтыра, йәшәргә көс бирә.

Әйҙәгеҙ, башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлап үтәйек әле ("Ғилмияза", "Зөлхизә" йырҙарын магнитофон аша тыңлау).

Бына һеҙ әле башҡорт халыҡ йырҙарын "Ғилмияза", "Сәлимә", "Зөлхизә"не тыңлап киттегеҙ. Был йырҙар тураһында нимәләр беләһегеҙ?

*Уҡыусы*: Был йырҙар ҡатын-ҡыҙҙарҙың фажиғәле яҙмышы тураһында. Был образдарҙың яҙмыштары бик аянислы, беҙҙе уйландыра, борсоуға һала.

— Бында шулай уҡ М.Ғафуриҙың "Ҡара йөҙҙәр" повесындағы аянислы яҙмышлы Ғәлимә образын да әйтеп китергә кәрәк. Шәриғәттең иҫке ҡанундары нигеҙендә Ғәлимә шундай фажиғәгә дусар була. Был образдар — иҫке тормоштоң ғәйепһеҙ ҡорбандары.

*Уҡытыусы:* Эйе уҡыусылар, элекке заманда ҡатын-ҡыҙҙарҙың яҙмыштары бик аянислы булған. Әйҙәгеҙ, әле видеонан "Ете ҡыҙ" бейеүен ҡарап китәйек. (Видеофильм "Ете ҡыҙ" бейеүе).

*Уҡытыусы:* Был бейеү нигеҙендә нимә ята?

*Уҡыусы*: "Ете ҡыҙ" легендаһы ята.

*Уҡытыусы:* Әйҙәгеҙ, кем һөйләп китер легенданы?

*Уҡыусы*: (Легенда һөйләй).

*Уҡытыусы:* Ошо бейеү аша нимәне аңланығыҙ?

*Уҡыусы*: Ҡыҙҙарҙың баҫалҡы, оялсан, ипле, бер һүҙле, татыу булыуҙары күренә.

— Улар — ғорур ҡыҙҙар. Бейеү хәрәкәттәре аша үҙ тойғоларын, шатлыҡ-ҡайғыларын да әйтеп бирергә ынтылалар.

— Был бейеү ете ырыуҙың берҙәмлеген, татыулығын да һүрәтләй.

*Уҡытыусы:* Бик дөрөҫ!

Ә хәҙер бына был картинаға күҙ һалығыҙ. Ҡартина нисек атала?

*Уҡыусы*: Беренсе башҡорт рәссамы Ҡасим Дәүләткилдеевтың “Зәңгәр күлдәкле башҡорт ҡыҙы“ картинаһы.

*Уҡытыусы:* Ни өсөн картинаның исеме зәңгәр исеме менән бәйләнгән?

*Уҡыусы*: Зәңгәр төҫ — сафлыҡ, күңел сафлығы, бөхтәлек, нәфислек, йомшаҡлыҡ, мөләйемлек, иркәлек ул.

*Уҡытыусы:* Ҡартинаның алғы планында кемде күрәһегеҙ?

*Уҡыусы*: Зәңгәр күлдәкле һылыу башҡорт ҡыҙын.

*Уҡытыусы:* Ҡыҙҙың кейемдәрен тасуирлағыҙ.

*Уҡыусы*: Өҫтөндә күк төҫлө зәңгәр күлдәк. Оҙон еңле, бәбәй итәкле, итәгендә таҫма. Ҡыҙға килешеп тора. Матур килешле тегелгән.

*Уҡытыусы:* Ҡыҙҙың йөҙөнә ҡарап, ни әйтергә була?

*Уҡыусы*: Ҡап-ҡара сәс толомдарын икенән үреп төшөргән, алһыу йөҙлө, ҡара ҡыйғас ҡашлы, мөләйем ҡара күҙҙәре, сейә кеүек ирендәре.

— Ҡараштарында һағыш та, йылмайыу ҙа бар.

*Уҡытыусы:* Эске донъяһы нисек һүрәтләнгән?

*Уҡыусы*: Донъяға һоҡланып баҡҡан кеүек. Эске донъяһы күҙҙәрендә сағыла. Нескә күңелле, эш һөйөүсән итеп һүрәтләнгән.

*Уҡытыусы:* Артҡы планда ни күрәһегеҙ?

*Уҡыусы*: Һандыҡ өҫтөндә төрлө балаҫтар, юрғандар ҡыҙҙың бөхтәлеген күрһәтә. Биҙәкләп һуғылған балаҫтар һап-һары туҫтаҡ ҡыҙҙың ҡул эшенә, аш-һыу әҙерләргә оҫта икәнлеген күрһәтә.

*Уҡытыусы:* Рәссам ни әйтергә теләгән?

*Уҡыусы*: Рәссам башҡорт ҡыҙҙарына хас булған сифаттарҙы ошо образ аша күрһәтергә теләгән.

*Уҡытыусы:* Бик дөрөҫ һөйләнегеҙ. Эйе, ниндәй генә әҫәрҙе алһаҡ та, ҡатын-ҡыҙ образы күркәм образ булып күҙ алдына килә.

Ә бына хәҙерге көндә ҡатын-ҡыҙҙар тураһында ни әйтерһегеҙ?

*Уҡыусы*: Ҡыҙҙар үҙ урынында ҡала белһен ине ул. Улар бит киләсәктә изге әсәй ҙә, тоғро ҡатын да була торған кешеләр бит.

— Хәҙер ҡайһы бер ҡыҙҙар үҙҙәрен йәмһеҙ күрһәтәләр, йәмһеҙ тәрбиә алалар. Уларҙан киләсәктә ни көтмәк кәрәк?

— Эсеү, тәмәке тартыу, наркомания, бәйһеҙлек күренештәре күңелде ҡыра. Быларға ҡаршы көрәшергә кәрәк, әлбиттә, ул кешенең үҙенән тора.

— Әсә булыу үҙе бер бәхеттер тип фекер йөрөтәм. Әгәр ҡыҙҙар киләсәкте бәхетле итеп күрергә теләһәләр, тәрбиәле булыуҙың иң мөһим икәнен онотмаһындар.

*Уҡытыусы:* Бөгөнгө ҡыҙҙар ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Ҡем нисек уйлай?

— Әлбиттә, ипле, әҙәпле, аҡыллы, тәртипле, егәрле, уҡымышлы, сабырлы тип уйлайым.

*Уҡытыусы:* Идеал образ итеп кемде алыр инегеҙ?

— Әлбиттә әсәйемде. Мин, ғөмүмән, әсәйемә оҡшаған ҡыҙҙар һайлар инем.

— Мин дә шулай уҡ.

— Минең әсәйем егәрле, уңған, мөләйем, ғаиләлә хөрмәтле кеше, үҙе уҡытыусы.

— Ә ҡул эшенә, аш-һыуға оҫта минең әсәйем.

*Уҡытыусы:*Маладис, уҡыусылар!

Әйҙәгеҙ, эпиграфҡа, плакаттарға күҙ һалығыҙ.

— Эйе, әсәйҙәр-милләт тотҡаһы. Һәр бер әсә балаһына, үҙ теленә, иленә ҡарата һөйөү, хөрмәт уятырға тейеш. Баланың теле лә әсә теле менән асыла бит.

— Эйе, ҡатын-ҡыҙ — гүзәл образ, тормош йәме. Әсәйҙәребеҙ иҫкә төштө. Беҙ уларҙы уйлап һоҡланабыҙ.

— Тик әлеге заманда әсәйҙәребеҙгә донъя көтөү икеләтә ауыр. Иҡтисади, сәйәси шарттар, тормош ауырлығы баҫа.

— Әсәйҙәргә ҡарата миһырбанлы, рәхмәтле булыу кәрәк.

— Һәм барлыҡ ҡыҙҙарға әйтер инем: аҡыллы, тәртипле, белемле булырға кәрәк, тормошта үҙ юлдарын, бәхеттәрен тапһындар.

— Ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы — әсә булыу, бала бағыу, ғәиләә ҡарау, тәрбиә биреү, белемле, көслө рухлы, телен, илен яратҡан киләсәк быуын үҫтереү.

— Һәр бер ҡыҙ үҙендә һәйбәт сифаттар тәрбиәләһен ине.

*Уҡытыусы:* Афарин, уҡыусылар! Рәхмәт!

Баһалар ҡуйырға көндәлектәрегеҙҙе бирегеҙ.

**Өйгә эш:**

I. Киләһе ижади дәрескә шиғыр, хикәйә, әкиәт, инша, нәҫер, мәҡәлә яҙып килергә.

*Темалар:*

1. “Донъяның бар гүзәллеге ҡатын-ҡыҙҙа“
2. “Әсә — милләт тотҡаһы“
3. Ҡатын-ҡыҙ-гүзәллек, матурлыҡ, аҡыл, белем донъяһы.
4. Минең идеалым.
5. Минең әсәйем.

II. Һүрәттәр эшләү.

*Иҫкәрмә*: Был дәрестә уҡыусыларҙы уйландырыу, эҙләндереү, ижади эшләтеү, фекерләү, ижади һәләтен үҫтереү бурыс итеп ҡуйылды.

## Дүртенсе дәрес

## 7 синыф

**Тема: Башҡорт халҡының йәшәү рәүешендә ете һаны.**

**Маҡсат:** Ете һанының мәғәнәһен, билдәһен, символын аңлатыу, телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү, фекер, хәтерҙе үҫтереү, халыҡ ижадына һөйөү уятыу.

**Йыһазландырыу:** Видеофильм, таблица, һүрәттәр, конверттар, материалдар (7 һаны буйынса), магнитофон.

**Эпиграф:** *Һауаларҙа ете йондоҙ — ете ҡыҙ,*
*Ерҙә шатлыҡ бейей — ете ҡыҙ,*
*Етегәндең ете ҡуҙынан*
*Беҙ, башҡорттар, тыуған ырыуҙар.*
*(Р.Шәкур).*

**Һүҙлек:**

Ҡуҙ — утлы күмер, горячие угли.
Ҡаҙыҡ — бағана, кол.
Нәҙер — обещание, намерение, ниәт.
Көйәнтә — коромысло.
Сәфәр — юл, дорога.
Сауап — изгелек, добро.

*Уҡытыусы:* Бөгөнгө дәрестә ете һаны тураһында һөйләшербеҙ. Датаны, теманы, эпиграфты, һүҙлекте яҙып алығыҙ.

1) Ниндәй һан ул ете һаны?
— Ете һаны изге һан ул.
— Бөтә донъяны ете һаны менән бәйле тиҙәр.

2) Ете һаны менән бәйле нимәләр беләһегеҙ?
— “Ете ҡыҙ“ бейеүе.
3) Ниндәй бейеү ул?
— Бейеүҙең нигеҙендә легенда ята.
4) Ни өсөн бейеү шулай атала?
— Ете ырыу булғанға.
— Ете ырыу берҙәмлеген һүрәтләй.
5)Кем легенданы һөйләп китер?
— (Легенданы һөйләйҙәр).
6) Әйҙәгеҙ әле видеофильм ҡарап китәйек “Ете ҡыҙ“ бейеүен.
7) “Ете ҡыҙ“ бейеүе аша нимәне аңланығыҙ?
— Ҡыҙҙарҙың баҫалҡы, ғорур, берҙәм, татыу, ипле булыуҙарын һүрәтләй.
8) Әйҙәгеҙ, ете һаны менән мәҡәл, әйтем, йомаҡ, әкиәт, йыр, йәғни ете һаны менән бәйле нәмәләрҙе әйтегеҙ.
— Ете юл сатында осрашыу.
— Егәрленең ҡулы етәү.
— Етәү берәүҙе көтмәй.
— Ете теш араһынан хәбәр.
— Ете ҡат ер аҫтынан йылан көйшәгәнен ишетеү.
— Етегән йондоҙ.
— Ете ырыу.
— Ете диңгеҙ аръяғында.
— Йәйғорҙоң ете төҫө.
— Ете һанын күрһәң, теләгең тормошҡа аша.
9) Ә хәҙер, уҡыусылар, һүрәткә күҙ һалығыҙ.
— Был һүрәттә нимәләр күрәһегеҙ?
10) Ете һанын ниндәй сифаттарҙа күрәбеҙ?
— Ете юл саты.
— Ете тау артында.
— Ете йоҙаҡҡа бикләнгән.
— Ете һандыҡ эсендә.
— Ете йылға, күл артында.
— Ете ырыу.
— Ете диңгеҙ аръяғында.
— Йәйғорҙоң ете төҫө.
11) Уҡыусылар, беҙҙең дәрескә ете хат килде. Хатты уҡыу өсөн тәүҙә һорауҙарға яуап биреү кәрәк. (Ете конверт — (конверт тышында һорау, эсендә теләк)).

1) Башҡорт ниндәй төп эштәрҙе башҡарырға тейеш?

(Конверт эсендә теләк: Башҡорт рухлы булып үҫегеҙ!)

2) Ете ырыу атамаларын әйт. (Теләк — Башҡорт илен, телен, милләтен үҫтер).

**3) "Башҡорт" һүҙенә кроссворд**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Б | А | Ш | Ҡ | О | Р | Т |
| А | Л | А | У | Ҫ | У | Ы |
| Т | С | Я | Н | Т | Х | Р |
| Ы | А | Н | А | А | Л | Ы |
| Р | Ҡ | | Ҡ | | Ы | Ш |
| | | | С | | | |
| | | | Ы | | | |
| | | | Л | | | |

**4) Ошо формуланы сис:**

**(+М)+К$^7$)**

Хеҙмәт + мөхәббәт + коэф-т бәхет 7 (Теләк: бәхетле, һау, ауырыма, уңған, тырыш булығыҙ!)

5) Нимә ул бәхет? (Теләк: Бәхет үҙ ҡулыңда!)

6) Етегән йондоҙҙо ете ҡат һанаһаң сауап алаһың.

(Кешегә изгеллек ҡыл, бәхетле бул!)

7) Р.Шәкүрҙең шиғырын уҡығыҙ.

(Теләк: Кеше үҙ бәхетен үҙе ҡоя).

12) Эпиграф нимә әйтә?

Ете ырыу — илебеҙҙә халыҡ татыу, дуҫ йәшәһен, берҙәм йәшәһен.

13) Ете һаны юлығыҙҙа осрап торһон, бәхет килтерһен!

14) Өйгә эш: төркөмләп эш алырға.

1. Һүрәттән әкиәт төҙөргә.

2. 7 һаны буйынса кроссворд төҙөргә (халыҡ ижадын ҡулланып).

3. Мәҡәл, әйтем, йомаҡ, хикәйә, әкиәт төҙөргә.

4. Һүрәт төшөрөргә.

5. 7 Һанына реклама.

6. Викторина.

(Был дәрестә уҡыусыларҙың телмәрен үҫтереү, халыҡ ижадына һөйөү уятыу, башҡорт халҡының йәшәү рәүешенә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, үҫтереү маҡсат итеп ҡуйылды).

*Т. М. Исламова*

## Беренсе дәрес

**Тема: Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе**

**Маҡсат:** 1. Белем биреү: Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибен нығытыу өҫтөндә эшләү.

2. Тәрбиә биреү: Тәбиғәткә ҡарата һөйөү тәрбиәләү.

3. Телмәр үҫтереү: Һөйләү телмәрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: видеояҙма “Ҡем көслө“ әкиәте, йырҙар кассетаһы, плакаттар, таблицалар, “Ҡөҙ“ һүрәттәр.

**Дәрес барышы:**

I. Ойоштороу мәле.

II. Тема өҫтөндә эш. Дәрес плакаттағы кроссвордты сисеүҙән башлана. Талғын ғына музыка уйнай.

***Кроссворд***

| | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | | | 1 |
| | | | | | | | 2 |
| | | | | | | | 3 |
| | | | | | | | 4 |
| | | | | | | | 5 |
| | | | | | | | 6 |
| | | | | | | | 7 |

1) Энәһе бар ебе юҡ. (Терпе)
2) Башы тараҡ, ҡороғо ураҡ. (Әтәс)
3) Ағаһы ла, ҡустыһы ла эшләпәле. (Бәшмәк)
4) Йөҙ йәшәр ағас. (Имән)
5) Лийеҙа уҡырға инер өсөн нимә яҙалар. (Ғариза)
6) Донъяла иң яратҡан кешең кем? (Әсәй)
7) Тау нимәһеҙ булмай. (Ташһыҙ)

(Бер уҡыусы таҡтала яҙа бара).

— Ниндәй һүҙ килеп сыҡты?

— Тәбиғәт.

— Тимәк беҙ бөгөн дәрестә ниндәй темаға һөйләшәсәкбеҙ?

— Тәбиғәт темаһына.

Дәфтәрҙәрегеҙҙе асығыҙ, бөгөнгө числоны һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ.

— Хәҙер ниндәй миҙгел?

— Көҙ.

— Көҙ һүҙендә ниндәй башҡорт өндәре бар?

— ө, ҙ.

— Әйҙәгеҙ әле ошо өндәрҙе дөрөҫ итеп әйтеү өҫтөндә эшләп алайыҡ. Өйгә көҙ тураһында дүрт юллыҡ шиғырҙар ятларға бирелгән ине. Тыңлап китәйек:

* * *

*Әле ҡойоп ямғыр яуа,*
*Әле һалҡын ҡар төшә.*
*Өҙөлмәҫкә теләп, япраҡ*
*Елдәр менән тартыша.*

*Ринат Шакир*

* * *

*Көҙгө урман. Ағастарҙан*
*Алтын япраҡ ҡойола.*
*Зәңгәр күктән парашюттар*
*Төшкән кеүек тойола.*

*Айһылыу Йәғәфәрова*

* * *

*Моңһоуланды урмандар,*
*Һарғайҙы ҡырҙар өҫтө*
*Йылға-күлдәр тып-тыныс —*
*Көҙ килде бит, көҙ килде.*

*Муса Ғәли*

* * *

*Көҙ апай килә баҙарҙан,*
*Нимә генә алмаған!*
*Ниндәй бүләк кәрәклеген*
*Әйтмәһәң дә аңлаған.*
*Ҡайындарға — һары яулыҡ,*

*Миләшкә — ҡыҙыл мунсаҡ,*
*Сейәгә — көрән алҡалар,*
*Ал да ҡолағыңа таҡ.*

*Айһылыу Йәғәфәрова*

— Көҙҙөң ниндәй билдәләре тураһында һүҙ барҙы?
— Һары япраҡтар, осоусы ҡоштар, әсе ел, ҡыҫҡа көн...
— Был ниндәй һүҙ төркөмдәрен әйттегеҙ?
— Сифат, исем.
— Быйыл көҙ нисек килде?
— Матур килде.
— Был һүҙбләйләнеш ниндәй һүҙ төркөмөнән төҙөлгән?
— Рәүеш, ҡылым.
— Әйҙәгеҙ әле карточкалар менән эшләп алабыҙ (Бирелгән һүҙҙәр менән телдән һүҙбәйләнештәр төҙөү).
— Мәҫәлән: алтын+көҙ; тиҙ+етте.
— Ә хәҙер иҫкә төшөрөп, сифат менән рәүештең оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын әйтеп китегеҙ.

*Айрмалы яҡтары:* 1. Сифаттар исемгә бәйләнеп, уларҙы асыҡлап ниндәй? һорауына яуап була. 2. Рәүештәр ҡылымға бәйләнеп нисек? һорауына яуап була. Мәҫәлән: яҡшы китап (сифат+исем), яҡшы уҡый (рәүеш+ҡылым).

*Оҡшаш яҡтары:* улар икеһе лә билдә аңлата.
— Беҙ һеҙҙең менән бөгөн дәрестә һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибен нығытыу өҫтөндә эшләйбеҙ.
— Хәтергә төшөрәйек:
— Исем һөйләмдә нимә булып йөрөй? (Эйә)
— Ҡылым — хәбәр.
— Сифат — аныҡлаусы.
— Рәүеш-хәл.
— Бик яҡшы, һөйләм киҫәктәрен онотмағанһығыҙ икән. Ә хәҙер таҡталағы плакатҡа күҙ һалайыҡ:
(Һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибен сағылдырған плакат: аныҡлаусы+эйә+тултырыусы+ хәл+хәбәр).
— Һөйләмдең баш киҫәктәре?
— Эйәрсән киҫәктәре?
— Һөйләмдә һүҙҙәр бер тәртиптә генә киләме?
(Юҡ, интонацияға, логик баҫымға ҡарап). Мәҫәлән: Әйтегеҙ уға — уға әйтегеҙ. Йөрөмәһен бында — бында йөрөмәһен.

(Уҡыусыларҙан уҡытыу).

Плакат. Ҡөҙ етте. Бына алтын көҙ ҙә килеп етте.

— Был һөйләмдәр төҙөлөшө буйынса ниндәй һөйләмдәр?

— Йыйнаҡ һәм таҫҡау.

— Билдәһен әйтеп бирегеҙ!

— Йыйнаҡ: эйә+хәбәр.

Тарҡау: эйә+хәбәр+эйәрсән киҫәктәр.

Эш: бирелгән һүҙҙән береһе-йыйнаҡ, икенсеһе-тарҡау һөйләмдәр төҙөү.

Һүҙҙәр: етте, көҙ, көндәр, һарғайҙы, һыуынды, үләндәр.

Ҡарточка.

— Улар таҡтала эшләгән арала тулы һәм кәм һөйләмдәрҙе хәтергә төшөрөү, 2 төркөмгә бүленеп диалог төҙөү. "Баҡсала", "Китапханала".

Мәҫәлән: — Һаумыһығыҙ, Наилә апай!

— Һаумыһығыҙ!

— Һеҙҙә Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ" әҫәре бармы?

— Бар.

— Ә хәҙер дәфтәрҙәргә 1-әр һөйләм төҙөп яҙығыҙ, рус теленә тәржемә итегеҙ, һөйләм киҫәктәренең аҫтына һыҙығыҙ.

(Таҡтала 1 уҡыусы эшләй).

Һары япраҡтар миңә бик оҡшай.

*Желтые листья мне очень нравятся.*

Уҡыусыларҙың һөйләмдәрен уҡытып, һөйләм киҫәктәренең урынлашыу тәртибенә иғтибар иттереү. Бергәләп ҡағыҙә сығарып бер-ике көслө уҡыусынан әйттереү:

Һөйләмдә һүҙҙәр билдәле бер тәртиптә килә:

1. Эйә һөйләмдең башында, хәбәр аҙағында тора.

2. Аныҡлаусы аныҡланыусының алдында тора.

3. Тултырыусы, хәлдәр, ғәҙәттә, эйә менән хәбәр араһында урынлаша.

Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе: Тимәк, һөйләм эсендәге һүҙҙәр билдәле тәртиптә килә. Ул тәртипте һаҡлау һәр кем өсөн дә кәрәк һанала. Уҡыусылар, киләсәктә, ошо дәрестә алған белемегеҙгә таянып, телмәрегеҙҙәге хаталарҙы кәметерһегеҙ, тип уйлайым.

*III. Өйгә эш.* Дәрестең һуңында башҡорт телендәге бер әкиәттең башын видеояҙманан күрһәтеп, өйҙә дауам итеп әкиәт яҙырға ҡушыла.

*IV. Баһалар ҡуйыу.*

*Иҫкәрмә.* Был дәрес өлгөһөн башланғыс төркөм уҡыусылары өсөн тәҡдим итәм. Дәресте рус теле менән сағыштырып алып барыу отошло. Синыфтың белем кимәлен иҫәпкә алып, эш төрҙәрен ҡатмарландырырға мөмкин. Тел өйрәнеүҙе телмәр үҫтереүҙән башларға һәм аралашыу өсөн баланың хәтерендә кәрәкле һүҙҙәр, һөйләмдәр булырға тейеш тигән маҡсаттан сығып төҙөлдө был дәрес өлгөһө.

## Икенсе дәрес

**Тема: «Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй**
**Ир егеткәй менән ат башы»**

*(Я.Хамматовтын, «Төнъяк амурҙары» әҫәре буйынса йомъаҡлау дәресе.)*

**Маҡсат:** 1. Белем биреү: Башҡорт халҡының тарихи үткәне менән таныштырыуҙы дауам итеү.

2. Тәрбиә биреү: Башҡорт ир-егеттәре ниндәй булырға тейеш тигән һорау өҫтөндә уйландырыу.

3. Телмәр үҫтереү: һөйләү телмәрен үҫтереү.

**Йыһазландырыу, плакаттар,** 1812—1814 й. Ватан һуғышы тураһында материалдар, һүрәттәр күргәҙмәһе, видео, аудио яҙмалар («Кутузов» фильмы, «Азамат», «Любизар» көйҙәре, ҡурай)

**Дәрес барышы:**

I. Ойоштороу мәле.

II. Тема өҫтөндә эш:

1. Дәрес «Азамат» халыҡ йырын тыңлау менән башлана. Һуңынан көй аҫтында бер уҡыусы ошо йырҙы тасуири һөйләй:

*Алыҫтарҙан аъарып, ай, куренгән*
*Ирәндеккәй тауының аҡ ташы*
*Ҡайҙа ла ъына бармай, ниҙәр курмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы!*

— Ниндәй башҡорт халыҡ йырын тыңланыҡ? («Азамат»)

«Азамат» йырындағы «Ҡайҙа... ат башы» тигән һүҙҙәрҙең мәғәнә тәрәнлеге тураһында уйлаһаң, Тыуған илен, азатлыкты һаҡлап, нисәмә тапҡыр яуҙарға күтәрелгән, ат менән ил-ерҙәр үткән ир-егеттәрҙең һыны, яу юлдары, батырлыҡтары күҙ алдына килеп баҫа.

Уҡыусылар, бөгөн беҙ дәрестә Я. Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары» әҫәренә нигеҙләнеп «Ҡайҙа ла ғына бармай...» тигән тема аҫтында йомғаҡлау дәресе үткәрәбеҙ. Дәфтәрҙәрҙе асып, числоны, теманы яҙып ҡуйығыҙ.

Әйҙәгеҙ әле тарихҡа күҙ һалайыҡ. 1557 йыл ниндәй ваҡиға була? (Рус дәүләтенә кушылыу)

Ниндәй шарттар менән? (1. Ер башҡорттар ҡулында булырға тейеш. 2. Ҡөсләп суҡындырмаҫҡа. 3. Яһаҡ түләргә. 4. Үҙ иҫәптәренә хеҙмәт итергә, походтарҙа ҡатнашырға.)

— Башҡорт халҡының батыр улдары Тыуған иле-бөйөк Рәсәйҙе сит ил баҫҡынсыларынан һаҡлап күп тапҡыр ҙур яуҙа ҡатнашҡан, күптәре һуғыш яланында ятып ҡалған.

2. Башҡорттар рустарҙың ниндәй хәрби походтарында ҡатнашҡан? (Рәсәйҙең һуғыш һәм походтарында башҡорттарҙың ҡатнашыуы:

1. 1558—1583 йылдар. Ливон һуғышы.

2. 1570—1572 йылдар. Ҡырым менән һуғыш.

3. 1611—1512 йылдар. Поляк-швед интервенттарына ҡаршы һуғыш.

4. 1612 йыл Мәскәүҙе поляк-литва илбаҫарҙарынан азат итеү.

5. 1695—1696 йылдар. Азов походы.

6. 1700—1721 йылдар. Төнъяҡ һуғышы.

7. 1756—1763 йылдар Рәсәйҙең Пруссия менән һуғышы (Ете йыллыҡ һуғыш — 2500 башҡорт).

8. 1772 йыл. Польшалағы һуғыш (300 башҡорт.)

9. 1805—1809 йылдар. Франция менән барған һуғыш (7 мең башкорт.)

10. 1812—1814 йылдар. Наполеон армияһына ҡаршы һуғыш (14840 башҡорт).

11. 1828—1829 йылдар. Рус-төрөк һуғышы (ике полк).

12. 1830—1831 йылдар. Белоруссияла һәм Польшала поляк хәрби әсирҙәрен оҙатҡанда этап хеҙмәтен үтәү.

13. 1839 йыл. Хиуаға ойошторолған яу (3700 башҡорттоң 2000 кешеһе үлеп ҡала. В.А.Перовскийҙың беренсе походы).

14. 1853 йыл. Урта Азияға яуға сығыу. (400-ләп башҡорт. В.А.-Перовскийҙың Урта Азияға икенсе походы).

15. 1853—1856 йылдар. Ҡырым һуғышы ваҡытында Балтик буйы ярҙарын, Севастополде һаҡлауҙа ике полк ҡатнаша.

— Ә Я.Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары» әҫәрендә нисәнсе йылғы һуғыш тураһында һүҙ бара? (1812—1814 й. Беренсе Ватан һуғышы).

— Ул һуғыш тураһында нимәләр беләһегеҙ?

(1812 й. 12 июнендә Франция ғәскәрҙәре Наполеон етәкселегендә Рәсәйгә ҡаршы һуғыш башлаған. Наполеон Рәсәйгә баҫып ингәс, император Александр I халыҡтарға манифест менән мөрәжәғәт итә. Ватанды һаҡларға, башҡа халыҡтар менән башҡорттар ҙа әүҙем күтәрелә).

— Французларға ҡаршы Ватан һуғышы, яугир ир-егеттәр тураһында ниндәй әҫәрҙәр ижад ителгән?

*(Я.Хамматовтын. «Төнъяҡ амурҙары», Б.Бикбайҙың «Ҡаһым түрә» драмаһы, «Француз көйө», «Байыҡ», «Любизар», «Ҡаһым түрә», «Икенсе әрме» тарихи йырҙары)*.

— Әйҙәгеҙ әле 7 синыфта өйрәнгән «Икенсе әрме» риүәйәтенең йөкмәткеһен иҫкә төшөрөп китәйек (7 кл. әҙәбиәт, 72-се бит).

— Ошолай итеп башҡорт ғәскәрҙәре тау шишмәһендәй гөжөлдәп, диңгеҙҙәй, урыҫ ғәскәрҙәренә ҡушылып, французларҙы ҡыуып алып киткәндәр, ти. Яуҙа ҡатнашыуҙары менән башҡорттар һәр ваҡыт ғорурланған, улар уны Ватан алдындағы бурыстарын үтәү тип аңлаған.

— 1812 й. Ватан һуғышында нисә башҡорт полкы ҡатнашҡан?

(1812 й. июль—сентябрь айҙарында 18 башҡорт атлы полкы ойошторола. 1812 й. аҙағында һәм 1813 й. башында тағы ла 8 полк төҙөлә, ә 2 полк 1811 йылдың, апрелендә үк төҙөлгән була. Шулай итеп башҡорттар барлығы 28 полкты һуғышҡа оҙата).

— 1 полкта нисә кеше була?

(Атлы полк 500 ябай һалдаттан, ә командирҙар составы 30 кешенән торған. Бөтәһе 14,840 башҡорт һуғышта ҡатнашҡан.)

— Полк командиры итеп ниндәй милләт кешеһе ҡуйылған? (рус, казак офицерҙарын ҡуйғандар, ә башҡорттар уларҙың, ярҙамсыһы ғына була алған.

— Башҡорттар нисек ҡоралланған булған? (уҡ-һаҙаҡтар, һөңгө, ҡылыс, ә мылтыҡ һәм пистолеттар бик һирәктәрендә генә була).

— Ә ни өсөн башҡорттар тик ярҙамсы ғына һәм насар ҡоралланған булған?

(Рустар ҙур башҡорт ғәскәренә утлы ҡорал тоттороорға, командирҙарҙы ла башҡорттан ҡуйырға ҡурҡҡан, сөнки Салауат батыр кеүек булып ҡуймаһындар тип уйлағандар).

— Эйе, башҡорт яугирҙары рус батшаһын ғына түгел, дошмандарын да дер ҡалтырарға мәжбүр иткән. Сөнки улар ниндәй булғандар? (112 — 113-сө биттәр, 8-се синыф әҙәбиәт дәреслеге).

— Ни өсөн ,башҡорттарҙы «Төньяҡ амурҙары» тип атағандар? (Легенданы һөйләү).

Ә ниндәй башҡорт ғәскәр етәкселәрен беләһегеҙ?

(С.Юлаев, Шайморатов генерал, Таһир Күсимов, Ҡаһым түрә...)

— Ҡаһым түрә хаҡында нимәләр беләһегеҙ?

(Ул Юрматы ырыуы башҡорто. Ҡаһым Мырҙаш 1778 йылда тыуған. Ватан һуғышы башланғанда уға 34 йәш кенә була... 8 кл., әҙ., 142-се бит).

— Ватан һуғышында иң хәл иткес яу ҡайҙа була? (...Бородино яланындағы һуғыш 6 сәғәткә һуҙыла. Атаман Платов етәкселегендәге 1-се башҡорт полкы егеттәре айырыуса батырлыҡ күрһәтә).

— Әйҙәгеҙ ошо һуғыш тураһындағы видеояҙманан өҙөк ҡарап китәйек. Кемдәрҙе күрҙек инде?

Башҡорт һыбайлылары француздарҙы ҡыуып Европа буйлап Польша, Германия ерҙәрендә Лейпциг, Варшава, Берлин, Дрезден, Гамбург, Веймар ҡалаларын алыуҙа ҡатнаша (картанан күрһәтеп һөйләргә).

*— Илгә ауыр көндәр килгән саҡта,*
*Башҡорт ҡыҙы борон замандан,*
*Ҡулына ҡорал алып, менгән атҡа,*
*Ирҙәрҙән бер тотам ҡалмаған.*

Мин — яу ҡыҙы!

— Ниндәй әҫәрҙән өҙөк, кемдең һүҙҙәре?

(«Ҡаһым түрә» драмаһынан Аҫылбикәнең һүҙҙәре)

— Башҡорт ир-егеттәре менән бер рәттә тороп, тыуған ил өсөн көрәшеүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙан тағы кемдәрҙе беләһегеҙ?

(Зефировтың «Йәнтүрә» — Йәнтүрәнең ҡатыны Б.Бикбайҙың «Ҡаһым түрә» драмаһынан — Аҫылбикә мәргән ҡыҙ. Ғ.Ибраһимовтың «Кинйә» романында Алдар — Аҡкалпаҡ, Һеләүһен — Буранбикә. Башҡорт ҡатын-ҡыҙы ат өҫтөндә елеп, кәрәкһә ян тота, һөңгө лә һуҙа белгән).

— Эйе, башҡорт ҡатын-ҡыҙының 1812—1814 й. походта ҡатнашыуы хаҡында яугир ҡатыны йырлаған «Ирәмәл» йырында асыҡ әйтелә:

*«Илкәйенә дошман баҫып инһә,*
*Ҡем генә һуң өйҙә ҡала икән?»*

тип йырлаған да, атҡа менеп, ҡулына ҡорал алып, ире менән бергә француз яуына киткән.

— «Ҡайҙа ла ғына бармай... » тигән йыр юлдарына әйләнеп ҡайтайыҡ. Ата-бабаларыбыҙ XVII быуатта уҡ Ер йөҙөндә әлеге ваҡытта үҙенә күп кешене ылыҡтырыусы мәшһүр Париж ҡалаһын барып күргән. Күреү генә түгел, һуғыш тип тормай, күренекле кешеләре менән осрашҡан. Ниндәй күренекле шәхес тураһында һүҙ бара?.. Әлбиттә, Иоган Гёте — немец шағиры. Ҡем ошо осрашыу хаҡында һөйләргә теләй? (144-146-сы бит).

— Бөтә донъяла дан яулаған «Төньяҡ амурҙарын» күрмәйенсә тыныслана алмаясағын аңлаған кенәз? (Шварца ауылы кенәзе Ҡарл Гюнтер 7-се башҡорт полкын ҡунаҡҡа саҡыра... 148—149-сы бит буйынса).

— Тыуған ерҙәренә ҡайтып барышлай бөйөк шағир Гёте менән осрашыу башҡорт яугирҙарына дәрт, көс, мәңге юйылмаҫ хистәр, рухи байлыҡ өҫтәй.

4. Дәресебеҙҙең темаһына тағы ла иғтибар итеп, башҡорт ирегеттәренең тоғро яуҙашы тураһында һөйләшеүҙе дауам итәйек, һүҙ нимә хаҡында барасаҡ?.. Әлбиттә — ат. Башҡорт һуғышсыларының айырылғыһыҙ дуҫы хаҡында кем һөйләп китә?

(Ырымбур губернаһы ғына 45 атлы полк ойоштора, шул иҫәптән 28-е — башҡорттыҡы. Унан тыш башҡорт халҡы армияға хәрби хеҙмәт өсөн яраҡлы иң яҡшы 4,139 баш ат бүләк итә).

— Парижға тәүгеләрҙән булып кереүсе башҡорт полктары? (1, 2, 5, 8, 9, 12, 13, 14, 15-се; һәм бөтә яугирҙары ла көмөш миҙал менән наградаланған).

— 1812 й. Ватан һуғышында башҡорттар ҙур батырлыҡ күрһәткәндәр. Һуғышта ҡатнашыуы менән башҡорттар һәр саҡ ғорурланған, батырҙарының даны менән һоҡланған. Ҡиң билдәле "Ҡолой кантон" йырында:

*Был империяны самаланым —*
*Башҡортомдан батыр юҡ икән, —*

тип хаҡлы әйтелгән.

— Шулай уҡ Кутузов та башҡорттарҙың батырлығын күреп ниндәй һүҙҙәр әйткән?

(Любезные вы мои, молодцы!.. "Любизар" йырын сығарғандар).

— Дәресебеҙҙе тамамлап, "Любизар" йырын йырлап алайыҡ (1 куплетын кассетанан тыңлағандан һуң, ҡурай моңо аҫтында балаларҙы йырлатырға мөмкин).

III. Йомғаҡлау.

— Башҡорт халҡының тарихында оялырлыҡ, хурланырлыҡ бер генә нәмә лә юҡ. Беҙҙең аһ-зар, ҡан-йәш менән һуғарылған тарих юлы көмөш кеүек саф. Беҙҙең халыҡ бер ваҡытта ла башҡа халыҡтың ер-һыуына баҫып инеп ҡан ҡоймаған, бала-сағаһын, ҡатынҡыҙын ҡан илатмаған. Ул, киреһенсә, үҙе ете быуат ярым буйы ҡанһыҙ баҫҡынсыларҙың йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән, йән аямай ғәҙеллек өсөн, азатлыҡ өсөн көрәшкән. Тыуған илен, Рәсәйҙе һаҡлап, хатта Парижға ла барып еткән. Ә һеҙгә, уҡыусылар, бер ҡасан да һуғыш уты күрергә яҙмаһын, ә киреһенсә тыныс күк аҫтында ата-бабайҙар эҙенән Парижға ял итергә барырға яҙһын.

Уртаҡ Ватаныбыҙ һаналған Рәсәйҙе һаҡлап яу ҡырында һәм, Париж урамдарын айҡап, Елисей яландарында ҡурай тартып, даншөһрәт менән әйләнеп ҡайтҡан батырҙарыбыҙ бер ваҡытта ла халыҡ хәтеренән сыҡмаҫ.

— Баһалар ҡуйыу.

***Иҫкәрмә:*** VIII синыфта Я.Хамматовтың "Төньяҡ амурҙары" әҫәрен өйрәнгәндән һуң үткәреү өсөн йомғаҡлау дәресе өлгөһөн тәҡдим итәм. Тарихи әҫәрҙәрҙе үткәндә туған әҙәбиәт дәрестәрендә предмет-ара бәйләнешкә ҙур иғтибар бүлергә кәрәк. Әҙәбиәт дәресен тарих менән бәйләп алып барыу отошло. Бала тарихи даталарҙы, шул осорҙо яҡшы белә икән, әҙәби әҫәрҙе лө еңел үҙләштерә. 8-се синыфта Ҡаһым түрә хаҡындағы халыҡ ижады әҫәрҙәрен, В.Зефировтың «Йәнтүрә хикәйәһен» өйрәнгән осорҙа 1812—1814 йылғы Ватан һуғышы хаҡында күп белешмә бирелһә, 8-се синыфта шул уҡ ваҡиғалар менән бәйле әҫәрҙе өйрәнеү күпкә еңелгә тура килә. Системалы эш алып барылһа, йомғаҡлау дәресенә ҡабатлап, хәтергә төшөрөп китеү ҙә етә. Дәрескә әҙерләнеү өсөн А.З.Асфандияровтың «Любезные вы мои...» исемле 1812 йылғы Ватан һуғышының 180 йыллығы айҡанлы сығарылған китабы ҡулайлы.

*А.М.Абдуллина*
*Республика Р.Ғарипов исемендәге*
*башҡорт гимназияһында үткәрелгән асыҡ дәрес.*

## Беренсе дәрес

**Тема: Н.Мусиндың тормошо һәм ижады**

**Маҡсат.** 1. Уҡыусыларҙы биографияһы, ижады менән таныштырыу, уның әҫәрҙәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу. 2. Уҡыусыларҙың телмәрен һәм фекерләү ҡеүәһен үҫтереү. 3. Тыуған тәбиғәтте ҡәҙерләй белеүен, һаҡлау тойғоһон үҫтереүҙе дауам итеү, яуаплылыҡ тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу.** Яҙыусының портреты, экран һәм проектор, Н.Мусиндың ижадына арналған китаптар күргәҙмәһе, баһалау карточкалары, һүҙлектәр, һәр төркөмгә бирелгән эш карточкалары.

**Дәрестең эпиграфы.** «Бына нисек ҡатмарлы бит ул донъялар, әҙәм балаһы! Ниҙәр генә үтмәгән минең баштан, ниндәй хәлгә генә шаһит түгелмен! Быларҙы һөйләп, хәтерегеҙгә төшөрөү — миңә, шуларҙы онотмау — һеҙгә фарыз. Киләсәгең тураһында уйлағанда үткәндәрҙе иҫендә тот, Кеше!» (Ҡарт ҡарағай образы «Мәңгелек урман» әҫәренән)

**Дәрес барышы.**

1. Ойоштороу моменты.

— Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Республика башҡорт лицей-интернаты уҡытыусыһы Аида Миңнуловна булам.

2. Инеш.

«Мин иһә — урмансы. Урман-тауҙар араһында тыуып, ғүмер баҡый урмансылыҡ кәсебе менән көн иткән кешеләр араһында үҫкәнмен. Минең ҡанымда — урман һауаһы, телемдә — уның саф шишмәләренең, балтырғанының, һөтлөгәненең, ҡымыҙлығының таты ...» Ниндәй яҙыусы хаҡында һүҙ бара? (Уҡыусылар яуап бирә).

Уҡыусыларҙан дәрестең маҡсаты әйттерелә.

— Эйе, бөгөн уның тормош юлын һәм ижадын өйрәнәбеҙ. (Уҡыусылар число һәм дәрес темаһын дәфтәрҙәренә яҙып ҡуялар.) Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Н.Мусиндың ижады менән һеҙ алтынсы синыфтан танышһығыҙ. — Һеҙ уның ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? (Уҡыусыларҙан яуаптар алына: «Зәңгәрһыу васыяты», «Военрук Фәтхи», «Йәнебәк түше)».

«Зәңгәрһыу хикәйәттәре»нән өҙөк уҡыла. *Экранда зәңгәр йылға.*

«...Эй, әҙәм балаһы, һөйләгән хикәйәтеңде лә ишеттем, уйҙарыңды ла, борсолоуыңды ла аңлайым. Бына һин әле үткәнгә һәм хәҙергә, бөгөнгө һәм киләсәк тормош хаҡында баш ватып ултырған булаһың. Ни хәтлем генә уйлаһаң да, минең баштан кисκәндәрҙең осо-ҡырыйына сыға алмаςһың инде. Меңәрләгән йыл буйы аҡкан дәүеремдә ниҙәр генә күрмәнем мин. Ләкин ҡаҡшамаς бер хакикәтте әйтәйем һиңә: беҙ, йылғалар, барлыҡ йән эйәләренә лә игелек күрһәтеү өсөн ерҙе тишеп сыҡканбыҙ...»

— Яҙыусының ниндәй әςәренән алынған? Зәңгәрһыу йылғаһы кешеләргә нимә тип өндәшә? Нимә хаҡында әйтелә?

***Һығымта:*** Яҙыусы тәбиғәт аша кешеләргә үҙенең һүҙен, йөрәк ауазын еткерә. Н.Мусин әςәрҙәрендә тәбиғәт һәр ваҡыт телгә килә, тере йән, кеше кеүек килеп баςа. Бында йылға, һыу хәтере булып күҙ алдына баςа, ул барыһын да күрә, ишетә, үҙенә һеңдерә. Дәрестең эпиграфына күҙ һалайыҡ *(Эпиграфты бер уҡыусы тасуири уҡып ишеттерә)*. Уның һәр бер әςәрендә тиерлек символик образ бар. Күҙ алдына йыуан ҡарт ҡарағайҙы килтерегеҙ, уның беҙгә әйтер һүҙе бар *(экранда ҡарт ҡарағай һүрәте.)* Нимәләр хаҡында иςкәртә кеүек, дәрестең аҙағында үҙ фекерегеҙҙе әйтерһегеҙ.

3. Төп өлөшө. Яҙыусының биографияһы һәм ижады.

Уҡыусыларға яҙыусының ижадына ҡағылышлы һорауҙар бирелгән карточкалар дәрес алдынан таратыла, уларға дәрес аҙағында ҡыςҡа ваҡыт эсендә яуаптар яҙыла, һәр яуапҡа бер балл ҡуйыла, йыйылған балл суммаһынан сығып баһа бирелә, дөрөς яуап экранда күрһәтелә.

*Уҡытыусы карточкалар хаҡында әйтеп китә.*

— Н.Мусин Ишембай районынан сыҡкан яҙыусы, тәбиғәттең иң матур ерендә Ҡолғона исемле ауылда 1931 йылдың 17 июлендә тыуған.

— Бала сағы ниндәй шарттарҙа үткән? Һеҙҙең бала сағығыҙға оҡшағанмы?

Яуаптар: башта үҙ ауылында ете йыллыҡ мәктәптә белем ала, унан 1947 йылда Макар урта мәктәбен тамамлағас, тәүге хеҙмәт юлын уҡытыусы булып башлай. Юғары белемгә эйә булыу теләге менән Стәрлетамаҡтағы уҡытыусылар институтына килә. Буласаҡ яҙыусы районда мәғариф бүлегенең мәктәптәр инспекторы булып эшләй.

Буласаҡ яҙыусының әҙәбиәткә килеү юлдары нисек?

Яуаптар: Иң тәүҙә шиғыр яҙа. 1953 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитендә әҙәби хеҙмәткәр була, 1958 йылын «Әҙәби Баш-

ҡортостан» журналына килә һәм ошонан һуң әҙәби ижадынан айырылмай. «Ағиҙел» — минең бөтә ижад ғүмерем, яҙмышым усағы. Ошо журналда тәүге тапҡыр шиғырым баҫылды (1952 йыл май), беренсе хикәйәм (1954, февраль), беренсе повесым «Зөһрә» (1956 йыл, 6, 7), беренсе романым «Өҙәрем юл кешеләре» (1968 й., 9, 10, 11). Аҙаҡ та «Ағиҙел»дә әҫәрҙәрем баҫылған һайын, ат менгәндәй шатланам, әйтерһең, һәр ҡайһыһы — тәүге әҫәр!» — ти автор.

— Һеҙ үҙегеҙ ижад менән шөғөлләнәһегеҙме? Әҫәрҙәрегеҙ матбуғатта донъя күрәме? (Уҡыусыларҙың ижады менән бәйләү). Иғтибарығыҙҙы экранға йүнәлтәйек. *(Экранда китаптарының исемлеге күрһәтелә)* Шулай итеп, ярты быуаттан ашыу ижад дәүерендә ҡырҡтан ашыу китап яҙа. Тиҫтәләгән роман, бик күп повестар, хикәйәләр авторы.

«Мәңгелек урман» дилогияһын ижад итә.

«Мәңгелек урман»да ҙур мәғәнә ята: мәңгелек ер, мәңгелек халыҡ, мәңгелек милләт. «Ваҡытында ваҡ халыҡтарға Мәскәү йыназа уҡый башлаған ине, заманында ул протест булды,» — тип әйтә башҡорт халыҡ шағиры Н.Нәжми. Ун беренсе синыфта был әҫәрҙәр менән ныҡлап танышасаҡһығыҙ. «Зәңгәртауҙа аҡ болан», «Яралы кеше тауышы», «Таң менән сыҡ юлдарға» трилогияһын яҙа.

*Видеонан өҙөк (ике минут) Н.Мусиндың тәбиғәт хаҡында әйткәне.*

*Уҡыусыларҙан һығымта яһатыла.*

*Һығымта:* ҙур прозала тәбиғәтте, тирә-яҡ мөхитте, урмандарҙы һаҡлау мәсьәләһен киң планда күтәреүсе Н.Мусинға тиклем бер кем дә булғаны юҡ ине. Вафа Әхмәҙиев, тәнҡитсе: «Ҙур прозала тәбиғәтте һаҡлау проблемаһын тәү башлап күтәреүсеНоғман Мусин булды», — тип әйтә.

Бөтә әҫәрҙәрендә лә кеше һәм тәбиғәт берлектә бирелә, әгәр ҙә ошо берлек юғалһа, йәшәүҙең мәғәнәһе ҡалмай.

— Уҡыусылар, яҙыусының ижады хаҡында йөкмәткеле бер һорау әҙерләп, дәрес аҙағында уны бирерһегеҙ.

*Трилогия хаҡында ҡыҫҡаса белешмә бирелә.*

— «Таң менән сыҡ юлдарға» романынан «Ҡәбир» исемле өҙөктө өйрәнәбеҙ.

1. Уҡытыусының әҫәргә инеше.

*Уҡыусылар дәрес алдынан дүрт төркөмгә бүленә, икешәр партанан дүрт өҫтәл ҡуйыла һәм карточкалар һалына. Карточкала шулай яҙылған:*

1946 йыл ... Ерекле йылғаһы. Бейекташ бөгөлөндә барған ваҡиғалар. Ҡар ирегәс, ер һыуынан йылға таша. Бейекташ бөгөлө: бер яҡта — ҡая, икенсе яҡта — текә тау битләүе. Затор. Ауыр хәл, проблема. Нисек заторҙы ҡуҙғатырға?

2. Беренсе бүлектең йөкмәткеһе буйынса эшләү. Һәр төркөмгә проблемалы һорауҙар бирелә, улар шул проблема өҫтөндә эшләйҙәр.

I. 1-се бүлектә Кәбирҙе һеҙ ниндәй кеше итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Ни өсөн ул башҡаларга ҡарағанда тормоштоң ҡәҙерен нығыраҡ белә? Ҡыуғын мәлендә килеп тыуған ауырлыҡтарҙа, ҡатмарлы хәлдәрҙә үҙен нисек тота? Кәңәше ...? Эше...?

II. Кәбирҙе һеҙ ниндәй кеше итеп күҙ алдына килтерәһегеҙ? Уның ихтыяр көсө, уй-кисерештәрен асып бирегеҙ.

III. Леспромхоз директоры Аҙнаев ниндәй кеше? Ҡыуғынсыларға мөнәсәбәтен, ҡылыҡтарын асып һалырға.

IV. Район вәкиленең телмәренә ниндәй һүҙҙәр хас? Уның халыҡ алдында үҙен тотошо. Халыҡтың өнһөҙлөгөн һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

Парталарҙа һүҙлек эше.

*Ҡыуғын 1. Погоня (ҡыуғын ебәрец) выслать погоню*

*2. Молевой сплав/леса (ҡыуғын ҡыуыу)*

*3. Отгонный (ҡыуғын малсылыҡ)*

*Һере — 1. Выносливый, крепкий (һере кеше)*

2. перен. (Упрямый һере холоҡло)

Затор — тығын

*Баго(у)р — оҙон һаплы осло ырғаҡ.*

Һәр төркөмдән уҡыусылар сығыш яһай, анализлай һәм бер һығымтаға килә.

*Һығымта:* Шулай итеп, Кәбир ауыр һуғыш юлы үткән, немец фашист лагерҙарында ғазап сиккән, бер нисә мәртәбә үлеп терелгән, үҙендәге рухи ныҡлыҡ, илен, ғаиләһен ҡайнар һөйөү, еңеүгә ышаныс менән ҡарау һөҙөмтәһендә бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп иленә ҡайтҡан, бөтә көсөн биреп эшләй, халыҡ уны хөрмәт итә. Кәбир заторҙа кәңәш кенә итеп ҡалмай, ә үҙе эште атҡарып сыға, йәштәрҙе өйрәтә, Таһирҙың булдыҡлылығын һынай.

Аҙнаев менән район вәкиле үҙҙәрен бик тупаҫ, дорфа тоталар. Аҙнаев телмәрендә «бузатер», «паникерлыҡ настроениеһын таратырға уйлайһыңмы?», «тыл крысаһы» кеүек һүҙҙәрҙе ҡуллана, ул Солтановты халыҡ алдында оятҡа ҡалдыра, нахаҡ яла яға, ҡыуғын-

сыларҙы ҡурҡыта. Район вәкиле лә «бунт күтәрергә самалайһығыҙмы», «марш эшкә!» кеүек ҡаты бойороҡ ҡына бирә. Уны халыҡтың көнө буйы арымай — талмай эшләүе ҡыҙыҡһындырмай, тик башында планды ғына үтәү.

— Уҡыусылар, беҙҙең Республика лицей-интернаты уҡыусылары ла бөгөн дәрестә ошо әҫәрҙе өйрәнә, уларҙың һеҙгә бер һорауы бар.

*Экранда 8-се синыф уҡыусылары. Бер уҡыусы:* Ҡәҙерле уҡыусылар! Республика башҡорт лицейынан һеҙгә ҡайнар сәләмдәр! Бына беҙ компьютерҙан Ноғман Мусиндың «Ҡәбир» әҫәрен уҡыйбыҙ һәм беҙҙең һеҙгә бер һорауыбыҙ бар.

*Икенсе уҡыусы:* Был әҫәрҙә, белеүегеҙсә, проблемалы хәл тыуа. Аҙнаев райондың вәкиле менән килеп, хәлдән тайған кешеләрҙе төнгә ҡаршы заторҙы асырға куша. Иғтибар, ҺОРАУ! *Һеҙҙеңсә, был хәлдә нимә мөһимерәк кешеләрҙең ауыр хәлеме, әллә графикты үтәүме!*

Уҡыусылар үҙҙәренең фекерҙәрен әйтә.

— Дәрестең эпиграф юлдары менән беренсе бүлек араһында ниндәй бәйләнеш бар?

— *Һығымта:* Ҡәбирҙең, халыҡтың ауыр яҙмышы, донъяның ҡатмарлығына ишара бар, ҡарағай бөтә нәмәгә шаһит, бында ер хәтере ята.

— Был бүлектән сығып, һеҙ үҙегеҙгә ниндәй фәһем, ғибрәт алдығыҙ?

— Ҡәбирҙең артабанғы тормош юлын, хәл-ваҡиғаларҙың үҫешен тулыһынса дәреслектән уҡып килерһегеҙ.

*Уҡытыусы әҫәрҙең беренсе бүлеге буйынса һығымта яһай.*

Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы йылдарҙа ҡайһы бер етәкселерҙең административ-бюрократтарса етәкселек итеү алымының кеше яҙмыштарында фажиғә тыуҙырыуы, тупаҫ мөнәсәбәттәре, хаталары, кеше ғүмере менән иҫәпләшмәү, тормоштоң ауырлығы, законһыҙлыҡтың хөкөм һөрөүе күрһәтелә.

**Йомғаҡлау өлөшө.**

1. Өй эше: Ҡәбир үҙен-үҙе үлтереп дөрөҫ эшләнеме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Үҙеңде иҫбат итер өсөн башҡа сара юҡ инеме ни? Дәфтәрегеҙҙә ошо һорауға үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе яҙып килегеҙ. Уҡыусылар белемдәрен баһалау карточкаларын тултыра һәм үҙ баһаһын ҡуя. *Ике минут ваҡыт бирелә, аҙаҡ яуаптары экранда күрһәтелә.*

*2.* Уҡыусылар менән яҙыусы Н.Мусиндың тура бәйләнешенән һуң дәресте йомғаҡлау.

— Уҡыусылар, бөгөн беҙҙең Н.Мусин менән тура бәйләнешкә инеү мөмкинселеге бар. Һеҙҙең уның ижады буйынса ҡыҙыҡһындырған бер һорау бирергә хоҡуғығыҙ бар. *Уҡыусылар дәрес башында яҙыусының ижады буйынса бер һорау әҙерләргә иҫкәртелә.*

*Бөтә синыфҡа асыҡ ишетелерлек итеп яҙыусы менән телефондан һөйләшеү. Өс минут ваҡыт үтә. Һорауҙы Айгөл бирергә өлгөрә:* Ни өсөн һеҙҙең ижадығыҙ һәр саҡ урман менән бәйле?

Н.Мусин ҡысҡаса ғына ижады хаҡында әйтеп үтә һәм уҡыусыларға изге теләктәрен еткерә, Айгөл уға уңыштар, һаулыҡ, оҙон ғүмер теләп хушлаша.

4. Дәрестә актив ҡатнашҡан уҡыусыларҙы хуплау һәм баһалау.

Уларға уҡытыусы үҙенең теләктәрен һәм рәхмәтен әйтә.

## Икенсе дәрес

**Тема. “Ҡанлы илле биш“ романы.** *Дәрес-фекерләү*

**Маҡсат.** 1. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, «Туйгилдене яндырыу» бүлеге аша ҡанлы фажиғәле 1755 йылғы ихтилалдың сәбәптәрен, Батыршаның ролен асыҡлау.

2. Уҡыусыларҙың күңелен ҡуҙғытыу, тарихи хәтерен уятыу, үҙҙәренсә фекер йөрөтөү һәләтен үҫтереү, әүҙемлеген үҫтереү.

3.»Иман» төшөнсәһен асыҡлау, берҙәмлек, тәүәкәллек, яуаплылыҡ, ил тойғоһон тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу.**

Ғ.Хөсәйеновтың ижады буйынса күргәҙмә. «Ҡанлы илле биш», «Ир азаматтары», «Батырҙар ҡиссаһы» китаптары, С.Юлаев хаҡында видеотаҫманан өҙөк, дәреслек, хрестоматия.

**Дәрестең эпиграфы.**

*Ҡаурый ҡәләм вә уҡ ҡылыс илә*
*Яҙылмыштыр башҡорт тәүарихы.*
*(Боронъо яҙманан)*

**Һүҙлек эше**

тәүарих — көнсығыш халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла ҡәҙимге тарих яҙмалары;

иләү — 1) бер йәмғиәт рәүешендә төркөм, ырыу; 2) волость, бәләкәй административ-территориаль берәмек;

ғарызнамә — Елизавета Петровнаға хат;

тәхризнамә — яуға өндәп яҙған хат.

***Дәрес барышы.***

I. Ойоштороу мәле. Дәрестең маҡсатын әйтеү.

*Уҡытыусы:* Һеҙҙең менән бөгөн тарихи хәтеребеҙҙе уятырға, элекке батырҙарыбыҙ, аҡыл эйәләребеҙ, ил азаматтарыбыҙ менән ғорурланырыҡ, рухыбыҙҙы байытырлыҡ күренекле роман «Ҡанлы илле биш»тең йөкмәткеһе өҫтөндә эшләү өсөн һөйләшеүебеҙҙе, һүҙебеҙҙе «Бисмиллаһи»нан башлаһаҡ хәйерлерәк булыр (магнитофон таҫмаһынан «Фатиха» доғаһы ишеттерелә).

— Дәресебеҙҙе ҡөрьән һүҙҙәре менән башлауҙың ғилләһе нимәлә?

*Яуаптар:* а) Ата-бабаларыбыҙ бер ҙур эшкә тотонорҙан алда ошо ҡөҙрәтле һүҙҙе әйткән, шуға эш шөғөлдәре ырамлы китер, бөгөн дә иманлылар әйтер.

б) Изге Ҡөрьән Кәримебеҙ, боронғо китаптың иң әғләләре, дастандарыбыҙ шулай башлана.

в) Хикмәте шунда: романдың төп ҡаһарманы Батырша-мулла һәм ахун дәрәжәһендәге кеше, дини вазифалы кеше. Уның фекерҙәре, донъяға ҡарашы ислам дине менән һуғарылған.

*г) Видеотаҫманан өҙөк* (2 минут)

XVI—XVIII быуатта булып үткән яуҙар, ихтилалдар; Үҫәргән, Юрматы, Шайтан-Көҙәй ырыуҙарының яуға күтәрелергә саҡырған ораны.

*Уҡытыусы:* Һеҙ әле күргән өҙөк менән дәрес эпиграфы араһында ниндәй бәйләнеш ята?

*Яуап:* Роман «Тәүарих» тигән бүлексә менән башланып китә. Ул боронғо башҡорт тарихы хаҡында яҙмалар. Автор башҡорт тарихының үткән быуаттарына, 1755 йылғы башҡорт ихтилалына тиклемге яу-күтәрелештәргә байҡау яһай, Батырша башлап ебәргән яуға илтеп ялғай.

Әҫәр нисә бүлектән тора? (Яуап алына)

*Уҡытыусы:* Күләме яғынан ҙур тарихи әҫәрҙән хрестоматияла бәләкәй генә өҙөк «Туйгилдене яндырыу» ваҡиғаһы ғына бирелгән. Бының ғилләһе нимәлә икән? Уның аша әҫәрҙең төп асылын тойорға мөмкинме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Яуап бирергә ашыҡма-

йыҡ, һөйләшеүебеҙҙең һуңында бер һығымтаға килербеҙ (таҡтала һорау алдан яҙылып ҡуйыла һәм асыҡ ҡала).

II. Әҫәр өҫтөндә эш.

1) Ҡем ул Батырша? Уның вазифаһы?

Яуап: Ул — Ғәйнә илендә мулла һәм мөҙәрис. Халыҡты ислам дине, шәриғәт ҡанундары рухында булырға нәсихәттәр бирә, алланың ерҙәге наибы, батшаларға тыңлаусан, итәғәтле булырға өндәй.

*Уҡытыусы:* Мулланың да муллаһы шундай хәлгә етерлек тормошто күҙ алдына килтерегеҙ. Ул бит Салауат Юлаев түгел. «Туйгилдене яндырыу» ваҡиғаһын ишеткәндән һуң шәкерт Батыршаның эске кисерештәрен автор ниндәй һүҙҙәр менән бирә? (хрестоматия менән эшләү)

2) Ни өсөн Туйгилдене яндыралар, сәбәбе?

3) «Иман» төшөнсәһен нисек аңлайһығыҙ, (уҡыусыларҙың яуаптарьш тыңлағандан һуң 1 уҡыусы һүҙлектән уҡып ишеттерә һәм яҙып ҡуйыла)

Иман —

1) Ислам диненә булған ышаныс, ҡабул итеү (иман шарты).

2) Ныҡлы ҙур ышаныс (иманым камил).

(таблицала күрһәтеп барабыҙ)

4) Тағы ниндәй тарихи ваҡиғалар сәбәпсе була, барыһын да Батырша менән бәйләп барабыҙ.

Туйгилдене яндырыу хәбәре Указ 1738 йыл, 20 апрель

Сәбәбе: диненә, иманына кире ҡайтканы өсөн.

1742 йыл — мәсеттәрҙе емертеү, кешенең иң изге тойғо, хистәрендә уйнау, рәнйетеү, суҡындырыу - рухһыҙландырыу

Яһаҡ бөтәүе, тоҙға налог (1754 й., 16.03)

Тоҙ — хоҙай бүләге, тыуған ерҙең бер берәмеге.

Туйгилде — милләттең бер вәкиле.

Ваҡ халыҡтарҙы, шул иҫәптән бигерәк тә башҡорт халкын ҡырыу сәйәсәте.

Мәсет — сиркәү, суҡындырыу, тоҙ, яһаҡ, налог, иҙеү, кыҫыу, кырыу — терәк һүҙҙәр.

1) Батырша — шәкерт шаңҡый, икһеҙ — сикһеҙ уйҙарға бата, күңелендә дау кисерә.

Батырша — мулла һәм мөҙәрис

а) Батыршаға ҡош телендәй генә хат килеп төшөүе.

б) Халыҡ араһында йөрөүе...

в) 1755 йылдың 3 июле - ихтилал

г) Бөрйән иләүендә 1755 йыл 15 май ихтилалдың башланыуы. Тамъян, Таңғауыр, Ҡыпсаҡ ырыуҙары.

Батырҙан бахырға әйләненүе - урманға каса? Ни өсөн? <u>Тәүәкәллек етмәй.</u>

1756 йылдың 8 августа тотола, (иҫке Мәскәү юлы)

өфө-Ырымбур-Һамар-Арзамас-Муром-Владимир-Мәскәү-Петербург-Шлисельбург ҡәлғәһе.

5) Батырша Ғәйнә иләүен яуға күтәрә, етәксеһе. Шулаймы? тип фактты боҙоп күрһәтеү. Уҡыусының һиҙгерлеген тикшереү.

6) Шулай итеп, Баһадиршаһ мулла кеүек икеләнеп ҡалыу беҙҙең тормошта нимәгә илтә? Үҙегеҙгә ниндәй фәһем алдығыҙ?

Яуаптар. Мулланың ҡөҙрәте, күсө халыҡтарҙы күтәрә, батшаны, чиновниктарҙы аптырата, ҡурҡыта, шуға 50 мең кешенән торған армияһын ташлай. Әммә ваҡыты еткәс, уның тәүәкәллеге етмәй. Тәүәкәлләгәнһең икән — үҙең бар беренсе. Үҙең үҙгәрт, тәүәкәллегеңде юғалтма, дөрөҫөңдө хупларҙар, яңылышыңды төҙәтерҙәр.

7) Туйгилде, уның ғаиләһенең фажиғәһенән күңелегеҙҙә нимә тыуҙы, һеҙҙе ниндәй уйға һалды? Уның балаларына әйткән аманаты.

— Туйгилде урынында иртәгеһе көн һин үҙең булыуың бар, ил күтәргәндә һин дә күтәр, айырылма.

— Иң оло гонаһ — иманыңды һатыу, ике дин араһында йәнеңдең аҙашыуы.

— Ҡеше ниндәйҙер бер халыҡҡа, бер милләткә ҡарай, шуны ҡанына һеңдерә, олоғая килә ул рух көсәйә, шуға күрә ҡатнаш никахта тыуған баланың йәне, рухы хаҡында алдан уйланырға кәрәк.

III. Йомғаҡлау өлөшө.

— Дәрестең башында асыҡ ҡалған һорауға хәҙер йомғаҡлау яһарға кәрәк, һеҙҙең фекерегеҙ нисек, әҫәрҙең төп асылы нимәлә?

Яуап: Рәсәй империяһының колониаль сәйәсәтен, батшаларҙың, Сенат чиновниктарын, графтарҙың, Ырымбур генерал-губернаторы Неплюевтың, уның ҡанһыҙ генерал-офицерҙарының хакимлыҡ итеүҙәрен, батша ҡулы аҫтында халыҡтарҙың, башҡорттарҙың иҙелеүе, хоҡуҡһыҙлыҡтарын, ыҙа-язаларын, ере, ирке, өсөн яу асыуҙарын тарихта, тормошта булғанса күрергә, күҙәтергә мөмкин булды.

Уҡытыусы һүҙе: Таҡтала эленгән контур картала иҫке Мәскәү тракты күрһәтелгән. Өфө-Ырымбур-Һамар-Арзамас-Муром-Мәскәү. 2000 саҡрым араның һәр сажины тиерлек башҡорт кәүҙәләре менән түшәлгән. (Ҡонвой менән алып кителгән кешеләрҙең исемлеге күрһәтелә) Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян, Ҡатай, Юрматы, башҡорттары 1775 йылдың көҙөндә шулай ҡырыла. Рәсәй тарихы — үҙ кеше мәйеттәре өҫтөндә, шул иҫәптән меңләгән башҡорт баштары өҫтөндә ҡоролған бер дәүләт. (Үлем язаһы юҡ, үлем ҡазаһы ғына бар Рәсәйҙә). Халҡыбыҙҙы рухһыҙландырыу, рухи ҡиммәтәренән мәхрүм итеү быуаттар төпкөлөнән килә, әммә һәр

быуаттың, дәүерҙең арҙаҡлы шәхестәре халҡыма рухи көс биргән, үткәнебеҙ, рухи ҡиммәттәребеҙ менән көслөбөҙ.

Дәрес башында видеояҙманан «Ырыуың кем?» өҙөгө менән башланған ине, ә хәҙер ниндәй ырыуҙың тулы ҡанлы вәкиле икәнегеҙҙе әйтеп сығығыҙ. Иптәштәрегеҙ ишетһен, ата-бабаларығыҙҙың ҡанлы тарихы менән таныштығыҙ, күңелегеҙҙән кисерҙегеҙ. Үткәндәр ғибрәтле лә, фәһемле лә.

IV. Өй эше.

1) «Тарихи аңыбыҙҙы, хәтеребеҙҙе яңыртып, рухыбыҙҙы байытҡан әҫәргә үҙеңсә баһа бир».

2) «Яҙыусы Ғ. Хөсәйеновҡа әйтер һүҙем...»

3) «Тарих хәтере ғибрәтле һәм хикмәтле лә ул.» Уҡыусылар ошо темалар буйынса яҙма эштәр әҙерләй.

V) Уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау.

## Өсөнсө дәрес

**Тема М. Кәримдең «Ҡара һыуҙар» поэмаһы.**

**Маҡсат.** 1. Поэманың идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау.

2. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.

3. Тормошта дөрөҫ йәшәргә ынтылыш тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу.** М.Кәримдең портреты, ижады буйынса күргәҙмә-плакат, хрестоматия, Ҡим Әхмәтйәновтың «Әҙәбиәт теорияһы» китабы

Дәрестең эпиграфы.

«Ҡара һыуҙар» — ысын кешегә дан йырлаусы әҫәр.

*(Ҡ.Әхмәтйәнов)*

***Дәрес барышы:***

I. Ойоштороу мәле. Инеш өлөшө.

*Уҡытыусы.* Уҡыусылар, кеше өлкәнәйгән һайын йәшәү мәғәнәһе тураһында уйлана. Кеше ни өсөн был донъяға килә? Уның маҡсаттары ниндәй? *(Яуаптар.)*

*Уҡытыусы.* Башҡорт халыҡ шағиры М.Кәримдең тормошо, ижады өлгөһөндә кешенең йәшәү мәғәнәһен, асылын аңлайһың, төшөнәһең. Шағир өсөн иң изге төшөнсәләр: халыҡ, шағир, хаклыҡ, тыуған ер.

— Бөгөн һүҙебеҙ ҙә ана шул хаҡта. Борон-борондан тыуған ер төшөнсәһе изге икәне ҡаныбыҙҙа уҡ бирелгән. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуына алтмыш дүртенсе йыл бара, әммә уның шаңдауы һаман кешеләр күңеленә тынғы бирмәй. Ил, халыҡ яҙмышы, донъя яҙмышын хәл иткән һуғыштың барлыҡ фажиғәләре, барлык дөрөҫлөгө үткән һәм бөгөнгө быуын кешеләренә, киләсәк өсөн дө һабаҡ ул.

*Уҡытыусы.* Шағирҙың һәр бер әҫәрендә тиерлек ниндәй һүҙ телгә алына? Ни өсөн? Һуғыш тураһында ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?

*Яуаптар: Һ*әр әҫәрҙә тиерлек «һуғыш» һүҙе телгә алынмай үтелмәй. Сөнки һуғыш миллиондарса кешеләрҙең ғүмерен өҙөп, миллиондарса кешеләрҙең йөрәгенә төҙәлмәҫлек яра һалған. Утлы юлдарҙы үткән шағир онота алмай ул алыҫ йылдарҙы.

*Яуаптар* «Айгөл иле», «Туй дауам итә» драмалары, «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған», «Оҙон-оҙак бала сак», «Ярлыҡау» повестары.

*Уҡытыусы:* (Дәрестең маҡсаты әйтелә). М.Кәрим «Ҡара һыуҙар» поэмаһында яңынан һуғыш темаһына өйләнеп ҡайта.

II. Төп өлөшө.

«Ҡара һыуҙар» поэмаһы, 1960 й. (трагик-драматик яҡтарын асыу).

— Әҫәрҙе уҡығандан һуң һеҙҙә ниндәй тойғолар уянды? Нәфрәт, һоҡланыу кемдә? Ниндәй фекерҙәр тыуҙы?

*Яуаптар:* 1) Йөкмәткеһе тетрәндергес. Лирик герой һыҙлана, ләкин меҫкенләнмәй. Бары дошманға нәфрәт хистәре яңыра. (Таҡтала: эш барышында схемала темалар, сюжет һыҙығы, образдар күрһәтелә).

2) Хәтәр яу мәлендә теҙ сүгеп, аҙаҡ ер ҡорто урынына иҙелеп үлгән ҡурҡаҡ йәндең яҙмышы беҙҙә сирҡаныу, ерәнеү тойғолары уята.

3) Ғорур тол ҡатын сыҙамлығы хаҡында фажиғәле хикәйәт. Уның эске матурлығына һоҡланыу хисе уяна.

*Уҡытыусы:* Ошо ваҡиғала ошо тормоштоң ысынбарлығы асыла. Ошо ысынбарлыҡ тик батырлыҡтан, ҡыйыулыҡтан ғына торҙомо икән? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

*Яуаптар:* Ҡурҡаҡтар, хыянатсылар ҙа булған. Илен түгел, үҙ йәнен генә ҡәҙерләүселәр ҙә осраған. Тик алға барыу ғына түгел,

сигенеү ҙә билдәле... Донъяла төрлөһө осрай. Тик шуныһы: батырлыҡ менән тоғролоҡа матурлыҡ һәр саҡ йәнәш була. Тормош ысынбарлығы шулай.

*Уҡытыусы:* Ошо проблемаларҙың хәл ителешен яу эпизодына иғтибар итәйек, «Ҡара һыуҙар» поэмаһы буйынса күҙәтәйек. (Бер уҡыусы уҡый башлай) Шомлолоҡ, серлелек шағир тарафынан ниндәй һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр аша бирелә.

*Яуаптар:* «Әйтерһең, күк ҡолаған...», «Ҡайҙа ҡояш, ай, ҡайҙа йондоҙҙар?», «Шыбыр-шыбыр ямғыр яуа...», «Ҡараңғы көҙгө төн».

*Уҡытыусы:* Төн — һалдат-ветеран. Сәйер генә рәүештә бер ҡатын килеп инә. Уның ҡиәфәтен дә шағир ҡараңғы төҫтәрҙә һүрәтләй. Табығыҙ әле шул һүрәтләүҙәрҙе. Күҙ алдына нимәләрҙе килтерергә мөмкин, ниндәй хис-тойғоно уята?

*Яуаптар:* «Ҡара шәле суҡтарынан сөбөрләп һыу ағып тора», «борсоулы ак йөҙ», «һағышлы матурлык» - күҙ йәштәрен белдерә кеүек. Эйе, был ямғырлы төн күренеше алдағы хәл — ваҡиғаларға төҫ бирә. Көҙгө ямғыр, һары һыу, ҡара шәл — ҡатындың ҡара ҡайғыһы, өмөт һәм төңөлөү. Һалдат өсөн хыянатсыға асыу һәм нәфрәт белдергәндәй.

*Уҡытыусы:* Әҫәрҙә тағы ниндәй образ күҙ алдына баҫа?

*Яуаптар:* Тыуған ер образы — ул туйындыра, кейендерә, иң хәтәр саҡтарҙа үҙенә һыйындыра. Кеше үлгәс тә ҡуйынына ала. Утта янһа ла, көйһә лә, тыуған ер тере ҡалған.

*Уҡытыусы:* Һалдаттың изге бурысы нимәнән тора? Ике һалдатҡа Ер — әсәнең мөнәсәбәтен схемала күрһәтәйек.

*Уҡытыусы:* Яҡуптың әсир төшөүҙе артыҡ күреүенең сәбәбе?

*Яуаптар:* Ул һөйгәнемә кәрәкмен, ти, әммә был Яҡупты аҡларға хоҡуҡ бирмәй. Тыуған ергә, халыҡҡа ҡурҡыныс янағанда ошолай фекер йөрөтөү ғәфү ителмәй. Ҡурҡаҡлығы өҫтөнә икенсеһе — хыянат тигән мөһөр өҫтәлә. Шуға яҙмышы һытылған ер ҡортоноҡо. Тағы герой (шағир-һалдат) һәм ҡатын образдарында бер сыҙамлыҡтың ике сифаты сағылғандай *(Лирик-герой монологын уҡыу)*.

Яу яланы, ағастар үҫә, арыш бешә, һуғыш. Тәбиғәттең үҙ эше. Бында ниндәй эске мәғәнә ята?

*Яуаптар:* Тәбиғәт ошо йәшәү бөйөклөгөн, һуғыштың ҡырағай мәғәнәһеҙлеген раҫлай, фашизмға үс, нәфрәт итеп тә аңларға була.

*Һығымта яһау.* Әҫәрҙең төп фекере?

*Яуаптар:* Әҫәрҙә батырлыҡ менән ҡурҡаҡлыҡ, һуғыш һәм тыныслыҡ темаһы киҫкен ҡапма-ҡаршылығында тасуир ителә.

*Уҡыутыусы:* Ҡапма-ҡаршылыҡ алымдары, үҙенсәлекле стиль саралары ошо үлем йәшәү көсөнә ҡаршы ҡуйыла. Әҫәрҙә нисек бирелә?

*Яуаптар:* Үлем ҡиәфәтен белдергән ҡара урман, Мәскәй әбей, йәшәүҙе — Сәмреғош, ҡара ҡайғыны — ҡара шәл кеүек кескәй образдар, поэтик алымдар әҫәрҙең мәғәнә айышына ишара булыуҙа әһәмиәте ҙур. Һәр образ, деталгә тәрән мәғәнә һалынған.

III. Йомғаҡлау. Тормош, кеше яҙмышы. Юҡҡа ғына әҫәрҙе Ҡ.Әхмәтйәнов «ысын кешегә дан йырлаусы әҫәр» тимәгән.

Хәҙер йәшәүҙең мәғәнәһе тураһында нисек уйлайһығыҙ? (Уҡыусыларҙың фекерҙәре тыңланыла, һығымта яһала).

IV. Әҫәрҙең теле, шағирҙың поэзияһында халыҡсанлыҡ.

Халыҡсанлығы: тасуирлауҙар, юмор, мәрәкә, лексика, шиғри форма: рифма байлығы, интонация, төрлөлөгө, шиғри фонетика (ассонанс, аллитерация).

Ҡ.Әхмәтйәновтың «Әҙәбиәт теорияһы» китабынан ҡарарға, үҙ аллы эш бирелә.

V. Өй эше.

1. Тәбиғәт менән кеше араһындағы бәйләнеште аңлатҡан тапҡыр һүҙҙәрҙе, нығынған һүҙбәйләнештәрҙе яҙып алығыҙ. Мәҫәлән, «кеше энә түгел юғалырға, эҙе ҡала тамсы тамһа ла» һ.б.

VI. Баһалау.

## *ХЕҘМӘТТЕҢ АВТОРЫ ХАҠЫНДА ФЕКЕРҘӘР*

***М.Ф.Дәүләтшина***

### Өҫтәлемдә өс китап

Рафаэль Ғәйнетдин улы Аҙнағолов лицей асылғандан бирле беҙҙә эшләй. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире булып та эшләне. Уҡытыусыларға өр-яңы программалар ҙа төҙөнө. Бына инде нисәмә йыл туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәре уның программалары, уның технологияһы буйынса үткәрелә. Заманында уҡыусыларға факультатив дәрестәр ҙә бирҙе. Лицейҙың әҙәби-ижад түңәрәген дә даими үткәреп килде. Берәй уҡытыусы ауырып китһә, уның дәрестәрен дә ул үткәрҙе. Рафаэль ағай бер эштән дә наҙланып баш тартып торманы. Беҙҙең дәрестәргә лә йөрөнө, методик ярҙам да күрһәтте, дәрестәребеҙгә төплө анализ яһай: ыңғай яҡтарын тасурилай, дәрестең заманға тап килеү-килмәүенә ҡарата төплө фәнни кәңәштәрен әйтә. Уҡыусылар ҙа, беҙ ҙә, лицей коллективы ла уны яратабыҙ. Үҙенең ғилми эштәрен мәктәп тормошо менән бәйләп алып бара. Ундай ғалимдар республикала бик һирәктер ул. Хәҙерге көндә ул педагогия фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт һәм дөйөм тел ғилеме кафедраһы профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре.

Өҫтәлемдә әле уның һуңғы ваҡытта яҙған өс китабы ята. Уларҙы мин һәр саҡ ҡул аҫтында ғына тотам. Ысынлап та, улар һәр уҡытыусының өҫтәл китабы булырҙай хеҙмәттәр. Методика фәненең төрлө тармаҡтары буйынса яҙылған был китаптар башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн бик тә кәрәкле әсбаптар. Шуларҙың тәүгеһе «Научные основы методики башкирского языка» (Уфа, 2004) тип атала. Ҡитап урыҫ телендә донъя күргән. Бының да үҙ сәбәптәре бар. Рафаэль ағайҙың уҡытыу технологияһы лингвокультурология менән тығыҙ бәйле. Авторҙың үҙе әйтеүенсә, беҙҙең методик ҡаҙаныштарҙы башҡа телдәрҙе уҡытыусылар ҙа файҙалана алырға тейеш. Хаҡ һүҙҙәр, әлбиттә. Сит ил, сит мөхит уҡытыу технологиялары беҙҙең методик ҡаҙаныштарыбыҙҙы байыта алмай. Сөнки улар балаларҙың милли үҙ аңын, милли рухын, үҙ аллы ижади фекрләү һәләтен үҫтереүҙән йыраҡ тора.

Ҡитаптың асылы, мәғәнәһе шунда: туған телде культурологик аспектта өйрәнеү баланы үҙ халҡының милли ғөрөф-ғәҙәтәренә,

йолаларына, йәшәү рәүеше мәҙәниәтенә яҡынайта. Монографияла урын алған методик проблемалар, мәҫәлән, башҡорт теленең фонетикаһына, лексикаһына өйрәтеү, грамматиканы синтаксик нигеҙҙә өйрәтеү, диалект шарттарында тыуған телгә өйрәтеү, бөгөнгө дәресте планлаштырыу, уҡыусыларҙан дәрестә үҙләштергән белемдең моделен төҙөтөү, телмәр үҫтереү, һәр тема, блок буйынса таблица үрнәктәре уҡытыусыға бөгөн үк кәрәк. Был хеҙмәт минең эшемде еңеләйтте, һәр дәресемә аныҡ йүнәлеш бирә. Сер түгел: мәктәптә һәр уҡытыусы Д.Б.Эльконин, В.В.Давыдов, Л.В.Занков кеүек психологтарҙың үҫтереүле уҡытыу конепцияларын ҡулланырға тырыша. Был психологик теориялар камилмы һуң? Шул хаҡта уйлап ҡарағаныбыҙ бармы? Р.Ғ.Аҙнағоловтың «Научные основы методики башкирского языка» тигән монографияһында ана шул хаҡта ла мәғлүмәттәр бар. Автор таблицалар рәүешендә үҫтереүле уҡытыуҙың шәжәрәһен биргән. Ҡитапта авторҙың үҙ принциптары ла (үҫтереүле анализ, үҫтереүле синтез, бала һөйләп асыла һ.б.) — методикабыҙҙа ҙур ҡаҙаныш.

Өҫтәлемдәге китаптың икенсеһе (Рафаэль Аҙнағолов. Ижад дәрестәре. Өфө, 2004) лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн иң кәрәкле әсбаптарҙың береһелер. Һәр мәктәптә, лицйейҙа, гимназияла әҙәби ижад менән мауығыусы балалар бар. Ҡулынан, һәләтенән килгән уҡытыусы улар өсөн әҙәбиәт түңәрәге ойошторған була. Унда теге йәки был яҙыусының ижады тураһында һөйләй, уҡыусыларҙың шиғырҙары, нәҫерҙәре, мәҡәләләре тикшерелгән була, абстракт кәңәштәр ҙә әйтелә. Абстаркт тинем, сөнки үҙең аңлап етмәгән кәңәш була инде ул. Былдай түңәрәктән уҡыусыға ла файҙа юҡ, үҙең дә ҡәнәғәт түгелһең. Шулай итеп ваҡытты әрәм итәбеҙ, баланың ижадҡа булған һәләтен үҫтерә алмайбыҙ.

Бала күңелендә бөрөләнеп килгән әҙәби ижад һәләтен үҫтереү өсөн уҡытыусыға шағир йә яҙыусы булыу мотлаҡ түгел. Баланы шиғыр яҙыу техникаһына өйрәтеү мөһим. Шиғыр төҙөлөшөн бөгөнгө мәктәп дәреслеге буйынса уҡытыусы ла, уҡыусы ла белмәй. Дөйөм һүҙҙәр генә һөйләнә. Тимәк, мәктәп дәреслеге менән генә баланы шиғыр яҙыу техникаһына өйрәтеп булмай. Ә нимә ул шиғыр техникаһы? «Шиғыр ритмға, ритмик быуынға, рифмаға ҡоролған йыйнаҡ күркәм телмәр. Төрлө үлсәмгә көйләнгән шиғырҙың үҙ ритмы була. Ритмик быуындағы ижектәр һаны ла дөйөм ритмды боҙорға тейеш түгел», — ти Рафаэль Аҙнағолов. Ҡитапта ритм, ритмик быуын, рифма, шиғыр үлсәмдәре уҡыусыларҙың шиғырҙары ми-

çалында аңлатыла. Шиғыр юлындағы ритмик быуындарҙың берәүһе төҙөк булмаһа ла шиғырҙың моңо юғала, ритмы боҙола. Р.F.Аҙнағоловтың монографияһы уҡыусының камил булмаған шиғырын нисек төҙәтеп ебәреү юлын да миçалдарға таянып күрһәтә. Рафаэль ағайҙың «Ижад дәрестәре» тигән уҡыу әсбабы — уҡыусыларға ла, уҡытыусыларға ла бик кәрәкле ҡулланма.

Беҙҙең лицейҙың 11-се синыфында күренекле яҙыусы Таңсулпан Ғарипованың ижады өйрәнелә. Тимәк, беҙҙең үҙебеҙҙең программабыҙ бар. Уны ла Рафаэль ағай төҙөп бирҙе. Программа Мәғариф министрлығы тарафынан раçланған. Әммә уҡытыусы ҡулында Таңсулпан Ғарипова тураһында китап юҡ ине. Өçтәлемдәге өсөнсө китабым (Р.F.Аҙнағолов. Өйөрмәле йылдар ауазы. Таңсулпан Ғарипова ижады. Өфө, 2005) ана шул мохтажлыҡты юҡҡа сығарҙы. Был китап — беҙҙең ҡыуанысыбыҙ. Лицейебыҙ китапханаһында Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» романы ни бары 1 генә дана. Шуға күрә әҙибәнең күп яҡлы (прозаик, драматург) ижады менән уҡыусыларҙы таныштырыу ауырға тура килә ине. Хәҙер инде, Аллаға шөкөр, Рафаэль ағайҙың был китабы күктән төшкән бәхет кеүек булды. Әҙибәнең ижады тураһында барлыҡ һорауҙарға ла тулы мәғлүмәтте ошо китаптан алабыҙ. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: күренекле яҙыусы Таңсулпан Ғарипова тураһында ҡайһы бер баçмаларҙа тәнҡит мәҡәләләре сығып тора. Әммә уларҙың теле һәм стиле әҙәби теоретик төшөнсәләр менән сыбарланған була. Уҡытыусыға ла, уҡыусыға ла бигүк аңлашылып етмәй. Ә инде Р.Аҙнағоловтың «Өйөрмәле йылдар ауазы» тигән китабы методикаға яраҡлаштырып яҙылған. Икенсенән, был хеҙмәт һәр кемгә аңлайышлы телдә яҙылған уҡыу әсбабы һымаҡ ҡабул ителә, яҙыусының ижадына ентекле, тәрән мәғәнәле анализ да бирелә. Был китап минең өсөн ҙур табыш булды.

Өçтәлемдә өс китап. Өсөһө лә миңә, мәктәп уҡытыусыларына бик ҙур методик мәғлүмәт бирә. Бөгөнгө уҡыу-уҡытыу проблемаларын бик тәрән аңлаған, илем, телем, халҡым тип янған кеше генә тормошҡа ауаздаш, мәғәнәле хеҙмәттәр яҙа алалыр тип уйлайым. Ә ул кеше шул тиклем ябай ҙа, ҙур ғалим да, үҙебеҙҙең Рафаэль ағайыбыҙ.

*З.И.Хисамова,*
*Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы*

## Яҙмышыбыҙ йәйғоро

Шаулап-гөрләп беҙҙең гимназияға студенттар килде. Башҡорт дәүләт университетынан һәм Башҡорт дәүләт педагогия университетынан улар. Йыл да беҙҙә практика үтәләр. Йәштәр килгәс, гимназиябыҙ ҙа йәшәреп киткәндәй булды. Практиканттарыбыҙ — барыһы ла ҡыҙҙар. Улар беҙҙең дәрестәребеҙгә инәләр, тәжрибә туплайҙар, уҡытыуҙың серҙәренә өйрәнәләр, үҙҙәре лә дәрестәр бирә, синыфтан тыш сараларҙа ҡатнаша. Уҡыусылар менән концерттар әҙерләйҙәр, күренекле яҙыусылар, ғалимдар менән осрашыуҙар үткәрәләр. Гимназиябыҙға йәшлек үҙе ҡайтҡандай булды.

Шундай осрашыуҙарҙың береһе минең дә, уҡыусыларҙың да күңелендә уйылып ҡалды. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле: сәхнәлә Таңсулпан Ғарипова менән Рафаэль Аҙнағолов. Зал уҡыусылар менән шығырым тулы. Был ике ҡунағыбыҙ миңә шул тиклем яҡын. Сәхнәлә мин гүйә яҙыусы менән ғалимды түгел, ә әҙәбиәт менән моңдо күрәм. Ысынлап та был ике сәнғәт төрө бер-береһенән айырым йәшәй алмайҙыр ул. Улар araһында айырылғыһыҙ, күҙ менән күреп булмаҫтай, тел менән әйтеп булмаҫтай, бәйләнеш бар һымаҡ, минеңсә.

Таңсулпан менән мин университетта бер курста, бер төркөмдә уҡыным. Студент йылдарында уның әҙәби ижад менән шөғөлләнеүен хәтерләмәйемсе. Йомоҡ булды тип тә әйтә алмайым, әммә кеше менән, түгелеп китеп, асылып һөйләшеп барғанын күргәнем булманы. Бына шул һабаҡташым күҙ менән ҡаш араһында танылған яҙыусыға, ҙур талант эйәһенә әйләнде лә китте. Ана шуға ғорурланам.

Биш китапты үҙ эсенә алған «Бөйрәкәй» роман-эпопеяһы Таңсулпандың ғына уңышы түгел, ул — башҡорт әҙәбиәтенең ғорурлығы, яҙмышыбыҙ йәйғоро. Эйе, тағы ла ҡабатлайым: «Бөйрәкәй» — халҡыбыҙҙың яҙмышының йәйғоро. Сағыштырыу, бәлки, урынһыҙҙыр ҙа. Дингеҙхан менән Барсынһылыу яҙмышы, Гөлбаныу (Күкһылыу) менән урыҫ Хашимдың әсе хәсрәте, Әптеләхәт менән Мәҙинәнең тетрәндергес ғүмер миҙгелдәре, бер ҡарындан тыуған Әйүп Ҡамалетдинов менән Башкирцеваның бер әсә, бер ата балалары икәнен аңлай алмаҫлыҡ дәрәжәгә еткерелеүҙәре, Ихсан-

бай менән Сәбиләнең аҡылға һыймаҫлыҡ тормош кисерештәре һ.б. һанай китһәң, милләтебеҙ иңенә төшкән ауыр яҙмыштар йәйғорҙоң ете төҫөнән дә артып китә икән.

Педагогия фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Рафаэль Аҙнағолов Таңсулпан Ғарипованың үҙенсәлекле ижады менән таныштырҙы. Ҡурсташым, хәҙер инде ҙур яҙыусы Таңсулпан Ғарипова үҙенең тормош һәм ижад юлы тураһында бик тә мәғәнәле итеп һөйләне, Уҡыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе.

Осрашыуҙың һуңғы өлөшөндә Рафаэль ағай, үҙәктәргә үткәреп ҡурайҙа уйнаны, һәр уйнаған көйөнөң исемен уҡыусыларҙан һорай ҙа, кем дөрөҫ әйтһә, шуға үҙенең китабын бүләк итә торҙо. Был осрашыу бик ваҡытлы булды, һәйбәт үтте тип мәҡәләмде томаларға ла ине. Әммә был саранан уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа, тәрбиәселәр ҙә рухи һабаҡ алды, рәхмәт әйттеләр, тағы ла килеүҙәрен һоранылар. Әйтһәм, әйтәйем инде. Был осрашыу күңелдә һағыш ҡалдырҙы.

Халҡым, илем, телем, әҙәбиәтем тип янған ике оло шәхесебеҙ менән осраштыҡ. Уларҙың үҙ яҙмыштары нисек? Шул хаҡта беҙ ни беләбеҙ? Әйтәйек, Таңсулпан — ҙур мәғәнәле романдар, повесть һәм тиҫтәләгән хикәйәләр авторы ғаиләһе менән ятаҡ тупһаһында көн итә, ә кемдәрҙер ҡоймаҡтай китабы менән яҙыусы булып йөрөй һәм яҙыусылар союзы аша алынған дүрт бүлмәле фатирҙа йәшәп ята. Бында ҡайҙа ғәҙеллек? Таңсулпан башҡа халыҡтыҡы булһа, әллә ҡасан халыҡ яҙыусыһы тигән исем дә алыр ине. Был хаҡта гәзиттә минән алда ла яҙып сыҡтылар. Хөрмәтле президентыбыҙға, хөкүмәт башлығыбыҙға, ул хәбәрҙе еткермәгәндәрҙер, күрәһең. Юғиһә Таңсулпан Ғариповаға ил етәкселәре тарафынан шәфҡәтлелек һәм мәрхәмәтлелек күрһәтелер ине.

Рафаэль Аҙнағолов ағайҙы ла республикала башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса берҙән-бер методист булараҡ яҡшы беләбеҙ. Уның методика буйынса тәрән мәғәнәле лекцияларын тыңлағаныбыҙ бар. Ә бына БИРО ла уның етәкселегендә методика кафедраһы асып булмаймы ни?

Оло шәхестәребеҙ менән осорашыу һорау артынан һорау тыуҙырҙы. Ҡешеләрҙе ҡәҙер итеү кеүек төшөнсәләр онотолоп бара һымаҡ.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Дәрес — балаларға һабаҡ биреү (Инеш һүҙ урынына)....................3
Тел сараларын синтаксик нигеҙҙә өйрәнеү....................5
Дәрес һәм уның этаптары....................14
Ҡабатлау дәресенең яҡынса өлгөһө....................21
Әҙәбиәт дәрестәре — бала шәхесен үҫтереүсе сара....................25
Дәрес төрҙәре....................35
Рухи тәрбиә биреүҙә инеш дәрестәр....................41
Тағы ла дәрес тураһында....................45
Дәрес тыуҙырған уйҙар....................50
Дәрескә анализ....................52
Башҡорт теле дәрестәрендә баланың милли аңын тәрбиәләү һәм үҫтереү алымдары....................59
Тел дәрестәрендә уҡыусыларҙы рухи яҡтан үҫтереү....................64
Һөйләү телмәрен үҫтереүҙә үҫтереүле анализ һәм үҫтереүле синтез....................70
Күркәм (художестволы) фекерләү һәләтен үҫтереү....................77
Методика фәненең тарихи үҫеше....................85
Ҡушымта....................92
*Ф.Ш.Ишбирҙина.* Беренсе дәрес....................93
Икенсе дәрес....................97
Өсөнсө дәрес....................100
Дүртенсе дәрес....................105
*М.Ф.Дәүләтшина.* Беренсе дәрес....................110
Икенсе дәрес....................114
Өсөнсө дәрес....................119
Дүртенсе дәрес....................123
*Т. М. Исламова.* Беренсе дәрес....................126
Икенсе дәрес....................130
*А.М.Абдуллина.* Беренсе дәрес ....................136
Икенсе дәрес....................141
Өсөнсө дәрес....................145
Хеҙмәттең авторы хаҡында фекерҙәр....................149

Учебное издание

АЗНАГУЛОВ Рафаил Гайнитдинович

# СОВРЕМЕННЫЙ УРОК

Учебное пособие
(на башкирском языке)

Подписано в печать
Формат 60х84/16. Усал. печ.л. 8,97. Уч.-изд.л. 9,36.
Тираж 50 экз. Изд. № 67. Заказ ***
Цена договорная.